# Ағиҙел

Өфө,
декабрь
2008

12 (1029)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Роберт БАЙЫМОВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары),*
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ,
Фәнил ҠОҘАҠАЕВ,
Ноғман МУСИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире),*
Әмир ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип),*
Тамара Ғәниева, Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррирҙәре),*
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир),*
Зилә Йәнбәкова, Рүзилә Саптарова *(корректорҙар),*
Рәйсә Камалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар),*
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе),*
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар).*

Журнал Башҡортостан Республика ының Матбуғат әм киң мәғлүмәт министрлығында
1992 йылдың 10 декабрендә теркәлде.
Таныҡлыҡ № 646.

---

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды әм биттәргә алынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.12. 2008. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитура ы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 5 570 экз. атыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0244.08.

---

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республика ы,
Өфө ҡала ы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакция ы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http:// www. jurnal-agidel. narod.ru.

---

Баҫма Матбуғат әм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль
агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

---

Башҡортостан Республика ының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятие ында баҫылды.
(450001, Башҡортостан Республика ы,
Өфө ҡала ы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в ГУП РБ «Уфимский полиграфкомбинат»
(450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, пр.Октября, 2).

---

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р /с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

©«Ағиҙел», 2008 (12, 1029)

# БЫЛ ҺАНДА:

ШИҒРИӘТ


**Гөлгизәр Фәйзи.** “Ҡыҙыҡ өсөн кәрәк минең кеүек берәү”. Шиғырҙар. ....................5
**Рәдиф Тимершин**. Фә емнамәләр. ....................11


СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР


**Йы ат Солтанов.** Коммунист. Роман-хроника. Аҙағы. ....................17


*Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевҡа 70 йәш*


**Мостай Кәрим.** Үҙе – баҫыу, үҙе – абансы. ....................90
**Ғайса Хөсәйенов.** Рауил Бикбаевтың тормош юлы. ....................94
**Земфира Та ирова.** Шағир ижадында эпистоляр форма. ....................103
Әҙип хаҡында ҡәләмдәштәре: **Виталий Смирнов, Венера Вәлиева, Рәми Ғарипов, Мостай Кәрим, Тимер Йосопов**, **Ирек Кинйәбулатов.** ....................108


*Сибай яҙыусылар ойошма ына – 15 йыл*


**Хәйҙәр Тапаҡов.** Ҡотло әм яҡты йортобоҙ. ....................113
**Ай ылыу Ғарифуллина, Сәрүәр Ғәләүетдинов, Инсур Артур, Рәмилә Ибра имова, Фирүзә Алсынбаева, Рузидә Үтәшева, Рәшиҙә Мансурова, Фәрүәз Әбдрафиҡ, Зө рә Фәйзуллина.** Шиғырҙар. ....................115
**Фәрит Әбүбәкеров.** Васыят. Ике хат. Парсалар. ....................125
**Әминә Яхина.** Ҡала кейәүе. Уймаҡ хикәйә. ....................127
**Таң ылыу Ғәйнуллина.** "Ете ырыу" беҙҙе көтә. ....................129
**Әлим Зарипов.** Үҙ аллы Башҡортостан ҡороу юлында теләктәштәр мәсьәлә е. ....................133


БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ


Аҫыл ғына заты башҡорттоң... *(Мөхәмәтша Буранғоловтың тыуыуына 120 йыл)* ....................138
**Ғиниәт Ҡунафин.** Уйсан да, моңсан да, даусан да ижад *(Ғиззетдин Иҫәнбирҙиндың тыуыуына 120 йыл)* ....................140


*2008 – Ғаиләгә социаль ярҙам йылы*


**Фидус Ямалетдинов.** Ныҡлы ғаилә – йәмғиәттең тотороҡло үҫеше нигеҙе. ....................145


ПУБЛИЦИСТИКА


Интеллигенция әм интеллигентлылыҡ: *өйләшеүҙе дауам итәбеҙ.*
**Тамара Ғәниева.** Уйсандарҙың дүрт юлы. ....................148
**Рәшит Шәкүр.** Ғилем теүәллекте ярата йәки Төҙәтергә ваҡыт түгелме? .....154
**Йәүҙәт Әхтәмов**. Алпауыттар ҡалдырған мираҫ. ....................163


АУЫЛДАРЫБЫҘ ТАРИХЫ


**Әнғәм Мостафин**. Иҫке Ауыл – Илекәй. ....................166
**Наил Хажиев.** Беҙ кемдәр? ....................168


СӘНҒӘТ


Театр сәнғәтенең арыҫланы *(Арыҫлан Мөбәрәковтың тыуыуына 100 йыл).* .171


БЕҘ ЙӘШӘГӘН ҠАЛА: СИБАЙ


**Мәүлиҙә Яҡупова.** Уны шундай итеп хәтереңдә ҡалдыр. ....................179


“АҒИҘЕЛ”ГӘ ХАТТАР КИЛӘ

"АҒИҘЕЛ" ЖУРНАЛЫНЫҢ 2008 ЙЫЛҒЫ ЙӨКМӘТКЕ Е

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:


ПОЭЗИЯ

**Гульгизар Файзи**, **Р.Тимершин** *(стихи)*.

ПРОЗА

**З. Султанов**. Коммунист *(роман)*. Окончание.

*Народному поэту Башкортостана Равилю Бикбаеву — 70 лет*

Воспоминания, посвящения и исследования **Мустая Карима, Гайсы Хусаинова, Земфиры Тагировой, Виталия Смирнова, Венеры Валиевой, Рами Гарипова, Тимера Юсупова, Ирека Киньябулатова.**

*Сибайской писательской организации — 15 лет*

**Х.Тапаков.** Наш светлый дом; **А.Гарифуллина, С.Галяутдинов**, **Инсур Артур**, **Р.Ибрагимова, Ф.Алсынбаева, Р.Утяшева, Р.Мансурова, Ф.Абдрафик, З.Файзуллина** – *стихи*; **Ф.Абубакиров, А.Яхина** – *миниатюрные расказы*; **Т.Гайнуллина, А.Зарипов** – *публицистика.*

НАШ КАЛЕНДАРЬ

Славный сын нации *(120 лет со дня рождения М. Бурангулова).*
**Г.Кунафин.** И печальное, и бунтарное творчество *(120 лет со дня рождения Г. Исянбирдина).*

*2008 – Год социальной поддержки семьи*

**Ф. Ямалетдинов.** Крепкая семья – основа устойчивого развития общества.

ПУБЛИЦИСТИКА

Интеллигенция и интеллигентность: продолжаем полемику.
**Т. Ганиева**. Четыре пути смышленых.
**Рашит Шакур**. Наука любит четкость или не пора ли исправлять ошибки?
**Я.Ахтямов**. Помещики оставили в наследство.

ИСТОРИЯ НАШИХ ДЕРЕВЕНЬ

**А.Мустафин.** Иске Ауыл – Илекай.
**Н.Хажиев.** Мы кто?

ИСКУССТВО

Патриарх башкирской сцены *(100 лет со дня рождения А. Мубарякова).*

ГОРОД, ГДЕ МЫ ЖИВЕМ: СИБАЙ

**М.Якупова.** Пусть останется в памяти таким.

ПИСЬМА В "АГИДЕЛЬ"

СОДЕРЖАНИЕ ЖУРНАЛА "АГИДЕЛЬ" ЗА 2008 ГОД
ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА


---


**Телефондар:**
Баш мөхәррир – 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары әм яуаплы сәркәтип – 274-89-65
Шиғриәт әм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре –277-87-73
Проза бүлеге – 277-87-50
Бухгалтер – 277-78-90 (факс)



● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡульяҙмалар рецензияланмай әм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күр әтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етеш еҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



Гөлгизәр
ФӘЙЗИ

# “ҠЫҘЫҠ ӨСӨН КӘРӘК МИНЕҢ КЕҮЕК БЕРӘҮ”

## *Сик еҙлек*

*Сик еҙ, тиҙәр, ғаләм…*
*Сик еҙлектең*
*Ҡайҙа сиге —*
*Ҡабул итеү ҡыйын.*
*Үтеп булмаҫ ҡара таш-пәрҙәгә*
*Бәрелә лә уйым*
*Кире ҡайта…*
*Сик еҙлектән ары*
*Тағы сик еҙлекме?*
*Унан ары?!*
*Бәндә үҙе сик еҙ был ғаләмдә*
*Сабый ғына бары…*
*Бәндә — тоташ ғаләм…*
*Был тәңгәлдә*
*Тағы көс өҙ уйым:*
*Уны аңлап етеп булмай,*
*Ҡабул итеү ҡыйын.*

## *Хатамы был?*

*Тешкә теш күр әтмә…*
*Әҡрәбәмдең*
*Оло хата ымы,*
*Аҡылымы бында?*

*Гөлгизәр Фәйзи (Гөлшат Әхмәтҡужина) Әбйәлил районының Юлдаш ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлай, гәзит-журналдар редакцияларында эшләй. Шағирә, драматург.*
*Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағза ы.*

*Таш бәргәндең ҡулына*
*Аш тотторам...*
*Ҡылыс аман ҡында...*

*Ә ситтәрҙең ҡылысы*
*Йөрәгемде*
*Мең киҫәккә телә...*
*Яҙмыш әйтә кеүек:*
*“Ғәйепте ин*
*Тик үҙеңдән эҙлә...*
*Боҙоҡлоҡто игелек*
*Ең ен өсөн*
*Кәрәк йоҙроҡ төйнәү...”*
*Ә шулай ҙа*
*Фани донъяларҙа*
*Ҡыҙыҡ өсөн кәрәк*
*Минең кеүек берәү.*

## ин дә киттең...

*Торған айын йышыраҡ*
*ыҙыла телефондар...*
*Адрестар ҙа...*
*Дәфтәремдә шулай*
*ирәгәйә бара*
*Исем-шәриф.*
*Тик буш битте генә*
*аҡлай*
*Бәғзе хәреф.*

*Күҙ йәшенә быуыла-быуыла*
*Тағы астым бына*
*Дәфтәр битен...*
*ыҙа алмай торҙом инең исемеңде...*
*Инде донъя — ин еҙ.*
*Ҡай ылай ҙа ситен!*

*Самими бер йән эйә е инең,*
*Эй, дуҫҡайым!*
*Бәпембәләй якты сырайыңды*
*Онотмайым;*
*Үткәндәрҙе инде яңғыҙ иҫләп,*
*Болоҡ ойом.*
*Йылдар уҙған айын*
*алҡынаая айым,*
*Ҡояш үрәнәйә...*
*Бына мин дә сығып сүгәләнем*
*Ҡапка алдындағы бүрәнәгә...*

## Йондоҙ атылды

*Күҙ асып, күҙ йомған ара —*
*Әҙәм ғүмере.*
*Бысҡый-төтәй бөтә янып,*
*Ҡала күмере.*
*Күмер ҡала…*
*Исәндәрҙең*
*Йәнен ҡарайтып.*
*Китте кеше…*
*Өлгөрмәне*
*өйөп-яратып.*
*Осто йәне, баҡыйлыҡтың*
*Төмен татырға.*
*Күктә телеп йәнә лә бер*
*Йондоҙ атыла…*

## Бар инде, бар

*Был донъяның бер тапҡыр ҙа*
*Яратмаған әҙәме бар.*
*өйгәнде ң дә —*
*хәләл — хаҡы,*
*Гона алған хәрәме бар.*
*Йәне туңған бәндәләрҙең*
*Эргә ендә тороу алҡын.*
*Күңелемә ғүмер баҡый*
*өйөү тиеп, утта янып,*
*Яңылышҡан әҙәм яҡын.*
*Изге уның —*
*мөхәббәттән*
*Яңылышы, яҙығы ла.*
*Күктә йәне,*
*батып ҡалмай*
*Моң оҙлоктоң аҙлығына.*

## Була икән…

“Мин үҙемә үҙем кәрәк түгел…”
Мостай Кәрим.

*Быға са тик аяҙ торған көндәр*
*Баҫып килә — ниңә болоҡ оу?*
*Мин үҙемә үҙем кәрәк түгел,*
*Ни ғазапҡа килеп юлыҡтым…*
*Шыҡ ыҙ төндәр – йәнем ыҡтауынан*
*Сик еҙлеккә шылған бер йылан.*
*Мин үҙемә үҙем кәрәк түгел —*
*Тик иламай ғына тыйылам.*
*Ләкин шул саҡ, йәшен ялтлағандай,*
*Күңелемдә бер нур ярала:*
*Ғәзиз сабыйҙарым мин еҙ нишләр?!*
*Мин йәшәргә тейеш донъяла!*

## *ин инеңме?..*

*Мин инемме ине өйгән?*
*ин инеңме ҡушағам?*
*Бынауы ла иш еҙ айым*
*Ҡалай миңә оҡшаған.*

*Мин инемме...*
*ин инеңме...*
*Онотолор, тинеңме?*
*ин отҡанда*
*мин — ут йотор,*
*Мин отолор, тинеңме?*

*Яҙмыш алды кәрт уйынын —*
*Икебеҙ ҙә отолдоҡ.*
*Уттарға ҡалып, көл булдыҡ,*
*өйөүҙән дә ҡотолдоҡ.*

*ин инеңме мине өйгән,*
*ин инеңме ҡушағам?*
*Айҙан төшкән бынау шәүлә*
*Ҡалай иңә оҡшаған...*

## *Юҡ ың инде*

*Яҙҙар быйыл үтә алҡын килде.*
*Умырзая сәскә атманы.*
*Ҡыҫыр яландарҙа бер яңғыҙым —*
*Эҙҙәреңде инең тапманым.*

*А , йәйҙәре...*
*Әллә нисек булды,*
*Ҡыуарып та көйгән ҡыр-болон.*
*Мин Саҡ булып таңдар аттырғанда,*
*ин саҡырҙың мине Суҡ булып.*

*Көҙҙәр...*
*Көҙҙәр!*
*Алтын биҙәгенән*
*Мәхрүм итте быйыл донъяны.*
*Офоғомда инде йәйғор түгел,*
*Ялған ялағайҙар уйнаны.*

*Ҡыштар килде...*
*Аҡ ҡарҙары ҡайҙа?*
*Ҡорғаҡ ыған ерем ярыла.*
*ин эргәмдә юҡ ың...*
*Яҙҙың — яҙса,*
*Ҡыштың ҡышса мәлен*
*ағынам!*

## Юрған ғынаң шылып төш ә…

*Бөгөн төндә, йәнде өшөттөрөп,*
*Әй, олоно ғинуар бураны.*
*Кем йылыта икән ҡуйыныңды,*
*Таштай баҫып килгән яңғыҙлыҡтан*
*Илам ырап шуны ораным.*

*Юрған ғынаң шылып төш ә, тимен,*
*Кемдең ҡулы ҡымтыр арҡаңды?*
*Керпегемә тамсы йоҡо ҡунмай,*
*Яңғыҙлыҡтың әр минутын анап,*
*Ҡарап яттым таңдар атҡанды.*

*Икәү саҡта буран олоуы ла*
*Моңло бер йыр ине күңелгә.*
*Нисек кенә ҡыш сығырмын икән,*
*Яңғыҙлыҡтан инде тамам арып,*
*Бөтөнләйгә инән төңөл әм?..*

## Емерек күпер

*ин киҙәнеп китеп, өҙә уктың,*
*Шартлап ынды инде күперҙәр.*
*Үткән-сүткән, емеректе күреп,*
*Ниндәй яу был, тиеп китерҙәр.*

*Ике ярҙа — ике тәкәббер йән –*
*Тороп ҡалдыҡ яңғыҙ тилмереп.*
*Йүгереп кенә үтер инем иңә —*
*Урталағы күпер емерек.*

## Хәтерләнем әле

*Керпегемә йоҡо ҡунмай,*
*Таң аттырҙым бөгөн ин еҙ.*
*Хоҙай әҙәм бала ына*
*Бәхеттәрен бирмәй тигеҙ.*
*Инде ырыҫ ҡунды, тиеп,*
*Күккә тейгәс түбәләрем,*
*Яҙмыш мине тотоп алып,*
*ыу эске еҙ түпәләне.*

*Ҡасып китер әмәлдәре*
*Юҡ икән дә был яҙмыштан.*
*ин еҙ…*
*тағы…*
*кисер, кисер –*
*Хәтерләнем…*
*яңылыштан…*

## Моң оу, тимә

Моң оу, тимә күҙҙә...
Ул моң оулыҡ –
Алтын нурға тулған өйөү бит ул.
Ҡәҙерҙәрен беҙ белмәгән бәхет —
Имен-аман ғына йөрөү бит ул.

Яманы юҡ Хоҙай биргән көндөң,
Үтер бер мәл көҙгө йонсоуҙар ҙа.
Йылы ҡараш атыр кешең бул ын,
Йән өйгәнең бул ын йонсоу барҙа...

## ине күреү өсөн...

Төндәремә мин бит ашығамын
ине төштәремдә күреү өсөн.
Ялҡыныңда тағы бер ҡат янып,
Сәстәреңә сәсем үреү өсөн.

Таңдар ине минән алып китә,
Йәндәремә әрнеү алып китә;
Бер йомарлам булыр йөрәгемде
Ҡап уртаға ҡабат ярып китә.

## Күтәрмә күктәргә

Аллам, ти ең миңә...
Әйтмә, ярамай.
Мин Алла ла, фәрештә лә түгел,
Йыуылмаған ҡулдар тарафынан
Иҙелеп бөткән күңел.

Ауыр итектәрҙең тапауынан
Ғәрипләнгән тәнем.
Ғәжәп итеп ҡуям: нисек әле
үрелмәгән йәнем?
Әйтмә миңә, фәрештәм ин, тиеп,
Ҡанаттарым ынған.
Яраларҙы күпме яла аң да,
Мин элекке булмам.
Кешем минең!
Ғәзиз кеше генәм,
Күккә, юҡ, күтәрмә,
Ҡатының итеп кенә
Ярат мине,
Ҡыҫ та күкрәгеңә...



**Рәдиф**
**ТИМЕРШИН**

**ФӘ ЕМНАМӘЛӘР**

## Ике көс

*Аҡыл көсө – аҡыл хеҙмәтенең*
*Ауырлығын йөкләп барыуҙа,*
*Намыҫ көсө – насар ғәмәлдәрҙән*
*Үҙ-үҙеңде сикләй алыуҙа.*

## Шәм

*Бөткәнсе яна  әм –  үнә.*
*Шәм – яҡтылыҡ биреп үлә!*
*Мин – шундаймы?*
*ин – шундаймы?*
*Ул – шундаймы?*
*Әйт әле, йә!*

## Хеҙмәт

*Тормош – иң ҡәҙерле нәмә,*
*Тормош нигеҙе – хеҙмәт.*
*Хеҙмәт  үн ә, тормош  үнә,*
*үнеү – хеҙмәттән биҙмәк.*

## Ҡанун

*ейне әйткән: “Ҡанундарға буй он,*
*Ҡанун –  ине яҡлай торған көс,*
*Ҡанун – башҡаларҙан ғына түгел,*
*Үҙ-үҙеңдән аҡлай торған көс”.*

---

*Рәдиф Тимершин 1947 йылда Яңауыл районының Мәсәғүт ауылында тыуған. БДУ-ла уҡый, армияла хеҙмәт итә. Оҙаҡ йылдар республика матбуғатында эшләй. Проза, шиғырҙар яҙа. Башҡорт, рус  әм татар телдәрендә сыҡҡан тиҫтәнән ашыу китап авторы. Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.*

## Мәсләк

Аҡма ағым ыңғайына,
 индә – аҡыл, хөр күңел.
Кешенең бар үҙ мәсләге,
Кеше – юнысҡы түгел!

## Ҡараҡ түгел

Аҡыллы фекерҙәр урлап,
Файҙаланыу тормошта –
Ҡараҡлыҡ түгел. Онотма
Алғаныңды бурысҡа.

## Ҡатын-ҡыҙҙарға

Нурландыр аҡ  еҙҙең күңел күген,
Балҡып китә үҙебеҙҙең күңел.
 еҙҙең менән йәшәү еңел түгел,
Әммә  еҙ еҙ йәшәү мөмкин түгел!

## Өгөт-нәсихәт биреүсегә

Үпкәләмә, үҙеңә лә
Бер  әйбәт кәңәш бир әк:
Изгелеккә өндәмә  ин,
Изгелек эшләп күр әт!

## Иҫем китмәй

Ҡай ы ваҡыт мине таплайҙар,
Ҡай ы ваҡыт мине тапайҙар…
 ис бер иҫем китмәй, ниңә ти әң,
Юбилейҙа барыбер маҡтайҙар!

## Кәңәш

 орауың аҡыллы бул ын,
Тыңла иғтибар менән,
Тыныс яуап бир, әйтерҙәй
 үҙ бул а ғына  өйлән!

## Кемгә нимә

Бөйөк – замандан алдараҡ бара,
Аҡыллы – атлай  әр саҡ йәнәшә,
Мут –  әр саҡ файҙа күрергә теләй,
Ахмаҡтар – юлға арҡыры төшә.

## Ниңә?

Мин бик аҡыллымын, ти ең,
Миндәй була меңгә бер.
Улай булғас, ниңә, дуҫҡай,
 ин түгел ең миллионер?

## Таяныс

*Ирҙәргә – ер таяныс,*
*Илдәргә – ир таяныс,*
*Таяныр ирҙәр булма а,*
*Ил яҙмышы – аяныс!*

## Айырмалыҡ

*Берҙәй үк ләззәт кисерә*
*Яуыз  әм изге кеше,*
*Тик – ер менән күк ара ы*
*Уларҙың ҡылған эше.*

## Ҡәнәғәтлек ҡорбаны

*Кем  оҡлана үҙ-үҙенә,*
*Кем үҙенән ҡәнәғәт –*
*Артабан унан йүнле эш*
*Көтмәгеҙ  еҙ, йәмәғәт!*

## Аҡыллы  әм батыр

*Аҡыллы – бәлә килерен*
*Киҫәтер, алдан белер,*
*Батыр – илгә бәлә килгәс,*
*Ауырлыктарҙы еңер.*

## Бөйөк

*Туктау ыҙ эшләй – шауламай,*
*Саң  уҡмай, башын эйеп,*
*Бөйөклөккә дәғүә итмәй…*
*Ул шуның менән бөйөк!*

## Бел

*Юҡка көсәнмәйем, ти ең,*
*аҡлайым таҙалыҡты…*
*Бел: кереште тартмайынса,*
*Осороп булмай уҡты!*

## Эйәр

*Аҡыллы бул аң да,  инән*
*Аҡыллыраҡ табылыр.*
*Эйәр аҡыллы, зирәккә,*
*әр ваҡыт юлың уңыр.*

## Ҡорос бул

*Эш тигәндә тәүәккәл бул,*
*Уйлағанда тыныс бул,*
*Юл ҡуй аң, хуш күңелдән ҡуй,*
*Ҡаршы тор аң, ҡорос бул!*

## Айырыл аң…

*Йәмғиәттән айырыл аң,*
*Ырыҫ ҡуна алмаҫтыр,*
*ин – гүйә, ерҙән тамыры*
*урылған бер ағастыр.*

## Сәбәп

*Вольтер әйткән: “Илде аҡса*
*Юҡлыҡ көс өҙ итмәй ул,*
*Ҡаҡшата илде*
*Таланттар*
*әм шәхестәр етмәүе”.*

## Тәжрибә әм белем

*Тәжрибәң бар, белемең юҡ –*
*Билдә еҙ юлдан барыу,*
*Белемең бар, тәжрибәң юҡ –*
*Уңыш ыҙлыҡҡа тарыу.*

*Әйтергә кәрәк: бында*
*Хәүефле ике юл да.*

## Иң башта

*Бул ын, Гераклдай көслө бул ын,*
*Донъя шаҡ ҡатырлыҡ эше бул ын,*
*Хатта Прометейҙар ише бул ын…*
*Тик иң башта кеше – Кеше бул ын!*

## Юл бирешмә әк…

*ин миңә юл бирмәнең,*
*Мин иңә ҡул бирмәнем…*
*Юл биреш әк, ҡул биреш әк,*
*Үтә инек еңелерәк*
*Ауыр тормош үрҙәрен.*

## Сөнки

*Тормош юлынан барабыҙ*
*Бер тәгәрәп, бер ҡолап,*
*Аҡ аҡалдарҙың үҙенә*
*алмайбыҙ сөнки ҡолаҡ.*

## Бер аҙым

*Ҡытайҙар әйтә: “Ҙур ағас –*
*Тәүҙә үҫенте булған,*
*Меңәр саҡрымлыҡ оҙон юл*
*Башлана тәү аҙымдан”.*

## Ҡыҫыр иҫәп

*Был дәүләттең гелән мине*
*Байытырға иҫәбе…*
*Иҫәбе ҙур, тик был иҫәп*
*Ҡалынайтмай кеҫәне.*

## Яҙ

*Яҙ бер генә килә йылға.*
*иңә был бик аҙ бул а ла,*
*Борсолма: яҙ торор мәңге,*
*Күңелеңдә йәшәү ғәме,*
*Мөхәббәт әм наҙ бул а.*

## Бөйөклөк

*Ил халҡының күп булыуы –*
*Бөйөк тигән үҙ түгел.*
*Бөйөклөк ул –аҡыллылыҡ,*
*Әхлаҡлылыҡ, киң күңел.*

## Эҙләмәй ең

*Башҡаларҙың кәмселеген*
*Тиҙ күрә ең иллә, әй, ин,*
*Үҙеңдеке ис күренмәй –*
*Сөнки уны эҙләмәй ең!*

## Изгелек орлоғо

*Ҡола ялан ергә бер саҡ*
*Тик бер бөртөк орлоҡ төштө.*
*Йылдар үтте. Был төбәктә*
*Шаулап торған урман үҫте!*

*Ел килтерҙе был орлоҡто.*
*Елдән күптән елдәр иҫте.*
*…Миңә сит-ят бер кешенең*
*Изгелеге иҫкә төштө.*

## Өйрәнәм

*Өндәшмәҫкә лығырҙыктан өйрәнәм,*
*Ҡыйыулыҡка ҡурҡаҡтарҙан өйрәнәм,*
*Изгелеккә мин яуыздан өйрәнәм…*
*Нисек итеп?*
*Мин уларҙан ерәнәм!*

## Еңеү сере

*арыҡтар ғәскәрен бер саҡ*
*Юлбарыҫ етәкләгән*
*әм еңеүгә килтергән.*
*Ә юлбарыҫтар ғәскәрен*

*Бер арыҡ етәкләгән*
*әм тиҙ тар-мар ителгән!*

*Асыҡлап ҡуям шуны:*
*Наполеон әйткән быны.*

## Яҡынайыу сәбәбе

*Быға тиклем аңлашалмай*
*Тамам ғажиз булдыҡ беҙ;*
*Эләккән инек бәләгә,*
*Яҡынайҙыҡ шундуҡ беҙ!*

## Депутатҡа

*Бар донъяға бәхет-шатлыҡ теләмә,*
*Тәмле-татлы үҙҙәр теҙеп өйләмә,*
*Муллыҡ, байлыҡ вәғәҙә итеп талсыҡма,*
*Хәйер бир ин берәй ярлы ҡарсыҡҡа!*

## андуғас менән ишәк

*Ишәк:*
*–Йөк тә ташый алмай ың бит,*
*Файҙаң иҙелмәй бер ҙә!*
*андуғас:*
*– Йөк ташырмын, тик шартым бар:*
*ин беруҡ айрай кҮрмә!*

## Сәйер ағыныу

*Бер-беребеҙҙән беҙ алыҫта саҡта*
*Хыялландым бергә булырға.*
*…Беҙ бергәбеҙ күптән.*
*Айырым саҡты*
*Үлеп ағынам! Ниҙәр ҡылырға?*

## Ашыҡма

*Ағасты өҙә сап аң, маҡтама:*
*“Ҡылысым, ай- ай, ниндәй ин үткер!”*
*Ашыҡма алдан ба а бирергә –*
*Ул ағас, бәлки, күптән серектер?*

**Йы ат**
**СОЛТАНОВ**

# КОММУНИСТ*

РОМАН-ХРОНИКА

3

Каруан арайлы ҡалабыҙҙа Әхмәт бай ҡунаҡхана ының аҫҡы ҡаттағы арзан бүлмә енә урынлашып, саҡ ҡына баш-күҙ алғас, Сәлимйән тимер юл мастерской-ҙарында эшселәр ара ында юллап тапты партия ының урындағы етәксе е Александр Алексеевич Коростелев иптәште. Үҙенән күп бул а ике-өс йәшкә өлкәнерәк, ләкин 1905 йылдан уҡ партия ағза ы, 1905 – 1907 йылдарҙа амарала-ғы ҡораллы көрәштә әүҙем ҡатнашҡан; ҡуҙғалыш баҫтырылғандан уң батша жандармерия ынан оҙаҡ ҡына боҫоп йөрөп, 1910 йылда ялған исем менән ошонда килеп, эшселәр ара ында тәүҙә – йәшерен рәүештә, ә Февраль революция ынан уң Ульянов-Ленин иптәш менән Троцкий иптәш ут сағып дөрләткән пролетариат революция ы хаҡына асыҡтан-асыҡ сәйәси эш алып барыусы ине ул. Теге саҡта Смольныйҙа Троцкий иптәш үҙенә атап яҙып биргән хитапнамәгә күҙ йөрөткәс, мастерской ыҫына ҡатҡан ҡырыҫ йөҙө яҡтыра төшөп, “окоп большевигы” менән ихлас асылып өйләште.

– Самаранан уҡ башҡорттарҙы яҡшы беләм; мәҫәлән, 1905 йылда уҡ минең менән бергә партия билеттары алған ағалы-энеле Ғәбйәлиловтар[45] бар ине – бөгөн башҡорт массаларын ағыулаған милләтселек сиренән азат ысын пролетариаттар ине...

“Милләтселек” тигәне ағайтты Сәлимйәнде:

– “Сир” тигәндән нимәне күҙ уңында тота ығыҙ? – Фирҡәләшенең күҙенә тура төбәлде.

– Кешене синфи сығышына ҡарап түгел, ә милли сығышы буйынса туплаусы – пролетариат революция ына ҙур зыян килтереүсе буржуаз идеяны. Каруан арайға оялаған башҡорт милләтселәре күтәреп сыҡты уны.

– Белеүемсә, Каруан арайҙағы Шура – еҙ үҙегеҙ етәкләгән Ырымбур Советы ымаҡ уҡ, халыҡ айлаған Совет, ни бары милли колоритлы Башҡорт Советы ла-а. Әллә “шура” үҙен аңламай ығыҙмы, шул уҡ “совет” бит ул.

– Советын совет та, ләкин ярамаған Совет. Башҡорттарға *ерле* автономия

*Аҙағы. Башы 11-се анда.*

даулап боғаҙ яралар. Нацмендарға *мәҙәни* автономия биреү тура ында үҙ алып барырға мөмкин, ләкин *ерле* автономияға ҡырҡа ҡаршыбыҙ, сөнки ул бөйөк Рәсәйҙе бүлгесләүгә, тарҡатыуға килтерәсәк. Бөтә енән элек *синфи* принцип өҫтөнлөк итергә тейеш, ә *милли* хис – икенсе йәки иң уңғы урында. Үҙен коммунист анаған әр кем, милли сығышын ситкә этәреп, синфи принциптарға таянып эшләргә бурыслы, белә егеҙҙер. "Бөтә хакимиәт – Советтарға!" тигән бөгөнгө төп лозунгыбыҙ йөкмәтке ен дә тап ана шулай күрәбеҙ.

– Килешәм. Иң элек бөтә Россияла, ә айырым алғанда Башҡортостанда, Советтарҙың хакимиәтен урынлаштырырға, ә ҡалғаны шунан уң хәл ителәсәк. әм, мин уйлайым, Россияның барлыҡ милләттәре өсөн дә ыңғай хәл ителәсәк. Бында мин партиябыҙҙың быйылғы етенсе Бөтә Россия конференция ының "Милли мәсьәлә буйынса" резолюция ын күҙ уңында тотам. – Шинеленең эске кеҫә енән коленкор тышлы, ус яҫы ындай дәфтәр тартып сығарҙы. – Белә егеҙ, аҡҡа ҡара менән хатта бына нимә яҙылған унда: "За всеми нациями, входящими в состав России, должно быть признано право на свободное отделение и на образование смостоятельного государства"...

Ырымбур большевигының сырайы сытырайҙы:

– Документтың бер пунктын ғына башҡа өлөштәренән йолоп алмағыҙ. Белеүегеҙсә, артабанырaҡ ифрат дөрөҫ юрау бар: "Вопрос о праве наций на свободное отделение непозволительно смешивать с вопросом о целесообразности отделения той или другой нации *в тот или иной момент"*. – уңғы үҙҙәр Коростелев тарафынан айырым баҫым аҫтына ҡуйып әйтелде. – Тап беҙҙең төбәк әм шарттарға тап килә был! В данный момент никому не позволим играть с огнем!

Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: милли яҡтан бер бөтөн, гранит ымаҡ ныҡ-монолит партиябыҙ етәкселегендәге Советтар төрлө милли өйҙәргә бүленә аламы? Каруан арайҙағы өр өп бөткән буржуаз милләтселәр берәгәй әм бүленмәҫ Россияны милли йорттарға бүлгесләп тарҡатырға йыйына!

– Берәгәй әм бүленмәҫ Россия тигәнегеҙҙән мәрхүм батша самодержавие ының төп лозунгы ын хәтерләттегеҙ әле, ғәфү итегеҙ... еҙ әйткән ул милләтселәр, минең яҡшы белеүемсә, ватаныбыҙ Рәсәйҙән айырылып сығырға йәки уны бүлгесләргә ис тә йыйынмай, ә күп милләтле Россияла хәленән килгән әр милләттең ошо Россия эсендә үк үҙ өйөн, үҙ ғаилә ен ҡороп йәшәргә хаҡы барлығын даулай. әр хәлдә, уларҙың сәйәси документтарында шунан башҡаны күрмәнем.

Коростелев, күҙҙәрен уҫал ҡыҫып, ҡаты ҡарашын тимерлектәге андал аҫтынан сирғыған ярсыҡтай ҡаҙаны:

– Тимәк, еҙ ҙә, Шәриф Манатов кеүек, шулар арба ына ултырып йырлай ығыҙ? Ниңә тәғәйен *ерле* автономия? Татарҙар юллаған *мәҙәни* автономия етмәйме?!

– Башҡорт вә татар аңы, тәбиғәте берҙәй түгел шул, Александр Алексеевич. Башҡорт өсөн ер – уның милли өйө, халҡының ғаилә усағы. Башҡорт бит ул кеше өйөнә йәки дөйөм баракка инеп ыйына алмай. Ул тәғәйен үҙенең милли өйөндә, башҡаларҙың милли өйҙәре менән берлектә бер ауыл, йәғни буласаҡ Россия Федерация ының үҙенә күрә үҙ аллы бер штаты булып йәшәргә ниәтләнә. Ҡабатлап әйтәм, бөйөк Россия ҡанаты аҫтында! Беҙгә хәҙер мәсьәләне ҡырҡыулаштырырға ярамай. Халыҡ үҙе юғары сөйгән автономия идея ын беҙ, коммунистар, иң элек үҙебеҙ күтәреп алмайынса, башҡаларға ирек ҡуйып, ауыҙ асып ҡалғанбыҙ икән – кисекмәҫтән хатаны төҙәтергә, әлеге тарихи факт менән иҫәпләшеп, уйлап эш итергә кәрәк. Минең белеүемсә, уларҙың Советтары асылда Россия Советтары өлгө өнә эйәреп бара, тимәк, беҙҙең өсөн сәйәси ҡапҡа асыҡ – шунда үтеп инеп, коммунистик идеяларыбыҙ менән халыҡ аңын яулап алып, буржуазия

эйәрләгән Советтарҙы коммунистик Советтар я а аҡ, теңкәгеҙгә тейгән буржуаз автономия ла ысын Совет автономия ына әйләнәсәк. Манатовтың Каруан арайға төпләнеүен зыян итеп түгел, файҙа итеп ҡарайыҡ, уңынан үҙегеҙ күрер егеҙ.

— Ҡарап ҡарарбыҙ... Дөрөҫөн әйткәндә, Лев Давидовичтың сәләме булма а, е-ҙҙең менән өйләшеп тә тормаҫ инем...

— Аңлағыҙ мине, Александр Алексеевич, бер үк йөктө тартабыҙ!

— еҙ ҙә мине аңлағыҙ. Беҙгә, коммунистарға, ис шик еҙ, милли амбициялларҙы ситкә ҡуйып тороп, берҙәм тотоноу мотлаҡ. Ырымбурҙа хәҙер ағыҙаҡ оя ы, төрлө партиялар мыжғый: кадеттар, монархистар, уң әм ул эсерҙар, меньшевиктар, центристар, максималистар әм, әм башҡа сволочтар... әм шуларға тамырланып, ағыулы бәшмәктәрҙәй шытып сыҡҡан буржуаз ойошмалар: татарҙарҙың Милли шура ы әм шуға бәйле Милли хәрби комитеты; казак Хәрби идаралығы; мосолман казактарының Үҙәк хәрби комитеты; Ҡала граждан комитеты. Үҙ ағыуы менән шуларҙы утландырып йәшәп ята, әлбиттә, Керенский буржуаз Ваҡытлы хөкүмәтенең комиссар Архангельский башлығындағы Губерна земская управа ы. Был ойошмаларҙың көллө ө лә буржуазия — капиталистар, алпауыттар әм барлыҡ эксплуататор синыфтар яҡлы, бөтә е лә пролетариат мәнфәғәттәренә ҡаршы; бары ы тиң “Тамам еңгәнгәсә!” лозунгы ы аҫтында империалистик уғышты дауам иттереү тарафдарҙары. Әммә беҙҙең өсөн потенциаль ҡурҡыныс тыуҙырыусы ы — баяғыларҙан айырылыбыраҡ торған, үҙҙәрен ике миллионлыҡ башҡорт халҡының берҙән-бер ҡурсаусылары анаған әм шул йә әттән аң ыҙ ялпы ара ында абруй ҡаҙанып өлгөргән буржуаз Башҡорт Мәркәз Шура ы. Мин еҙҙең менән Лев Давидовичтың фатиха ын алып килгән коммунист булараҡ ышанып өйләшәм: беҙ ул автономистарға юл ҡуймаҫҡа, Россия нацмендары өсөн улар күр әткән зарарлы өлгөнө яралғы ында уҡ юҡ итергә тейеш. Был маҡсатҡа өлгәшеү өсөн төбәктә ыңғай шарттар тыуып тора.

— Мәҫәлән?

— Комиссар Архангельский ҙа, татарҙарҙың баяғы ойошмалары ла, улай ғына ла түгел, башҡорт монархистары ла, бер төптән тип әйтерлек, Башҡорт Мәркәз Шура ына, уларҙың тупраҡлы милли автономия иғлан итәсәктәренә ҡырҡа ҡаршы сыҡтылар; улар ҙа был идеяны бишегендә үк быуып ташлау яғында. Быны беҙ иҫәпкә алып, үҙ файҙабыҙға хеҙмәт иттертергә тейеш. Тик шуны ы үкенес: ошо яуаплы моментта партиябыҙҙа башҡорттар исеменән оранларлыҡ башҡорт кадрҙары етешмәй ( еҙ ҡайтып шәп иттегеҙ әле!). Әммә беҙҙең идеялар, аҙлап бул а ла, күҙгә күренеп тарала, яңы шытымдар бирә.

— Кемдәр бар таянырлыҡ? Башҡорттарҙан?

— Партияға алырға тип Мартынов иптәш әҙерләп өлгөрткән ышаныслы бер егет — Бәхтегәрәй Шәфиев бар, ошондағы фельдшер-акушер мәктәбе уҡыусы ы, урыҫса грамоталы. Йәнә бере ен мин үҙем яҡшы беләм — “Хөсәйениә” мәҙрәсәенең урыҫ теле уҡытыусы ы, башҡорт казактарынан Ғабдулла Дәүләтшин.

— Дәүләтшин?! — Сәлимйәндең ҡолағы ҡарп итеп ҡалды — зерә таныш фамилия!

— Эйе, Дәүләтшин. Әйткәндәй, еҙҙең Орск өйәҙенән. Сәйәси ҡарашы дөрөҫ, Каруан арайҙағыларҙан ситтә тора, башкөлләй беҙҙең платформала... Ә татарҙарҙан, ваҡ буржуаз соуслы бул алар ҙа, бөгөнгө башҡорт мәсьәлә ендә беҙгә теләктәш Мөхәммәтйән Та иров менән Шанил Ғосманов әм уларҙың эреле-ваҡлы эйәрсендәре — татар зыялылары бар. Сәйәси йә әттән шыйығыраҡ әм тайғаҡ бул алар ҙа, тыңлаусандар, иплеләр; еҙҙең башҡорт әйтемендәгеләй, әлеге моментта улар беҙҙең ҡурайға бейей. Тактик яҡтан шуларға ла таяныр ығыҙ, бер ыңғай үҙҙәрен ысын большевик итеп тәрбиәләр егеҙ... Ҡыҫҡа ы, тонйораған мосолман-

дар масса ын таяҡ тығып болғатыу — еҙҙең бурыс. Ә бөгөнгө лозунг — “Бөт өн империалистик уғыш! Бөтә власть — Советтарға!”

— Советтарға! — тине Сәлимйән.

“Бер үк йөк”тө берҙәм тартырға үҙ ҡуйышып хушлаштылар.

4

Коростелев иптәш әшкәрткәндәй, мосолмандар ара ында ныҡлап өгөт-нәсихәт эштәрен йәйелдереү өсөн тәүҙә башҡорт милли буржуазия ының киләсәккә сәйәси ҡарашын, тотасаҡ юлын асығыраҡ аныҡларға кәрәк ине. 1917 йылдың 25 — 29 авгусында Өфөлә булып үткән II ҡоролтайҙа Башҡорт Мәркәз Шура ына үҙенең фирҡәләше Шәриф Манатовтың әм күптәнге яҡын таныштары Фатих Дәүләтшин менән Ғәлиәхмәт Айытбаевтың да айланғанлығы үҙе үк орап тора ине Каруан арайға барыуҙы. Хәйер, хәрәкәттең идеологы Әхмәтзәкир Йәлитов та бынан байтаҡ йылдар элек Сәнкем-Биктимер ауылында осраҡан өс көнлөк танышы булып сыҡты.

Шинель салғыйҙарын ялпылдатҡан алҡын елле октябрҙең иртәнге бер сула ында тимер юл вокзалын тоташтырған оҙон урам буйынса йәйәүләп үтеп, тарихи бинаның бөгөнгө тарихи ваҡиғаларҙың үҙәгенә әүерелгән ул ҡанатына кергәндә, коридорҙарында умарта күселәй ҡайнашҡан кешеләре, шау-шыуҙары менән ул Сәлимйәнгә яңыраҡ ҡына үҙе күреп ҡайтҡан Петроград Смольныйын хәтерләтте.

Ишектәрҙә яҙыу-фәлән юҡ. ораша- ораша тарыған Мәркәз Шура рәйесе бүлмә ендә лә байтаҡ ир-ат өйкөлөшөп, теңкәләренә тейгән Ваҡытлы хөкүмәт комиссары Архангельскийҙы телдән төшөрмәй гөж килә. Өҫтәл артында ултырған, ҡуйы шоморт-ҡара сәсен уңға ҡайырып тараған матур ҡиәфәтле, яҡынса Сәлимйәндең йәшендәге башҡорт уға ҡуңыр күҙҙәрен тура төбәп, кемлеген әм ни йомош менән килеүен орағас, йылмайып: “Ишеткән бар ине, фронттан ҡайтҡан коммунист, ә мин Шәриф Манатов тигән кеше буламын, — тип таныш-тырҙы. — Тик, үкенескә ҡаршы, әле генә иркенләп өйләшеп ултырыр форсат юҡ — күрә егеҙ бит: ҡорҙаштар менән сығып китергә генә тора инем — Архангельский хөсөтөнән баш ҡатҡан. — Туҙрап ятҡан ҡағыҙҙарын йыйыштыра башланы.

— Ярай, күп тотҡарламам. Үҙебеҙҙең партия эштәре буйынса йөрөй инем...

— Партия эштәре, тип ни... беҙҙә бер ниндәй ҙә партия юҡ әле. Урынбаҫарым Әхмәтзәкир Йәлитов әйтмешләй, беҙ — большевик та түгел, меньшевик та түгел, ә башҡорт.

— Ә үҙең ни әйтер ең? Коммунист була тороп? Ошо Каруан арайҙа ла партиябыҙҙың күҙәнәге эшләргә тейеш тә ә!

— Тейеш тә бит... — Тирә-яғына шикле ҡаранды, — тик әлегә уның ваҡыты түгел. Киләсәк эше!

— Ҡалған эшкә ҡар яуа, тигәндәй, ваҡыты түгел, тип ойоп йөрөп, киләсәк еҙ ҡалма аҡ ярар ине...

— Ойомайбыҙ, халҡыбыҙҙың меңәр йыллыҡ изге хыялын бойомға ашырабыҙ — ерле автономия алырға ең ыҙғанып көрәшәбеҙ. Ләкин башҡорт түгелдәрҙең бары ы ла беҙгә ҡаршы...

— Быға артыҡ ҡаршылыҡ ыҙ, еңелерәк өлгәшер өсөн, Рәсәй коммунистары менән бер ыҙандан барырға, башҡорт коммунистарының ойошмаларын төҙөргә...

— Әйттем бит: киләсәк эше! Тәүҙә Федератив Рәсәй штаты рәүешендәге автономиябыҙҙы иғлан итәйек, йоҡонан уянған милләтебеҙҙең барлыҡ көс-ҡеүәтен тик шуға арнайыҡ... Ярай, ғәфү ит — сығып китергә ваҡыт. Ҡалғанын урынбаҫарым аңлатып бирер. — Түҙем еҙләнеп көтөп торған ҡорҙаштарына ылыҡты.

Оҙон коридор башындағы асыҡ тәҙрәнән тын алып торған Фатих Дәүләтшинды

сырам ытып ҡына саҡ таныны: буйға уйҙанланып, яурындары ҡалынайып, әүәлге ул күреп белгән сибек үҫмер йөҙөнә лә ыҙылып мыйыҡ сыҡҡан, күҙ ҡараштары үткерләнгән, әммә ҡиәфәте аман сирләшкә-аҡ ылт ине (бер йылдан уң ул үпкә сиренән вафат). Ҡосаҡлашып күрештеләр:

— ай- ай, Фатих мәғзүм, кемде күрәм: финанс министры булып киткән ең! Ә шулай ҙа онотмаған икән ең дә мине!

— е, нисек итеп онотайым: атайым мәрхүмдең иң яратҡан шәкертен!

— Остазым да мәрхүм булып ҡуйған икән шул... йәне йәннәттә бул ын инде. — Икәүләшеп доға ҡылдылар.

— Шулай... Шәйләүемсә, фронттан ысҡынған ың?

— Башҡа ҡайҙан бул ын инде...

— Иҫке оро шинель аман өҫтөңдә...

— ин үҙең, мәғзүм, хәтәр ҡалын кейенгән ең, әллә аман ҡуйыныңа ел кереүенән ҡурҡа ыңмы? — Үткәндәрҙе йылмайып хәтерләне.

— Шулай шул... — Ситкә боролоп, бер быуа йүтәлләне. — Ә инең батша буҫтауынан ел үтеп инә алмайҙыр?

— Эйе, пүләнән башҡа бер нәмә лә үтмәй миңә хәҙер.

— Оторо бәлшәүик булып ҡайтҡан ыңдыр, шәт? — Йүтәлләне. — Ғөбәйҙулла ағайым кеүек...

— Кем?! Ғөбәйҙулла Уразовты әйтә еңме?

— Тап үҙе. Ата ы Тажи мулла, минең бер туған еҙнәйем, атайым урынына ҡалған имам хәҙер. Шуның үҙен тыңламай, үҙең белгән казак аҡтығы Ғәбделәхәт Сәйетбатталов менән ике е бергә Жултый тимер юл станция ының башлығы господин Расщепкин менән еҫкәшеп, я ил Ырымбур большевиктары өлгө өндә донъяны болғаталар.

— Болғат ындар, — тип көлдө Сәлимйән, — болғата-болғата май төшөрөрҙәр, бәлки.

— Ҡөрьәнел-хафиз[46] ағайым да бәлшәүиктәр ҡотҡо она эйәргәс, нишләрбеҙ инде?.. — Тыны ҡыҫылып, тәҙрә асығына өңөлдө, Сәлимйәнгә ҡыҙғаныс булып китте:

— Ә ин үҙең, мәғзүм, сирләшкә генә көйөңсә, ниңә ошбу хәтәр хәрәкәткә килеп ҡушылдың? Донъяларҙың айҡал-сайҡал килеп тыныуын йылы ғына өйөңдә, йомшаҡ ҡына түрендә сүрәләр уҡып көтөп ят аң ни булды?

— Утыпша[47] түгел бит мин, әҙәм бала ы! Нисәмә быуаттар көтөп ятып, еребеҙҙән дә, телебеҙҙән дә, динебеҙҙән дә ҡолаҡ ҡағырға торабыҙ, етте! Эсендә йәне булған башҡорт йоҡлап ҡалмаҫ — яҙмышыбыҙҙы үҙ ҡулыбыҙға алыр ваҡыт! ин, бәлшәүик, ошоға ҡаршымы әллә?

— Мин улай тип әйтмәйем, әммә ныҡ хәүефләнәм. Башҡаларға ҡушылмай, үҙ аллы ғына алҡынып, ауыр күтәреүҙән билде биртендереп ҡуйма аҡ ярар ине.

— Башҡалар бит тере дошман — бөтә е лә беҙгә ҡаршы.

— Улай уҡ тип әйтмәҫ инем. Өҫтәүенә, сәйәси йә эттән уңыш ҡаҙан ағыҙ ҙа, иҡтисади яҡтан биртенәсәк егеҙ: тупраҡлы автономияның идаралығын бит өр-яңынан башлап ҡорорға тура киләсәк, бының өсөн хәт еҙ сығымдар кәрәк. Татар буржуазия ы тиккәме ни тупраҡлы автономияны үҙ енмәй — аҡса ла, милли белгестәр ҙә етмәҫ, тип ҡурҡа.

— Беҙ бит татар түгел, беҙ — башҡорт!

— Бына ин, мәғзүм, мәркәздең финанс министры, әйтеп бир: ҡаҙнағыҙҙа күпме аҡса бар?

— Ҡаҙнабыҙҙа елдәр ыҙғырып тора, уны яңы ғына ҡаҙана башланыҡ. Көндәлек сығымдарҙы ҡаплатыр өсөн дә халҡыбыҙҙың йән башынан тинләп кенә йыябыҙ.

— Тимәк, көрсөк төбө шомтор.

— Йән биргәнгә — йүн биргән, ил төкөр ә — күл булыр.

— Ярай, тинләп кенә бул а ла йыйып, барлы-юҡлы бул а ла идаралыҡты тарҡатмай тоттоғоҙ, ти. Күпкәме? Әгәр Рәсәйҙә Ваҡытлы хөкүмәт ҡолатылып, уның яҡлылары менән уға ҡаршылар ара ында ҡоралды тартыш башлан а, еҙҙе кем аҡлаясаҡ үҙең әйткән дошман көстәрҙең ҡоралды хөсөтөнән, тим?

— Шуға күрә лә үҙебеҙҙең ғәскәрҙе булдырабыҙ, яугир халҡыбыҙ был юлы ла ынатмаç.

— Ер мәсьәлә ен нисек хәл итмәксе егеҙ?

— Уның буйынса тап үҙең ымаҡ уҡ фронттан ҡайтҡан алдат Ғәлиәхмәт Айытбаев шөғөлләнә. Әйҙә, булма а, ҡырына уҡ илтеп ҡуяйым үҙеңде! — “Министр” ныҡышмал яҡташынан арыныу сара ын тиҙләтә кеүек.

Мәркәз Шура ы ағзалары бер ҙур залда стеналар буйлап теҙелешкән эреле-ваҡлы яҙыу өҫтәлдәре артында бөтә е бергә ултырып эш йөрөтә, ултырған урындан бер-бере е менән фекер ҙә алыша, имеш. Тәбәзерәк буйлы, түп-түңәрәк күҙлектәре үтә төртөп ҡараған быжырыраҡ ҡаҡса йөҙлө, ҡылыс танаулы уҙамандың бынан тиҫтә йыллап элек Сәнкем-Биктимер ауылында үҙе күргән, Ҡапҡанташ ҡыҫығынан үтә Факан утарына, Перовский дача ының урынына бергәләшеп сәйәхәт ҡылған зыялы мосафир Әхмәтзәкир Йәлитов икәнлеген бер күреүҙән таныны.

— Сәлимйән Мырҙағолатов буламын, йә әт сырамыттым үҙеңде. Иҫеңдәме: 1908 йылдың томра йәйе, аҡмар буйы — Ҡаҫмарт тамағындағы мәҙрәсәле ауыл, иртә таңдан балта туҡылдатып бура бурап ултырған шәкерт... Шунан уң Мөхәммәткамал хәҙрәт ихата ындағы ҡымыҙ...

— Ә, эйе, мәҙрәсә бура ы... Йә, эш ниҙә? — Әхмәтзәкир, мәшәҡәттәрҙән арығандай, ҡоро өйләште. — Күрәм, фронттан ҡайтҡан алдат. Моғайын, большевик ене лә уҡҡандыр?..

— уҡты шул.

— Ен уҡҡандар күбәйеберәк бара... Ғәфү ит, кем, эштәр бына бынауындан — муйындан, тын алыр ҙа форсат юҡ. Иркенерәк саҡта кил әң, гәпләшеп тә алырбыҙ, үткәндәрҙе иҫкә төшөрөп. — Ҡаршылағы буш өҫтәл яғына ҡарап өндәште. — Ғәлиәхмәт ҡайҙа, ҡабул ҡыл ын үҙенең фронтташын. — Тимәк, Ғәлиәхмәт минең хаҡта өйләгән, тип аңланы Сәлимйән. Буш өҫтәлдең күрше енән өндәштеләр:

— Айытбайҙың тышта бер эше ҡалған — хәҙер килеп инәсәк. Кил әле бында, алдат, шүрәле бармаҡтарым менән бер ҡытыҡлап алайым. — Шапылдатып усын усҡа уҡты. — Йәлләт, таный ыңмы мине?

Сәлимйән күҙҙәрен тызырайтып егеткә яҡынлағайны, уны ы, матур хәтфә таҡыя аҫтынан тырпай-карпыш ҡолаҡтарын аттыҡылай ҡайсылатып- елкетеп, шарҡылдап көлдө. Хәтере ҡапыл уянған алдат бармағы менән маңлайын ыпырып өйләнде:

— Вәт әй, был нисек булды был?! аҡмарҙан ал ағыҙыусы ике шағирҙың бере е түгелме ин?

— Ҡуш итектең ыңары — Ша изада Бәпесев! Икенсебеҙ — Ғәбделхәй Иркәбаев та бында, Ырымбурҙа. Ҡәҙимгесә донъя көтөп, йөн тетеп, тегене ен елкетеп ята, ха-ха-ха!

— Егеттәр, етте, эшкә ҡамасаулай ығыҙ! — Баш күтәрмәй яҙған рәйес урынбаҫары киҫәтте.

— Беҙҙең да и көй өҙләнә, таяйыҡ. Телеграф аша Ленинға күндермәккә хитапнамә ижад итә ул, Манатовтан элегерәк өлгөрөргә. Мин ни, ике куплет таҡмаҡ ҡына оҙатайыҡ та ҡотолайыҡ, ти әм дә, күнмәй — етди сәйәси эш был, ти...

Коридорға сыҡҡас, Сәлимйән орай ҡуйҙы:

– ин, ҡустым, ни эш ҡыра ың бында?

– Бәй, ике күҙенде герман газы киҫтеме әллә, ағайым, башым осондағы аҡ ҡанаттарын яҙған Ябраил фәрештәне лә күрмәй ең? Бөйөк Мәркәз Шура ының тулы хоҡуҡлы ағза ы, ул ғына ла етмә ә, Әхмәтзәкир да и менән бер ҡатарҙан Шура рәйесенең урынбаҫары ла мин!

– Үҫкән ең икән, ҡустым.

– Ярай, бына иңә адрес, берәй кис резиденцияма рәхим ит, шунда үҙең белгән шәп егеттәрҙе – Әбделхәйҙе лә, Сенәкәйҙе лә әм башҡаларҙы ла күрер ең.

– Сенәкәй тигәнең дә – шағир, теге Рәдүт татарымы?

– Тап үҙе, минең иң яҡын дуҫым, уның менән бер фатирҙа ауаны быҫҡытабыҙ... Йә, ана килә иңә кәрәкле Ғәлиәхмәт Айытбай! – Адресы (Каруан арай урамы, 53-сө өй) яҙылған ҡағыҙ киҫәге тоттороп, йә әт ысҡынды. Ғәлиәхмәт и ә алыҫтан уҡ ҡосағын йәйеп елтерәп килә ине – ҡосаҡлашып гөрләштеләр.

– Киттек ҡарауылсы бабай төйәгенә – сәй янында ирәүәнләшергә!

Мәтрүшкә сәйенең хуш еҫе бүлмәгә аңҡыны ла күңелдәрҙе хисләндерҙе.

– ин, арҡадаш, минән алдараҡ тайғайның, инде күрәм: милли хәрәкәттең үҙәгендә ҡайнашырға өлгөргән ең.

– Нисек ситтә ҡала ың: еребеҙ, динебеҙ, телебеҙ өсөн бара бит көрәш.

– Тегендә беҙ ҙә инән уң да тик ятманыҡ, Петроград большевиктары менән аман да тығыҙ элемтәлә Керенский хөкүмәтен бәреп төшөрөргә, властьы Советтар ҡулына алырға алдат массаларын яҡшы аңғартып әҙерләнек. Оҙаҡламай түңкәрелеш буласаҡ, хакимиәт башына үҙең белгән Ульянов-Ленин партия ы – коммунистар менәсәк. Ә ин бында, үҙендең шул большевиктарға теләктәшлегеңде онотоп, буржуйҙар арба ында йырлап йөрөй өң.

– Ерле автономия дәғүәләүсе башҡорттарҙың башында барған берҙән-бер көс шулар бит. Ә инең бындағы урыҫ большевиктарың да, татар эсерҙары ла, йәшел ислам флагын күтәргән өр өү милләтселәре лә бер төптән беҙгә ҡаршы – башҡортҡа ерле автономия бирҙертмәҫ өсөн көрәшә, хатта башҡорттоң барлығын да танымай. Ҡалалағы Коростелев етәкләгән РСДРП(б) ойошма ы ла, татар байҙарының “Ырымбур мосолман виләйәт шура ы” әм унын “Мосолман хәрби комитеты” ла – бер ап та бер ҡалып: “Башҡорт тигән айырым милләт юҡ – шул уҡ татарҙың боҙоҡ телле бер ҡәүеме улар; шуға күрә татарға ни кәрәк – уларға ла шул кәрәк; ә татар бер урында ҡатып ҡалмаған – бөтә Рәсәй буйынса ибелеп йәшәй, унын бер ерҙә генә уҡмашыр урыны ла юҡ, шуға күрә Рәсәй мосолмандарына ерле милли мөхтәриәт кәрәкмәй, сауҙабыҙ әм динебеҙ өсөн милли-мәҙәни мөхтәриәт бул а – шул еткән!” – тип лаф оралар, урыҫтар шуны тик хуплап ҡына тора. Тегеләре лә, былары ла беҙҙең ҡан дошмандар ул.

– Бөтә енән дошман я арға ашыҡма әле улай. Окопта сағында ин дә, бик мауығып, РСДРП(б)-ның “Милли мәсьәлә буйынса” апрель айындағы етенсе конференция резолюция ын ятлай инең...

– Инем шул... “За всеми нациями, входящими в состав России, должно быть признано право на свободное отделение и на образование самостоятельного государства” тип ауыҙға бал да май тамыҙылғайны унда...

– уң? Йот ана шул ҡапҡаныңды!

– Йотор инем дә, алҡымымдан алдылар...

– Бәй, кем алды алҡымыңдан?

– Шул уҡ большевиктарың. Илгә ҡайтҡас ҡына аңланым шуны. Әхмәтзәкир Йәлитов ҡорҙашыбыҙ ҡаҡмай- уҡмай аңлатты.

– Йәғни ҙә?

– Йәғни ҙә, ауыҙыма ҡаптырылған бал да майҙың зә әр әсеүташ икәнлеге резо-

люциянығ эсендә үк асыҡлана: “Вопрос о праве наций на свободное отделение непозволительно смешивать с вопросом о целесообразности отделения той или другой нации в тот или иной момент”. Тимәк, теләгән бер милләт ерле-милли үҙ аллылыҡ даулап ҡуҙғалған моментта: “Юҡ! Моменты был түгел!” – тип милләт алҡымынан алырға юл ҡалдырған большевиктар. Ырымбурҙыҡылар шул форсаттан файҙалана ла инде, ә был и ә татар партияларына ла ҡулайлы.

– Ләкин сәйәсәттә улар ғына түгел бит әле, беҙ ҙә бар. Беҙ, башҡорт коммунистары, “моменты тап ошо!” тип әйтергә әҙер.

– Әйтегеҙ уң!

– Әйтербеҙ, тәүҙә халыҡты әҙерләйек.

– Халыҡ инде әҙерлектең сигенән ашып киткән, үҙен үҙе әҙерләгән.

– Уны ын киләсәк күр әтер. Шулай ҙа ер мәсьәлә е әммәбеҙҙең уртаҡ ғәмелер бөгөн.

– Килешәм.

– Шул йә әттән өрләгөп ҡуйма ағыҙ ине.

– Уны ы беҙҙең башты ла ауырттыра.

– Ауылда булып килдем, ерекмәндәрҙең бик хәүефле тын алышын шәйләнем. Күп ерләләр, аҙ ерләләр, бөтөнләй ер еҙҙәр әм күпләп ситтән күсеп килгән урыҫ арендаторҙары бар унда. Аҫабалар үҙ биләмәләрен ҡулдан ысҡындырмаҫҡа тырыш а, ҡалғандары ерҙе социаллә штерергә – йән башына ҡарап тигеҙ бүлешеп алырға ҡырҡыша.

– Ҡоролтай ер мәсьәлә ен ҡараны, ғәҙел ҡарар сығарҙы.

– Ғәҙеллеген күрмәйем: күп ерле байҙар, алпауыттар мәнфәғәте өҫтөнлөк иткәндәй унда.

– Уны ы шулайыраҡ, таныйым. Әммә башҡалар мәнфәғәте лә күҙәтелгән. “Киләсәктә Башҡортостанда ерҙәр бүлгәндә, – тип аҡка ҡара менән яҙылған унда, – ҡаҙна әм башҡа ерҙәр кире ҡайтарыл а, әлегә тиклем припущенниктар, типтәрҙәр, “яңы башҡорттар” тип йөрөтөлгән ҡан ҡәрҙәштәргә ер башҡорттар менән бер тиң биреләсәк”.

– Йомшаҡ түшәп ҡатыға ултыртыу түгелме был? “Ҡаҙна әм башҡа ерҙәр кире ҡайтарыл а” тигән үтәлмәҫ шарт ҡуйған ығыҙ. Кем уны кире ҡайтарыр әм ҡасан? Керенскийҙан өмөт итә егеҙме?

– Учредительный собраниеға депутаттар айланыҡ, араларында күренекле башҡорт инсандары Әхмәтзәкир Йәлитов, Шәриф Манатов әм Ғәли Шәмиғоловтар бар. уңғы ике е, белә ең, коммунистар. Ул ерҙәрҙе бына шулар шыҡырлатып юллап аласаҡ.

– Учредиловкала тел тирмәне тартыпмы? Көтмәгеҙ! Башҡортҡа ул ерҙәрҙе, урыҫтар әйтмешләй, “как своих ушей не видать”!

– Дөрөҫөн генә әйткәндә, мин дә шикләнәм быға. Бая әйткән ҡағыҙәне тикшергәндә ҡоролтайҙа ла өйләнем, әгәр иғтибар ит әң, матбағала сыҡҡан ҡарар аҫтына ла “Ғ. Айытбаев үҙ фекерендә ҡалды” тип яҙылған. Фронттан ҡайтҡан башҡорт йәштәренең дә байтағы ҡарарҙың был өлөшө менән килешмәй: мәсьәләне Учредительный собраниеға ҡалдырыу – күҙ буяу; ерҙе хәҙерҙән үк ғәҙел бүлешә башларға кәрәк, тип хатта йыйын залынан сығып та киттеләр. Ә баҫҡынсы урыҫтарҙы әм башҡаларҙы әйтеп тә тормайым...

– Бына бит. Ер – төп мәсьәлә. Шуны дөрөҫ сисмә әк, Башҡортостан тупрағында әр төрлө үҙ-ара тартыштар, хатта ҡан ҡойоштар башланыуы ихтимал. Шуға күрә лә беҙ, коммунистар, ерҙе социаллә штереү шиғарын алға өрәбеҙ, ә бының өсөн Рәсәйҙең дә, атап әйткәндә, Башҡортостандың да хакимиәт башына ярлыялпы пролетариаттың коммунистар партия ы килергә, буржуазияның көнө

бөтөргә тейеш.

— Уҫал өйләй ең, ҡорҙаш. Буржуазия тигәнең — ошо беҙ, әлеге Башҡорт Мәркәз Шура ы түгелме? Милләттең берҙән-бер күҙ терәп торған таянысын ауҙарырға итә еңме?

— Беҙ уны ауҙармабыҙ, ә тыныс юл менән генә большевиктарҙың Советтар нигеҙенә ултыртырбыҙ.

— Беҙ тигәнең — автономияның хас дошманы Шәмиғолов әм уның эйәрсендәре буламы?

— Башҡорт коммунистары тик шәмиғоловсыларҙан ғына тормай, беҙ ҙә бар. Беҙ иҙеүсе синыфтарҙан арындырылған Совет автономия ы яҡлы. Совет автономия ында бөтә хакимиәт үҙ ҡул көсө менән көн күреүсе ябай халыҡ депутаттары ҡулында буласаҡ.. Бының өсөн арымай-талмай халҡыбыҙға сәйәси хәлде аңлатырға, дәррәү уның күҙҙәрен астыртырға кәрәк — башҡорт мәнфәғәттәренең дә бер иш кенә түгеллеген, синыфтарға бүленгәнлеген, беҙҙә лә аҫтыртын синфи көрәш барғанлығын әм барасаҡлығын күр ен. Шунда ғына илебеҙгә ысын хөрриәт килер.

— Уны ын Алла белә. Әммә бөгөн башҡортобоҙҙоң ике күҙе Каруан арайға төбәлгән. Күктәге торнаға ым ынып, ҡулдағы турғайҙы ысҡындырып ебәрмәйек.

— Торна ы ла, турғайы ла нәҡ беҙҙең ҡулда булыр. Шулай ҙа ин, ҡорҙаш, ер мәсьәлә ен күҙҙән ысҡындырма әле.

— Аңлайым. Алдағы өсөнсө ҡоролтайҙа шул хаҡта үҙ ҡуйыртырға тура килер.

Ошоноң менән әңгәмәне теүәлләп, Сәлимйән ашығыс аубуллашты, сөнки төндә йоҡламайынса уйланып ятып тәғәйенләнгән көндәлек эш бурыстары күп ине.

5

Кисенә ул ҡала зыялылары йыйыла торған мосолман мәғрифәт төйәгенә — Ғабдулла Туҡай исемендәге татар китапхана ына юлланды. Ҙур булмаған уҡыу залы ҡара бәрхәт кәләпүш, уҡалап сиккән таҡыялы татар сауҙагәрҙәре әм уларҙың йылғыр ялағайҙары — эреле-ваҡлы кибеттәрендә аршинлап ситса, мыҫҡаллап тәм-том үлсәүсе ыҡмыр приказчиктар, трактир половойҙары, шулай уҡ мәҙрәсә шәкерттәре, дворниктар менән шығырым тулы; araларында йөҙҙәре төтөнгә ыҫланған бер-ике пролетарий — тимер юл депо ы эшселәре бар. Бары ының иғтибарын тартыусы — Башҡорт Милли Мәркәзенән килгән шағир Ша изада Бәпесев әм уға ырныҡҡан ҡыҙ-ҡырҡын — түбәләренә мәрйенле ҡалпаҡ сөйгән, ҡаштарына өрмә тартҡан бер килке милли туташ. Сәлимйән кергәндә мәжлес аҙағына етеп, буғай, гөжләй ине: бәғзеләре хатта сығып та киткеләй. Түрҙәге йәшел буҫтау япмалы өҫтәл артында — европаса ҡара костюм, текә тирәсле кәләпүш кейеп затлы бурҙай эттәрҙәй суҡайып ултырған икәү: ҡала байы Бор ан Шәрәф (“Урал” рестораны хужа ы) менән уның тоғро ялсы ы — “Мосолман шура ы” рәйесе, “Ваҡыт” гәзите мөхәррире Фатих Кәрим залдағыларҙың аҡтыҡ орауҙарына яуап биреп, мәжлес уҙымын йомғаҡлай:

— Ҡабатлап тәкрарлайым: беҙ — йәмғебеҙ мосолман затлы бер үк халыҡ, бөгөнгө көндә асылы фәҡәт шыр наҙан әм сеп-сей хаталы рәүештә үҙҙәрен “башҡорт” тип атаған әм берҙәм мосолман донъя ын ҡырҡҡа бүлгесләп ҡаҡшатҡан бәғзе бер йүгән еҙ ә елдәрҙең “башҡорт милли тупраҡлы мөхтәриәте” тигән баштан-аяҡ зыянлыҡлы идея ына ҡырҡа ҡаршы беҙ. Ләғнәт әм бәддоға уларға! Мосолманлыҡты емерергә, тамырынан тарҡатырға тырыша улар. Беҙ, эске Рәсәйҙең, Себерҙең вә Ҡафказдың ә ле[48] мосолмандары, ә ле Исламдың йәшел әләме төбөндә бөйөк төркиселек шиғары илә мәҙәниәтле уҡмашып, әммәбеҙгә

уртаҡ булмыш, ер ҡыҫаларында нә и сикләнмеш[49] милли-мәҙәни мөхтәриәт хасил ҡылырға тейешбеҙ...

— Татар байҙарының сауҙа даирә ен киңәйтеп, уны ыҙ ҙа күпкән ҡор ағын ҡалынайтырға, ә беҙҙәрҙәй хеҙмәтсән халыҡтың арыҡ тәнендәге уңғы ҡанын ығып эсергәме?! — Эшселәрҙең бере е тороп бүлдерҙе.

— ин, кем, Сәхи Ғәйфи, аман да шул томаналығыңа барып, көфөр өйләй ең! — Өҙөп алды Бор ан Шәрәф. — Был болғансыҡ заманала, ин — уфалы, мин — ҡазанлы, ин — бай, мин — ярлы тип бүленергә лә, ерле мөхтәриәт сиктәре эсендә ҡамалырға ла ярамаҫ. Бөтөн төрки-татар донъя ы, туғандарса ҡулға-ҡул тотоношоп, бер ыҙандан өрөргә бурыслы...

— Беҙ — өрөргә, ә еҙ урып алырғамы? — Сәхи Ғәйфи тигәндәре тынманы.

— Мосолманлығыбыҙ яҙмышы ҡыл осонда торғанда беҙҙә айырмалыҡ юҡ, асы яҙмыш яға ында барыбыҙ ҙа бер тигеҙ.

— е! Ҡаланың иң затлы “Урал” ресторанын хужа ы Бор ан Шәрәф әфәнде лә, бына бынауы ҡалсайып ҡатҡан ҡулдарҙың эйә е мин дә, тимәк, бер тигеҙ булып сығабыҙ?! — Көрәк ҡулдарын юғары күтәрҙе. Йәмәғәт әллә хуплап, әллә ғәйепләп шауланы. Фатих Кәрим тигәндәре туларға торған был оторолар ҙы еҙ ҡыңғырау шалтыратып тонсоҡторҙо.

— ин, Сәхи Ғәйфи, большевиктар ҡотҡо он таратма бында! Ҡараңғы башҡорт башың менән я ил урыҫ арба ына ултырып, урыҫ картузы кейеп, донъя болғата - ың, хәсис!

— Ә ин, Ғәйет ауылының башҡорт аҙғыны, башың-тояғың менән татар байҙарына атылып, таҡыр башыңа фәсле кәләпүш ҡундырып, шуларҙың оса ара ын ялап йөрөй өң, тфү! — Сикәләре ҡыҙышып, иптәштәре менән сығыу яғына елтерәне, шау-шыу ҡупты. Заманса ыҫпай кейемле, аҡ йөҙлө әм ары сәсле бер азамат (Сәлимйәнгә уны, ҡалабыҙҙың билдәле зыялы ы, “Хөсәйениә” мәҙрәсә енең учителе, башҡорт казагы Ғабдулла Сибәғәт улы Дәүләтшин, тип аңлаттылар) ҡалҡынып, көр тауышы менән шау-шыуҙы ҡапланы; өҫтәл артындағыларға кинәйәле баш сайҡап өндәште:

— Әфәнделәр, бындай тупаҫлыҡ ис тә кәрәкмәҫ ине. Томана башҡорт тигәс тә, унды- улды зерә шәп тойомлай ул.

— ин дә, мөхтәрәм Дәүләтшин әфәнде, мосолман казагы башың менән ылғый шуларға эйәреп, Коростелевтар мөхитендә алйый ың. Өҫтәүенә, тупраҡлы мөхтәриәтселәр оялаған Каруан арай туп а ын шымарта ың. ин дә тупраҡ тарафдарымы әллә?

— Эйе, йәшермәйем, мин дә башҡорт халҡының ғәзиз өмөттәрен ҡәнәғәтләндереү яҡлымын.

— Хәсис! Автономист!

— Эйе, автономист. Башҡорттоң тәрән тамырҙары сәмүм елдәренә осортмай тотоп торған сал Урал тупрағында Рәсәй эсендәге ерле-милли автономия төҙөргә ваҡыт. Ләкин беҙҙең ул автономия большевиктар сәйәсәтенә яраҡлы төҙөлөргә, бөгөн-иртән большевиктар яулап аласаҡ Советтар хакимиәтендәге автономия булырға тейеш. Ул хакимиәттә, әлбиттә, еҙҙең кеүек аҡса ҡапсыҡтарына урын булмаясаҡ!

— атлыҡйән! Кил, йөҙөңә төкөрәйем! — Шәрәф Бор андың имеҙ йөҙө ут ҡапҡандай ҡыҙарҙы. Ҡуштаны ауыҙ асырға өлгөрмәне — залдағы аҡ ҡалпаҡлы нәфис туташтарҙың бере е, муйылҡара оҙон толомо арҡа ына ағылып төшкән әм утянып баҡҡан ҡара күҙле е, тулҡынланып киҫәтте:

— Бай ағай, был ни хәл? Сығырыңдан сыға ың!

— еңлем, миңә аҡыл өйрәтергә кем әле ин?

— Мөғәллимәләр курсының уҡыусы ы. Ә Ғабдулла ағай Дәүләтшин — мөхтәрәм

уҡытыусым, уға ундай тупаҫ үҙҙәр әйтергә хаҡығыҙ юҡ! Ғәфү үтенмә әгеҙ, нәфрәт белдереп сығып китәбеҙ!

— Эйе, сығып китәбеҙ! — Әхирәттәр берҙәм ҡуҙғалды.

— Бына бит ул — большевик сире... Сәхи Ғәйфиҙән йоҡто... — Бор ан Шәрәф баш сайҡаны.

— Юҡ! Бер кемдән дә йоҡманы!

— Сабыр итегеҙ! Ундай талаптар ҡуйырға башығыҙ йәш әле! — Тороп баҫҡан Фатих Кәрим баштар аша ҡараҡайға төбәлде. — Яңылышма ам, Бөрйән яғының ҡарлуғасы ин, еңлем?

— Яңылышманың.

— айрауыңдан яҡшы тойолоуынса, Каруан арай ене ҡағылған иңә лә?

— Ене түгел — еле, шифалы еле!

— Башҡорт еле! — Тотанаҡланы әхирәте.

— Ялған ел ул, еңлекәш: башҡорт тигән айырым ҡәүем дә, ер ҙә юҡ. Ул уйлап сығарылған.

— Алла ы Тәғәләнең үҙе тарафынанмы? Башҡорттоң үҙ ере лә, көнө лә, теле лә бар — ер еҙ мөхтәриәт яҡлы татар ҡәрҙәштәребеҙҙән шул яҡлап айырылабыҙ.

— Уйлап ҡара әле, еңлекәш: шул ҡараңғы-төпкөл Бөрйәнеңдән ошо мәғрифәт усағына килеп, аслан кем телендә белем алғаныңды, кем хәрефтәрендә яҙғаныңды шәйләй еңме?

— Башҡорт шәжәрәләренең телендә. Үҙебеҙҙең яҙма тел. Бабаларыбыҙ яҙған тел! — Бөрйән ҡыҙы менән әхирәттәре залды ҡалдырып сығып барғанында Фатих Кәрим арттарынан ҡысҡырҙы:

—Татар теле ул, еңлем! Татар теле! Татар муллалары еҙҙе кеше иткән, уҡырға-яҙырға өйрәткән!

— Улар юҡта ла беҙ кеше инек! Үҙегеҙ кеше булығыҙ!

— Ҡара-ҡара: ҡарлуғас тигәнем — ҡарсыға!..

— Күренеп тора — Абдулла Дәүләт шойҡаны! — Бор ан Шәрәф тә үртәлде. Ҡыҙҙар артынан дәррәү ҡуҙғалған Ша изада Бәпесев и ә, эре-эре аҙымлап барышлайы, әйләнеп ҡарап нәфрәтләнде:

— Тфү! тип төкөрәйемме, әллә өшкөрәйемме? Тонсоҡтора был тынсыу татар мөхите!

— ин, шырмый шағир! — Бор ан Шәрәф, сыҙамай, бармаҡ яназы. — Иртәгә кем матбаға ына килеренде онотма!

Гәзиттең мөхәррире хужа ы янауын ҡеүәтләне:

— “Ваҡыт” ишеге дуңғыҙ мороноң алдында уҡ ябылыр!

Елтерәп барған шағир бер мәлгә туҡталды:

— Ҡарап ҡарарбыҙ әле. өр өп бөткән татарҙарҙың эстәрен көтөрләтеп, ерлемилли мөхтәриәт кенә яулап алайыҡ — үҙ телебеҙҙә уҡырбыҙ, үҙ телебеҙҙә яҙырбыҙ! әм еҙҙең “Ваҡыт” ише серек матбағаларға яҡын да юлламабыҙ!

Сәлимйән дә ҡуҙғалды:

— Артабан бында ҡалыуҙың мәғәнә е юҡ, киттек! — тине Ғабдулла Дәүләтшинга. Барышлайы ҡулын ҡаты ҡыҫып хупланы: — Дөрөҫ юлдан килә ең, иптәш Дәүләтшин. РСДРП(б)-ға ағза булып керә ең икән, тип тә ишеттем.

— Эйе, йыйынам.

— Тиҙләтергә кәрәк, сөнки башҡорттарҙан коммунистар аҙ, юҡ барәбәрендә тип әйтерлек. Үҙем тотанаҡ бирермен.

— Рәхмәт, яҡташ.

Ҡалпаҡлы ылыуҡайҙарҙың күбе е таралған, ишек алдында баяғы сая ҡараҡай

менән Ша изада Бәпесев йөҙгә-йөҙ килеп, шарҡылдашып көлөшөп тора. Сәлимйән ҡыҙ алдында туҡталып баш эйҙе:

– Буржуйҙарҙың ауыҙына әсеүташты шәп ҡаптырҙың, ылыуым, маладис! Үҙеңде әллә оҙатып ҡуяйыммы?

Ҡыҙ ауыҙ асырға өлгөрмәне, Ша изада өҙөп алды:

– уңланың шул, ағайым, оҙатыусы ы эргәлә! – Ҡыҙҙы ҡултыҡлап этәрҙе. – Бисмилла и рахман рәхим, аҡ юл беҙгә, Әҡлимә туташ! – оро шинелле ағайға өндәшергә ирек бирмәй, ҡойондай өйөрөп алып китте.

– Их, ҡайҙа беҙҙең йәш саҡтар – кеҫә тулы борсаҡтар!.. – Текләп ҡалды Ғабдулла Дәүләтшин.

– ... аламдан тәртә ҡайырып, сиңерткә еккән саҡтар... – Йөрәгендә абайлатмай татлы хис тоҡанып семеткеләгән Сәлимйән иҫен саҡ йыйҙы. – ылыу ҡыҙ... ҡыйыу ҡыҙ... Бир ә бирә икән Хоҙай Тәғәлә!

– Иң яратҡан уҡыусым. Халҡыбыҙға бынамын тигән мөғәллимә ҡайтасаҡ.

– Ә Бәпесев менән аралары нисек? – Сәлимйән үҙ хистәрендә болғанды.

– Бер нисек тә түгел ымаҡ. әр хәлдә, нуҡталанмаған тай-тулаҡ. Фатирҙаш ике шағир, ике дуҫ ҡыҙыҡайҙың тирә ендә урала, ҡороҡларға ынтыла. Әммә, белеүемсә, ылыуыбыҙ бере енә лә баш бирмәй.

– Икенсе е кем?

– Бәй, үҙеңдең яҡташ-мәҙрәсәләшең Төхфәт Сенәкәй. “Рәдүди” тип тә тамғалай шиғырҙарын.

– Төшөндөм: Рәдүт ауылының татар казагы. Бынан туғыҙ йыл элгәре олатайың Мөхәммәткамал хәҙрәт ауылында аҡмар буйында шиғыр әйтешеүҙәренең ша иты булғайным. Ике е лә малайҙар ғына ине...

– Эй-йй... әммәбеҙ ҙә малайҙар ғына инек шул... я илдар менән яғалашыр көнөбөҙ килеп етте.

– Шуны аңлай алмайым, – тине Сәлимйән, байтаҡ ҡына өн өҙ уйланып барғас. – Татар буржуазия ы ниңә, революция тыуҙырған бөйөк форсаттан файҙаланмай, бушҡыуыҡтай тотанаҡ ыҙ ер еҙ мөхтәриәткә йәбешеп ята?

– Сөнки тамыр тартҡан үҙ ере юҡ бит.

– Теләктәре ҙур бул а, Ҡазан гөбөрнә ендә генә бул а ла төпләнә алырҙар ине.

– Теләктәре ҙурҙан да ҙурыраҡ шул: Рәсәйҙең төрки телле барса халыҡтарынан берҙән-бер милләт – *татар милләте* уҡмаштырып, Рәсәйҙең ярты ын татар Рәсәйе я арға. Шул уҡ ваҡытта буржуйҙарының әр бере енең бармағы үҙенә ҡарай кәкере – сығарып алған бер тине йөҙ тин файҙа килтермә ә, ҡуҡыш күр әтә милләтенә. Миңә татар капиталистарынан йыш ишетергә тура килде: “Әгәр беҙ ерле автономия ал аҡ, – ти улар, – тишек кәмәгә ултырыуыбыҙ ихтимал. Сөнки халҡыбыҙ фәҡир, дәүләт аппараты сығымдарын фәҡәт беҙ, бер нисә бай, күтәрергә тейеш булабыҙ, ә был беҙҙең кеҫәгә ныҡ уғасаҡ”. Алтын Урҙа емерелгәс төрлө төрки ярсыҡтарҙан эркелгән, үҙ дәүләте булмаған ҡәүем бит ул.

– Ә Ҡазан ханлығысы?

– Уны ын да башҡорт хандары төҙөгән, ә уңынан татар хандары бөлдөргән.

– Ерле мөхтәриәт яҡлы башҡорт буржуазия ы ла үҙ ҡалта ын ғына ҡайғыртмаймы икән?

– Уны ына шик тә юҡ. Әммә башҡорт ҡамғаҡтай тәгәрләп йөрөп ҡалта тултырырға күнмәгән: үҙ ерендә үҙ дәүләтен ҡороп байымаҡ унын мөҡәддәс теләге. *Ерле дәүләт ҡороп* – бына ҡайҙа айырма!

– Миненсә был, беҙҙең коммунистик идеялар күҙлегенән ҡарағанда ла, тәбиғи хәл, – тине Сәлимйән.

– Мин дә шулай уйлайым.

Муйыл күҙле, умалалай ҡуш толомло бөрйән ылыуын күргәндән уң күңеле айҡал-сайҡал килеп, туңып торған йылға боҙо аҡтарылғандай булды, боҙ ара ынан, йөрәк ыҙлатып, аяҙ күктәй зәңгәр күҙле, арыш аламылай ары ҡуш толомло Гөлсәсәге ҡалҡып сыҡты ла, онотолмаç ҡиәфәте күҙ алдынан китмәçкә мө өрләнде. “Күптән тормошҡа сыҡҡан — итәк тултырып бала ла үçтерәлер, минең менән булғандары төш ымаҡ ҡына ҡалғандыр... ә мин...” — Ҡаты түшәгендә әйләнеп-тулғанды.

6

Дүрт йыл буйына Герман уғышының ҡанлы окоптарында дары төтөнөнә ыçланған Сәлимйән Мырҙағолатов, фронт большевиктарынан дөйөм Рәсәй пролетариатының хәле, революцион бурыстары тура ында шөйлә төплө сәйәси абаҡ ал а ла, бындағы тәрән тылда, йәғни үҙенең тыуған Ырымбур гөбөрнә ендә, синфи нисбәттәрҙең аслан нисек торошон, бигерәк тә Ырымбур казактарының тын алышын белеп еткермәй ине. Был хаҡта ул Коростелев иптәш менән бер осрашыуында ентеклерәк орашты әм, ҡыçҡаса ғына әйткәндә, ошондай мәғлүмәт алды.

“Казактарҙың, бигерәк тә бай ҡатламдарының, ере күп; шул төп байлыҡты ҡулдан ысҡындырмаç өсөн, улар батша ҡушҡандың бары ын да күҙ йомоп эшләргә әҙер. 1905 — 1907 йылдарҙағы революцияны ҡанға тонсоҡтороп баçтырыуҙа казактар, шул иçәптән Ырымбур казактары, батша самодержавие ының төп көсөн тәшкил итте. Дөрөç, сик еҙ оҙаҡҡа уҙылған Герман уғышы, аҡ батшаны бәреп йыҡҡан Февраль революция ы арҡа ында улар ҙа шаҡтай бөлдө, атамандарының бойороҡтарын үтәүҙән баш тартырға ла әҙер торған ярлылар ҡатламы барлыҡҡа килде. Беҙҙең бурыс — коммунистик өгөт-нәсихәт ярҙамында уларҙы нығыраҡ тарҡатыу, бигерәк тә уғыш яфа ынан биҙгән фронтовиктарын үҙ яғыбыҙға ауҙарыу. Әммә хәҙерге моментта Ырымбур казачество ы, дөйөм алғанда, беҙҙең өсөн ҙур ҡурҡыныс менән янай.

Ошо 1917 йылдың йәйендә Ырымбурҙа уларҙың Войсковой круги саҡырылып, урында хакимлыҡ ҡылыу өсөн “малый круг” әм уның тарафынан “хөкүмәт” айланды. Шуның башында торған казак офицеры Дутов Петроградҡа барып, Ваҡытлы хөкүмәт менән уртаҡ тел табып, унда бөтә Россия казактарының хәрби Советы ағза ы итеп айланды; Ырымбурға ҡайтып, юғары казак ҡатламдарының контрреволюцион хәрәкәтен етәкләне. Каруан арайҙа оялаған башҡорт милләтселәренең идеологы Әхмәтзәкир Йәлитов үҙен буласаҡ башҡорт ханлығының ханы итеп хыяллан а, Дутов Көньяҡ Уралдағы казак дәүләтенең диктаторы булырға йыйына. Уларҙың ике е лә беҙгә, большевиктарға, ҡурҡынıслы...

— Ә татарҙар?

— Улар ике яҡҡа ла ҡойроҡ болғай: ысын сауҙагәрҙәрсә, ҡай ы тарафтан күберәк файҙа килер икән, тип ағалай...

Петроградта I Бөтә Россия мосолмандары съезын саҡырыу алдынан Ырымбур казак ғәскәрҙәренән айланған мосолман делегаттар ҡалабыҙҙа йыйылып, “Казак мосолмандарҙың I ғәскәри съезын саҡырыу буйынса ойоштороу комитеты” айлайҙар, билдәле мөғәллим Ғабдулла Дәүләтшин шуның рәйесе була. Был съезд 1917 йылдың 30 майында Ырымбурҙа эш башлап, Ырымбур мосолман казактарының Үҙәк ғәскәри комитетын төҙөй, уның рәйесе итеп Әбдерәүеф Абдулла улы Богданов, урынбаçары итеп Ғабдулла Дәүләтшин айлана. Ләкин комитет етәкселегенең, күп тә үтмәй, съездың шөйлә демократик ҡарарҙарынан тайпылыуы сәбәпле, елкәненә большевистик елдәр өргән Ғ. Дәүләтшин комитетта эшләүҙән тайшана...”

Сәлимйән Мырҙағолатов алған тарихи мәғлүмәт булды был.

әм бына шул алҡын елле октябрҙең 25-ендә Петроградта большевиктар тарафынан Ваҡытлы хөкүмәттең ҡолатылыуы, бөтә хакимиәт Советтар ҡулына күсеүе тура ындағы хәбәр, Ырымбур большевиктары, шул иҫәптән Сәлимйән дә, ағынып көткән тан ыҡ хәбәр, ерҙе-күкте тетрәтеп килеп етте; күрше Өфө гөбөрнә ендәге кеүек үк, бында ла власть үҙенән-үҙе Советтар ҡулына күсер ымаҡ тойолдо. Әммә РСДРП(б)-ның Ырымбур ойошма ы әр яҡтан да үтә шыйыҡ булғанлыҡтан, Совет яҡлыларҙың өмөттәре аҡланмай. Октябрь түңкәрелешенән уң ике көн үтер-үтмәҫтән, йәғни 1917 йылдың 27 октябрендә, “Ырымбур йәмәғәт ойошмаларының берләштерелгән кәңәшмә е” йыйыла алып, көнүҙәк саралар тура ында үҙ-ара килешә. Большевиктарға сығып өйләргә лә ирек бирмәйҙәр. Эсерҙәр әм меньшевиктар етәкселегендәге “Йәмәғәт именлеге комитеты”, татарҙарҙың Фатих Кәрим, Бор ан Шәрәф башлығындағы “Мосолман гөбөрнә шура ы”, казактарҙың Войсковой кругы әм уның эсендәге мосолман казактарҙың Үҙәк ғәскәри комитеты, Башҡорт Мәркәз Шура ы, ул саҡтағы “ҡырғыҙ” тип аталған ҡаҙаҡтарҙың Алаш-Урҙа вәкилдәре үҙ-ара уртаҡ тел табышып, хакимиәт теҙгенен “ҡала әм гөбөрнә буйынса тулы ынса” атаман Дутов ҡулына тапшыра; урындағы большевиктар, үҙҙәренең телмәре менән әйткәндә, “иҙән аҫтына боҫорға”, йәғни йәшерен эшкә күсергә мәжбүр була. Башҡорттарҙың автономия өсөн хәрәкәте бөтә башҡорт халҡы берҙәм тотанаҡлаған ҙур көс икәнлеген урындағы большевиктар ойошма ы ба алап еткермә ә лә, Дутов быны аңланы әм, Башҡорт Мәркәз Шура ы менән йәшерен килешеп, Рәсәй эсендәге казак дәүләте әм Башҡортостан автономия ы өсөн көрәш хәрәкәттәрен бер-бере енә зыянлыҡ ыҙ, йәнәшә алып барырға үҙ ҡуйыштылар. Был көндәрҙең сәйәси нисбәтен ҡыҫҡа әм аныҡ еткереү өсөн, заманының зыялы ы Кәрим Иҙелғужиндың башҡорт хәлдәренә бәйле хитапнамә енә мөрәжәғәт итәйек:

“Мәркәз Шураның эше көндән-көн киңәйә. Башҡорттар ара ында Башҡорт автономия ын төҙөү юлында эшләүгә димләүҙәр көсәйә. Мәркәз Шура, үҙ вәкилдәре аркылы Керенский хөкүмәтенә хәбәр итеп, Башҡорт автономия ын ойоштороуға әм башҡорт ер-урмандарын башҡорт съездары хәл итеүенсә идара ҡылыуға рөхсәт орап ҡарай. Ләкин өҙөмтә е булмай. Керенский хөкүмәте башҡорт вәкилдәрен вәғәҙә менән туйҙырып, бөтә мәсьәләне Учредительный собраниеға бәйләп, шуның ҡарамағына тапшыра.

Август айында Керенский хөкүмәте бөтә ерҙәрҙе Үҙәк ерҙәр комитетына алырға бойороҡ сығара. Быға Башҡорт Мәркәз Шура ы риза булмай, Ваҡытлы хөкүмәткә телеграмма уғып, башҡорт ерҙәрен Башҡорт Мәркәз Шура ының ер бүлегенә биреүҙәрен орай. Ваҡытлы хөкүмәттең ерҙәр тура ында сығарған бойороғона башҡорттар күнмәйәсәк, башҡорт съездарының сығарған ҡарарҙары буйынса эшләйәсәктәр, тип аңлатыла.

Башҡорт Мәркәз Шура ы, бөтә ауылдың мулла әм хәҙрәттәрен ойоштороп, өйәҙ әм төбәк шураларҙы йыйнарға, айлау эштәренә юлбашсылыҡ итеүҙе уларға тапшырып, милли флаг аҫтында милли капитал тупларға, башҡорт илен буржуаз демократия нигеҙенә ҡоролған бер хөкүмәт итеп ойошторорға тырыша.

Ауыл муллалары бөтә эштәрен дә дингә бәйләп эшләргә тырышыуҙары арҡа ында, башҡорттар ара ында синфи айырымлыҡтар булмай. Башҡорт өсөн фәҡәт ерҙәрҙе ҡайтарыу, автономия алыу ул үҙе бер тарихи вазифаларҙан анала. Төбәк әм өйәҙ шура айлауҙары ла, шулай уҡ дөйөм Башҡорт ҡоролтайына вәкилдәр айлау ҙа милли тупраҡлы автономия алыу флагы аҫтында үткәрелә. Ҡоролтайға айлау алдынан шулай уҡ Башҡортостан тупрағында йәшәгән татар халҡына айырым хитапнамәләр таратып, айлау тәртиптәре күр әтелә. Ләкин, башҡорт әм татар ыҙғышы киң урын алып киткәнлектән, күп урында татарҙар айлауға ҡатнаш-

май. Шулай уҡ урыҫ крәҫтиәндәре лә, Башҡорт автономия ына дошманлыҡ күҙе менән ҡарап, башҡорттар ерҙе үҙҙәре генә биләргә тырышалар, тип, башҡорт ҡуҙғалыштарына ваҡытлы бер эш итеп кенә ҡарайҙар.

Ул арала Октябрь көндәре етеп, мәркәз ҡалаларҙа власть большевиктар ҡулына күсә. Тик Ырымбурҙа аман Ваҡытлы хөкүмәт тарафынан ҡуйылған комиссарҙар эш итә. Башҡортостандың ере икегә бүленә: Ырымбур гөбөрнә е – ул Дутов шауҡымы аҫтында ҡала; Өфө гөбөрнә е – уны ы өлөшләтә Совет яғында була. Мәркәз Шура, быға ҡарамаҫтан, декабргә саҡырырға билдәләгән дөйөм Башҡорт ҡоролтайын йыйнарға аман әҙерлек күрә.

Власть Советтар ҡулына күсеү менән Мәркәз Шура, үҙенең партиялар көрәшенә ҡарашын белдереп, синыфтар көрәше мәлендә башҡорт халҡының тотҡан юлын күр әтеп, 1-се анлы фарманын сығара. Ул фарманды, Мәркәз Шураның Октябрь революция ы әм синфи көрәштәргә ҡарашын асып бирә торған бер тарихи документ булғанлыҡтан, бында ҡыҫҡаса бул а ла күсереп китеүҙе тейеш таптым.

***Дөйөм башҡорт халҡына,***
***Төбәк шураларға***

Фарман №1[50]

*Ошо 1917 йылдың 25 октябрендә Рәсәйҙең Ваҡытлы хөкүмәте большевиктар партия ы тарафынан төшөрөлөү айҡанлы, Рәсәйҙә үҙ-ара уғыш китте. Большевиктар, Ваҡытлы хөкүмәтте тарҡатып, Петроград, Мәскәү, Ҡазан, Харьков, Саратов, амар, Өфө үә башҡа эске Рәсәй гөбөрнәләрен үҙ ҡулдарына алдылар. Күп илдәр большевиктарҙы танымай. Хәҙер үҙ-ара уғыш китте. Рәсәйҙә кем баш, кем хужа булырын белер хәл юҡ. Большевиктар бөтә ерҙе крәҫтиәндәргә биреүҙе белдерҙеләр. Шуның арҡа ында Башҡортостандағы ер еҙ халыҡтар менән башҡорттар ара ында талаш сығырға мөмкин. Хәҙер талауҙар, үлтереүҙәр хөкөм өрә, суд юҡ, яза юҡ. Бигерәк тә былар башҡорт халҡын әм законға, тәртипкә буй оноп өйрәнгән халыҡтың ҡанын ҡыҙҙыра. Фронттан ғәскәрҙәр үҙ ихтыяры менән ҡайта башланы. Большевиктар быға үҙҙәре юл ҡуя. Дөйөм халыҡ тарафынан танылған бер хөкүмәт булмауы, Ваҡытлы хөкүмәттең большевиктарға ҡарата йомшаҡлығы менән иғтибары төшкән Керенский хөкүмәте лә, башҡорттарға йүнле эшләргә ирек бирмәй, өйәҙ ым ылыҫ[51] идараларын тамам ҡаҡшатты.*

*Был хәлдән нисек ҡотолорға? Ере, мөлкәте булған әр халыҡ үҙ ҡайғы ын үҙе ҡарау, ерен, малын үҙе аҡлау мө имдер. Башҡортостан өсөн дә идараны үҙ ҡулына алыу тейеш. Большевиктар үҙҙәре, бөтә милләттәргә ирек, телә әләр, автономия алырҙар, телә әләр, Рәсәйҙән бөтөнләй айырылырҙар, ти. Украина, Бессарабия әм Дағстан мосолмандары үҙ алдына йәшәгән бөтә идараларҙы үҙ ҡулына ала башланылар. Башҡорт халҡы дөйөм съезда ла: “Мәмләкәттә тәртип еҙлек кит ә, идараны үҙ ҡулына алыр”, – тип ҡарарҙар сығарғайны. Хәҙер Башҡорт Шура ы, ис кемгә буй онмай, Башҡортостанды айырым идара итеү юлына керешә. Өфө, амар гөбөрнәләрендә башҡорттар татар әм урыҫтар менән бергә ерегеп ултыра. Шуның өсөн ул ерҙәрҙә Башҡортостан автономия ын хәҙерҙән иғлан итеп булмай. Ырымбур гөбөрнә ендәге башҡорттарҙың фекере асыҡ билдәле, бында автономияны иғлан итергә әҙерлек бара. Хәҙер Башҡортостан икегә бүленә. Өфө яҡтары большевик ҡулында, Ырымбур яғында казактар большевиктарҙы танымай. Шул сәбәпле Башҡортостандың уғыш аҫтында ҡалыуы мөмкин. Башҡорттар бер-бере менән уғышырға тейеш түгел, сөнки башҡорт большевик та, меньшевик та түгел. Ул – башҡорт. уң, кем яғында? Бер кем яғында ла түгел, үҙебеҙҙең яҡта. Беҙҙең был талашлы-ыҙғышлы эштәрҙә эшебеҙ юҡ. Беҙҙең эшебеҙ – үҙ мәмләкәтебеҙҙең тыныслығын аҡлау. Ике миллионлы башҡорт халҡы, юҡ-бар сәйәси уйындарға ҡыҫылып, уйынсыҡ булы-*

*уы мөмкин түгел. Беҙҙең сәйәсәтебеҙ – фәҡәт тупраҡлы мөхтәриәт алыу. Шуның өсөн еҙҙең Мәркәз Шурағыҙ Киевтағы милләттәр съезына инде. Унда ике вәкил ебәрҙе. Съезға кереү менән башҡорт мөхтәриәтен тормошҡа ҡуйырға бер-бере енә алмаш ярҙам итәсәктәр.*

*Мәркәз Шура еҙҙең тапшырған эштәрегеҙҙе атҡарыу юлында Керенский хөкүмәтенә барып ҡараны, ләкин бер ҙә эш сыҡманы. Башҡорт идараларын земствонан айырыу тура ында саралар күреп ҡараны, бер ҙә эш сыҡманы. Ерҙәр мәсьәлә ен хәл итеү өсөн Черновҡа барып ҡаралды, ул да булманы. Сөнки Керенский хөкүмәте милләттәрҙең мәсьәлә ен хәл итеүҙе Учредительный собраниеға ҡалдырыуҙы өйә ине. Керенский хөкүмәте беҙҙең теләктәрҙе атҡарырға ашыҡма а ла, беҙ халҡыбыҙҙы ой-оштороп бөттөк.*

*Шуның өсөн башҡорттар әм башҡорт алдаттары дөйөм Рәсәй сәйәсәтендә төрлө милләттәр менән бергә булғанда ла, Керенский хөкүмәтен аяҡҡа баҫтырып тороу ихтималы юҡ. Бәлки, бөтә милләттәрҙең хоҡуғын таныған, ныҡлы тәртип-низам ҡылыуға көсө еткән хөкүмәт төҙөү өсөн генә тороу тейештер. Хәҙер большевиктар бөтә халыҡтарға ирек бирә, ләкин тәртип еҙлек менән бергә бирәләр. Башҡорт халҡы быҙдай бүләкте ҡабул итергә тейеш түгел. Татар ҡәрҙәштәребеҙ ҙә, башҡорттар менән бергә эшкә тотоноп, мөхтәриәт алыу юлында эшләргә тейеш. Бөтә урындарҙағы хәлдәрҙән ашығыс рәүештә Мәркәз Шураға хәбәр биреп торорға тейештәр. Учредительный собраниеға айлау эштәре үҙ юлы менән бара. Хәҙер Мәркәз Шура төрлө ерҙәргә таралған башҡорт ғәскәрҙәрен ҡайтарыу өсөн вәкилдәр ебәрҙе. Ил ара ындағы бөтә ҡорал иҫәпкә алынып башҡарып, төбәк шуралар ҡарамағына тапшырылырға тейеш. әр эште Мәркәз Шура менән аңлашып, әр көндө Мәркәз Шураның бойороғон көтөп торорға тейешбеҙ.*

*Башҡорт Шура ының рәйесе Манатов,*
*урынбаҫары Зәкир Йәлитов.*

*Ағзалар:*
*Фатих Дәүләтшин, Х. Әмиров, Ғ. Ғәйетбаев,*
*Муса Смаҡов, Ғ. Хәсәнов, Илдархан Мутин.*
*Яҙыусы Ш. Бәпес.*

*Ырымбур, Каруан арай, 1917 йыл, 11 ноябрь.*

Башҡорт Мәркәз Шура ы, баштан алған юлы менән барып, башҡорт ерҙәрен аҡлау, милли капитал тыуҙырыу, буржуаз демократия нигеҙенә ҡоролған милли хөкүмәт төҙөү эшен дауам итергә тырыша. Башҡорттоң хәлле ерекмәндәре әм ауылдарҙа эш башында йөрөгән руханиҙар өсөн милек мәсьәлә е мөҡәддәс бер эш анала. Улар, Мәркәз Шураның шул нигеҙҙә ҡора башлаған милли ойошмаларының хеҙмәтселәре, шуның менән бөтә башҡорт халҡының теләктәре үтәлә, тип уйлайҙар. Ләкин мәсьәлә урыны менән икенсе төҫ ала. Ҡай ы бер ылыҫ әм ауылдарҙа фронттан ҡайтҡан йәштәр әм фәҡир башҡорт ерекмәндәре ара ында большевиктар партия ына тартылыу, синфи айырмалыҡтарҙың башланыуы күренә.

Шулай ҙа күпселегe большевиктарҙың идеология ын, йәнә е, помещиктарҙың, алпауыттарҙың барып утарын талап, ҡаралтыларын алыу, ут төртөп яндырыу тип кенә ҡабул итәләр. Октябрь революция ы булғас та, унан уң да башҡорттар ара - ында артыҡ синфи айырмалыҡтар күренмәй.

Шул хәл эсендә Башҡорт Мәркәз Шура ы әр ерҙә айлауҙар уҙғарып, дөйөм башҡорт ҡоролтайына әҙерлек күрә. Үҙенең 1-се анлы фарманында күр әткәнсә, дөйөм Башҡорт ҡоролтайы үткәргәнсе үк Башҡортостанды автономиялы бер хөкүмәт итеп иғлан итергә йыйына.

Урындарҙа айлау эштәре бөткәс, бигерәк тә Мәркәз Шура Киевтағы Милләттәр союзына ағза булып кергәс, 15 ноябрҙә башҡорт илен автономиялы бер

хөкүмәт итеп иғлан итәләр. Шул айҡанлы Мәркәз Шура рәйесе Шәриф Манатов Украина үә башҡа өлкәләргә телеграмма ебәрә, башҡорттарҙың автономиялы бер хөкүмәт булып эшкә керешеүҙәрен белдерә. Ленинға уғылған телеграмма, телеграфта Ырымбур власы кешеләре тарафынан тотолоп, тапшырылмай. Был хәбәр Ырымбур гөбөрнә эшмәкәрҙәренә әм татарҙарҙың Мосолман виләйәт шура ына ишетелеп, башҡорттарҙы: “Әле Дутов, әле Ленин менән эш итергә тырышҡан халыҡ”, – тип ғәйепләргә тырышалар.

Башҡорт автономия ы иғлан ителгәс, 21 ноябрҙә Ырымбур урыҫ гәзитендә Керенский хөкүмәте тарафынан ҡуйылған гөбөрнә комиссары Архангельскийҙың бер иғланы баҫылып сыға. Унда былай тиелә: *“Башҡорт Мәркәз Шура ының рәйесе Шәриф Манатов Өфө, Ырымбур, амар әм Пермь гөбөрнәләрендә йәшәгән башҡорттарҙы Рәсәй йөм үриәтенең мөхтәри өлөшө итеп иғлан итә. Был турала төрлө ҡалаларға телеграммалар биргән. Ырымбур халҡына белдерәм: Ырымбур ҡала ының мосолман халҡы Башҡорт Мәркәз Шура ының эшләгән эшенә ис риза түгел, быға уларҙың ҡатнашлығы юҡ. Мосолман милли шура ы әм уның Хәрби комитеты тупраҡлы мөхтәриәт иғлан итеүгә ҡушылмайҙар. Улар тик милли-мәҙәни мөхтәриәт алыу яғында. Был турала Мосолман виләйәт шура ы әм уның Хәрби комитеты вәкилдәре хәбәр иттеләр миңә. Шул рәүештә Ырымбур ҡала ының мосолман өлөшө әм уға юлбашсылыҡ иткән Виләйәт милли шура ы башҡорттарҙың хөкүмәттән айырылып эш итеүҙәренә әм шул йөмләнән Ленинға телеграмма уғыуҙарына яман күҙ менән ҡарай.*

*Ырымбур гөбөрнә комиссары* ***Архангельский”.***

Башҡортостан автономия ы иғлан ителеү менән үк, шул уҡ мәлдә уға ҡаршы татар буржуазия ының Ырымбур Мосолман виләйәт шура ы, уның Хәрби комитеты әм Керенский тарафынан ҡуйылған Ырымбур комиссарҙары көрәш башлай. Ырымбурҙа 8 декабрҙә саҡырылырға тейеш III Ҡоролтайға ҡаршы фекер таратыу, Өфөлә татар буржуазия ы тарафынан ойошторолған Милләт мәжлесенә ҡушылырға димләү ымаҡ эштәр Мосолман виләйәт шура ының көндәлек эшенә әүерелә, хатта Мосолман виләйәт шура ы вәкиле булып килгән Фатих Кәрими, ҡоролтайға килеп: “Башҡорт менән татар айырылырға тейеш түгел. Өфөләге Милләт мәжлесенең ҡарарына ҡушылырға кәрәк. Улар – ҙур, нигеҙле әм иғтибарлы милләт хеҙимдәре. Шулар менән бергә барғанда ғына сәләмәтлек ярына сығырбыҙ, милләт тип сәсебеҙ ағарған”, – тип өгөтләй.

Бына шуның ымаҡ талаштар арҡа ында Башҡорт Мәркәз Шура ына ойоштороу эшен алып барыу эше ауырға төшә. Мәркәз Шураның иҡтисади хәле сик еҙ ҡыҙғаныс була. Бер ерҙән килер килем юҡ. Халыҡ ара ынан иғәнә йыйнау өсөн кешеләр сығарыу, йән башына алынған алымды йыйнау өсөн айырым кешеләр билдәләү ҙә артыҡ сығымдар талап итә. Мәркәз Шура, был хәлдәрҙән ҡотолоу өсөн, йән башына алынған 10 тин алымды (1917 йыл 18 октябрь йыйылышында) 25 тингә еткерергә ҡарар сығара. 10 әм 25 тинләп йыйылған аҡса башҡа ерҙән бер килеме булмаған Мәркәз Шураның иҡтисади яҡтан ниндәй хәлдә булғанлығын күр әтә.

Икенсе яҡтан, Башҡортостан ере икегә айырыла. Өфө яҡтары большевиктар ҡул аҫтында ҡалып, Ырымбур гөбөрнә е атаман Дутов ҡулында була. Был да күп эштә аяҡ сала, автономияны тулы ынса иғлан итеүгә ҡамасаулай”...

Шулай итеп, Ырымбурҙа атаман Дутов диктатура ы, большевиктарға рәхим еҙ унар...

Эшсе Сәхи Ғәйфиҙең ҡала ситендәге ышаныслы бер танышы өйөндә диктатура террорынан боҫоп ятҡан Сәлимйән Мырҙағолатов Башҡорт Мәркәз Шура ы-

ның был 1-се номерлы фарманын бошоноп әм ҡәнәғәт еҙләнеп уҡыны — бөтә Рәсәй күләмендә туҡтау ыҙ йәйелеүсе Советтар хакимиәтенә итәғәтлек белдермәүҙәре, хатта ҡарышып өтөрәйеүҙәре алдағы көндәрҙә башҡорт халҡына ҡан ҡойошло көрәш менән янай ине. Был хәтәр документта, әлбиттә, башҡорт буржуазия ының Коростелев иптәш уҫал тамғалаған идеологы Зәкир Йәлитовтың шауҡымы көслө (ә коммунист Манатов ни ҡараған?!). Артабан да былай бар а...

Сәлимйән түҙмәне, йәшеренгән төйәгенән ҡубынып, ҡаса-боҫа тигәндәй, Каруан арайға йүнәлде. Әхмәтзәкир Йәлитовты ул коридорҙа осратты — ҡайыш портупеялар менән ызбурыйланған ҡораллы ике егеткә хәрбиҙәрсә ҡәтғи тауыш менән бойора. Хәрбиҙәрен йә әт ебәреп, Сәлимйәнгә боролдо:

— Ә ә, килдеңме, большевик шауҡымы? Артыңа ут ҡаптымы, шуны үндертергәме?

— Үҙем дә үндерермен. Тик бына еҙгә ҡабасаҡ зә әр утты...

— ин, мырҙам, нимә уҡалай ың?

— Беренсе номерлы фарманығыҙ...

— Сей елкәңә тейҙеме? Әйҙә, тегендә өйләшәйек.

Коридор осонда боролоп, тар ғына бер аулаҡ бүлмәгә инделәр, көрән ҡара таптары менән сыбарланған яланғас таҡта өҫтәл ҡырына йәпләштеләр.

— Йә, беҙҙең беренсе номерлы фарманға ни булған?

— Үҙегеҙгә мәғлүм: бөтә тирә-яҡ гөбөрнәләрҙә бөтә власть пролетариат ҡулына күсте, Советтар урынлашты; дөрләү ялҡын оҙаҡламай беҙҙе лә ялмап аласаҡ, социалистик революцияның ошо еңеүле хәрәкәтен туҡтатыр көс-ҡеүәт юҡ; атаман Дутов диктатура ы ла бөгөн-иртән серек ситәндәй ауасаҡ; күрәләтә башығыҙҙы пролетариат суҡмары аҫтына ҡуйҙығыҙ! — Мейе енә тынғы бирмәгән борсолоуҙарын бер тынанан түгелдерҙе.

Әхмәтзәкир, башын баҫып байтаҡ уйланып ултырғас, кинәт кенә ораны:

— Ә ин үҙең нимә тәҡдим итә ең?

— Ул фарманығыҙҙы йә әт юҡҡа сығарығыҙ, Совет хакимиәтенең ҡанаты аҫтына инегеҙ. Урындағы большевиктар партия ы ойошма ы менән тығыҙ берҙәмлектә эшләгеҙ.

— Ни өйләй ең, әллә башҡорт түгелме ин?!

— Башҡорт булғаным өсөн әйтәм. Бөтә ҡитға ҡуҙғалғанда, беҙ бер кем яҡлы ла түгел, тип ситтә тороп ҡалып булмай — дөйөм өйөрмә өйөрә барыбыҙҙы ла. Иртәме, уңмы, йәмғиәттең синыфтарға бүленешен танымай әмәлебеҙ юҡ.

— Ваҡытынан элек саҡырған кәкүктең башы ауырта. Беҙҙең Марксыбыҙ ҙа, Лениныбыҙ ҙа юҡ, хәҙергә кәрәкмәй ҙә. Башҡорт Алла ы Тәғәлә ҡушҡан хәлендә йәшәп ята. Синфи бүленеш тигәнегеҙ — эре завод-фабрикалары, ҡеүәтле аграр тармаҡтары шәхси ҡулдарға тупланған, иҡтисади йә әттән үҫешкән, алға киткән йәмғиәттәргә хас күренеш ул. Тап шундай булғаны өсөн дә урыҫ ҡапма-ҡаршы синыфтарға айырылып, аҡ әм ҡыҙыл флагтар аҫтында бер-бере е менән ҡыйыша. Ҡыйыш ын, ҡай ы яғы ең ә лә, урыҫтың йән аны кәмемәҫ, сөнки улар ер сүбеләй бихисап-күмәк. Ә башҡорт йәне миллиардлаған йәнле кешелек донъя ы эсендә ни бары ике милион дана ғына; уларҙы ҡапма-ҡаршы сафтарға теҙеп, үҙ-ара уғыштыр аҡ, бөтөн башҡорт халҡы юҡҡа сығасаҡ. Ырымбур большевиктары беҙҙе тап ана шул юлға тарта.

— Әммә самодержавиены кем тар-мар ҡылды? Большевиктар түгелме? Әллә батша яҡлымы еҙ?

— Башҡорт өсөн ике е лә барыбер.

— Бәй, ни өсөн?!.

— Урыҫ батшалары Башҡортостандың бөтә ер- ыу байлыҡтарын, ер өҫтө әм ер аҫты мәғдәндәрен үҙҙәренә бушлай тейешле, теләгәнсә таларға яраҡлы мал итеп

ҡаранымы – ҡараны. Башҡорт халҡын үҙенең бөтмәç уғыштарында пушка ите итеп ҡулланырға ғына лайыҡлы өн өҙ ҡолдар итеп ананымы – ананы. Ырымбур большевиктары ла батша хәҙрәттәренең шул сикләнмәгән хоҡуҡтарынан ҡолаҡ ҡаҡмаçҡа ҡырҡыша.

– Ә Дутов әфәндегеҙ еҙҙе ҡан диңгеҙенә батырасаҡ, белегеҙ!

– Ярай-ярай, тай, мырҙам! – Йәлитов, ырғып тороп, ишеккә бармаҡ тоçҡап күр әтеп екерҙе. – Ыштан ыҙ малай!

– Кем ыштан ыҙ икәнен әйтеү ҡыйын – икебеҙ ҙә бер йәштә.

– Ошо сәғәттә үк үҙенде бикләтеп ҡуйыр инем, ихлас башҡортлоғонды күреп кисерәм. Бар, аҙашҡан башҡорт бала ы, ауыртмаған яғыңа ят!

Бынан уң Сәлимйән йәшерен еренән сыҡманы; иректәге таныш-белештәре менән, ышаныслы йомошсо он йөрөтөп, күберәген хат аша хәбәрләште. Сөнки Дутов охранка ы большевиктарҙы ауларға нык темеçкенде.

## 7

Ошо декабрь айында дөйөм Башҡорт ҡоролтайы йыйылырға ла төп сәйәси мәсьәләләрҙе уртаға алып тикшерергә тейеш ине; Сәлимйән, йәшеренмәй йәшәп ятмыш йәш коммунист ҡорҙашы Ғабдулла Дәүләтшинға ҡош телендәй яҙыу күндереп, уны шул мө им ҡоролтайҙа ҡатнашырға ла ваҡиғалар йөкмәтке енән үҙен ҡыçҡаса хәбәрдар ҡылырға димләне.

Дөйөм тип аталған был ҡоролтай ашығыс, алдан билдәләнгән ваҡытынан элек йыйылды – оҙаҡламай Петроградта асыласаҡ Учредительный собраниены Башҡортостан автономия ының иғлан ителеү факты алдына ҡуйырға! Икенсенән, гөбөрнәлә бөтә власты үҙ ҡулына алған ҙур ғәскәрле атаман Дутовтың башҡорт мәсьәлә енә ыңғай ҡарауын, автономияға хас дошман Ырымбур большевиктарының, үҙҙәре әйтмешләй, “подполье”ла эшкинмәй боçоп ятыуын, милләттәр мәсьәлә ендә бер төрлө өйләп икенсе төрлө эшләүсән Ленин менән Сталиндың да был арала был яҡтарға ҡулы етмәүен йә әт кенә файҙаланып ҡалырға уйлағандарҙыр, буғай. “Дөйөм Башҡорт ҡоролтайы” тигәндәре – буласаҡ Башҡорт ерле автономия ы сиктәре эсендә йәшәүсе эре милләттәрҙең бөтә енән дә унда күпмелер вәкил ҡатнаша тигән үҙ.

1917 йылдың 8 декабрендә Каруан арайҙа йыйылған был III Ҡоролтайҙа тәүге көндә 194 кеше ҡатнашып, урыçтарҙан – 44, сирмеш (мари), сыуаш әм татарҙарҙан берәр вәкил була. Аҙаҡҡа табан барлығы 223 вәкил йыйыла. Баяғы Кәрим Иҙелғужин ша итлыҡ ҡылыуынса:

“Вәкилдәрҙең күп өлөшө ауыл муллалары, хәлле ерекмән-крәçтиәндәр әм бик аҙы ғына зыялы синыфтан әм фронттан ҡайтҡан алдаттарҙан тора.

Ҡоролтай Ҡөрьән уҡып асыла. Көн тәртибенә ҡуйылған мәсьәләләр ошоларҙан ғибәрәт:

1. Мәркәз Шураның доклады.
2. Башҡорт автономия ын тәсдиҡлау.
3. Идара ойоштороу.
4. Ер, мәғариф әм ғәскәр мәсьәләләре.
5. Ситтәр менән эш итеү әм башҡалар.

Ҡоролтай асылғас та, Әхмәтзәкир Йәлитов үҙ ала: *“Автономияның төҙөлөшө, автономия булған өлкәләр, бер милләт нисә процентта булырға тейеш?” тигән орауҙарҙы ҡуйып, ул үҙе үк яуап бирә: “Башҡортостандың бәләкәй ыҙығында башҡорттар 60 процент тәшкил итә, шуның өсөн беҙ уны Башҡортостан тип иçәпләйбеҙ. Борон башҡорттарҙың тарихын уҡыу менән генә уларҙың ниндәй халыҡ икәнен белә инем. Хәҙер ул көн дә күҙ алдымда. Мин хәҙер бер яғымда Мөхәммәт Ғәлиәссәләмдең*

*күләгә ен әм бер яғымда Сыңғыҙ күләгә ен күргәндәй булып торам. Большевиктар хөкүмәте хәҙер өҫкә сыҡты. Улар бөтә милләттәргә ирекле юл бирҙе. Ләкин казачийҙар уларҙы танымайҙар".*

Ҡоролтай көн үҙәгенә ҡуйылған мәсьәләләрҙе тикшерергә керешә. Ырымбур комиссары Архангельский, Ҡоролтайға килеп, бер кемдең рөхсәтенән башҡа йыйылған Башҡорт Ҡоролтайын ҡыуырға тырыш а ла, вәкилдәрҙең ҡаршы тороуҙары менән эш дауам ителә. Мәркәз Шура етәксе енең докладын тыңлағандан уң, Ҡоролтай "Башҡортостан тупраҡлы мөхтәриәтен ойоштороу, урындағы төбәк шуралар менән етәкселек итеү буйынса күргән саралары бөтә е урынлы әм ҡәнәғәтләнерлек эшләнгән" тигән ҡарар сығара.

Шулай уҡ Мәркәз Шура ағзалары, Ҡоролтай саҡырылыуын көтмәйенсә, "Башҡортостан автономия ын иғлан итеүҙәрен, уны хәҙерҙән тормошҡа ашыра башлауҙарының бик ваҡытлы эшләнгәнлеген" әйтеп үтәләр. Ойоштороу мәсьәлә ендә Башҡортостандың сиктәрен билдәләү ҙә ҡарала. Бында Мәркәз Шура тарафынан ике төрлө проект күр әтелә. Бере е — Бәләкәй проект, икенсе е — Ҙур проект. Бәләкәй проектҡа Ырымбур, амар, Пермь әм Өфө гөбөрнәләренең Эстәрле өйәҙендәге башҡорттар керә. Ҙур проектҡа Ырымбур, амар, Өфө, Пермь гөбөрнә енән, Екатеринбург, Шадрин, Красноуфим башҡорт, мишәр, татарҙары керә. Ҡоролтайҙың көн тәртибендә яткан мәсьәләләр, айырым комиссияларҙа тикшереү өсөн, әр бер мәсьәлә тура ында доклад тыңланып, фекер алышыуҙар булғандан аҙаҡ, комиссияларҙа тикшереүгә бирелә.

Иң бәхәсле мәсьәләләрҙең бере е ер мәсьәлә е була. Йәштәр әм аҙ ерле башҡорт вәкилдәре ерҙең тигеҙ бүленеүен әм ер атыуҙың ҡырҡа туҡтатылыуын даулай. Шул рәүешле күп ерле әм аҙ ерле вәкилдәр ара ында байтаҡ ҡына үҙ көрәштереүҙәр булғандан аҙаҡ, ер мәсьәлә е лә комиссия тикшереүенә тапшырыла.

**Ҡоролтай ҡарарҙарынан:**

15 ноябрҙә Мәркәз Башҡорт Шура ы тарафынан иғлан ителгән Башҡортостан милли әм тупраҡлы мөхтәриәтен Ҡоролтай бер ауыҙҙан тәсдиҡ итә (20 декабрҙә 18-се мәжлестә тәсдиҡ ителә).

Рәсәйҙәге Мәркәз хөкүмәте тура ында:

1. Рәсәй йөм үриәте – төрлө милләт окраиналарҙың иттифағынан (Союз федерация ынан) ғибәрәт бер мәмләкәт. Башҡортостан шуның автономиялы бер өлөшө булыр.

2. Рәсәй Федерация ына ингән автономиялы өлкәләр сәйәси әм башҡа хоҡуҡтарында бер тигеҙ булалар.

3. Рәсәй Союз идара ы әр бер автономиялы өлкәләрҙең бер тигеҙ анда айланып ҡуйылған Вәкилдәр палата ынан (Союз палата ынан) әм шул милләттәрҙең союзы нигеҙенә ҡоролған Союз судынан ғибәрәт булыр. Союз хөкүмәте төҙөлөүҙә ( ан яғынан күпме артыҡ бул а ла) бер ваҡыт өстән артыҡ урын бирелмәҫ. Идара шул Союздың вәкилдәре тарафынан айланған президент ҡулында булыр...

Ҡоролтайға вәкил булып айланған, ғөмүмән башҡорт автономия ына ҡаршы хәрәкәт ойоштороусылар татарҙарҙың Ырымбур Хәрби комитеты әм Өфөнән барған өлкәселәр ойошма ында була.

Хәрби комитет рәйесе Сәхипгәрәй Ғәбделбәширов әм секретары Сәғди Мостафин 1917 йылдың 18 декабрендә Ҡоролтайға ошо ғаризаны бирә:

*"Ҡоролтайҙың тотҡан юлына әм Башҡортостан хөкүмәтенең башында ултырыусыларға ҡаршылыҡ күр әтеп, 12 сәғәт эсендә түбәндәге орауға яуап биреләүен теләйбеҙ.*

1. Башҡортостан исеме менән саҡырылған башҡорттарҙан башҡа татар,

типтәр, сирмеш  әм урыҫтарҙың вәкилдәренә халыҡ тарафынан тапшырылған йомоштарын атҡарырға съездың башында ултырыусылар ирек бирмәнеләр.

2. Съезды үҙ ҡулдарына алып  әм башҡорт ҡуҙғалышын үҙҙәренә ҡаратып, Башҡортостанда бер милләттең хакимлыҡ итеүен, башҡорттарҙың мөҡәддәс тип танылған ойошмаларын хурлыҡлайбыҙ.

3. Эске Рәсәй  әм Себер мосолмандарының органдары булған Милләт мәжлесен, шулай уҡ мосолман ғәскәрҙәре тарафынан  айланып ҡуйылған Мосолман Хәрби шура ын хуплайбыҙ.

Был талаптар ҡабул ҡылынмағанда яуаплылыҡты ҡаршы килеүселәр өҫтөндә ҡалдырабыҙ"...

Сәлимйән, әлбиттә, ошо шаулы-даулы, шул уҡ ваҡытта тарихи ҙур ә әмиәтле йыйындың ултырыштарына бара алманы, сөнки ҡалала Дутовтың йәшерен хеҙмәт (охранка) темеҫкендәре ҡасып-боҫҡан большевиктарҙың эҙҙәренән унар эттәреләй еҫкәнеп, эләккәндәрен атып йөрөр мәл ине. Шулай ҙа ул үҙенең кешеләре аша ваҡиғалар шаңдауында ҡайнашты. Бер ҡараңғы төндә уның бүлмә тәҙрә е  аҡ ҡына сиртелде лә асыҡ тындыҡтан ҡағыҙ төргәге төштө — күптән сәмләнеп көтөлгән, иректәге йәш коммунист Ғабдулла Дәүләтшин атҡарған сәләм ине:

*"Хөрмәтле өлкән арҡадаш, Ҡоролтай ваҡиғаларынан ҡыҫҡаса хитапнамә. Үҙең белгән башҡаларға ла ә әмиәтле булыр тип, урыҫса сыйғыслайым.*

Артабан айырым дәфтәрҙә — ваҡиғалар шаңдауы:

Курултай работал восемь дней, с 8 по 20 декабря 1917 года в здании Караван-сарая.

Курултай прошел оживленно, с большим подъемом. В нем хотя участвовали все слои населения, даже представители пролетарской интеллигенции, верившие в демократичность этого движения, но абсолютное большинство состояло из представителей имущего класса и руководящую роль в Курултае играло большинство, состоящее из феодалов, баев, духовенства, офицерства и буржуазно-национальной интеллигенции...

Были приглашены в качестве гостей известный татарский журналист, редактор газеты "Вакт" и представитель Оренбургского губернского Мусульманского шуро Фатих Каримов, который выступил против башкирской автономии. Он в слезах заявлял, что "нация расколится, в отдельности мы погибнем".

От имени Оренбургского казачества и казачьего Войскового Круга и "правительства" поздравил Курултай А. Богданов, высказавший большую речь.

Поздравляли Курултай и представители русского и украинского кулачества, Алаш-Орды и т.д.

О провозглашении автономии сделал доклад Ахметзакир Ялиди и представил проект автономии на утверждение Курултая.

Известный татарский писатель Галимзян Ибрагимов, приехавший как делегат от имени "Миллят Маджлеси" ("национальное собрание", которое в это время происходило в Уфе) выступил в основном в защиту точки зрения Ф. Каримова в национальном вопросе, но чтобы не разъединиться с башкирами, предложил от имени "Миллят Маджлеси" проект штата "Идель – Урал" (Урало-Волжская республика), составленный и принятый "Миллят Маджлеси" под влиянием татарских левых эсеров и меньшевиков, чтобы вводя в него все нации, отгородиться от Советской России и спасти частной собственности богатых слоев; призывал башкирских депутатов присоединиться к этому проекту.

Я, выступая, говорил об отдельной народно-демократической Башкирской республике, но мне очень трудно было говорить – З. Ялиди беспрерывно звонками мешал мне высказать свое мнение, делая замечания, что я задеваю личность Ф. Карими и т.д... Например: о социализации земли – я сказал, что не надо бояться социализации, никто не будет трогать, отнимать у башкир их земель (потому что так пугали народ), при социализме все будут равными, не будет помещиков и бедных, батраков; в газете “Башкорд” это писано очень сокращенно, схематично – “пока не будет социализации на всем Земном шаре, никто не имеет права делить башкирские земли”. В газете “Вакт” и др. буржуазных газетах о моем выступлении ничего не было печатано.

Я хотя и участвовал в Курултае в качестве гостя, с совещательным голосом, но работал в комиссии Курултая по народному просвещению в качестве ее секретаря (председателем был Муллазян Халиков, членами: Н. Тагиров, Багбестан[52] Ханым, В. Габидов и другие, фамилии которых не помню).

Активное участие принимал на Курултае вам известный талантливый поэт башкирского народа, мой друг Шахи-Задэ Бабич. На торжественном многолюдном вечере, посвященном Курултаю, он с огромным успехом прочел свое знаменитое стихотворение, посвященное Курултаю... Здесь были сыновья и известного башкирского черносотенного ишана (“святого”) Курбангалиева, которые поверх военных мундиров (они были царскими офицерами) надели елян (чапан), а на голову чалму. Один из них во время перерыва перед всей публикой подарил Ялидову и Ш. Манатову царские сторублевые бумажки...

Напоследок в Курултае был избран предпарламент из 22 членов (своего рода временное правительство) в нижеслудующем составе: Шариф Манатов, Закир Ялидов, Мирасов Сагит, Илдархан Мутин, Аллабирде Ягафаров, Хабибулла Габитов, Юныс Бикбов, Нурый Тагиров, Хажиахмет Рамиев, Муса Смаков, Галиахмет Гаитбаев, Риза Фахритдинов, Харис Юмагулов, Халик Амиров, Госман Токымбятов, Г. Идельбаев, Гумер Куватов, Аксулпанов (полковник), Гимран Магазов, Искандяр Султанов, Г. Фахритдинов, Гайнулла Гифранов.

Кандидаты: Гани Табизов, Шакиръян Кылысбаев, Габдулла Адигамов.

Между прочим, в Курултае возник спор между молодыми делегатами и стариками по земельному вопросу и насчет выборов, который быстро был улажен.

Надо сказать, на этот раз Курултай принял частично вполне демократичные постановления по земельному вопросу, а именно параграфы 7,8,11, в которых говорится, что земли разделяются прежде всего между безземельным, малоземельным населением, независимо от их пола, возраста, национальности и вероисповедения; оставшиеся после разделения излишки земли остаются в фонде земельных запасов Башкортостана; правом пользования землей обладает каждый гражданин, независимо от его пола, возраста, вероисповедения, национальности и независимо от того, издавно живет он на данной территории или является пришлым (припущенником)”...

“Дә-әә, быны ы яҡшы – сәйәси аң айлап түгел, көнләп керә халҡыбыҙға”,– тип ҡәнәғәтләнеп уйланы Сәлимйән. Шулай ҙа, инанған коммунист булараҡ, хәбәрҙең барлыҡ йөкмәтке енән үҙенең партия ы өсөн күңел еҙерәк төп өҙөмтәгә килде: “Тимәк, ваҡыт беҙҙең йоҡлап ятҡанды көтмәй – буржуаз-милли автономия де-факто пәйҙә булды алдыбыҙҙа. Ни хәл итә ең, быбның менән ваҡытлыса килешмәй мөмкин түгел, сөнки, ит юғында үпкә лә тан ыҡ, ти халыҡ. Күп тә үтмәҫ, беҙ был буржуаз автономия локомотивын коммунистик рельскә күсерербеҙ, әммә ис тә, Петроградтағылай, ҡоралды көс ҡулланып түгел, ә парламент алыштары аша шөйлә тыныс юл менән; сөнки бында дөйөм Рәсәйҙең Октябрь

түңкәрелеше ҡулай ыҙ – шарттар башҡа. Башҡорт халҡының иҙемләүе, сәйәси тойғо о көслө; әгәр аҡтыҡ сиктәргә бәрелмәй- уғылмай, халыҡ ара ында ең ыҙғанып дөрөҫ сәйәсәт үткәр әк, ул үҙенән-үҙе коммунизм ҡояшына үреләсәк, буржуаз юлбашсыларын да елкеп ташлаясаҡ иңенән. Бының өсөн беҙгә, коммунистарға, массалар ара ында коммунизм идеяларын таратыуҙы киң йәйелдерергә, ысын башҡорт коммунистарын күпләп өлгөртөргә кәрәк!”

Хитапнамә аҙағында Ғ. Дәүләтшиндың ыҫпай ыҙылышлы матур ғәрәп хәрефтәре менән өҫтәлгәнен диҡҡәтләнеп уҡыны:

“Ҡоролтайҙың түрендә ҡатнашҡан мөғәллимә Бағбостан ханым, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының ысынлап та гөлбаҡса ы, аҫыл сәскә е рәүешендә ғәләмебеҙҙе мәғрифәт нурына ҡойондороп балҡыны. әм мин бына ни уйланым: тыуасаҡ Совет Башҡортостанының мәғариф халыҡ комиссары булырҙай бөйөк ғалиә был!

Әйтелгәндәргә өҫтәп, дуҫым Ша изада Бәпестең өҫтәрәк телгә алынған аҫылынйы шиғырын күсереп бирмәйенсә хәлем юҡ:

## *Олуғ шатлыҡ*

*(Башҡортостан мөхтәриәте иғлан ителеү әм Каруан арай ҡулыбыҙға алыныу мөнәсәбәте илә)*

*Яңғырап, шаулап сыҡҡан шатлыҡ йырын*
*Фәрештәләр өйөнөп тыңла ын.*
*Шатландырҙың, Тәңрем, ибеп нурың,*
*Башҡортостан халыҡ донъя ын.*

*Ябраил мәләк, елпеп ап-аҡ ҡанат,*
*Осоп йөрө өн Башҡортостанда.*
*Хәбәр ит ен тиеп: “Булдың азат!*
*Сыҡтың йәмле, гөллө бостанға”.*

*Азат булды ғәзиз Каруан арай,*
*Азат булды барлыҡ ерҙәрең...*
*Йырлап ебәр өйөнөп, уйнап ҡурай,*
*Сыҡ ын тиҙерәк шатлыҡ йырҙарың.*

*Теләктәрең алға килүб тора,*
*Азатлыҡҡа ошбу ғәләмәт.*
*Инүб тора “дәүләт”, ҡунуб тора,*
*Киләсәгең яҡты, сәләмәт...*

*“Бәхет ҡыҙы” матур йөҙөн асуб,*
*иңә табан көлөп боролдо...*
*Шатлан, уйна, икер яр ып-яр ып!*
*Күпме шатлан аң да урынлы...*

*Үләм... Ташам... Тормайым, күккә ашам...*
*Үкенмәйем инде үл әм дә...*
*Үкенмәйем инде тыуған йортҡа*
*Күкдин ҡарап көлөп тор ам да...*

Ҡоролтайҙан ҡала яңылыҡтар шул: дуҫым Бәпес тырышлығы менән башҡорт зыялы йәштәренең “Тулҡын” ойошма ы тыуҙы, үҙенең шиғри тулҡындарын Башҡортостан киңлектәренә йәйелдереп ебәрҙе. Ойошма идаралығына ағза итеп

(үҙем юҡта Ш. Бәпес тәҡдиме менән) мине лә айлағандар. Йәштәрҙең сәйәси тормошондағы бик мө им ваҡиға анап, Ша изада Бәпес яҙған иғланнамәнең “Башҡорт” (1918, 5 ғинуар) гәзитендә баҫма ынең киҫенте ен теркәйем (беҙҙең партия эшендә лә, бәлки, кәрәге тейер):

## “Дулҡын” оешмасы

*(мө им иғлан)*

1917 ел 18 декабрда, 3-нче Башҡортостан Ҡорылтаена әр тарафтан килгән яшь фикерле вәкилләр әм Башҡорт Мәркәз Шурасында эшләүче яшьләр әм бәғзе яшь мөғәллимләр үз-ара жыйналышып бик мө им, бик матур бер маҡсатҡа бисмилла әйтеп нигез ташы салып киттеләр.

Улдыр кем:

“Башҡортостан яшьләре берлеге”.

Соңғы жыелышта ҡушылған исеме белән әйтсәк:

“Дулҡын” оешмасы.

“Дулҡын” оешмасының күзәтә торған маҡсады, әлбәттә, әрбер аңлы яшьләргә мәғлүм. Чөнки ул маҡсадлар ихтыярсыз әр яшь кешенең күңелендә дулҡынлана. “Дулҡын” оешмасы көчләнеп чыҡҡан бер нәрсә булмаенча, яшьләрнең күңел дулҡынынннан хасил булған табиғый бер оешмадыр.

“Дулҡын”ның алға алған маҡсадлары филжөмлә шуннан ғыйбарәт: Башҡортостанға яшь фикер, матур аң тарату, әр төрлө ҡара фикер вә хөрриәт микрублары, ҡара көчләр белән көрәшү, таралған яшьләрне оештыру, милли тел, милли әдәбиятның әм аның хадимләренә мөхәббәт иттерү, күмелгән хазиналарын аҡтарыб чығару, Башҡортостан халыҡ әдәбиятын жыю, ҡаләм әдәбиәтенең әр төрен күбәйтергә тырышу, оешма исеменнән әдәби журнал вә газеталар нәшер итү, Башҡортостанның жыр, көй әм музыкасын тәрәҡҡый иттерү, әр жирдә милли кичәләр ясау өчен әвәскәр труппалар вөжүдкә китерү, әр төрле әдәби юллар белән яшьләр йөрәгенә рух, ямь бирү, үлгән, тупасланған, туңған хаятны жанландыру, нәфисләү, бизәкләү, яшь талантларға, әдәби көчләргә юл күрсәтү, ярдәм итү, бу көнгә ҡадәр ҡара көчләр тәсәллыты[53] астында ҡараңғы тормышта изелгән ханым вә туташларыбызны ағарту, аларның яҡты, азат яшәүләренә тырышу.

Ҡысҡасы, Башҡортостан яшьләренең йөрәк вә рухларын тәрбия әм Башҡортостанда тел-әдәбиятҡа вә сәнаиғ нәфисәгә хезмәттер.

Икенче тәғбир белән:

Тигәнәк, әрекмән, аҡсырғаҡлар, шайтан таяғы, эт эчәгесеннән вә маәшбә әләрдән[54] ғыйбарәт баҡчабызны әрчеп гөлләндерү, чәчәкләндерү, әр төрле хашаратлар вә уҡралардан тазартып былбыл вә күбәләкләргә зәмин хәзерләүдер.

Менә шундый бөек, матур маҡсадларға терәтеп төзелгән бу оешманың барлыҡ истиҡбалы, барлыҡ өмиде, әлбәттә, яшьләрдә генә.

Шуңа күрә оешманы хәзердән ич ҡаҡшамый торған нигезгә утыртыу өчен дулҡынны бөтен Башҡортостанға жәйеп, яшьләрне дулҡынландыру өчен озаҡламастан, Уфа яки Оренбургта ғаят тантаналы съезды ясау лазым[55] дип ҡарар бирелде.

Хәзер төзелгән “Дулҡын” оешмасы баш оешма саналып, әр авыл, әр шә әрдә шөғбәләре[56] ачылырға тиештер. Шөғбәләр дә шулай уҡ “Дулҡын” дип аталыр. Илдәге дулҡынлар әр нәрсәдән бигерәк ҡара көч, ҡара гру [57] фирҡаләр белән көрәшүне, әдәбият вә сәнаеғ нәфисәнең ансат вә тиз азым[58] ителүенең чараларына керешүне иң беренче хезмәт вә маҡсад итеп тотарға тиешләр.

Хәзергә “Дулҡын” оешмасының башҡарма әйәтенә сайланған кешеләр барлығы 9 кешедер. Устав вә төзү өчен махсус комиссия төзелде. Оешмаға ағза итеп язылу хаҡы елына алты сомдыр.

Ошбуның беләң иғлан ҡыламыз: моңа ҡадәр илләрдә төзелгән яшьләр оешмалары бүгеннән иғтибарән үзләрен “Дулҡын” шөғбәсе дип хисаплап, хәбәрләшә башласыннар, бүгеннән башлап ағзалар жыю чарасына керешсеннәр.

Килегез, яшьләр! Килегез! Әдәбиять, сәнаеғ нәфисә сөючеләр! Донъяда милләтнең үз әдәбият вә сәнаеғ нәфисәсеннән дә мөҡаддәс нәрсә юҡлығын белсәгез, “Дулҡын” оешмасына бағланығыз!

Ишетегез! “Дулҡын” нинди мөхәббәтле, нинди сөекле исем!

Яшьләр йөрәгенә нинди мөнасип[59], нинди муафыйҡ[60] исем!

Яшәсен “Дулҡын” оешмасы!

Яшәтегез “Дулҡын”ны! әм дулҡынландырығыз Башҡорт донъясын!

Сөендерегез әдәбият, шиғыр әм моңлар фәрештәсен!

Утырышның Башҡарма ағзалары: **Ш. Бабич, Хәбибулла Ғәбитов, Нуриәғзам Таиров, Ғәйнулла Ғыйрфанов, Ғабдулла Дәүләт, Фәтхи Әхмәдуллин, Вәлирәхман Ғәбитов, Сәхи Рәхмәти.**

Оешманың идарәсе хәзерге Караван Сараенда, Башҡорт Мәркәз Шурасы хозурында.

Хәбәрләшү өчен адрес:

г. Оренбург, Башкирский Областной Совет, для об.-ва “Тулкун”.

Сәлимйән, ойошманың Башҡарма ына ул үҙе яҡшы белгән большевик рухлылар Ғабдулла Дәүләтшин (Ғ. Дәүләт), Фәтхи Әхмәҙуллин, Сәхи Рәхмәтиҙәрҙең дә кереүенән ҡәнәғәтлек кисереп, бөгөнгө ғөмүми Рәсәй мөхитенең азатлыҡ дәрте ҡуҙғалтҡан был йәш тулҡынды Башҡортостан мосолмандары ара ында коммунистик идеялар таратыу ҡоралы рәүешендә файҙаланыу тейешле, тип уйланы.

8

Рәсәйҙең ошо елле-дауыллы йылдарында сәйәси мөхит тигәндәре ваҡыт ағылышы тиҙлегендә үҙгәрә, көтөлмәгән хәлдәр килә алдыңа. Ваҡиғалар сылбырының сыңғырлауын большевиктар атаған “иҙән аҫтында” — йәшерен фатирға бикләнеп тыңлауҙан биҙәрләгән Сәлимйән, ҡаланың үҙәк майҙанында башҡорттарға ҡапма-ҡаршы ҡуйылған ҙур ваҡиға — татар байҙарының, сауҙәгәр әм приказчиктарының алҡышлауында “Ырымбур Мосолман виләйәт шура ы”ның Хәрби комитеты ойошторған мосолман полкына ә ле-Ислам әләме тапшырыу тантана ы буласағын ишетеп, түҙмәй, атлығырға йыйынды. Өҫ-башын ябай татар дворнигыныҡына алмаштырҙы ла, байтаҡтан биреле ҡырынмаған йөҙөнөң дә аҡал-мыйыҡ ҡурпыуҙан шаҡтай үҙгәреүенә шөйлә ҡәнәғәтләнеп, саф ауалы урамға сыҡты.

Майҙанға килеп еткәнендә мәжлестең иң ҡыҙған сағы: күбе енсә татар дворниктарынан, фәсле шәкерттәрҙән, аҡ кәбеҫтәләй салмалы муллаларҙан, хөрриәт тәмен татырға эркелгән ханым әм туташтарҙан хасил тамашасылар теҙеме алдына үркетелгән тәпәшәк кенә ағас мөнбәрҙән офицерҙар әм байғуралар вәғәздәрен өйләп бөткән, Хәрби комитет рәйесе Сәхипгәрәй әфәнде телмәр тота, ә ҡаршылағы майҙан урта ында, шыйыҡ ҡына теҙелеп, оҙаҡ тороп өшөүҙән йәшерен ҡалтыранып, заманынса иҫке-моҫҡо кейемле мосолман полкы алдаттары шаҡырайған. Мөнбәр йәнәшә ендә, еҙ торбаларын ялҡылдатып, ҡаланың ут үндереүселәр команда ының тынлы оркестры хәйерле мөҙҙәтен көтә. Телмәр теҙеме осланып, полкка әләм тапшырыу тантана ы иғлан ҡылынып, башы осонда йәшел туҡыма елберләткән аҡ салмалы, аҡ еләнле имам хәҙрәт тамаҡ ҡырып алға сыҡты, полк теҙеменең урталыҡ тәңгәлендә хәрбиҙәрсә яҡшы кейемле тиҫтәләп ғәскәриҙәре

төркөмөндә көтөп торған полк командиры Ғосманов алдында туҡталды. Имам хәҙрәт ҡулындағы йәшел әләм ҡаршы елгә ҡанатын киреп ялпылдауы әм Ғосманов аҡ бирсәткәле ҡулын күтәреүе ыңғайына хәрби төркөм ауыҙҙары берҙәм әм киң асылып, гөрләтеп тә ебәрҙе:

*Пушка берлән жир селкетеп атарбыз без,*
*Дошманларның баш сөйәген ватарбыз без.*
*Хисабы күп хәсисләрнең[61] ҡаршысында*
*Хисабы аз, ғайрәте күп татарбыз без!*

Шанлы йыр бөтөр-бөтмәҫтән, Сәхипгәрәй әфәнде бейек мөнбәренән тамаҡ ярып өрәнләне:

– Жәмәғәт, иғтибар ҡылыңыз: әле генә жырланған бөйек гимныбызны ижад итүче ғаләмәт мәш үр шағиремез, полкның үзе теләп язылған ғайрәтле йәш суғышчысы Нияз Чишмәле әфәнде нәҡ үзе туп-тура имам хәзрәт ҡулларыннан изгелекле ә ле-Ислам әләмен ҡабул ҡылыб ала! Ура!

– Ур-рааа! – Оран шаңдаулатты майҙан.

Оркестр гөрләтеп тантаналы марш уйнаған арала йәшел әләм ышаныслы ҡулдарға тапшырылды: уны ҡабул ҡылып алған тәбәнәк буйлы шағир Нияз Чишмәле эргә ендәге башҡалар кеүек үк шаҡтай яңы оро шинель, ҡырма бүрек кей ә лә, аҫ яҡтан бик имәнес: аяҡтарында ирнәүҙәре иҫкереп-тетелеп үк бөткән, ҡара умалалы киндер еп менән эре алдырып табанланған аршын башлы урыҫ быйма ы ине; өҫтәүенә, бере енең үксә е дөйә ауыҙылай асылып, олтан итеп алынған йомарлам аламы ҡарыш оҙонлоҡ тышҡа тырпайып сыҡҡан. Тамашасы ир-ат быға иҫе китмәй ҡара а ла (замана ы шундай бит!), аҫыл заттар ҡыҙғаныбыраҡ сырылданы:

– Уй, бахыр ғынам, аяғы туңмый микән?!

– Адәм рәтле киез итек тә табып кидермәгәннәр!

– Әхирәткәйем, шүрәле аяғыдай бит! Андый кәттә аяҡ киемен монда түгел, Мәкәржә йәрминкәсендә дә тапмассың!

– Ҡазанға заказ бирергә кирәк иде!

Ер тетрәтеп уйнаған марш ыңғайына аҙымдарын ҡайсылатырға тырышып, арҡыры баҫып барған шанлы шағир-байраҡсы, аҙымы айын алам олтаны уғата тышҡа сығып, икенсе аяғына уғылыуҙан тышауланғандай өрлөктө; ә шулай ҙа мах бирмәй, саҡ ҡына йылмайҙы ла бер елкеүҙә “кейеҙ итек”тәрен ситкә быраҡтырҙы; сылғауҙары ла ҡуныстарҙа урылып тороп ҡалып, таш урамдың боҙланып шымарған түтә енә ҡыҙарған ялан табандарын тысҡылдата баҫып, оҙон-оҙон аҙымдар менән әләмде алға илтте; уның айын ҡыҙышып гөрләгән еҙ оркестр а әңендә ғәййәр полкты үҙ артынан эйәртте.

– Ур-рааа! Ур-рааа! – Күк күкрәтеп тәбрикләне көр майҙан. Мөнбәрҙең ике ҡанатындағы тик тороуҙан өшөңкөрәгән ябай йәмәғәт аптырап та, оҡланып та өйләнде:

– Вәт әй, салдат дисәң дә – салдат! Чиллә суығында яланаяҡ, исе дә китми, ҡарға тычҡылдата басып бара!

– Автономия диб кәпәренгән надан башҡыртҡа баҡтыртырға кирәк иде моны!

– Безнең татар салдатларыдай түземле салдат юҡ шул ул!

– Яшәсен бер нигә дә бирешмәс, утны-суны кичеп үтәр жиңелмәс татар ғәшкәре! Ур-ра!

Бер нисә башҡорт тауышы ла ишетелде:

– Беҙгә лә кәрәк ине полк!

– Ҡай ы яҡтан икән ул яланаяҡ?

– Эйек тамағындағы Шишмә ауылынан, тиҙәр бит...

Сәлимйәндең ҡылт итеп иҫенә төштө: бынан тиҫтә йылдар элек уның менән бер осорҙа Сәнкем-Биктимер мәҙрәсә ендә тырышып абаҡ алған, ә бер заман алда килеүсе Ша изада Бәпесев менән ҡара-ҡаршы мөнәжәттәр әйтешкән аршин табанлы Нияз шәкерт үҙе бит был – ҡыш көнө лә, өйҙән-өйгә ҡыҙырып, төрлө таҡмаҡтар әйтеп, ҡар өҫтөндә яланаяҡ йөрөр ине...

Оркестр гөрөлтө ө тынды, мөнбәрҙәгеләр төштө. Казармалар тарафына йыраҡлашыусы полк теҙеме артынан бер малай- алдат, шинель салғыйҙарын ярғанаттай ялпылдатып, дәррәү йүгереп килде лә "ғайрәтле"нең быраҡтырған быймаларын яурын баштарына алып, өрлөгә- өрлөгә кире йүгерҙе; йәшел әләм елберләткән шанлы ғәскәр унын менән ҡуша күҙҙән юғалды. Майҙан ығы-зығы ы ла үҙенәнүҙе шинде.

9

Әсе буранлы ҡышҡы кисәләрҙең бере ендә йәшеренеү урынында эшсе Сәхи Ғәйфи үҙе пәйҙә булып, Сәлимйәнгә яңылыҡ – татарҙарҙың Хәрби комитет рәйесе Сәхипгәрәй Ғәбделбәширов әфәнденең сәркәтибе Сәғди Мостафиндан сәләм килтереүен, Сәлимйәнгә уның бик мө им әм ашығыс йомошо барлығын, шул йә эттән күрешергә рөхсәт ораууын күндерҙе.

– Минең бында икәнде ҡайҙан белгән, провокация түгелме?

– ис тә юҡ, ышаныслы. Минең арҡылы элемтәгә керҙеләр.

– Дутов охранка ы бул а ни эшләрбеҙ?

– Дутовтың инде еҙҙәрҙә ҡайғы ы юҡ – күтенә ут ҡапҡан, тиҙәр. Быҙаулыҡ яғынан Ҡыҙыл Армия дөрә, казактарҙың ике полкы ҡыҙылдар яғына сыҡҡан. Сәхипгәрәй әфәнденең йәшел әләмле мосолман полкы ла болғана, сәркәтибенең йомошо, моғайын, шул халәткә бәйлелер. Осрашыуҙың йәшеренлеген аҡлау вәғәҙә ителде.

– Кил ен, алай а. Ә шулай ҙа запас фатирҙы байҡа.

Шул төндә үк Сәхи Ғәйфи үтенеүсене килтереп еткерҙе; Сәғди Мостафиндың йөҙө ҡурҡынып ағарынған, ҡулдары ҡалтырана. Бакти әң, Быҙаулыҡ яғынан ҡыҙылдар етеп килеү сәбәпле, Дутов штабы ҡаланан сығып ҡасҡан, артауыл команда ының да уңғы казактары ашығыс олаға...

– Инде ҡалада ике төп сәйәси көч: башҡыртларның бушҡуыҡ хөкүмәте дә безнең Хәрби комитет хөкөм сөрә, Дутов безне хыянатчыл ташлап тайды; башҡыртларда эшебез юҡ, теләсә ни эшләсеннәр, әммә безнең ич кенә дә ҡызыл тигермән ташынан тартыласы килми; без автономислар түгел, әр жә эттән без ҡызылларға тоғро хезмәт итербез, без алар белән уртаҡ тел табырға әзер. Рәйесебез Ғәбделбәширов әфәнде тап шул хаҡта сезнең, абруйлы мосолман большевигының, аныҡ фикерен белергә ҡушып жибәрде мине. Хәрбиләрчә әйткәндә, аҡ әләмле парламентер ҡылып...

– Вәкәләтлегегеҙ ни менән иҫбатлана?

"Парламентер" гимнастерка ының түш кеҫә енән дүрткә бөкләүле ҡағыҙ сығарып бирҙе; унда ошо Мостафин Сәғди әфәнденең Хәрби комитет исеменән өйләшергә вәкәләтлеге раҫланып, рәйестең ҡултамға ы, мө өрө сәпәлгәйне.

– Хәлегеҙ шәптән түгел, аңлай ығыҙ. Дутов ҡанаты аҫтында төҙөлгән, Дутов арсеналынан ҡоралландырылған полктың кем яҡлы икәне ахмаҡка ла аңлайышлы.

– Ләкин без әле яңа ғына төзелдек, ҡызылларға ҡаршы бер пүлә дә атмадыҡ.

– Өлгөрә алмай ҡалдығыҙ.

– Алай димәгез әле. Бизмән табағына безләрне казак Дутов берлән бергә салмағыҙ.

– Ни айырма?

– Алайса, Каруансарайдағы башҡырт хөкүмәте дә Дутов ҡанаты астында борынлады бит, алар бездән ни яғы белән айырыла?

Сәлимйән көлдө:

– Икегеҙҙең айырма ы – Ер менән Күк ара ы. Каруан арайҙағылар – бер алдаты ла булмаған барлы-юҡлы сәйәси ойошма ғына. Ә еҙ – ҡоралды ғәскәр.

– Алайса, ҡаланы ташлап чығарғамы?

– Ул саҡта еҙ Дутовҡа ярҙамға киткән аналыр ығыҙ. Кәңәш итмәйем. Ҡыҙыл Армия командирҙары алдында ышаныс ҡаҙанығыҙ.

– Ничек итеп? – “Парламентер”, ҡороҡ оған тамағына төкөрөгән саҡ йотоп, маңлайына бөрсөк-бөрсөк ҡалҡҡан тирен усы менән ыпырҙы.

– Ярымайлы йәшел әләмегеҙҙе кисекмәҫтән ураҡ-сүкешле ҡыҙылға алмаштырығыҙ. Түшегеҙгә әм бүркегеҙгә ҡып-ҡыҙыл таҫма тағығыҙ. Ҡыҙылдарға шул ҡиәфәтле делегация ебәреп, тәбриклән ҡаршылағыҙ...

Тап шулай булды ла: Сәлимйән Мырҙағолатов иптәш ярҙамында ҡыҙыл әләмләнгән Ғәбделбәширов иптәш өжүм итеүсе ҡыҙыл ғәскәр башлыҡтары Кобозев Петр Алексеевич (Ырымбур-Турғай өлкә енең ғәҙәттән тыш комиссары), Цвиллинг Самуил Моисеевич (Ырымбур гөбөрнә Ваҡытлы Хәрби-Революцион Советы рәйесе) иптәштәр менән уртаҡ тел табып, татарҙарҙың Мосолман Хәрби комитеты ҡып-ҡыҙыл төҫтәге “Ҡыҙыл Мосолман Хәрби комитеты”на әүерелде, ә әләм йөрөтөүсе яланаяҡлы шағир Нияз Чишмәле хеҙмәт иткән ғәййәр “ҡыҙыл полк” Шанил Ғосманов командирлығында айылмыш йылға ы буйына аҡтарға ҡаршы уғышҡа йүнәлтелде. Каруан арайҙағы “Тулҡын” йәштәр ойошма ы етәкселегенең дә большевиктар тәьҫире аҫтында башҡорт автономиясыларынан айырымланған Ғабдулла Дәүләтшин, Бәхтегәрәй Шәфиев, Сәхи Рәхмәти кеүек бер өлөшө татарҙарҙың баяғы йә әт ҡыҙылланмыш Хәрби комитетына ырнығып, Цвиллинг рәйеслегендәге Ырымбур Хәрби-Революцион Советының милләттәр эше буйынса комиссары Ғәли Шәмиғолов (Башҡортостан автономия ының ҡан дошманы) әм уның тоғро ярҙамсы ы Ба ау Нуриманов етәкселегендә буржуаз башҡорт хөкүмәтен аҫтан киҫеү юҫығында эш йәйелдерҙе. Шулай ҙа тәүге осорҙа урыҫ большевиктары был хөкүмәтте асыҡтан-асыҡ үҙ ҡулдары менән тар-мар ҡылырға әллә баҙманылар, әллә форсат көттөләр.

Ҡала үҙәгендәге билдәле Панкратовтар йортонда урынлашҡан Хәрби-Революцион Советтың яҡты, иркен бүлмә ендә Сәлимйәнде Цвиллинг үҙе ҡабул итте, ҡыҫҡа ғына хәтирәләргә бирелеп, теге саҡта Смольныйҙағы Сталин иптәш бүлмәендә танышыуҙарын иҫкә алдылар. Дутов диктатура ы осорондағы подполье, Башҡортостан хәлдәре әм буржуаз башҡорт хөкүмәте тура ында баш баҫып фекер алышҡас, рәйес ынаулы ҡарашын серҙәшенә күсерҙе:

– Мосолман большевик булараҡ, бөгөнгө башҡорт хәрәкәтен ҡай ылайыраҡ аңлай ығыҙ?

– Милли аңы уянған айырым төбәктәге үҙенә күрә тыныс юл менән башҡарылған буржуаз революция. Уны шундай уҡ тыныс юл менән социалистик революция енергә тейеш.

– Татар патриоттарынан Бор ан Шәрәф, Фатих Кәримов иптәштәр булып киткәйне... Автономиясылар Башҡортостанды Россиянан айырымландырыуға юҫыҡланды, тип еткерҙеләр.

– Башҡорт буржуаз милләтселәренә аҡ ҡараған кеүек үк, ул “патриот”тарға ла шулай ҡарарға кәрәк. Миңә, мәҫәлән, бер факт билдәле: ошо көндәрҙә Каруан арайҙан Ленинға телеграмма уҡҡандар, унда, әгәр үҙебеҙҙең полкты булдырып, эске эштәребеҙ менән үҙаллы шөғөлләнеү мөмкинлеге бирел ә, Советтарҙың юғары хакимиәтен бер үҙ еҙ ҡабул ҡылабыҙ, тип әйтелгән. Айырымланыу мәсьәлә е лә ялған, сөнки баштан уҡ улар Россия эсендәге бер штат булып йәшәү – федера-

лизм яҡлы. Милләт-ара ҡанҡойош булма ын өсөн, башҡорт мәсьәлә ен бик аҡ, түҙемле сисергә кәрәк, минеңсә.

— Беҙ шулай итәбеҙ ҙә. Вәкилдәрен саҡырып, ойоштора башлаған полктарын беҙҙең төп шарттарға яраҡлаштырыу маҡсатында йылы ғына өйләштек, Зәкир Йәлитов әфәнде үҙе килде. Тик еҙ, ысын коммунист булараҡ, яҡшы аңларға тейеш: был — ваҡытлы сара, тактика, сөнки бер территорияла ике хакимиәт йәшәргә тейеш түгел. Минең Силәбенән саҡыртып алған иҫке танышым — милләттәр эше буйынса кәңәшсем Ғәли Шәмиғолов иптәш әйтмешләй, бер ҡаҙанға ике тәкә башы уймай, хе-хе-хе...

— Уны ы хаҡ. Тик был хаҡлыҡ автономияның асылына ғына бәйле: буржуазмы ул, әллә социалистикмы? Социалистик автономия Ғәли Шәмиғолов иптәштең мәҡәленә ярашмай. Шул уҡ Зәкир Йәлитов әфәндене лә, яйлап-майлап, партияға алырбыҙ, социалистик ҡалыпҡа ултыртырбыҙ. Ултырма а, урынына башҡаны — үҙебеҙҙекен ҡуйырбыҙ.

— Поживем — увидим. Әйткәндәй, ул урынға үҙебеҙҙән кемде ҡуйыр инегеҙ?

— Башыма килгәне юҡ. әр хәлдә Ғәли Шәмиғолов түгел. Әммә лайыҡлы инсандар күренгеләй, үҙегеҙ белгән Ғабдулла Дәүләтшин кеүектәр, мәҫәлән.

Цвиллинг дуҫтарса бармаҡ янап көлдө:

— әй, мошенник, үҙегеҙҙең исемде атар ығыҙ, тип көткәйнем!.. Йә, ярай, әлегә йөрөп тороғоҙ. Өйәҙ ҡалағыҙ Орскиға барып, шундағы тарҡау большевиктарҙы әм теләктәштәрҙе бер ҡорға уҡмаштырып, партиябыҙҙың яугир өйәҙ комитетын төҙөп ҡайтығыҙ. Граждандар уғышының әле ҡайнаған сағы — башҡорттарҙан ҡыҙыл гвардия ойоштороуҙы тиҙләтегеҙ. Башҡорт еренә ипкән орлоҡтарыбыҙ яҡшы шыт а, унда еҙ әйткән тыныс юллы социалистик революция ла, социалистик автономия ла булыр!

Бәйләнеште өҙмәҫкә, осрашып торорға үҙ ҡуйышып, иптәштәрсә ҡул ҡыҫышып хушлаштылар.

Сәлимйән Орскиҙа был йөкләмәне уңышлы үтәп, унлап коммунисҡа партия билеттары тапшырып әм уларға алдағы эш бурыстарын тәғәйенләп, үҙенең Үҫәргәнендәге башҡорт ауылдарына тартылды, урындарҙағы “Тулҡын” ойошмаына береккән йәш йөрәктәр ара ында коммунистик идеялар йәйелдереп, киләсәктең милли коммунистарын әҙерләргә, тәрбиәләргә кереште, ойошмалар ара ында әм өйәҙ партия комитеты менән тығыҙ бәйләнеш булдырҙы; аҡрынлап ҡына башҡорт йәштәренә ҡыҙыл гвардия ойоштороу идея ын еңдерҙе. Ҡыҫҡа ваҡытҡа ғына бул а ла ауылына уғылып китмәйенсә түҙмәне, сөнки атай менән әсәй ҡартайған, унан башҡа ҡарар кешеләре юҡ; Ҡантурат та уның ҡайтыуын зарығып көтөп торған. Йәшлегенең Гөлсәсәге йөрәк ыҙлатып төштәренә кер ә лә, яҙмышты яңы аҡ биттән яҙа башларға — берәй матур ғына ылыуға өйләнеп, башлы-күҙле булып, талыҡҡан индән уғыш шауҡымдарын елкеп ташларға, ата-бабаның мәңгелек шөғөлөнә — ерекмәнлеккә ерегергә ҡыҫтаны ерҙе өҙөлөп ағынған ерекмән тәбиғәте. әм шулай булыр ҙа ине, ләкин...

Өйәҙ халҡы ҡапыл ҡубынып нәфрәтләнде: 4 февралдә Ырымбурҙа большевиктар башҡорт хөкүмәтен ҡулға алғандар, был енәйәтте Ғәли Шәмиғолов етәкселегендә татар алдаттары башҡарған. Сәлимйән тәүҙә ышанмайыраҡ тор а ла, Орскиҙағы иптәштәре ебәргән, Ырымбурҙың шул уҡ числола баҫылған “Известия“ гәзите килеп етте; С.М. Цвиллинг ҡул ҡуйған рәсми белдереүҙе йөрәк еп әм көйәләнеп уҡыны: *“Ҡалалағы Мосолман Хәрби комитетының талабы буйынса әм улар тарафынан ҡулға алынған башҡорттарҙы совет төрмә енә бикләргә рөхсәт биреләе”.* Сәнкем-Биктимер төбәгендә бергәләшеп ҡыҙыл гвардия ойоштороштан ҡорҙашы — казак большевигы Ғәбделәхәт Сәйетбатталовтан юлаусы аша килеп

еткән “Казачья правда” гәзитендә “Башҡорт контрреволюционерҙары” тигән дөйөм баш аҫтында татар әелдәре Камил Кәримов менән Ибраим Бикчәнтәевтарҙың[62] мәҡәләләре бирелеп, ҡулға алыныусылар “монархист әм ер биләүсе реакцион капиталистар” тип тамғаланғайны; Бор ан Шәрәф менән Фатих Кәрим и ә Зәкир Йәлитовты ҡулға алыуҙарын ябай ғына: шәхсән үҙен күрә алмауыбыҙ арҡа ында, тип аңлатҡандар... уҡты ла күпте лә, тигәндәй, шул уҡ 4 февралдә “контрреволюцион” башҡорт хөкүмәте урынына Совет Башҡортостанының Ваҡытлы Революцион Советы төҙөлөүен, ваҡытлы рәйесе итеп — Ғабдулла Дәүләтшин, урынбаҫары — Бәхтегәрәй Шәфиев, сәркәтиптәре Ғ. Алпаров менән Ж. Шәрипов айланыуын хәбәр иттеләр. Ылғый большевик әм теләктәштәрҙән хасил был яңы совет хөкүмәтенә Сәлимйән әм уның тирә ендәге йәштәр бик ыңғай ҡара а ла, күпселек халыҡ ҡабул ҡылманы быны — үҙҙәре айлап ҡуйған элекке башҡорт хөкүмәтен яҡлап туланы башҡорт әм был — бөтә Башҡортостан буйынса ине. Мәғлүмәттәргә ҡарағанда, шул көндәрҙә илдең төрлө төбәктәренән етмеш инсан Ырымбурға нәфрәт белдерергә килде, Мәскәүгә лә телеграммалар уғылды. Сәлимйән ауылдағы эштәрен ташлап, Ҡантуратына атланып Орскиға елдерҙе — ошо ҡатмарлы осорҙа өйәҙ хәлдәрен асыҡларға, партия комитетының эшен дөрөҫ юлға алырға кәрәк ине. Бигерәк тә башҡорттарҙың иң әүҙем әм яугир өлөшөн тәшкил иткән Бөрйән төбәге борсоно уны: Ырымбурҙа дыуамалланып сағылған осҡон бында ялҡын дөрләтеп ҡуймағайы!..

Хәйер, бынан алда Орскиҙа сағында уҡ шул ялҡынды булдыртмаҫҡа ҡай ы бер саралар күрелгәйне күрелеүен: тулы ынса Совет платформа ында торған Баймаҡ Советы төҙөлөп, эшкә егелде, әллә ни ҙур булма а ла, эшселәрҙең үҙ теләкле ҡыҙыл гвардия ы ойошто, киләсәктә уны Орскиҙағы арсеналдан ҡоралландырыу ҡаралды. Шул уҡ ваҡытта Ырымбурҙағы Башҡорт хөкүмәте лә төбәккә үҙенең хәрбиҙәрен ебәреп, башҡорт полкы ойоштора башлауы асыҡланғас, Сәлимйән дәррәү төбәккә бара алып, Башҡорт хөкүмәте исеменән эш иткән уның Хәрби бүлек мөдире Ғимран Мағазов, уның ярҙамсы ы Ғабдулла Иҙелбаев менән осрашты; уларҙы Ырымбур осоронан уҡ яҡшы белә ине. өйләшеү баштан уҡ зыялыларса шөйлә итәғәтле, аҡыллы үҙәндән ағылды. өҙөмтәлә Баймаҡ Советы етәкселеге менән берлектәге кәңәшмә үткәреп, ундағы төрлө сәйәси ҡарашлылар ара ында бәхәсле әм көсөргәнешле фекер алышыу барышында ваҡытлыса килешеүгә өлгәшелде: әүҙем уҡмашҡан күп анлы башҡорт әтрәте менән Баймаҡ эшселәр әтрәтен Рәсәй Федерация ы эсендәге демократик Башҡортостан мәнфәғәттәренең ағында торған совет әтрәте итеп берләштерергә лә, Ырымбур гөбөрнә хакимиәте менән яңы Башҡорт хөкүмәте шул йә әттән уртаҡ тел табыуын көтөп, өйәҙ халҡының тыныс тормошон әм именлеген аҡлаусы көс итеп тоторға. Сәлимйән Орскиға ҡайтып, Советтар нигеҙендә төҙөлөргә тейешле шул башҡорт ғәскәре штабына ярҙамға ҡала большевиктарына теләктәшле, 19-20 йәштәрҙәге ете поляк офицерын юлландырғайны...

Орскиҙа уны яман яңылыҡ ҡаршыланы: Ырымбурҙан Цвиллинг мандаты менән килгән билдәле Ғәбделәхәт Сәйетбатталов тигән большевик Баймаҡҡа барып, унда үҙен башҡорт патриоты Арыҫлан Батталовмын тип танытып, башҡорт буржуйҙары ара ында темеҫкенеп ҡайтҡан да Баранов әтрәтен алып Баймаҡҡа киткән...

Сәлимйән ашығып барып еткәндә эш үткәйне шул инде: алдап ышандырыу ярҙамында штабты ҡулға алып, Цвиллинг телеграмма ына ярашлы, Баймаҡ Советы ҡарары менән 22 февралдә (яңы стиль менән 7 мартта) Ғимран Мағазовты, Ғабдулла Иҙелбаевты, биш поляк офицерын әм ун алдатты тотоп атҡандар, ә “Арыҫлан Батталов” иптәш Цвиллингка хисап бирергә ҡайтып киткән... Цвил-

лингтан ундай бойороҡ булыуына ышанмай, таптырта башлағас, Баймаҡ Советында уға телеграмманы күр әттеләр: *"**Баймак. Совет рабочих депутатов**. По постановлению Оренбургского Мусульманского революционного комитета арестуйте главарей башкирского отряда, находящегося в Баймаке. В случае неисполнения того приказания Баймакский Совет рабочих депутатов будет объявлен контрреволюционным и понесет самое строгое наказание. **Цвиллинг**".*

– Ҡулға алыуын-алғас, уларҙы ниңә Ырымбурға оҙатманығыҙ? Ниңә ҡан ҡойҙоғоҙ?

– Орскиҙан килгән әтрәт башлығы Баранов беҙгә Цвиллингтың икенсе телеграмма ын да күр әтте: башҡорт контрреволюционерҙарын ҡулға алғас та уҡ рәхим еҙ атырға бойоролғайны...

Сәлимйән ауылына тура елдереп, ата ының яҙғы абанға күҙ терәп көткән Ҡантуратын ҡалдырып, күмер тейәгән юлаусылар сана ында арыҡташ станция ына килеп төштө. Пассажир поездары ирәк йөрөй йәки йөрөмәй ине; тауар вагонына эләгеп китте.

Каруан арайлы мәркәз ҡала ниндәйҙер өжүмгә әҙерләнгәндәй ҡайнаша, Совет урынлашҡан Панкратов йортоноң коридорҙарында ҡораллы кешеләр мыжғый. Рәйес бүлмә енә ҡыйынлыҡ менән үтте. Йоҡламауҙан арып-талған, ябығыуҙан ҡылыс танауы уғата ныҡ кәкерәйгән Цвиллинг ҡәнәғәт еҙ ҡаршыланы:

– Йә, Мырҙағолатов иптәш, ни йомош? Әллә башҡорт буржуйҙарын юллап килдеңме?

– Юлламайым, әммә ул буржуйҙарҙы сәбәп еҙҙән ҡулға алыуығыҙ халыҡ асыуын ҡуҙғытты.

– Беренсенән, сәбәптәре етерлек. Икенсенән, ҡулға алдыртыусы ис тә мин түгел.

– Аңламайым.

– Дөрөҫөн генә әйткәндә, мин үҙем дә аңламайыраҡ ҡалдым. – Цвиллингтың үтә сәйер фәлсәфә е Сәлимйән аңында урыҫса нөсхә ендә ярылып ҡалды: – *Члены Башкирского правительства арестованы по просьбе нескольких человек от имени Мусульманского военно-революционного комитета[63]. Я спросил, в чем их вина. Они мне ответили, что члены Башкирского правительства – контрреволюционеры, работали в союзе с Дутовым и что есть еще ряд других причин. Полагая, что дело будет расследовано потом, я дал разрешение на арест. Но я и сам сомневаюсь в том, что Закир Ялиди был контр. Поэтому для основательного решения вопроса счел необходимым избрать комиссию по расследованию. Если хотите войти в комиссию, вы тоже можете ввести одного человека. Тогда и ознакомитесь как следует вопросом. Если комиссия по расследованию найдет их невиновными, они, естественно, будут освобождены. По этому вопросу я сам в недоумении. Ежедневно отовсюду я получаю телеграммы с требованием об освобождении членов предпарламента. В некоторых телеграммах даже заявляют, что, если татарский революционный комитет Оренбурга все еще хочет держать наших руководителей в заключении, мы в отместку за это пойдем войной на соседние татарские деревни...*

– Самуил Моисеевич, ғәфү итегеҙ, бесәй-сысҡан уйынына оҡшай был...

Цвиллингтың күҙҙәрендә уҫал ут ялтыраны:

– еҙ кем, әллә миңә судьямы?!

– Кисерегеҙ, мин дә, еҙ ҙә судья түгелгә оҡшай. Ысын судьялар бул аҡ, Баймаҡта ҡан ҡойоуға юл ҡуймаҫ инек. Ундағы ҡыҙыл гвардия...

– Етте! Хәрби мәсьәлә буйынса Кобозев шөғөлләнә, шуның теңкә енә тейегеҙ! – Ашығыс тороп хушлашты. Был уларҙың уңғы күрешеүе ине. Революцион пролетариаттың ас тамағын туйҙырмаҡҡа әтрәте менән иген таларға (продразверстка

я арға) барғанында Изобильная станица ы казактары, сиркәү манара ындағы пулеметтан иптереп, Цвиллингтың ғәскәрен ҡырып ташлай, иң алғы рәттәге Самуил Моисеевичты иң беренсе пүләләр киҫеп ала...

Цвиллингтан бешелеп сығып, тәҙрә тәңгәлендә уйланып торғанда, “Тулҡын” ойошма ы буйынса уға яҡшы таныш бер килке егеттәр пәйҙә булды: яңыртылған ваҡытлы Башҡорт хөкүмәте рәйесенең урынбаҫары Бәхтегәрәй Шәфиев, беренсе сәркәтибе Ғариф Алпаров, улар янында шағир Ша изада Бәпес, йырсы Ғәзиз Әлмөхәммәтов...

– Тоҙ яларға әселәгән малдарҙай, түрә эргә енә эркелдегеҙме? – Көлөп күреште Сәлимйән. – Татарҙар менән бергәләшеп башҡорт буржуйҙарын төрмәгә япҡан ығыҙ икән, тип ишеткәйнем, ҡасан сығара ығыҙ? Ыристандарығыҙҙы, тим.

Шәфиев өҙөп алды:

– Ул ыристандар бер ваҡытта ла азат ителергә тейеш түгел, ә мәңге-мәңге шул үҙҙәре ултырған зинданда ҡатырға тейеш! – Шаҡылдатып та тормай, Цвиллинг бүлмә енә атлыҡты.

– Көн дә ошонда килеп, ыристандарҙы атырға кәрәк, тип юллай, йә үт и ә уны арҡа ынан өйөп ҡайтара; ә мине, Башҡорт хөкүмәте ғәйеп еҙгә ултыртылған, тип килгәнгәме, туп а ынан үткәрмәй! Алпаров, яҙып ҡуй: бөгөндән үк еҙҙең ҡурсаҡ хөкүмәттә эшләүҙән баш тартам! – Йырсы егет нығ рәнйеп сығып китте.

– Нимә, еҙҙә ағзамы ни ул да? – Алпаровтан ҡыҙыҡ ынды Сәлимйән.

– Эйе шул. Башҡорт буржуаз хөкүмәтенең ҡулға алыныу сәбәбен тикшерергә Ҡазандағы Рәсәй Мосолман алдаттары съезынан комиссия килгәйне; комиссия ағзалары был акттың законға ярашлы икәнлеген раҫлағас, Муса Мортазинды, Таир Имаҡовты, Усман Ҡыуатовты, Зәкәриә Айытбаевты, Ғәзиз Әлмөхәммәтовты ла хөкүмәт ағзалығына кереткәйнек...

– Карабығыҙҙан ҡомаҡтар ҡаса ла башланы әллә?..

Ҡобара ы осоп тыңлап торған шағир телгә килде:

– Таш мәсеткә ағас муллалар! Күреп тороғоҙ: бер-ике айҙан бере е лә ҡалмаясаҡ: Цвиллинг, Шәмиғолов, Нуримановтар уларҙы берәм-берәм ҙур “х” хәрефле ғәфләттәренә олаҡтырасаҡ! Бар, алпар-толпар йылғырйән, Шәфиев мишәренден эргә енә ин! – Төкөрөп сығып китте (оҙаҡламай унының да ҡулға алыныуы мәғлүм).

– Нимә өйләй был, мишәрме ни Шәфиев?

– Тел өйәк еҙ, тигәндәй, төрлө әкиәт йөрөй: отставкалағы алдат мишәр баба ын, имеш, заманында гөбөрнәтер хәҙрәттәре Иманғол башҡорттары обще-ство ына теркәткән... Хәйер, беҙ милләт айырмайбыҙ.

– Шуның өсөн дә, үҙ башығыҙ менән эшләмәй, татар Мосолман комитетындағы ҡәрҙәштәрегеҙҙең бойороғон ғына көтөп ята ығыҙмы?

Алпаров, уңай ыҙланып, муйынын эскә тартты, тик яуап ыҙ ҡалыуы ҡыйын ине:

– Каруан арайҙан ҡыуа башлағастары, шуның сәбәбен орағас, Та иров беҙгә әйтте: сөнки еҙ контрреволюционерҙар менән ҡулалмаш эшләнегеҙ. Шуға ла ҡарамай, ҡулға алынғандарҙың ғәйебен танымай ығыҙ. Әгәр ҙә ки үҙ башығыҙҙы ҡотҡарырға телә әгеҙ, “предпарламент ағзалары – контрреволюционерҙар, уларҙы ҡулға алыу законлы” тип ҡул ҡуйығыҙ әм бөтә булған эштәрегеҙҙе беҙҙең контроль аҫтында ғына эшләгеҙ, бына шул саҡ Каруан арай ябылмаҫ, эштәрегеҙҙе дауам итер егеҙ, тине. Каруан арайҙы яптыртмаҫ әм башҡорт автономия ына бәйле эш туҡталма ын өсөн, беҙ контроль аҫтында эшләргә ризалаштыҡ та Та иров талап иткәненсә ҡул ҡуйҙыҡ...

– Их еҙ, бахырҙар!... – тине Сәлимйән, баш сайҡап.

Хәрби етәксе Кобозевтың да ваҡыт тар, ә эштәре тауыҡ сүпләп бөткө өҙ. Баймаҡ төбәгендәге ҡанлы ваҡиғаны ҡыҫҡаса өйләп, ҡыҙыл гвардия ойоштороу

эшендә тупаҫ хата ебәрелеүен әйткәс, иҫе китмәй генә хихылдап ҡуйҙы ла, йәнгә теймеш күгәүендән арынырға теләгәндәй, ҡәнәғәт еҙ тамаҡ ҡырҙы:

– Улай а, ул төбәктә ҡыҙыл гвардия ойоштороуҙы үҙегеҙгә йөкмәгеҙ.

– Йөкмәгәйнем дә бит, эшләгән эштәремде юҡҡа сығарттығыҙ.

– Урман киҫкәндә таптар осҡолай инде ул. Большевикмы еҙ – большевик. *Хаталарҙан абаҡ алабыҙ*, ти Владимир Ильич. Әйткәндәй, үҙең белгән Троцкий иптәш тә синфи дошмандарға шәфҡәт еҙ булырға ҡуша!

– Юҡ! Был хәлдәрҙән уң унда дарылы мискә шартлау – халыҡ восстание ы дөрләү ихтимал. Минең бурыс – башҡорт халҡын тынысландырыу, массалар арасында сәйәси тәрбиә эшен киң йәйелдереү, тип анайым.

– Мәйлегеҙ, бында бәйләп тотмайбыҙ.

Башҡортостанда аҡтарҙың әм ҡыҙылдарҙың ҡан ҡойошло граждандар уғышы башланыр алдынан өйләшеү әм ҡайтып китеү ине был.

Илде ут ялмап алды, әр ауылға, әр өйгә ғәрәсәт килде; ир-ат, ҡоралланып, алышыусы ике яҡтың бере енә ылыҡты.

Сәлимйән Мырҙағолатов, ата ы ҡарттың яҙғы абанға әҙерләгән Ҡантуратын эйәрләп, ғәрәсәттең үлемесле ҡырҙарында тағы ла ике йыл гиҙергә сығып китте.

## 10

Иҙел – Урал ара ында ғәмәлдә Башҡорт хөкүмәтен ҡулға алыу әм беренсе башҡорт полкын атыу менән ҡабынып киткән граждандар уғышы ялҡыны Рәсәй империя ының ҡапма-ҡаршы аҡтар әм ҡыҙылдар фронттарына тоташып, Башҡортостан киңлектәрен ике йыл буйы ут әм ҡанға батырып дауамланды. Ҡыҙыл Армияға ҡаршы үҙенең аҡ армия ы менән уғышҡан Башҡорт хөкүмәте 1919 йылдың февраль айында, ни айәт, батша самодержавие ының империя сәйәсәтен дауамлаусы аҡ Колчак хөкүмәтенән тамам биҙеп, ваз кисеп, килешеү аша ҡыҙылдар яғына сыҡты, Советтар нигеҙендәге Башҡорт автономия ы тура ында Совет хөкүмәте менән шартнамәгә ҡул ҡуйҙы – Автономиялы Совет Социалистик Республика ын төҙөү осоро башланды...

Бер уйла аң, автономиялы буржуаз Башҡорт хөкүмәтен ҡулға алыуҙар, автономиясыларҙы атыуҙар, фронт менән фронт ҡара-ҡаршы тороп уғышыуҙар, ике йыл буйына илдең ябай тыныс халҡын талау әм үлтереүҙәр – Сәлимйән кеүек коммунистар тәҡдим иткән тыныс юл менән хәл итә е сәйәси мәсьәләләрҙе ғәрәсәттәр тамуғы аша уҙғарып, илдең даръялай ҡандарын ҡойоп, ҡабат шул уҡ, тәүҙә үк тәҡдим ителгән тыныс юлға кире әйләнеп ҡайтырға – былар бары ы-бары ы большевиктарға ниңә кәрәк булды уң, ябай синфи ҡаршылыҡтарҙы үҙҙәре уйлап тапҡан я алма синыфтар уғышына әйләндереү, шуның аша үҙ хакимлыҡтарын ауҙарылмаҫлыҡ итеп нығытыу өсөнмө?!.

Яҙға табан көнсығыштан колчаксылар фронты яңы хәл иткес өжүмгә күсеп, ҡыҙыл ғәскәрҙәрҙе Иҙелгәсә сигендереп, Башҡортостан тағы тулы ынса аҡтар ҡулы аҫтында ҡалғанлыҡтан, Социалистик Башҡортостандың Ваҡытлы Революцион Комитеты (БВРК) тип аталмыш Совет хөкүмәте ваҡытлыса Саранск ҡала ына күсенергә мәжбүр булды.

Яңыса хөкүмәт ҡоролошо әм башҡорт ҡыҙыл армия ын төҙөү мәсьәләләре буйынса өйләшеү өсөн апрель аҙаҡтарында Мәскәүгә барған Хәрби комиссар Әхмәтзәкир Йәлитовты Ленин үҙе ҡабул итте.

– Совет хакимиәте, ябай ғына әйткәндә, “өс ҡот[64] балығы” өҫтөндә баҫып тора, – тине ул, хәҙер инде Рәсәй күләмендә танылған башҡорт лидерын иғтибарлы тыңлап бөткәс. – Йәғни Совет хөкүмәте, туранан-тура уға буй онған Хәрби Революцион Совет (Реввоенсовет) әм контрреволюцияға, саботажға ҡаршы

көрәшеүсе Бөтә Россия Ғәҙәттән тыш Комиссия ы (ВЧК). Был архияуаплы поста-рҙы архиышаныслы иптәштәр етәкләргә тейеш. еҙҙең Хөкүмәт әм Хәрби комиссариат башындағы иптәш Йомағолов әм иптәш Йәлитовты тап шундай итеп беләмен. Архимө им орау: ә өсөнсө “ҡот”ҡа кемде ҡуйҙығыҙ? Йәғни БЧК рәйесе итеп?

– БЧК беҙҙә яңы ғына моронлай башланы, иптәш Ленин. Унық нескәлектәрен дә белеп еткермәйбеҙ.

– Э-э-э, батенька, был архимө им мәсьәләне артҡа ҡуйып тороп булмай! – Телефондан шылтыратып та өлгөрҙө. – Феликс Эдмундович, бында Совет Башҡортостаны Чека ын ойоштороу проблема ы килеп тыуҙы. Хәҙер еҙгә иптәш Йәлитов барасаҡ, уға ярҙам итеүегеҙҙе орайым. – Йә өт тороп, ишеккәсә оҙатты.

– Кемде билдәләнегеҙ? – тине Дзержинский, тәүҙә дөйөм үҙ барышында булдырыласаҡ комиссияның эш бурыстарын ҡыҫҡаса аңлатҡас.

– Вакансия әлегәсә буш тора, милли кадрҙарға ҡытлыҡ кисерәбеҙ. Был яуаплы әм сетерекле эш башында, минең уйлауымса, милли кадр булырға тейеш.

– Дөрөҫ, был бик мө им. Ойоштороу йә өтенән беҙ әр яҡлап практик ярҙам күр әтергә әҙер. Ә кадрҙар мәсьәлә ендә Милләттәр буйынса Халыҡ комиссары Сталин иптәшкә керегеҙ.

уңғы ваҡытта Сталин менән йыш күрешергә тура килгәнлектән, аралары яҡын ине – ҡабаланмай ғына ихлас өйләште. Иң элек башҡорт ҡыҙыл армия ының ҡасан төҙөлөп бөтәсәге, нисә мең штык йәки ҡылыс тәшкил итере менән ҡыҙыҡ ынды. Йәлитовтың яуаптарынан шөйлә ҡәнәғәтләнеп, өҫтәле өҫтөндә төтөн бормаслатып ятҡан төрөпкә ен ҡапты ла, тороп, йөрөштөрә башланы; торорға иткән серҙәшен яҫы ҡаты усы менән яурынынан баҫты:

– Дзержинский иптәш шылтыратҡайны, беҙҙән ни ярҙам кәрәк?

Кәрәген өйләп биргәс, уйға ҡалып, өҫтәленең артына кире төпләнде, алдындағы ҡалын дәфтәрҙе асып, күҙ йөрөттө:

– Шәмиғолов иптәште алып булмай, уны Өфө гөбөрнә енә Эльцин иптәшкә беркеттек – мосолмандар мәсьәлә е буйынса. Бына, – төрөпкә енең емәген дәфтәргә төрттө, – Мырҙағолатов Сәлимйән Шә әргәрәй улы. ыналған иптәш, коммунист, башҡорт – тап еҙгә кәрәкле кеше. Граждандар уғышын үткән, уны Гай, Каширин иптәштәр ҙә яҡшы белә; әлеге көндә Самарала Көньяҡ фронттың Сәйәси идаралығында хеҙмәт итә.

– Мин дә уны күпмелер беләм, буғай. әр хәлдә, ыңғай яҡтан.

– Шулайғас, ул – еҙгә иң ҡулайлы ы.

Май башында, үҙенең хөкүмәт вагонында Саранскиға ҡайтып барышлайы, Йәлитов Самарала туҡталды, Мырҙағолатов менән күҙгә-күҙ ҡарашып өйләште.

– Белә егеҙ, мин еҙҙең буржуаз автономия тарафдары түгел инем, – тине Сәлимйән. – Фронттарҙа ла йыш ҡына еҙҙең аҡ армияға ҡаршы уғыштым. Ләкин инде ҡыҙылдар яғына сыҡтығыҙ, Совет Рәсәйе эсендә Совет автономия ы төҙөргә керештегеҙ – быны мин ҡыуанып хуплайым әм был йә өттән Совет Башҡортостанына бөтә көсөмдө, әләтемде биреп хеҙмәт итергә әҙермен.

– Килештек, уҙаман! – Ихлас ҡул ҡыҫыштылар. – Фронт штабында өйләштем – ризалар. Бындағы эштәрегеҙҙе тиҙ генә теүәлләгеҙ ҙә, мин көтәм, Саранскиға бергә китәбеҙ!

1919 йылдың 5 майында уҡ Башҡорт хөкүмәте Мырҙағолатовты БЧК рәйесе итеп тәғәйенләне; шунда уҡ ул Пензаға барып, ундағы Чека эштәре менән танышып, тәжрибә туплап килде лә БЧК-ны уның тәүге нигеҙ таштарынан башлап ҡорҙо. Бер ыңғайҙан партия эшенә керешеп (Хөкүмәттә бер-ике коммунист бул а ла, РКП(б) ойошма ы юҡ ине), етәксе башҡорт уҙамандарын коммунистар

партия ына ағза итеп алыуҙы юлға алды, сөнки юғарынан үткәрелгән ҡаты сәйәсәт буйынса, хатта кешенең белеменә, әләтенә лә ҡарамай, совет хакимиәтендә мө им етәксе кадрҙар коммунист булырға тейеш; ә был и ә фирҡә еҙҙәрҙе аяу ыҙ ситкә быраҡтырып, партия билетлы төрлө карьеристарға, авантюристарға юл аса... Оҙаҡламай Петроградты Юденич ғәскәрҙәренән ҡурсаларға Ленин иптәш саҡыртып алған башҡорт дивизия ының күпселек фирҡәлеләре лә Мырҙағолатов тәрбиәләп өлгөрткән, ағза итеп алған коммунистар ине...

Көнсығыш фронтта Ҡыҙыл Армия Башҡортостанды аҡтарҙан арсалағас та, Хөкүмәт органдары йә әт Эстәрлетамаҡҡа ҡайтып, йәш Совет республика ы органдарын ҡороп нығытыуға керешелде, был и ә бер йыл эсендә ике тапҡыр фронт ғәрәсәте көйҙөрөп үткән илдәге аслыҡ-яланғаслыҡ, бандитлыҡ, өҫтәүенә, Ырымбур, Өфө кеүек күрше өлкәләрҙең милли автономияға ҡаршы ныҡышмалы көрәшеүҙәре, хас дошманлыҡ ҡылып аяҡ салыуҙары шарттарында барҙы. Элекке аҡ империя урынына аҫтыртын ҡыҙыл империя ҡорорға юҫыҡланған Мәскәү ҙә башҡорт үҙаллылығының аяҡ-ҡулын ҡыҫҡартыу яғында ине; шул йәшерен маҡсатында хилаф сәйәсәт үткәреп, Башҡортостан автономия ының хас дошманы Ғәли Шәмиғоловты, башҡорт хәрби көстәрен үҙ ҡулында тотор өсөн, Башҡортостан Хәрби комиссариатының сәйәси бүлек башлығы итеп күсерә: Башҡорт хөкүмәте өҫтөнән күҙ-колаҡ булырға, автономияға ҡаршы ҡара көстәрҙе етәкләргә...

РКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитетында автономияны емертеүселәр өҫтөнлөк ала, йәшерен алыш нәтижә ендә БЧК рәйесе Мырҙағолатов Ҡазандан килтерелгән әм Шәмиғолов төркөмөнән булған Абдрахман Измайлов менән алмаштырыла. Аҫтыртын көрәш юғары нөктә енә етеп, Хөкүмәт башлығы Йомағолов 1920 йылдың 15-енән 16- ына ҡараған төндә Башҡортостан автономия ына ҡаршы фетнә әҙерләүселәр рәүешендә партия өлкә комитеты ағзалары Ғ. Шәмиғоловты, А. Измайловты әм башҡаларҙы (яңылышып, буғай, БЧК Коллегия ы ағза ы С. Мырҙағолатовты ла) ҡулға алдыртҡас әм Ленин бойороғо менән уларҙы азат иттерткәс, шау-шыу тыуҙырған был ваҡиға Мәскәү алдында шәмиғоловсыларҙың абруйын уғата күтәреп әм уларҙы уғата рухландырып, я ил төркөм Эстәрлетамаҡта әм республика кантондарында Башҡорт хөкүмәтенә ҡаршы хәрәкәтен көсәйтте; башҡорт ерҙәрен көслөк менән баҫып алыусы урыҫ килмешәктәре хатта ҡоралы, "коммунистик" әтрәттәр ойоштороп, ауылдарҙа башҡорттарҙы талап, атып йөрөнө. Шундай хәлдәрҙе тикшереү әм үҙ сиратында ҡоралы аҡлыҡ саралары күрә башлаған башҡорт халҡын тынысландырыу өсөн, республика етәкселеге танылған коммунист Сәлимйән Мырҙағолатовты бер юлы Хөкүмәттең, РКП(б) өлкә комитетының, БЧК-ның вәкәләтле комиссар-ревизоры рәүешендә ваҡиғалар ҡатмарлашҡан төбәккә – үҙенең тыуған ере Үҫәргән кантонына юлландырғайны. Ифрат яуаплы, хәтәрлекле вазифа ын башҡарып йөрөгәндә республиканың сәйәси хәле уғата ҡатмарланды, ҡырҡыуланды.

Сүп өҫтөнә сүмәлә, тигәндәй, Үҙәк хакимиәт – ВЦИК әм РСФСР СНК- ының М.И. Калинин әм В.И. Ленин ҡул ҡуйған "Автономиялы Совет Башҡорт Республика ының Россия Социалистик Федератив Совет Республика ына мөнәсәбәттәре" тигән 1920 йыл 19 май декреты автономия хоҡуҡтарын тамам юҡҡа сығарырлыҡ итеп мөнтәп-ҡыҫҡартҡас, илдә ҙур ҡәнәғәт еҙлек, бола алды мөхите килеп тыуҙы. Үҙәк Хөкүмәт Әхмәтзәкир Йәлитовты Мәскәүгә саҡыртып алып, ҡайтармай тотҡарлағас, кантондарҙа халыҡ массалары шартларға әҙер дары хәленә етеп, бер туҡтау ыҙ шаулы йыйылыштар уҙғарып, Эстәрлетамаҡҡа ла, Мәскәүгә лә нәфрәтле хитапнамәләрен, телеграммаларын яуҙырҙы; 19 май декретын юҡҡа сығарыуҙы, Әхмәтзәкир Йәлитовты Башҡортостанға ҡайтарыуҙы талап

ҡылды. Тамъян-Ҡатай, Үҫәргән, Бөрйән-Түңгәүер кантондарында сәйәси көсөргәнеш саманан ашып, тауҙар ара ында ятҡан Байым ауылының быҒаса билдә еҙ бер ерекмәне Хажиәхмәт Унасов төркөмө ҡалҡынып сығып, ҡоралланып, урындағы Советтарҙы ҡыйратып йөрөүе, ҡораллы әтрәтенең, епшек ҡарҙа тауҙан тәгәрләгән ҡар йомарлағылай, көндән-көн ҙурая барыуы ныҡ борсоно. Сәлимйән, ыңғайҙан шул яҡтарҙы ла тикшереп үтергә юҫыҡланып, Силәбе – Орск тимер юл станция ына килгәс, телеграфтан уғата яманыраҡ хәбәр уғылды: 15 июндә баш ҡала Эстәрлетамаҡта Башҡорт хөкүмәте ағзалары эш урындарын ташлап киткән, республикала юғары хакимиәт Шәмиғолов әм унның компания ы ҡулына күскән. Артынса уҡ шәмиғоловсы-мансыревсы яңы Башревкомдың 1920 йылдың 26 июнендә сығарылған 1-се номерлы хәрби фарманы Урал тауҙары ара-ына ла килеп етеп, Башҡортостанда ғәмәлдә *хәрби диктатура* иғлан ителеүе асыҡланды, был и ә дары мискә енә сағылған осҡон ине. Сәлимйән, үҙен комиссар-ревизор итеп хәтәр эшкә юлландырған республика хакимиәте алмашын а ла, коммунислыҡ бурысым үҙ урынында ҡалды, тип, башлаған яуаплы эшен еренә еткереүҙе хуп күрҙе; бары ы үҙ ҡалыбына ултырыр, коммунистар партия ы иҫән саҡта Башҡортостан Совет Республика ы йәшәйәсәк, ә ваҡытлыса өҫтөнлөк алған шәмиғоловсылар күп тә тормай епереп түгеләсәк, ә минең тикшереү өҙөмтәләре республикаға әр саҡ кәрәк буласаҡ, тигән фекерҙә ҡалып, йөкмәтелгән вазифа ын үтәүҙе дауамланы. әр хәлдә, бола ҡубынған төбәкте арҡылы-буй йөрөп үтеп, ваҡиғаларҙың айышына төшөнөп, партия өлкә комитетына әм башҡаларға ысынбарлыҡты бөтә дөрөҫлөгөндә еткерергә, халыҡ яҙмышы ҡыл осонда торғанда хата ҡарарҙарға юл ҡуйҙыртмаҫҡа тәүәккәлләнде...

Төрлө юл әм уҡмаҡтарҙан тимер юлға барып сығып, бәләкәй генә станцияла поезд көтөп ҡаңғырғанда, тау ара ын оҙон борғо ауазы яңғыратты, баштан-аяҡ тимер көплө вагондарҙан пушка әм пулемет көбәктәрен усал кәшкәйткән бронепоезд шау-гөр килеп туҡтаны; алдағы вагондан өҫтө-башы шау ары ҡайышҡа бөткән, арҡыс-торҡос портупеяларына бер түгел, ике кобура аҫҡан йәш егет мылтыҡлы бер төркөм ҡыҙыл әрмис оҙатыуында икереп төшөп, уҡыр себендәй туп-тура Сәлимйәнгә ыңғайланы, тәмәке төтөнө арғайтҡан уҡ бармағын унның маңлайына нәҡ наган көбәгеләй тоҫҡап, тамаҡ төбөнән екерҙе:

– Эй, чучмек! Кто ты – башкир?

– Да, башкир.

– Взять! – Наган көбәгеләй тоҫҡалған бармағы менән бейек таш пак ауҙ[65] стена ына төртөп күр әтте. – К стенке!

Ҡыҙыл әрмистәр Сәлимйәнде елтерәтеп алып барып ҡоймаға терәнеләр. Бойороусы, ҡан баҫҡан күҙҙәре менән ашарҙай төбәлеп, уң яҡтағы кесерәк кобура ының ҡапҡасын ысҡындыра башлағайны, поезд яғынан киҫкен тауыш яңғыраны:

– Стой! Отменить! Ты что делаешь, Голиков?!

– Как что, бандита пускаю в расход!

– А ты дознался, на самом деле кто он?

– Башкир он, вот кто. Значит, сто процентный бандит. Ему к праотцам прямая дорога!

Киҫәтеүсе йүгереп килеп етте:

– Эх, Аркадий, Аркадий, неисправим же ты! Этот башкир – мой хорошо знакомый, настоящий коммунист. Прочь по своим местам! – Сәлимйән, ҡапыл иҫенә килеп, аралаусы ын таныны – 1918 йылдан алып аҡтарға ҡаршы бергә уғышып йөрөгән яугир ҡорҙашы, 1919 йылда Ырымбур хәрби нығытмалы район коменданты, шунан уң Төркөстан фронтындағы 49-сы ҡәлғә дивизия ы башлығы, ә

хәҙерен Урал хәрби нығытма район башлығы, ә асылы Верхнеуральскиҙың ҡыҙыл казагы Николай Каширин ине. Шунда уҡ башҡортсаға күсеп өндәште. – Гареевич, бында ни эшләп йөрөй өң?

– Йомош менән, Николай Дмитриевич.

– Ярай, килеп өлгөрҙөм, юҡ а... Киттек, брат, аяғөҫтө тороп ҡына аңлаша ы хәл түгел!

Паровоз ыу әм ташкүмер тейәгән шаҡтай оҙайлы арала вагонға инеп ултырып, осрашыу айҡанлы тултырылған соҡортайҙарҙы түңкәрҙеләр.

– Кем был Голиков тигәнегеҙ, ниңә бармағын, наган көбәгеләй, күҙгә терәп екеренә?

Каширин көлдө:

– Малайка, ләкин хәтәр малайка: ун алты йәшенән – полк командиры, коммунист: 1918 йылда беҙҙең Белорет Реввоенсоветының беренсе рәйесе Борис Варфаломеевич Точисский[66] шәхсән үҙе партияға алған әм еҙҙең Зәкир Йәлитиҙең аҡ армия ына ҡаршы әтрәт командиры итеп изге уғышҡа аяҡландырған бер фрукт. Әтрәтенең алдында гел “Гайда! Гайда!” тип оранлап барғаны өсөн Гайдар[67] тип йөрөтәләр үҙен. Борис Варфоломеевичтың фатиха ы буйынса тирә-яҡ ауылдарҙы айҡап, наганы менән йөҙәрләгән башҡорттоң башына еткән, шул арҡала психика ы зәғифләнеп, үҙе ис белештермәй, кеше менән ябай өйләшкәндә лә ул уҡ бармағын наган көбәгеләй тоҫҡап екеренә... уға әр башҡорт – бандит... Әммә боевой командир. Ошо ғәййәрлеген тейешле ба алап, Дзержинский иптәш уны, ғәҙәттән тыш вәкәләтлектәр биреп, аң ыҙ алтай көтөүселәренең восстание ын баҫтыртырға юлландырҙы...

– Быны ы хәтәр икән...

– Хәтәр эштәр етерлек ул беҙҙә, брат. Тамбовтағы Антонов восстание ын ишеткән ендер? Инде килеп инең гүзәл Башҡортостаның болара...

– Шул бола усағын томалау әмәлен табырға китеп барам... партиябыҙ ҡушыуынса. – Эстәрлетамаҡта бирелгән мандатын күр әтте.

– Да-аа, брат, әгәр үҙенде электән үк белмә әм, ары ебәрмәҫ инем. Мандатыңдың көсө бөткән – хәҙер унда власть башына кемдәр килгәнен белә ең. ин бара ы районда яңы хәрби көстәр тәртип урынлаштыра – ине мандатың менән ҡуша стенаға ҡуясаҡтар, тап баяғы Голиков кеүек...

– Башҡорт мәҡәлен белә ең: бүренән ҡурҡҡан – урманға бармаған, – тине Сәлимйән.

– Шулай ҙа төпкә йәшер был ҡағыҙыңды, ә әр ерҙә ҡулланмаҡҡа үҙемдең мандатты бирәм. “Ҡыҙыл Армияның махсус бурыс йөкмәтелгән ғәҙәттән тыш ревизор-комиссары” тип.

– Рәхмәт, шулай итермен. Тик мине тейешле тәңгәлгәсә еткереп ҡуйығыҙ инде.

– үҙ еҙ. Тик ниңә ҡоралың юҡ?

– Хәҙер минең ҡоралым – телемдә, коммунист телмәре.

Каширин баш сайҡаны:

– Береженного бог бережет, тигәнде лә онотмайыҡ. Йәтеш кенә көбәк бирәйем, кеҫәңә генә ыйырлыҡ?

– Кәрәкмәй, халҡым ара ына барам.

Бронепоезда хәт еҙ генә юл үтеп, Бөрйәнгә иң яҡын тәңгәлдә тау ара ында төшөп ҡалды Сәлимйән.

## III киҫәк: Ут эсендә

1

Урал...

Күккә ашҡан мәғрур сағыл-ҡаяларын сурайтып, текә урҙай ҡарурманын итәктәренә мәскәүләтеп, ҡарыулы ел-дауылдарға оторайып күкрәк киргән Урал тауҙары... Аҫта, бик аҫта, ҡая таштар ара ында шау-шырлыҡтан шарлап сығып, яр ып, ауыҙлығын сәйнәп тулаған аҫауҙай аҡ күбектәр төкөрөп, оҫоп алғанда күҙ йәшеләй үтәҙек-саф ыулы йылғалар аға; өҫтә, бик бейектә, суғыртмаҡ-суғыртмаҡ яланғас түбәләр тәңгәлендә, ҡанаттарын ҡара йәйәләй киреп, балапанлы ояларына улъя ағалаусы бөркөттәр ҡыйғырлай, зәңгәр күктән саңҡыуҙары саҡрымдарға тарала...

Суҡай-суҡай сал тауҙар ҡосағында, уралып-уралып аҡҡан йылға бөгәлендә киң үҙәнгә йәйерәгән ҡасаба Исламғол. Тәү ҡарауға ул тәрән йоҡоға талғандай: дүрт тарафҡа ҡарурманды ярып ингән тарлау арба юлдары — ылау ыҙ, шөңгөр йылға буйҙары — балыҡсы ыҙ, өҫкә ауа яҙып торған ҡарағай аралары — кеше еҙ: хәүефле ауҡан-аулаҡ. Бары тик ауыл ситендәге ҡусҡыл әрәмәлек кенә, аңлашылмаҫ иллек уйынын боҙоп, ҡапыл елкенгеләп ала — ғәм еҙ ойоған йылтыр ылыҫ аралығынан ҡара беҙҙәй мылтыҡ көбәге төртөп сығып, ирәк- аяҡ уҙғынсыға ас күҙен өңшәйтеп тоҫҡала:

— Стой, кем бар унда?

— Үҙебеҙҙекеләр!

— Пароль?

Артынса уҡ мылтыҡ шартлай әм:

— Ах сволочь!.. — Уҫал үгенеү яңғырай.

Ҡай ы саҡ, ҡылысҡа-ҡылыс сыңҡып, йән әселе ыңғырашыу булғылай. Ҡараҡаршы тороусылар ниңәлер хәтәр буталып, китте уйыш-ҡанҡойош, тигәндә генә, хәрбиҙәргә генә мәғлүм тылсым менән бер-бере ен аңлашып, ҡыҫҡа тынлыҡ урынлаша. Урмандан сыҡҡан ҡораллы, ҡыҙыл йондоҙ таҡҡан картузлы кешеләр йотлоға-йотлоға тәмәкеләрен тарта ла штаб урынлашҡан кантон бина ына йүнәлә.

Ҡай ы ваҡыт “Тукта, кем килә?” тигән ауазға үтә шикле тынлыҡ яуап була ла шатор-шотор ботаҡтар ҡырылғаны, шырлыҡ йырып кемдеңдер олаҡҡаны ишетелә. Артынса уҡ өҙөк-өҙөк улығып мылтыҡ шартлай. “Ыш-ыш” килеп, ағас ара ынан берәй ҡанлы кәүҙәне өйрәп сығаралар...

Ауылдың шыҡай ҡаялар ерәйгән осондағы берләм юлда арҡа ына ат башындай тире ҡуржын артмаҡлаған япа-яңғыҙ егет йораты ынланды. Ҡулына, ауыл малайҙарынса, йәш талдан ҡырҡып алып, йәшел ҡабығын бәке менән ҡырсып семәрләгән сыбар таяҡ тотҡайны. ағауыл тәңгәленән әллә ни тотҡарлыҡ ыҙ үтеп, 1918 йыл айылмыш уғышында йәҙрә ярсығынан киҫелеп Ҡантураты менән ҡуша ауғандан уң зәғифләнә биреп ҡалған ул аяғына саҡ ҡына сатанлай-сатанлай (сыбар таяғын юғары күтәреп таҡмаҡлатып болғап) юл ситенә сыҡты ла дымлы улышын тиртеп ялтырап ятҡан уйсан йылға ярына баҫты. Сыбар таяғын ергә ҡаҙап бер талай ҡарап торғас, артабан туйтаңланы. Ҡабаланмай ғына күпер урталығына етеп туҡтаны; күҙҙәрен сөрөштөрөп, йәнә ыу өҫтөнә оҙаҡ текләне — үҙенең тыуған ауылының йылға ын ағынды, буғай. Ҡыуаҡ төбөндә ҡалған ҡырыҫ аҡсылар ҙа ниңәлер күҙ яҙҙыртманылар унан. Әллә аман шикләнеп, әллә сәйер енеп, тауыш-тын ыҙ күҙәттеләр артынан. Юлаусының тоҙланып ҡатҡан алдат гимнастерка ы, шул уҡ төҫтәге галифе салбар өҫтөнә төшөп, яҫы ҡайыш менән ҡыҫа быуылып, уйҙан, ыҡсым кәүҙә енә егеттәрсә төҙөклөк биреп тора. Ҡозырегы йәмшек алдат фуражка ын башынан тырнап алды, ҙур аҡ (ғәжәп: ошо болғауыр заманда — аҡ!..) ҡулъяулығы менән тирле маңлайын өрттө. Ҡырып алынған ҙур таҡыр түбә е ҡояшҡа ялтыраны. ыу битендә бер-берәй нәмә шәйләпме, йылмай-

ҙы. Ҡарпышыраҡ ҡолаҡтары сәс еҙлектән уғата ҡарпайыбыраҡ күрен ә лә, был кешенең көньяҡ башҡорттарына хас эре ыҙатлы, ҙур ҡара күҙле ҡуңыр йөҙө шул бер ҡатлы йылмайыуында үҙенә күрә яғымлы, эскер еҙ ине. Шәп-шәп атлап күперҙе сыҡты, йылға ситенә төшөп, шәкәрҙәй аҡ шау ҡырсынды шағырлата баҫып ыуға яҡынланы, артмағын ергә ҡуйҙы. әрмәнеп, иҫке “Правда” гәзитенә төрөлгән итек таҙартҡыс, абын, таҫтамал алды. Бүкәнташҡа алмаш-тилмәш баҫып, таҙартҡысын ҡыҙыу-ҡыҙыу ышҡытып, итектәренән юл сандарын осортто ла вакса өртөп ялтыратты. Аҡтүбәлә дошман ҡамауын йырып сыҡҡас батырлығы өсөн бирелгән бүләк-итек был: махсус поезында фронттарҙы айҡап йөрөмөш Реввоенсовет рәйесе Лев Троцкийҙың үҙ ҡулынан берәүҙәр – затлы сәғәт, икенселәре – ут-ялҡындай ҡыҙыл “комиссар ыштаны” алды, ә Сәлимйәнгә ошо “батша итектәре” эләкте (ысын бул а, Николай батша өсөн махсус тектертелгән)... Яр башында ауыҙын асып ҡарап торған малай аҡтығы оҡланып тел шартлатты: йылтыр хром ҡуныстар, ыу көҙгө өнән нур көлтә е сағылтып, күҙ яуын ала ине.

Аяҡтары ялт-йолт килгән сәйер юлаусы тәү ҡараштa үлектәй тын ауыл буйлап хайран ҡала биреп барҙы: ҡайҙа еңгән был халыҡ? Бынауындай ҙа уттай ҡыҙыу эш мәлендә, көпә-көндөҙ, сүп ҡалҡытмай амҫып ултыралармы? Хатта эттәренә тиклем, өндәре тығылып, өрмәй: ҡасабаға шомло ағайыу тулышҡан.

Ауыл урта ына етәрәк хәүефле тойғоноң икенсе төрлө ө сорнаны; йөрәге йыш дөпөлдәп, үҙе лә белештермәй, аҙымдарын йышлатты: ҡайҙа ҡарама – ҡораллы кешеләр генә гиҙә урамда...

Бейек таҡта болдорло кантон идара бина ы алдында фуражка ына ҡыҙыл буҫтау йондоҙ баҫҡан, мыйыҡтары әленеп төшкән зә әр ҡарауыл туҡтатты:

– Стой! Кем килә?

– Үҙ кеше.

– Документтарығыҙҙы!

Каширин биргән ҡағыҙын ондо:

– Әтрәт командирын күрергә кәрәк.

– Штабҡа инергә рөхсәт юҡ. – Тексәйгән күҙҙәре йылтыр хром итектәрҙе әрмәне.

– Ашығыс йомош менән.

– Уны ы беҙгә ҡараңғы.

Болдор ишеге шығырлап асылды ла соланда тәмәке тартыусының ҡәнәғәт әм тулыш йөҙө күренде: остары бормаслап суҡайтылған йыуан казачий мыйыҡлы, кадровый хәрбиҙәрсә төҙ ынлы әҙәм – моғайын, элекке яугир офицер:

– Михайло, ни ғауға?

– Бер туземец үтергә ныҡый, иптәш начштаба.

– Ә ниңә үҙ ҡуйырта ың, патроның юҡмы әллә?

– Мандаты бар бит. Кашириндан.

Мыйыҡлы болдорға сыҡты:

– Ҡара ин уны, ниндәйерәк ҡош икән?

– Үҙәктән ебәрелдем, үтә мө им эш менән, – тине хром итекле, ағауылдың мандатты тегегә тоттороуын аҡ күҙәтеп.

– Ҡара ин уны! Башҡортмо?

– Башҡорт. Ләкин бында унын ни кәрәге бар?

Мыйыҡлы, тәмәке енең ебек төбөн аттыҡылай оҙон ары теште́ре менән өҙә тешләп, ергә төкөрҙө:

– Михайло, ҡамшаштыр шара-бараларын, живо!

аҡсы, өйрәтелгән эттәй алғыр ташланып, хром итекленең ек-япҡыттарын ыпырып-тентекләне, тире ҡуржындың булмышын болдорға ауҙарҙы:

– Ҡорал-фәлән юҡ, иптәш начштаба. Шулай ҙа бынауы хромдарын...

– Ашыҡмай тор, Михайло! – Егеткә ҡул иҙәне. – Киттек, малайка!

Егет, ауҙарылған мөлкәтен ашыҡ-бошоҡ йыйып алып, бер ҡулына – сыбар таяғын, икенсе енә ҡуржынын тотҡан хәлдә мыйыҡлыға эйәрҙе.

Иҙәне – иле балсыҡ, тәмәке төпсөктәре менән ҡаҡашып ҡатҡан далбаҙарылай бүлмә урта ында оҙон өҫтәлгә йәйеп алынған хәрби картаға күкрәге менән әүешә биреп, урта буйлы ҡаҡса-арыҡ әҙәм инеүселәргә төбәлеп ултыра ине. ары күндән бөткән шығырлауыҡ тужурка, шундай уҡ салбар, башында ла ап- ары күн фуражка. Билендә ары портупеялар менән тотторолған яҫы ары ҡайыш, шуға быҙау бото ҙурлыҡ ары таҡта кобуралы маузер аҫылған. Тәү ҡарауҙа был әҙәмде өҫтәл артына өйәп ҡуйылған күнҡурсаҡ тип уйларлыҡ...

Ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡылай нәҙек тауышы ҡәнәғәт еҙ сыйылданы:

– Был ниткән эш тағы, иптәш начштаба? Ниңә тәмәкең менән инәең?

– Ғәйеплемен, иптәш командующий. Бынауы мәшәҡәт тыуып, ташларға онотҡанмын. – Итек үксәләрен йылғыр сәкәштереп, ары тештәрен ыржайтып көлдө.

– Элекке культуралы атаман, офицер тип атала тағы. Батшаға хеҙмәт иткәнендә бер ҙә онотмаған ындыр... Етмә ә, әҙәм рәтле папирос та түгел; сыуаш мужигы кеүек, аҫы махра бора ың.

– Ах, инде бит батша хәҙрәттәре юҡ, иптәш командующий. Үҙем дә элекке генә. Ә хәҙерен власть үҙебеҙҙеке – теләгәнебеҙҙе рәхәтләнеп тартабыҙ.

– Был иҙәнде шуға күрә аҙбарға әйләндерҙеңме?

– Ғәйеплемен, иптәш командующий. Иҙән йыуыусы башкирка ҡасып киткән, ә ҡыҙыл әрмистәр бындай түбәнселеккә тотонмай, сөнки власть – үҙебеҙҙеке.

Ҡайышҡа бөткән әҙәм ыуына төштө. Бер ҡулына – ҡуржынын, икенсе енә сыбар таяғын тотоп аңшайып торған егеткә иғтибар итте:

– Быны ы ниндәй субъект?

– Ниндәйҙер бер малайка, иптәш командующий. Йәғни башҡорт.

– Башҡорт? Бандитты ниңә кереттегеҙ, шул урынында уҡ расходҡа сығармағыҙ?!

– Пардон, иптәш командующий: бандит үҙен, үҙәктән ебәрелмеш комиссармын, тип таныта. – Мыйыҡлы хихылданы.

– Ҡайҙан? Эстәрлетамаҡтанмы?

– Унан да өҫтәнерәк, ти, ха-ха-ха! Бына грамота ы.

– Мин – нығытылған хәрби район башлығы командарм Николай Дмитриевич Каширин тарафынан юлландырылған ғәҙәттән тыш комиссар-ревизор Сәлимйән Мырҙағолатов, – тине егет. арыға бөткән бәндә ары ҡайыштарын шығырлатып турайҙы, ҡағыҙҙы ентекле тикшерҙе:

– ем... ревизор... Кашириндың үҙ ҡултамға ы, мисәте... Тимәк, беҙҙең өҫтән ревизия я арға йыйына ың?

– Кантон администрация ы өҫтөнән.

– Беҙ үҙебеҙ администрация.

– Ғәфү итегеҙ, мин белгән иптәштәр...

Начштаба тигәндәре мыйыҡ остарын борғослап хәбәр итте:

– Шахта төбөндә улар... еҙҙең иптәштәр...

– Шаярта ығыҙмы әллә?

– Еп-етди: "теге донъя"ға бабалары янына олаҡтырҙыҡ бандиттарҙы. Телә әгеҙ, ревизия үткәрергә шунда китә ала ығыҙ, хе-хе-хе... – Үҙәккә үткес ыуыҡтан Сәлимйән ҡалтыраны:

– Аттығыҙмы?

– Аттыҡ. – ары күнгә бөткән әҙәм, иҫе китмәй генә дөрөҫләп, үҙенең әм

иптәшенең кем икәнлеген танытты: – Партияның яңыртылған кантон комитеты рәйесе әм коммунистик батальондың, шуға беркетелгән ҡыҙыл отрядтарҙың командующийы Владислав Евгеньевич Поленов буламын. Ә был иптәш – беҙҙең штаб башлығы Иван Степанович Барановский. Ғәли Камалитдинович Шәмиғолов менән Михаил Савельевич Мансырев иптәштәр етәкселегендәге яңы Башҡорт Ревкомы беҙҙе ғәҙәттән тыш әм сикләнмәгән вәкәләтлектәр биреп, башҡорт-бандиттарҙы тамам юҡ итергә ебәрҙе, яҡшы беләеге ҙер.

– Яҡшы беләм. әм бындағы алты коммунисты ла белә инем.

– Коммунист түгел улар, ә йәлитовсыларҙың ҡойроҡтары. Ундайҙарҙы асы ҡандалалай ыттыҡ әм ытасаҡбыҙ!

– Судҡа ла бирмәйенсәме?

– Хе-хе, беҙ үҙебеҙ – суд та, суд приговорын бойомға ашырыусы ла! – тине Барановский. – Беҙҙең бурыс – бандиттарҙы төбө-тамырынан көйҙөрөп юҡ итеү. Быны беҙгә йәлитовсылар зараза ынан таҙартылған республиканың коммунистик Ревкомы ышанып йөкмәтте.

– Ләкин еҙгә самосуд я арға тимәгән.

– Хе-хе-хе, үтә бер ҡатлы малайка икән егеҙ. уғыш ваҡытында ни эшләргә кәрәген белмәй егеҙ.

– Кантонда бит уғыш ваҡыты түгел.

Поленовтың ҡайыштары шығырланы – ҡәнәғәт еҙ боролдо:

– Ысын коммунисҡа хас булмаған сәйәси наҙанлыҡ күр әтә егеҙ! Кантонда ғына түгел, бөтә Башҡортостанда уғыш хәле иғлан ителеүен кире ҡаға ығыҙ! Бына яңы Башревкомдың 1-се анлы фарманының 4-се параграфы: *“Неисполнения или противодействия распоряжениям Башревкома будут караться по законам военного времени”*. Шул фарманды беҙ еренә еткерәбеҙ!

Сәлимйән өндәшмәне.

– Ҡыҙыҡ, ә еҙ аслан ниндәй бурыс йөкмәп килдегеҙ әле? – тине Барановский.

– Уны ын мин белдерҙем, мандатымда ла яҙылған. Минең хәҙерге статусымды ВЧК рәйесе Феликс Эдмундович Дзержинский иптәш раҫлаған, Кашириндан барып орағыҙ.

Командующий менән штаб башлығының мәғәнәле күҙ ҡараштары осрашҡас, уңғы ы ҡулын уҙҙы:

– Дөрөҫләүсе ҡағыҙ? Шун ыҙ танымайбыҙ!

– Вазифамды үтәүгә аяҡ сал ағыҙ, Ревтрибунал ҡаршы ына баҫтыртылып таныр ығыҙ, биғәйбә.

Тынып фекер тупланылар. Поленов, арыҡ йөҙөн сытырайтып, комиссарға ҡаҙалды:

– Электән белеүемсә, Мырҙағолатов иптәш, еҙ бит буржуаз милләтсе Йомағолов хөкүмәтендә эшләй инегеҙ?

– РКП(б) өлкә комитеты ҡарары буйынса, мин ул хөкүмәттән киттем – ВЧК-ның йәшерен ҡарарына ярашлы, Каширин иптәш етәкләгән хәрби нығытма районына күсерелдем.

– е! Ә ниңә буржуаз әтрәгәләм менән бергә тайманығыҙ?

– Сөнки мин буржуаз түгел.

– Каширинсы, тимәккә бара ығыҙ?

– Каширин иптәш менән бергә Ҡыҙыл Армияның Көнсығыш әм Төркөстан фронттарында аҡтарға ҡаршы алыштарҙа ҡан ҡойоп, күп тоҙ ейгән инсанмын.

– Ғәфү, ә еҙ аслан ҡай ы партияла тора ығыҙ: меньшевикмы, эсермы, әллә йәлитовсымы?.. – Владислав Поленов күҙҙәрен хәйләле ҡыҫты. Мырҙағолатов, сырайының бер йөйөн дә сирытмай, түш төймә ен ыҫҡындырып, ныҡ тештәре

менән гимнастерка ының иҙеүен тешләп йыртты, йәшерен кеҫәнән ябай ҡыҙыл ҡатырға тышлы кескәй кенәгә сығарҙы – Ырымбур гөбөрнә е Орск өйәҙендә үҙе ойошторған партия комитетының 1-се номерлы ағзалыҡ билеты ине.

– О! Ырымбур! – Командующий Ырымбурға айырым ышаныс тотҡанлығын тойҙортто. Түшен кәперәйтеп, шығырлаҡ портупеяларын бармаҡ остары менән төҙәтә-төҙәтә, ни айәт, ҡулын биреп күреште:

– еҙҙең кеүек үк, 1918 йылдан партия ағза ымын – шанлы большевик Точисский Павел Варфаломеевичтың шәхсән үҙе тарафынан ышаныс белдереп алынғанмын. Ә был иптәш, күрә егеҙ, минең штаб башлығым, военспец. Ун игеҙенсе йылда уҡ үҙе теләп большевиктар яғына сыҡҡан, ерле контрреволюцияға ҡаршы уғыштарҙа ыналған.

Ҡылысының ебәк эфесы менән уйнап вайым ыҙ ғына күҙәтмеш иптәш Барановский ҙа, теләр-теләмәҫ кенә, комиссарҙың ҡулын ҡыҫты:

– Ғәфү итегеҙ, белеп еткермәгәнбеҙ...

Мырҙағолатов, үҙгәреште иғтибар ыҙ ҡалдырып:

– Тәүбашта мине мөхит менән таныштырығыҙ, – тип ҡоро киҫәтте. Шуны ғына көткәндәй, ашығышып, топографик картаға әүештеләр. Поленов үҙе аңлатты:

– Обстановка хөрт, әйтерлек түгел. Бер юлы өс кантон дөрләй ут эсендә. Совет яҡлыларҙы аталар, киҫәләр, урыҫ ауылдарын үртәйҙәр. Кулак агитаторҙары айҡала. Бер киҙәнеүҙә ажда аның башын сабып өҙмә әк, күтәрелеш бөтә Уралды ялмаясаҡ.

– Көстәр нисбәте ҡай ылай?

– Ауылдарҙа, юлдарҙа, урман аҡлауыстарында фетнәселәр өҫтөнлөк итә. Тауҙарҙа банда ҡоторона. Беҙҙең коммунистик батальон, өс әтрәткә бүленеп, ут ҡулса ы эсендә тип әйтерлек, ҡыйыу хәрәкәт итә... Хәйер, быны ын теүәлерәк итеп начштаба үҙе картанан күр әтер. Рәхим итегеҙ, иптәш Барановский.

Теге енең ҡәләм осо карталағы билдәләр өҫтөнән икерҙе:

– Бына был ҡыҙыл тәре уғылған ауылдар – ысын янғын усағы. Ә бына бында, уңғы мәғлүмәттәргә ҡарағанда, етәкселек үҙәге булырға тейеш. Шуны ы ғәжәп: ҡасаба тәңгәлендә Урал ыртын көнсығыш яҡлап уҙған тимер юлды шартлатмағандар – аман поездәр үткеләй. Ә магистралдең буйынан-буйына, пушка уты барып етер арауыҡта – башҡорт-бандит ауылдары...

Поленов элеп алды:

– Бына шул уңай стратегик положениены файҙаланып ҡалыу кәрәк. Контрреволюция гидра ын иҙеп ташларға...

– Фекерегеҙ аңлашылмай, – тине комиссар.

– Оператив план шундай: тимер юл буйлап ҡорос йоҙроҡ – бронепоездан уҡтыртырға.

– Бронепоезд?

– Эйе, – Поленов йоҙроғон карта өҫтөнә алды. – Златоустан Көнбайыш фронтҡа баштан-аяҡ ҡоралланған бронепоезд уҙасаҡ. Өфөнән дә Ҡарталы аша Лев Маневич командалығындағы бронепоезд килеп етергә тейеш. Дошман башына артиллерия уты яуҙырыу ифрат ҡулай.

– Дошман тигәнегеҙ ябай ҡарт-ҡоро, ҡатын-ҡыҙ, бала-саға булып ҡуймаҫмы? Үҙегеҙ үк әйттегеҙ: ир-ат тауҙарға киткән.

– Был халыҡтың көллө ө – бандит, осраған берен ерҙән ҡырсып ташлау фарыз. Коммунислыҡ бурысыбыҙҙы еренәсә еткереп...

Сәлимйәнде тәрән борсолоу ялманы: ошо мәлдә үҙе лә ялҡын эсендә ултырмаймы?.. Барановскийҙың итәғәтле аңлатыуы иблис шауҡымылай тойолдо:

– еҙ үҙегеҙ ҙә хәрби кеше күренә егеҙ, иптәш комиссар. Совет иле өсөн ошо моменттың ни ҡәҙәре ҡатмарлылығын беҙҙән дә яҡшыраҡ белә егеҙҙер. Әле яңы

ғына Колчак бандаларынан арынып, Көнсығыш фронтты ябып, булған көсҡеүәтте Көнбайышҡа – поляк пандарына ҡаршы йүнәлткәнбеҙ. Шул уҡ ваҡытта ос оҙ-ҡырый ыҙ Себер урмандарында – ала-ҡола банда ҡалдыҡтары; Алтайҙа – баш күтәреү, ә Ҡытай сигендә недобитый атаман Дутов, Семенов, Пепеляев башкиҫәрҙәре; уларҙы Советтарға ҡаршы өстөрөүсе Антанта – күҙ йоммайынса үҙ өңөнән ағалай, ҡабат боғаҙҙан алыу сәғәтен көтә. Башҡортостан тауҙарында, Тамбов урмандарында баш күтәреүселәр мыжғый. Бына шул ут усаҡтары дөрләп бергә тоташты тип күҙ алдығыҙға килтереп ҡарағыҙ әле...

– еҙ үҙегеҙ быны бик яҡшы күҙаллай ығыҙ, буғай, иптәш начштаба...

– Уны ы хаҡ.

– Шуның өсөн дә дөрләү усаҡҡа кәрәсин ибергәме? Атып-киҫеп, язалап...

Поленов әсе йылмайҙы:

– Ғәфү итегеҙ, башҡорт-коммунист иптәш: беҙ милли хистәрҙән юғары! Башҡорт-бандитты башы оҙонлоҡ ҡыҫҡартыу – беҙҙең изге бурысыбыҙ. Революция дошмандарына аяу ыҙлыҡ – ул үҙе юғары революцион гөманлылыҡ, тигәйне иптәш Ленин. Яҡшы белә егеҙ: Советтарға ҡаршы баш ҡалҡытҡан кулактарҙы рәхим еҙ ҡырырға саҡыра ул. Ә беҙҙең ҡаршыла – тап шундай кулак фетнә е. Намыҫлы әр коммунистан, ҡыҙыл әрмистән бында дошманға ҡарата көйҙөргөс әсе нәфрәт, үс, ҡаты ҡул талап ителә. Әгәр ҙә ысын коммунист икән егеҙ – эшегеҙ менән аҡлағыҙ, ти замана.

Мырҙағолатов артабан үҙ көрәштереүҙең файҙа ыҙлығын аңланы. Маңлайын ырландырып, уйланды.

Болалы кантондарҙы тикшерергә ошо хәтәр сәфәренә китер алдынан партия өлкә комитетында өлкән иптәш тарафынан бирелгән кәңәште хәтерләне. Паровоздар депо ының элекке слесары, хәҙер тимер туты ла бөтмәгән ҡулдары менән юғары партия эшенә тотонған ҡарсығаҡарашлы, яҫы маңлайлы зирәк урыҫ кеше е уға кантондарҙағы болғаныштарҙың асылын ҡыҫҡаса аңлатып, урындарҙағы ҡай ы бер идара органдарында, хатта ҡораллы коммунистик әтрәттәрҙә лә Совет хакимиәтенә аҫтыртын аяҡ салыусы йәки бөйөк державасылыҡ шовинизмы менән ауырыусы шикле бәндәләр булыу ихтималлығын, шуға күрә халыҡ ара ында ифрат та аҡ эш итеү, дошмандарҙың мәкеренә бирешмәү кәрәклеген әйтеп киҫәткәйне.

– Был ҡуҙғалыш, минең уйымса, ябай фетнә йәки бандитлыҡ түгел, ә бик етди милли-азатлыҡ хәрәкәтенә оҡшай. Башҡорт халҡына ҡарата дөрөҫ милли сәйәсәт алып бармауыбыҙ бәлә елер. уҡты-бәрҙе итеп кенә бөтөрөрлөк түгел уны – тамырҙары тәрәндә. Бик сос булырға, ерле халыҡтың тын алышын тоя белергә, ғәҙәттән тыш аҡ эш итергә кәрәк. ин – ыналған коммунист, башҡорт коммунисы. Аҡты ҡаранан айыра ың, милләтеңдең а -зарҙарын, хыялдарын аҡылың менән дә, йөрәгең менән дә тоя ың. Бына ниңә беҙ ифрат яуаплы был эште тәғәйен иңә ышанып тапшырабыҙ. Шикләнмәйем: уны ин өттән аҡ, ыуҙан пак булып башҡарып сығыр ың.

Дөрөҫ, Мырҙағолатов ошо яуаплы вазифа ы менән йәш республиканың сәйәси яҡтан хәүефле көньяҡ кантонында йөрөгәнендә ваҡиғалар яңы үҙгәреш алып, элекке хөкүмәт урынына яңылар – Сәлимйәнгә эшмәкәрлегенең Ырымбур осоронан уҡ яҡшы таныш сәйәсмән, Башҡортостан автономия ының хас дошманы Ғәли Шәмиғолов төркөмөнөң килеүе әм башҡорт халҡы был өйөрҙө оло нәфрәтләнеп ҡаршылауы, кантондарҙа, бигерәк тә Урал тауҙары ара ында, шуға бәйле ҡанлы болғаныштар көсәйеүе мәғлүм булды. “Әммә бөгөнгө донъябыҙҙың төп ҡануны үҙгәрмәй: хөкүмәт әм партияның өлкә комитеты алмашын а ла, коммунистар партия ы үҙ урынында ҡала – ялпыларҙы яҡты көнгә сығарыу, барса милләттәргә лә тиң хоҡуҡтар биреү сәйәсәте бер көйөнсә дауамлана, шуны бой-

омға ашырыу – мөҡәддәс бурысым!”– тип уйланы алмашынмаған коммунист Мырҙағолатов әм үҙ бурысын үтәүҙе дауамланы...

Бында килерҙән элек, Үсәргән кантон үҙәге ителгән урыҫ ауылы Сабатарҙа урындағы әүҙемәндәр кәңәшмә е булғайны. Кантон хәрби революцион комитеты рәйесе Чистяков иптәш теҙгенде ҡыҫҡа тотто:

– Поленов – ысын коммунист, интернационалист. Уның тура ында төрлө насар хәбәрҙәр йөрөй, ләкин беҙ быны нәфрәтләнеп кире ҡағабыҙ. Башҡорт контрреволюционерҙары тарафынан таратылған бысраҡ яла тип иҫәпләйбеҙ. Владислав Евгеньевич Поленов иптәш – бөтә Уралға билдәле ҡарт большевик Точисскийҙың шәкерте, шанлы 1918 йылда Зәкир хандың аҡ бандаларына ҡаршы уғыштарҙа ыналған ҡыҙыл яугир. Ҡыҫҡа ы, сыныҡҡан гвардия. Ә инде беҙҙең райондағы башҡорт-бандиттарҙың да башына етә икән – был факт үҙе уның файҙа ына өйләй. Пролетар революцияның тутыҡмаҫ үткер ҡылысы ул!

Ләкин, кантон идаралығындағы төрлө ялыу ҡағыҙҙары, ҡулға алынған кешеләрҙең күр әтмәләре менән танышҡас, күңеленә әсе юшҡын ултырҙы. Поленов хәрәкәт иткән ҡанлы төбәктәрҙе тикшереп бөтмәй тороп, Эстәрлетамаҡҡа ҡайтмаҫҡа ҡарар ҡылғайны, инде килеп шул ҡарарының дөрөҫлөгөнә инанды. Ул үҙенең ябай “башҡортлоғо” менән дә үтәнән-үтә күреп, ике-ара киҫкенлекте ҙур ҡан ҡойошмай бөтөрөү яйы барлығын, уң түгеллеген иҙенә. Әгәр ҙә шул форсатты ҡулдан ысҡындырмайынса хәҙерҙән үк ҡыйыу аҙымдар я ап ҡалма а, үҙен ҡулға алдыртырға йәки физик яҡтан юҡ иттертергә мөмкинлек бир ә, ҡасанмы үҙәктән яңы кеше йәки көс килеп еткеләгәнсе эш уҙып, кереше нығ тартылған уҡ атылып, дарья-дарья ҡандар ағасаҡ... Юҡ, коммунислыҡ әхлағы юл ҡуймай быға!

Бүлмәлә тәрән тынлыҡ. Ихтыяр ыҙҙан, өсө ө тиң ауыр улыш алып, уйландылар.

– Дары мискә е өҫтөндә ултырабыҙ, – тине Барановский. – Дошман лагерында поголовный мобилизация, ҡоралланыу бара. Биленә ҡылыс тағырҙайҙың бары ы аяҡҡа баҫҡан, атҡа менгән. “Реввоенсовет” исеме аҫтында үҙҙәренең контрреволюцион органын айлағандар – башында Аҡмулла тигән я ил милләтсе, контрреволюционер тора...

– Аҡмулла түгел – Аҡмал, – тип төҙәтте теге е.

– Барыбер. Бына шул Аҡмал, ҡанэскес главарь, яҡындағы разъездан бер вагон тимер талап алып, тау ара ында ҡорал сүкергә керешкән. Тирә-яҡта димселәре диңгеҙ кисә, беҙҙең агенттарҙы ла үҙенә ҡарата...

– Кисә генә өсәүен эләктерҙек, – тине Поленов. – Изге ата-бабаларына китергә сират көтәләр.

– Йәғни?

– Расходҡа сығарабыҙ. уғыш ваҡыты.

Сәлимйәндең мейе ендә йәшендәй уй ыҙылды:

– Килтерегеҙ әле миңә шуларҙы, ҡылдарын тартып ҡарайым.

– Уларҙан бит, тәнен уйып ал аң да, үҙ сығырлыҡ түгел. Юҡ менән булмағыҙ, иптәш комиссар.

– Килтерегеҙ, уны ын үҙем белермен.

Барановский теләр-теләмәҫ ҡуҙғалды, ишек ҡыҫығынан тышҡа ҡысҡырҙы:

– Михайло, елтерәт ендәр әлеге бандиттарҙы!

2

Штабҡа өс тотҡондо индерҙеләр. Бере е ҡолғалай оҙон, шыҡ ыҙ арыҡ кәүҙәле, нәҙек кенә ерән кәзә аҡаллы, бесәйҙекеләй йәшкелт күҙле. Башына ҡайышланып ҡатҡан йәшел хәтфә түбәтәй, иңенә ала-ҡола буйлы оҙон кәзәкей өҫтөнән ҡапла-

тып иҫке елән, аяғына ирнәүҙәре кителеп, морондары ашалып бөткән ҡаты күн ҡата кейгән. Вәлиулла икән уның исеме. Икенсе е, уртаса буйлы ы, ялтас яланбашлы, маңлай аҫтынан уттай яндырып өҙөп ҡараусан күмер-ҡара күҙле е, аяҡтарына бере енең табанбашы айырылып, бармаҡтары күренеп торған аҡ сарыҡ, өҫтөнә оро дөйә йөнөнән туҡылған ҡытыршы ерән сәкмән кейеп, билен сүс бау менән быуған; исеме Ғайса, имеш. Өсөнсө ө, тулыш-мыҡты кәүҙәле Йәмил тигәне, яңыраҡ ҡына алдат хеҙмәтенән ҡайтҡан ҡыҙыл әрмис булырға тейеш: күпте күреп таушалған хәрби кейемле. Буйға тәбәнәгерәк бул а ла, яурыны ҡалын, күкрәге киң, маңлайы яҫы, күҙ ҡарашы үткер, аҡыллы кеше ымаҡ. Донъя ҡуласа ын үҙ ҡулында әйләндереп күнгән алдаттарға хас ҡыйыу ҡиәфәтенән, нәҙек кенә ҡара мыйыҡлы йөҙөнән тотанаҡлыҡ, ихтыяр көсө тиртә. Әммә өсө ө тиң интегеп йонсоған. Өҫтәл тирә ендәгеләргә асыҡтан-асыҡ нәфрәт, үс менән ҡаранылар.

— Йә, бандиттар, атайығыҙҙың йомшаҡ түшәгендә яҡшы йоҡланығыҙмы, ҡабырғаларығыҙ ынманымы? — тине лә Поленов, ике сикә е ҡыҙышып ҡысҡырҙы: — Ниңә ерәйҙегеҙ, сүгәләгеҙ анауында!

Бер ыңғай ҡуҙғалып, мейес буйындағы оҙон эскәмйәгә ултырҙылар. Яңылыҡ була ын шәйләп, буғай, был урында сәйер күренгән башҡорт ҡиәфәтле кешегә — комиссарға ҡаранылар. Сәлимйән, иғтибар итмәгәндәй, өҫтәлгә текләгән килеш ултыра бирҙе.

Эскәмйә борсолоп шығырланы, ҡәнәғәт еҙ тамаҡ ҡырыу, йүткереү... Сәлимйән, башын ҡалҡытып, вайым ыҙ ғына ораны:

— Йә, егеттәр, өйләп ебәрегеҙ әле. Кем була ығыҙ?

— Беҙҙең кем икәнде анауҙан белеш! — Ерән сәкмәнле Ғайса, ҡуҙлы-ҡара күҙҙәрен ялтыратып, Барановскийҙы көйҙөрҙө, айырыҡ башлы сарығы менән иҙәндә ятҡан тәмәке төпсөгөн типте.

— Кем тип ни, бандиттар беҙ, — тине ҡолға буйлы, ерән аҡаллы Вәлиулла ы. Барановский "бандит"ҡа бармаҡ тоҫҡап, күҙҙәрен секерәйтте:

— Ҡара-ҡара, ҡай ылай кәперәйә! Бесәй белә кем майын ашағанын! — Сәлимйәнгә аңлатты: — Ғайса Талипов тигән башкиҫәр була был, иптәш комиссар. Исеме Ғайса пәйғәмбәрҙеке бул а ла, торғаны менән бандит — ҡиәфәтенә бағығыҙ. Көпә-көндөҙ үҙ әсә ен тотоп уймаҫ был, тимә... Ә быны ы, — тәмәке ыҫы арғайтҡан бармаҡ ҡолға буйлыға тоҫҡалды, — был тоҡ кейҙертелгән ишан таяғы — Вәлиулла Әғләмов тигән изге Мөхәммәт пәйғәмбәр вариҫтарылыр. Еләне менән таҡыя ы ғына ла үҙе ни тора: любой Европа музейына илтеп алырлыҡ! Ғүмере буйына мәсет аҡлап, ҡатахана таҙартып мөкиббән киткән ҡараҫҡы. Шул көйөнсә революция тәгәрмәсе араса ына хәлифә таяғын тығып, әҙәм рәтенән контрреволюция ойоштороп йөрөгән була, гнида! — Сәлимйәндең күҙҙәренә ирпелеп көлдө: — Ат дағалағанда баҡа ботон ҡыҫтырған, тиҙәрме әле еҙҙең башҡортта, ха-ха-ха! — Үҙе тапҡан сағыштырыуға кинәнеп, йәштәре бытлыҡҡансы хахылданы.

— Степаныч, етәр, өсөнсө өн тасуирла! — тип бүлдерҙе кәйефләнеп тамаша ҡылыусы Поленов.

— Ә өсөнсө ө, пардон! "Таш мәсеткә — ағас мулла" тигән әйтем дә бармы әле еҙҙә? Тап шул ағас мулла була инде был — өсөнсө көнгө мөғәллим, кисәге ҡыҙыл әрмис-дезертир, бөгөнгө йөҙ процентлы бандит Ша имырҙанов Йәмил әфәнде хәҙрәттәре...

— Ҡыҫҡа ы, өсө ө тиң отъявленный бандит — верховный бандит Аҡмалдың вәзирҙәре! — Поленов йомғаҡланы. — Степаныч, дауам ит.

Барановский, салбар кеҫә енән ҡарҙай аҡ ҡулъяулыҡ алып, мәрәкәләүҙән мөлдөрәгән татлы күҙ йәштәрен өрткәс, ипкә килеп, Вәлиуллаға төбәлде:

— Йә, мәсет ҡарасҡы ы, өйләп ебәр әле комиссарға тылсымлы ҡантурат хаҡындағы мәрәкә-әкиәтеңде! — Яурындарын елкетеп, йәнә кинәнеп көлдө. Донъянан ваз кискәндәй вайым ыҙланып иҙәнгә текләгән “мәсет ҡарасҡы ы” шул ыңғайҙа кинәт ушына килеп ырғып торҙо, үтә ҡурҡып ҡалтырауҙан танау япраҡтары өрөлөп, күҙе маңлайына күсте. Диуаналарса тилмереүле ялуарҙы:

— Зин ар, әйтә күрмәгеҙ, әйтә күрмәгеҙ!..

— Сергей ҡантуратымы әле ул? Ха-ха-ха!

“Ҡантурат” үҙен ишетеүҙән Сәлимйән дә тертләне — айылмыш йылға ы буйында аҡтарҙың йәҙрә ярсығынан киҫелеп йән биргән Ҡантураты ынланды йәнә күҙ алдында...

— Әйтә күрмәгеҙ, әйтә күрмәгеҙ!.. — Тотҡон, ҡолаҡтарын устары менән томалап, ауыҙынан аҡ күбек аҡтарылып, эскәмйәгә әүшәрелде.

— Етәр, сирле кешене ниңә язалай ығыҙ? — тине мөғәллим Йәмил.

— Молчать! иңә лә сират етер! — Тотҡондоң сәйер ҡылығын аптырабыраҡ күҙәткән комиссарға төшөндөрҙө: — Пардон! еҙгә, Европа яғы башҡортона, бындағы, йәғни Урал артындағы хөрәфәт билдә еҙҙер. Азия! Йыйын ҡараңғы халыҡ — тау ҙа таш, урман да сытырман, тигәндәй... Менеп йөрөгән аты менән ҡымыҙ көрәгә енән башҡаны күрмәй, әле бул а ярым мәжүсилек ҡосағында төрлө ыу эйәләренә, ен-пәрейҙәргә табынып йәшәй башҡорт. Ҡаршығыҙҙағы ла тап шундай типтарҙың бере е. “Сергей ҡантураты” тип ысҡындырҙыңмы, ҡомдай ҡойола ла төшә. Имеш, уларҙы ошонда ниндәйҙер мифик “Сергей ҡантураты” эҙәрләп килгән дә, беҙҙең постарҙы үтеп бөттөк тигәндә генә ауа ярып кешнәп, өсө өн дә тотторған... Әйтергә кәрәк, ул мифик ҡантурат тура ында регионда имеш-мимештәр йөрөй. Шулаймы, мөғәллим әфәнде? — Йәмил быны иғтибар ыҙ ҡалдырҙы. — Бандит, телеңде тешләнеңме?! Комиссар алдында яуап бирген килмәйме, сукин сын! — Йомарлаған тос йоҙроғон тейешле еренә төшөрмәй саҡ тыйылып ҡалып, Сәлимйәнгә боролдо. — Күрегеҙ, иптәш комиссар: башкиҫәрҙәр “Ревво-енсовет”ының ағза ы, Аҡмулланың, — әй, тфү! — Аҡмалдың урынбаҫары Ша и-мырҙанов үҙе була инде был. Шулай бит, Йәмил әфәнде?

— Ҙурлауығыҙ өсөн рәхмәт, господин бывший казачий офицер!

— Ах сволочь! — Барановский тондорғайны, тегенең ауыҙынан боролдап ҡан китте, тамаша ҡылған Поленов зауығы өҙөлөп сыйылданы:

— Степаныч! Күпме әйтергә була, ниңә бында?

— Ғәйеплемен, иптәш командующий, еңелсә генә ҡағылдым... — Ауыҙын ыржайтып йылмайҙы. — Бандиттарҙы әр ерҙә өйрәтеү фарыз.

— Рәхмәт, яҡшы абаҡ бирә егеҙ. — Йәмил иҙәнгә ҡыҙыл күбек төкөрҙө. — Николай батша заманында беҙҙең тештәрҙе господа офицерҙар уғып ындыра ине, хәҙер иптәш командирҙар рәхәтләнеп башҡара... Шулаймы, комиссар?

— Шулаймы, түгелме — ләкин эш унда түгел, Ша имырҙанов уҙаман. Эш бөтөнләй башҡала — йәшәргәме, йәшәмәҫкәме беҙгә? — Сәлимйән мөғәллимгә текләп ҡараны.

— Кем ул “беҙ”? Икебеҙ ике ярҙа тора түгелме? Эштәр былай бар а, кемгә йәшәргә икәнен Хоҙай үҙе генә белә.

— Күреп торам: аҡты ҡаранан айыра ың, күҙең үткер. Мин дә ине үтәнән-үтә күрәм. Шулайғас, ваҡытты әрәм итмәйек, әр сәғәтебеҙ, минутыбыҙ ҡыйбат. Ике ярҙа тороуыбыҙҙан фәтүә юҡ. Уртаҡ тел табып ҡул бирешәбеҙме бөгөн, юҡмы — шуға ҡарап халҡыбыҙҙың яҙмышы, ғүмере хәл ителә... Тура ын ғына әйткәндә, был яҡҡа ни йомош менән юлыҡтың?

— Иптәш командирҙарға әйткәйнем шикелле инде! — Йөҙөнә ерәнес ишараты сығарып, Поленов менән Барановскийҙар яғына эйәк ҡаҡты.

– Уны ы миңә ҡараңғы. Ошо минутта ин минең менән, йәғни РКП(б) өлкә комитетының әм Башҡортостан хөкүмәтенең ғәҙәттән тыш ревизор-комиссары, еҙгә төбәп ебәрелгән илсе е Сәлимйән Мырҙағолатов менән өйләшә ең.

Өсө ө тиң баштарын салт ҡалҡытты, өмөтләнеп төбәлде. Тик шул мәлдә үк үрелеп, йәнә түбән эйелделәр.

– Беләбеҙ еҙҙе. Мынауы командирҙар ҙа РКП(б) исеменән өйләшәләр, – тине Йәмил. – Теге донъяға китәсәгебеҙҙе лә уның исеменән вәғәҙә иттеләр.

– Тота килеп тотош партияны ғәйепләргә ярамай.

– Ярайлы, ярамаймы – инде беҙгә барыбер. Ҡәбер төбө кем өсөн дә ҡараңғы.

– Ә ин унда ашыҡма. Үҙеңде, халҡыңды уйла.

– Етер, күп уйланыҡ! Ысын илсе икәнеңде иҫбат ит! – Ғайса тигәне елләнеп ырғып торғайны, салғыйынан тартып сүктерҙеләр.

– Яҡшы. Бөгөн төндә атылырға тейешлегегеҙҙе белә егеҙме?

Өндәшмәнеләр.

– Беренсенән, мин еҙҙе үлем яза ынан ҡотҡарам. Икенсенән, өсөгөҙҙө лә иҫән-имен өйөгөҙгә ҡайтарам. Шул еткәнме?

Был юлы ла өн сығарманылар.

– Иптәш командующий, ғәҙәттән тыш вәкәләтлегемә таянып, революция исеменән бойорам: тотҡондарҙы хәҙер үк аҡ аҫтынан азат итегеҙ! – тине Сәлимйән.

– Иптәш комиссар! – Поленов ҡобара ы осоп сыйылданы.

– Үтәгеҙ. Революция бойороғо!

Поленов, эске тулауын баҫырып, ишек төбөндә шыҡайған аҡсыларға сығып китергә бойороп баш ҡаҡты. Яҙмыштарының боролошона ышана алмаған өсәүгә:

– Дүрт тарафығыҙ ҡибла – башығыҙ тартҡан яҡҡа тайығыҙ. Тағы ла эләк әгеҙ, үҙегеҙгә ҡарап үпкәләр егеҙ! – тине.

– Туп-тура эшафотҡа! – Барановский ҡул төйҙә е менән боғаҙын салып күр әтте.

Мейес буйында үҙ-ара быш-быш серләшкәс, Йәмил алғараҡ сыҡты:

– Беҙ, комиссар иптәш, ҡасыш-боҫош уйынын яратмайбыҙ. Сысҡан ымаҡ алдаштырып, ҡапҡанға төшөрөргә ит әгеҙ, бик ныҡ яңылыша ығыҙ.

– Бер кем дә ҡапҡан ҡормай. Поленов иптәш әйтмешләй, дүрт тарафығыҙ ҡибла.

– Юҡ инде, былай ғына китмәйбеҙ! Бәлки, коммунистар ғәҙәтенсә, арҡабыҙға атыр ығыҙ, әммә дөрөҫөн баҡтыртып өйләп китәсәкбеҙ.

– Улай а, эскәмйәгеҙҙе бирерәк шыуҙырығыҙ.

Ултырыштылар. Сәлимйән дә ултырғысын яҡынырак килтерҙе. Икмәк-тоҙлоҡ башҡортса белгән командующий менән штаб башлығы и ә бер ситтәрәк ағайып тыңланы.

– Әйтегеҙ әле, ни өсөн уғыша ығыҙ?

– Совет власы өсөн.

– Совет власы өсөн – Совет власына ҡаршымы?

– Коммунистарға ҡаршы.

– Коммунистар – шул уҡ Совет власы бит? Бына мин, мәҫәлән.

– Анауы коммунистар – шул уҡ Совет власымы? – Ғайса тигәндәре Поленов менән Барановский яғына ишараланы. – Юҡ, ундай Совет власы кәрәкмәй беҙгә!

– Беҙ – ысын эшсе-ерекмән власы өсөн! – тине Йәмил.

Сәлимйән көлөм өрәне:

– Уҙамандар, шул власты төҙөргә лә нығытырға кем ҡамасаулай еҙгә?

– Беҙҙең тире эсендә йәшәп ҡара ағыҙ, улай тимәҫ инегеҙ.

Уткүҙ Ғайса, теш ара ынан ыҙыра төкөрөп, асыҡтан-асыҡ нәфрәтләнде:

— Барығыҙ ҙа бер ҡалып: ил янғанда күмер сүпләп көн күреүселәр. Башҡортмон, тигәс тә, аҡыл атып тел сарлауҙан ни файҙа? Утлы табала бейетеп ҡанманығыҙмы? Юҡ, ғәҙеллек юҡ был донъяла!

— Ғәҙеллек бар ул, уҙаман. Тик уны күктән көтөп ятырға ярамай. Ул әр ярлыялпының үҙ ҡулында.

— Үҙ ҡулыбыҙҙа бул а, үҙ өйөбөҙҙә малдай уймаҫтар ине. Эстәрлетамаҡта ултырып, шуны ла күрмәй егеҙ. Күрергә лә теләмәй егеҙ!

— Дөрөҫөн әйткәндә, юғарылағы түрәләр бит улар башҡорт халҡын берәй уғыш йәки бола ҡупҡанда ғына иҫкә төшөрә! — тине Йәмил. Сәлимйәндең тамағына төйөр тығылды:

— ин улай, уҙаман, бөтәбеҙҙе дегеткә буяма әле, — ҡоро, ҡырыҫ сыҡты тауышы. — Аҡ эттең бәлә ен ҡара эткә яп арма.

— Беҙҙең хәлдәр эт илағыс шул, иптәш... Бында ултырып фараз ҡылыуы еңел...

— Аҡмуллағыҙ кем уң ул?

— Аҡмалды әйтә еңме? Кем тип ни, аҡалы биленә төшкән сап-сал ҡарт инде... аҡ аҡал... Йәшлегендә Иҙелбаш заводында тимер сүкегән. Япон уғышында ҡатнашҡан. Артабан ҡан ҡойошмай ғына килешеү өсөн илсе итеп ебәргәйне лә беҙҙе... илсегә үлем юҡ, тигән булып... Эстәрлетамаҡҡа шул йомоштан китеп барышлай ине...

— Әллә унда башҡа төрлө коммунистар ултыра ти егеҙме?

— Тимәйбеҙ, унда Мәскәү коммунистары ла эш иткәнен беләбеҙ. Шулар аша тура Ленинға тоташырға ине ниәт.

Сәлимйән Мәскәүҙең Башҡортостандағы ике вәкилен күҙ алдына килтерҙе: Самойлов — наҙан, Сергеев-Артем — мәғрифәтле шовинист, ике е лә автономияға ҡаршылар; шулар арҡа ында Башҡорт хөкүмәте вазифа ынан ваз кисте, улар урынына я ил шәмиғоловсылар ултырҙы; бындағы ҡан ҡойошҡа ла аслан шулар ғәйепле... Ләкин әле әйтелгән изге ниәттәрен аҡлар өсөн, ҡан ҡойошто туҡтатыр өсөн мөмкин булғандың бөтә ен эшләр мәл етте, ошонда яҙмыш шуны уға йөкмәтте...

— Тоташыр ығыҙ. Тоташырбыҙ. Мин үҙем еҙҙең менән сәфәргә сығам —хәләхүәлдәрегеҙҙе үҙ күҙем менән күрергә тине. Поленов менән Барановский быны тыныс кисерҙе, сөнки улар өсөн артыҡ бүрәнә башының күҙҙән олағыуы мө им: башына бандиттар ет ә — бик әйбәт, ә инде улар яғында тороп ҡал а, мандатҡа ҡул ҡуйған Каширин үҙе яуап бирәсәк.

3

Тәпәш, йөнтәҫ, теремек башҡорт аттарында дүрт ыбайлы ҡасаба осонаса командующий менән штаб башлығы әм эйәрсендәре оҙатыуында килеп, алғы ыҙыҡ ағауылынан уҙҙылар. Тар, ҡараңғы урман юлы кескәй төркөмдө үҙенә тартып алып, ҡыҙыл әрмистәр күҙенән ышыҡланы. Комиссар ҡушарлығында бул алар ҙа, арҡалары пүлә көтөп сымырлап барған өс ыбайлы ауыр киренкелектән бер аҙ арынып, тартышып ҡатҡан тәндәрен яҙлыҡтырҙылар, яр ыу дәрт менән аттарының бөйөрөн типсенеләр. Тупыр-тупыр тояҡ таҡмаҡтары сал ҡарағай баштарына арылып, тәбиғәтте иҫкәндереп ебәрҙе.

Тәрән уйға сумып ойоған комиссар, тирә-яғындағы йәшел хозурлыҡты, аңҡау ярып кергән әскелт-хуш сайыр аңҡыуын да абайламай, уҡтай уҙылып елгән юрға ының ялбыр ялына текләгән килеш, сихри хистәр ҡосағында йомолоп йөҙә бирҙе. Алдағы өс юлдаштың тиргә батып тоҙға ҡатҡан яҫы арҡа ы әленән-әле иғтибарҙы бүлә лә аттарҙың аҡ бышҡырыуы ҡырыҫ ысынбарлығына ҡайтара. Күкрәп бесән еткән саҡ, салғы сүкер, кирелеп яҫма алыр саҡ; әммә ошо гүзәл ерҙең хужалары, үҙҙәренең төп вазифа ын онотоп, ҡылыс тапау, өңгө аплау әм тау-таш ара-

ларына, урман шырлыҡтарына боҫоп, януарға түгел, ә үҙе ымаҡтарға әжәл яуҙырыу менән мәшғүл; болоттай ҡуйырған йәшел болонлоҡтарҙы ла, туҡ башаҡлы баҫыуҙарҙы ла ҡара-ҡаршы үрәпсеп ҡарғыған дағалы аттар иҙә; шомло ауылдар тәнгәленән күккә әсе үрт ыҫы, ҡан шәүләләре күтәрелә; көмөш ыулы саф йылғалар өҫтөнән ҡанлы кәүҙәләр күпсеп- алланып аға – шуны уйлап эстән ыҙып көр өнә, әрнеп бара ине ер балалары, хәрби аттарға атланған дүрт уҙаман... Үркәс-үркәс тау теҙмәләре лә, бер менеп тә бер төшөп елгәс, артта ҡалды; зәнгәр күктә нурға мансылып йөҙгән бөҙрә болоттар ҙа, ҡул уҙымы етерҙәй яҡынайып, остары менән, әйтер ең, шуларға ҡаҙалған ҡолас етмәҫ ҡарағайҙар, сағылдай көр ҡарағастар донъя ы күҙалланды. Бер сал ҡая ышығына тиңәлгәс, ыбайлылар туҡтаны; аттарынан төшөп, теҙгендәрен ботаҡҡа элеп, таштарҙы шауҙырлатып ишелдерә-ишелдерә, текәгә үрмәләнеләр. Йөрәктәре дөп-дөп типте, маңлайҙарынан тир аҡты. Балта киртеп тамға алынған дәү ҡарағай тәңгәлендә туҡталып, баштарын салҡайттылар. Үрҙә, йыуан олондоң балауыҙ- ары күкрәгендә, билендәге яҫы ҡайыш кирәменә беркелеп, аҡ тула эшләпәле, аҡ күлдәк өҫтөнән ҡара кәзәкейле, орғолт киндер ыштанлы, күн итекле берәү тирә-яғын сыбарлаған мыжғыу бал ҡорттары ара ында солоҡ ҡарап булаша.

– Әссәләмәғәләйкүм, Мостафа ағай! – Башындағы төшөп барған йәмерек фуражка ын услап тотоп, Йәмил өрәнләне. Солоҡсо етеҙ хәрәкәттәрен туҡтатып, аҫҡа салт боролоп ҡараны. Ҙур йоморо танаулы, эре сырай ыҙаттары беленеп торған оҙонса йөҙлө, ап-аҡ ялбыр ҡашлы, ап-аҡ көрәк аҡаллы ҡарт икән дә.

– Вәғәләйкүмәссәләм, инме был, Йәмил мырҙам?

– Эйе, мин инем, Мостафа ағай.

– Ҡайҙан моронланың?

– Үҙең белгән тарафтан.

– Эргәндәге ҡунаҡ кем?

– Баш йорт ебәргән илсе.

Ҡарт ашығып сологон бикләне:

– Ярай, түбәндәрәк көтөп тороғоҙ.

Юлаусылар аттары янына төштө. Теҙгендәрен ҡулдарына алып, уҡмаҡ буйлап килгән ҡартты көттөләр. Ул, бер кемгә лә күтәрелеп ҡарамай, өндәшмәй, берләм юллы ағас ара ына тартылғас, юлаусылар ҙа, менгеләрен етәкләп, артынан ыңғайланы.

Селтерәп кенә шишмә урғылған тау егенә еттеләр. ыу ситендә саталы ҡаҙыҡ аша ергә сәнселгән сей ағас- алмауырға ҡоромло таған аҫылған, яҡындағы йыуан ерек төбөндә ҡабыҡ ҡыуыш ишеге өңшәйеп тора. Ҡартлас йә әт усағын хәстәрләне, киҫәү аҫтынан бормасланып әскелтем-сөскөлтөм төтөн ҡойроғо уҙылғас, ҡаҙанға шишмәнен ыу оҫоп, йолҡоп-таҙартып әҙерләнгән ҙур уйырҙы сумырҙы. Мәшәҡәтен теүәлләп, ҡыуыш артында Йәмил менән оҙаҡ сөңкөлдәштеләр; шунан ҡарт ҡайҙалыр ағас ара ына китеп олаҡты.

ертелдәп килеүҙән көллө тәне емерелгән Сәлимйән, шөңгөр шишмә ҡырыйына сүкәйеп, алҡын ыуға кинәнеп бит-ҡулын йыуҙы. Ҡыҫтау хромдарынан арынып, янып барған аяҡтарын рәхәтләнеп батырҙы. Тәненә йүгергән ял-сихәттән иҙерәп, имеп туйып бишеккә ятҡан сабыйҙай, боғаҙынан ихлас ләззәтләнеү ауазы сығарҙы, йәшел үләнгә салҡан төшөп киреләде; хозурлыҡтың татлы дауамы булып, тыйылғы ыҙ табандары ыуҙың көмөш көҙгө өн сәпелдәтте. Көллө донъя ын оноторҙай ошо ләззәтле мәлендә ҡапыл тертләп иҫкәнде: яҡындағы ҡусҡыл ылыҫ аралығынан көйҙөргөс үсле күҙ баға – Вәлиулла юлдашының ылыҫтай йәшел күҙҙәре!.. Комиссар ҙа үҙен абайлағанды иҙеп, буғай, ялт итеп юҡҡа сыҡты, ләкин үсле ҡарашы аман ылыҫ аҫтынан төбәлгән ымаҡ...

Сәлимйән, тора алып, ҡыҫтау итектәрен тартып кейҙе. Йәшерен ҡурҡыныс ағалауын тәрән эске тойғо менән иҙенеп, тирә-яғын барланы. Ғайса Талипов тигәндәре, бөксәйеп ултырып, йыбанып ҡына усаҡ болғата; Йәмил и ә боҡорлап ҡайнаған ҡаҙанға ағас шеш тығып, сәнескеләп, иттең бешеп өлгөрөүен самалай. Эргәлә генә сыбар арҡалы гона ыҙ бер ҡошсоҡ үлән орлоҡтары сүпләп маташа... Комиссар, тынысланып, кире ҡабат салҡан уҙылды, йәшел ҡарағайҙар осондағы зәп-зәңгәр түңәрәклектә ҡара шамаланып йөҙгән бөркөт шәүлә ен байҡаны. Күңелендә, дәртләндереп, мәш үр Туҡайҙың:

*Төптәрендә ятҡаным бар хәл йыйып, күккә ҡарап, —*

тигән шиғри юлдары шөңгөрләнде. Ул күр өнөп ҡуйҙы. Далаға Урал армыттары тоташҡан хозур тәңгәлдәге тыуған ауылында бының ише ҡарағай урмандарҙы китаптан уҡып ҡына беләләр, мәҙрәсә алдына ултыртып үҫтергән берҙән-бер төп ҡарағай и ә шуның күргәҙмә абағы кеүек ине; дала менән тауҙы айырып йәйрәп аҡҡан йомарт аҡмар- ыу буйҙарын башҡа моң — ыу ситтәренә тараҡ тештәреләй теҙелеп үҫкән уйҙан аҡтирәктәр шауы ҡойола ине алмалы япраҡтарҙан. Йөрәк - етеп, тыуған ҡырҙар, туған күҙҙәр төҫөн йәнгә үткәҙеп, хәтерендә йәнә лә бер онотолмаҫ изге моң — йәшлек йыры уралды:

*аҡмар буйҡайҙары киртләс-киртләс,*  
*Киртләстәре китәр, боҙ киткәс.*  
*Гөрләп торған аҡмар буйҙарының*  
*Йәме китәр инде, беҙ киткәс...*

Киткәнгә лә нисәмә йылдар уҙҙы, күпме елдәр иҫте, ыуҙар аҡты... Юлдар уны ҡайҙа ғына илтеп ташламаны ла нимәгә уҡлыҡтырманы. Никрут булып, ҡайғылы моңға урам буйҙарын шаңғыртып йырлай-йырлай илдән сығып киткәндән уң өс йыл буйы Герман фронтының ҡанлы окоптарында ауналды, шунда беренсе тапҡыр Ленин үҙҙәренә иреште. Ун етенсе йылдың октябрендә яҙмыш еле уны шанлы Петроградҡа килтереп, Ленин штабы урынлашҡан Смольныйҙың ҡыҫынҡы-тар коридорҙарында йөрөттө; коммунистар партия ының иң ҙур етәкселәре менән танышырға, алдағы эштәренә фатиха алырға насип итте...

Сәлимйән күҙҙәрен йома. Ҡолаҡ төбөндә генә селтер-селтер шишмә йырлауын, ҡырылма а-ҡырҡ төрлө ҡоштарҙың ботаҡтарҙа арыу-талыу белмәй сут-сут көмөш тәңкә тиреүҙәрен иҫәнгерәп кисерә. Теләр-теләмәҫ кенә күҙҙәрен асып, ҡарағайҙар осондағы түп-түңәрәк зәңгәрлеккә текләп ята. Әйтер ең, уның ҡоңғорт күҙҙәренә бейеклектән онотолмаҫ кер еҙ-алсаҡ зәңгәр күҙҙәр — Гөлсәсәгенең күҙкәйҙәре моңайып-төбәлеп баға...

Шыбырлап ҡына ел иҫә, маңлайына алҡынса-дымғылт үлән остарын эйә. Наҙлы бер зәңгәр сәскә, бөгөлөп- ығылып, Сәлимйәндең шырау битен ҡытыҡлай...

Хәтерҙә, бик хәтерҙә: 1918 йыл, ауыл, мөғәллимә Гөлсәсәк менән мөғәллим Сәлимйән кескәй әм ярлы мәктәптә балалар уҡытып йөрөгән саҡ. Муйылдар күпереп сәскә атҡан бер ял көндө Әселе буйының әрәмәлегенә сығып, бына ошолай күккә ҡарап яталар, зәңгәр хыял диңгеҙҙәрендә йөҙәләр. Гөлсәсәк, башын ҡалҡытып, күҙҙәренең зәңгәрлеген күңел төбөнә үткәҙеп, көтөлмәгән орау менән алйытты:

— Сәлимйән, коммунист бит әле ин?

— Эйе, коммунист, — тине, алйыуынан ҡапыл арынып.

— Коммунистарҙың да төрлө ө — ысыны әм ялғаны була, тиҙәр...

— Эйе, ләкин мин — ысын коммунист! — Берҙәм тороп ултырҙылар.

— Сәлимйән, әйт әле... ысын коммунист ниндәй ул?

— Ниндәй тип ни... бына тап инең менән минең кеүек, ит менән өйәктән инде! — тип шаяртырға теләгәйне лә, булманы:

– Юҡ, ысын коммунистар – айырым, ғәҙәттән тыш була, тиҙәр... Шулаймы?
Сәлимйән, ни әйтергә лә белмәй, уйланып алды:
– Ысын коммунислыҡ – ғәҙәттән тыш булыуҙа түгел, ә ғәҙәттән тыш хәлдәрҙә лә ғәҙәти булып, кеше булып ҡала алыуҙалыр ул, моғайын...
– Сәлимйән, бәғерем... Әгәр көндәрҙән бер көндә мин иңә ошолай ти әм... йә – мин, йә – партияң, ти әм... Ҡай ы ын айлар инең?
– ылыуым, тилекәйем минең! – Ҡыҙҙы нәҙекәй биленән ығып ҡосаҡланы. – Улай әйтерҙәй бул аң, үҙенде ярата алыр инемме икән?!.
– Тимәк, яратмай ың...
– Тәүбә, тиең! Икегеҙ ҙә бер миңә – икегеҙҙе лә өҙөлөп-өҙөлөп яратам! – Ләкин ошо раҫлауы Гөлсәсәккә лә, үҙенә лә уңғы хаҡлыҡ ымаҡ тойолмай ине – тороп атлап киттеләр. Юл буйынса өндәшмәй уйланып ҡайттылар. Әле аман ошо орау Сәлимйәндең күңелендә урала: ысын коммунист булыуҙың асылы нимәлә?..
Шөңгөр шишмә селтерәп йәнде арбай, күҙҙәрҙе йоҡо томалай. ағынсылы төш күрә: Гөлсәсәге ыбайланып менеп алған, уға ҡарап йылмайып килгән Ҡантураты... Туҡтале, йәҙрәләр шартлап ярылған, пүләләр жыйлаған айылмыш буйында ҡан ырап ятып ҡалғайны түгелме ул?..
Кем тауышы, кем тауышы – әллә атайҙыҡымы:
– Аа-ай, Сәргәй ҡантураты! Сәргәй ҡантураты!..
Тертләп уянған Сәлимйән кинәт тороп ултырҙы; шул ыңғайҙа, аулала шыжлап килеп, әле генә уның муйыны ятҡан тәңгәлдә ергә, ҡара ағағы батып, солоҡ балға ы ҡаҙалды... Ике күҙе атылып сығырҙай аҡайған, ауыҙынан аҡ күбеге аҡтарылған Вәлиулла ергә батҡан балғағамы, әллә комиссарғамы оҙон ҡулын уҙып сарбайланы:
– Аа-ай!.. Сәргәй ҡантураты!.. Аа-ай!.. – Ергә ултыра төшөп, улығып- улығып иланы. Йәмил менән Ғайса йүгереп килеп етте, диуананы торғоҙоп, ҡултыҡлап алып китте. Башын шишмәгә тыға-тыға камил иҫенә ҡайтарғас, кыуыш артында “аҡылға ултырттылар” ҙа атына мендереп оҙаттылар – байтаҡкаса күренмәне артабан...
Сәйер бәндәне тетрәткән “ҡантурат” үҙе Сәлимйәндең күңеленә балғалай батып кереп, ис тынғылыҡ бирмәне. уйыр ыйлы табынды уратып ултырышҡас та, тынысланмай, орай ҡуйҙы:
– Ниңә теге әшнәгеҙҙе ашатмай ебәрҙегеҙ?
Бер-бере енә ҡарашып, уңай ыҙлыҡ кисерҙеләр.
– Асыулана күрмә инде, комиссар, – тине Йәмил. – Ул, меҫкен, ҡайғы ынан аҡыл юйыр сиккә еткән.
– Ваҡыт-ваҡыт алмашына, ни эшләгәнен белмәй. – Ғайса ауыр көр өндө. – Аҡылына ҡайтарғас, әлеге яман ҡылығы өсөн үкенеп бөтә алманы – эсемә шайтан инә лә ултыра, ти...
– Шайтаны ла әҙәм ҡиәфәтле, буғай... – Асыҡлыҡ керетте Йәмил. – Тегендә, инең менән бергә бында юлланыуҙы ишеткәс, Ә лиуллин әтрәтенән бер татар: “Иҫәүән башҡорттар, күҙегеҙҙе асыбыраҡ йөрөгөҙ: был комиссар арағыҙға арыҡ тире е ябынған бүре рәүешле керә!” – тип ойҡотоп ебәргән...
Комиссарҙы ағайтты: батальондың Ә лиуллин әтрәтендә татарҙар ҙа, башҡорттар ҙа хеҙмәт иткәнлеге, яуызлыҡта урыҫтарҙан ис тә ҡалышмауы мәғлүм – провокация өсөн иркен файҙаланыла шулар. Күтәрелеш етәкселәрен нисек тә тиҙерәк осратып, ике-ара аңлашыуға ирешеп, йә әт әйләнеп ҡайтырға, ашығыс саралар күрергә!
– Ниндәй “Сергей ҡантураты”н тәҡрарлай? Вәлиуллағыҙҙы әйтәм...
Бераууҡ ыу уртлағандай ултырғас, Йәмил сер тоғон систе:

– Үҙенә күрә шундай бер ат инде ул... ҡантурат... Бер уйла аң, өйләүе лә имәнес... Имеш, уны ҡороҡ та тотмай, пүлә лә алмай – хужа ы Сергейҙың ҡан дошманы Вәлиулланы ағалай... Торғаны менән әкиәт шунда...

– Ай, улай тип әйтмә, ҡусты... Уның менән шаярырға ярамай. Тегендә лә шуның арҡа ында ҡапҡанға ҡаптыҡ, саҡ-саҡ үлемдән ҡалдыҡ...

– Вәлиуллаң кинәт алмашынма а, шуны өрәнләмә ә, ағауылдарынан үтеп тә китә инек.

– Шул хәлен белә тороп, ниңә уны сәфәрегеҙгә алдығыҙ? – тине комиссар.

– Йәшел бесәй күҙе ут кеүек уның ҡая таш артынан да күрә, йәшерен юлдарҙы белә. Ашҡыныуы ла уңға табан ирәкләнә төшкәйне. Был юлы аташмаҫ, тигәйнек.

– Барыбер кешнәр ине... Вәлиуллаға ҡаныҡҡан ул ҡантурат...

– Ысынлап та бармы шул йылҡы малы?.. – Сәлимйәндең йөрәге семерләне.

– Ҡалай ти әң дә ярай инде... Ғайса ағайҙың раҫлауын да кире ҡаға алмайым. Мәҫәлән, эйәрле-йүгәнле килеш, юғалтҡан хужа ын эҙләп ҡыҙыра, тиҙәр.

– Дөрөҫ аңла ам, Сергей буламы уны ы?

– Дөп-дөрөҫ. Кантондағы болғаныштар шул Сергейҙән башланған...

– Ҡай ы яғы әкиәт тә ҡай ы яғы хәҡиҡәт икән бының?

Йәмил, ҡаштарын төйөлдөрөп, фекерҙәрен туплаңы.

– Әйт әм әйтәйем инде, комиссар, йомаҡ булып ҡалма ын. Хабаровка тигән урыҫ ауылы бар ине беҙҙә, баяғы Вәлиулла тигән ағайыбыҙҙың Әғләм ауылы күрше ендә (ике е лә көл-күмер инде хәҙер, барғас күрер ең)... Ут күрше булып, араларына ел-ямғыр үтмәҫ ызнакум булып Вәлиулла менән Сергей йәшәне. Вәлиулланың сысҡан ыртлы ел еткертмәҫ юрға ы, Сергейҙың Шүлгәнкүл буйы башҡорттарынан атып алған ҡантураты бар ине, ике е лә бәйгеләрҙә беренселекте алмашлап алырҙар ине. Бына бер заман аҡ батша ҡолатылып, Керенский хөкүмәте лә түңкәрелеп, ҡыҙылдарҙың хөрриәте башланды ла, үҙҙәрен большевик тип атаған килмешәк урыҫтар, ҡоралланып, коммунистик әтрәттәргә уҡмашып, башҡорт аҫаба ерҙәрен көслөк менән баҫып алырға кереште; башҡорттар ҙа, ҡоралланып, уларға ҡаршы сыҡты. Әғләм ауылының ата-баба сабынлығында ике тараф төкәлеште: элекке ике дуҫ-ызнаком, Вәлиулла әм Сергей, ат өҫтөндә ҡылыс айҡашып ҡапма-ҡаршы килде лә бер-бере енә йәнтәслим киҙәнде – Сергей ҡылысы Вәлиулланың ат башын ярып үт ә, Вәлиулланыҡынан Сергей башы тумарлап ергә төштө, өҙәңгелә өйрәлеп бармыш кәүҙә е лә ысҡынып ятып ҡалды; хужа ының мәйете янында туҡталып ҡатҡан ҡантурат, ҡапыл артҡы аяҡтарына ҡарғып, ызнакумының ҡанлы кәүҙә е эргә ендә күҙҙәре аҡайып шашынған Вәлиулланы бәреп-ауҙарып ҡаса – ҡыҙыл ялҡындай дөрләп, ҡуйы сауҡалыҡҡа инеп юғала... Ошонан уң Вәлиулла ағайыбыҙ телдән ҡалып, оҙаҡ аташып ятты, ә телгә килгәс тәүге өнө шул аяныс “Сәргәй ҡантураты!..” тигән ялбарыу булды...

– Юлға, егеттәр, юлға! – тине Ғайса, ашыҡтырып.

4

Менгеләренең ваҡыт-ваҡыт иҫкәнеп бышҡырыуын әм тояҡ аҫтында сыртлап сыбыҡ ыныуын иҫкә алмағанда, донъя ил, уйсан көйө. Ҡарурмандың тынлыҡ моңон тыңлап бер талай барғас, алда, алыҫта, ыҙылып ҡына сурылдаған ҡош ауазы салынды. Ат баштарын шаҡарып, ағайып ҡолаҡ алдылар. Ауаз инде асығыраҡ ҡабатланды, әм, комиссар көтмәгәндә, ҡолаҡ төбөндә икенсе бер сәйер ҡош уға ҡушылды: быны ын, ғәжәпкә ҡаршы, юлдашы Ғайса көйләп ыҙғыра ине. Сәйер шөғөлөн ҡырт-өҙөп:

– Булды! – тине был. Теҙгендәрҙе бушатып елдерҙеләр. Алда бейек, ҡалын

үләнле бәләкәй аҡлан уйылып, түңәрәк ҡарт имән төбөндә өймәкләшкән унлап  ыбайлы шәйләнде – көллө ө карабинлы, ҡылыслы. Бере е ҡаршы килде, алға сыҡҡан Йәмил менән мөңгөр-мөңгөр гәпләште.  ыбайлыларҙың бер өйкөмө был өсәүҙең артынан, ҡалғандары алдан төшөп, бер күлем юрттырҙылар. Ян-яҡтағы ағастар  аман алыҫлашып, юл түтә е киңәйгәндән-киңәйә, йәйпек үҙән түбәненә иңкәйә; яҡында ғына ниндәйҙер йылҡы өйөрөнөң өркөп бышҡырышыуы, өйөр айғыры муйынындағы баҡыр бутыл доңғолдауы ишетелә. Тал-тол сытлап ураҡҡан кәбәнгә еткәс, аттан төшөп, теҙгендәрен кәртәгә элеп, ағас ара ына йәйәүләнеләр.

Кәрлә ҡайын ботаҡтарына тотона-тотона түбәнләнде. Эйәрҙән төшөп ергә баҫыу кинәнесле бул а ла, Сәлимйән тар итек яфа ын татый башланы – аяҡтары утҡа бешкәндәй янды. Сатанлауын иҙҙертмәҫкә тырышып, тештәрен ҡыҫты. Текәне төшөп, таш араларынан шарлап аҡҡан йүгерем  ыуға тиңәлгәс, саҡ ҡына туҡтап хәл алдылар ҙа оҙон ерек баҫманан аҙымланылар. Арғы ярҙа биленә балта ҡыҫтырған көрәк  аҡаллы ҡаршыланы. Сәлимйән уны кемгәлер оҡшат а ла, тәүҙә иҫенә төшөрә алмай аҙапланды. Ни айәт, кисәге солоҡсо Мостафа ҡарт икәнен шәйләп, үҙ ҡатып өлгөргәнсе, уны ы төркөм башлығы менән ағас артына ышыҡланып, мөңгөр-мөңгөр аңлашты ла ҡабаланып юҡҡа сыҡты.

– Комиссар, киттек баяғы Әгләм  әм Хабаровка ауылдарын күрергә, – тине Йәмил. Ҡалдырған аттарҙы килтереп еткерҙеләр. Яр буйынса саңлы юлдан юрттырып бара торғас, ыҫ әсе е танауҙарға ҡапланды, ике яҡлап бер-бер артлы көл-күмер өйөмдәре, шулар урта ында ҡәбер таштарылай ерәйгән мейестәр, өрөмләнгән емерек таш келәттәр, ҡоймалар теҙелеште.

– Урам буйлап барабыҙ. Шундай оҙон урамлы ауыл ине был...

Ауылды артта ҡалдырып, йылға түбәненә тағы өс-дүрт саҡрымдай киткәс, – шундай уҡ ыҫ, көл-күмер, ҡәбер ташылай ҡатып ҡалған мейестәр, өрөмлө таш келәттәр  әм ҡоймалар... Алдан башлап барған Ғайса ҡайырылып ҡарап аңлатты:

– Быны ы, комиссар ағаҡайым, Сәргәй йәшәгән ҡасаба Хабаровка була инде...

Кеше еҙ ҡалған төйәктәргә кире боролмайынса, түбән яҡтан йылғаны кисеп сығып, үҙҙәренә генә билдәле юлдарҙан ҡай ылыр бер тәңгәлгә ирештеләр – урман ситендә йәшел бесән ябып ҡоролған ҡыуыш. Шуның алдында йор усаҡ ялҡынлана, ике әҙәмдең бере е борҡорап ҡайнаған баҡрасты өстағандан ысҡындырып маташа. Ҡараңғы төшкәйне инде, Сәлимйән усаҡ яҡты ында был икәүҙең ҡиәфәтен байҡаны: билен йүкә бау менән  әлпәйтеп быуған сал бабай, туғыҙ-ун йәштәрҙәге теремек малай. Малай ҡыуышҡа йүгереп инеп китте, иҫке  арыҡ тире е апсығып, усаҡ янына түшәне – ҡунаҡҡа урын күр әттеләр. Ҡалғандары сырт-сырт миндек  ындырып, аҫтарына түшәп, кем етте ҡалай сүгәләне.

Табын алдына бабай таҙа киндер йәйҙе, икмәк  ындырып  алды. Бәләкәс ағас ҡоторсоҡта ҡомоҡҡан бал ҡуйҙы. Аҫ ыҙ сынаяҡҡа сәйгүндән сәй ағыҙҙы. Бүтәндәр ҙә тейешле икмәк  ыныҡтарын алдылар, ҡай ыны ы – ағас сүгәтәнән, ҡай ыны ы сүместән тигәндәй  емереп, йәндәрен йылыттылар.

Икмәктең арышмы, әллә арпамы икәнен дә белеү ҡыйын – хәт еҙ кесерткән ҡушып бешерелгәйне. Бушаған  әр соҡортайҙы олата ы яғына елдереп йөрөүсе малайҙың күҙҙәрендә киҙеүле ялтырау күреп, Сәлимйән үҙ  ынығын урталай  ындырҙы, бал яғып, уның ҡулына тотторҙо. Тәүҙә алырғамы, алмаҫҡамы тип икеләнеберәк торған йән, ҡыйыуланып, комиссарҙың ҡултыҡ аҫтына уҡ  ырныҡты.

– Кинйәғәле, ҡайт урыныңа! – тине бабай, асыуланып. Малай ҡуяндай тертләне.

– Ултыр ын, бында урын киң, – тине Сәлимйән, баланың ҡалаҡ  өйәктәре бүлтәйгән арҡа ынан  өйөп.

– Кинйәғәле, ишет ен ҡолағың! – Малай теләр-теләмәç кенә шылды. Янып баҡкан ҡара күҙҙәре әленән-әле ҡунаҡ ағайҙың мөләйем күҙ ҡарашы менән осрашты.

Билбау аçтарында сәйҙән рәхәт йылылыҡ кисереп, янтайыша бирҙеләр, ҡарҡ кикерешкән булдылар. Сәлимйән дә сынаяғын ҡапланы:

– Рәхмәт, ағай, кеше иттең. Бура төбөң мул, аяҡ-ҡулдарың ыҙлау ыҙ бул ын.

Ҡарт аçтан өҙөп ҡараны:

– Амин, бир ен Хоҙай.

Сәлимйән утка борола бирееберәк ултырҙы. Итектәрен алып, бер ярыйғараҡ ҡуйҙы, быуындарын ләззәтле яҙлыҡтырҙы. Тартылып, тубыҡтарын ҡосаҡлап, ғәм еҙлектә иҙерәне.

Бөйөрөнә йомшаҡ ҡына ҡағылыуҙан иçкәнде. Усаҡ ҡуҙлы торомбаштарға ҡалған, шыйыҡ ҡына төтөн бормасландыра. Кешеләр, эйәктәрен ҡаҡ тубыҡтарына ҡатып, йоҡом орап ултыра, бабай ҡайҙалыр олаҡҡан; Йәмил генә серем итмәй, комиссарҙың артындараҡ ауыҙ эсенән көй уҙа.

– Ағай, ин уғышта кем булдың? – Теремек малай комиссарҙың бөйөрөнә төртөлөп бышылданы.

– Кем тип ни, алдат булдым.

– Ә был батша итеген ҡайҙан алдың, батша үҙе бирҙеме? – уңлап ҡабынған ялҡынға ялтыраған ҡуныс йөҙөн еңе менән ыйпаны. Йоҡом орап ултырыусылар, ҡымшанып, иғтибар йүнәлттеләр.

– Батша нисек бир ен, ти, уны үҙебеҙ тәхеттән ҡолаттыҡ бит! – Малайҙың башынан ыйпаны. – Бына инең кеүектәрҙең тамағы туҡ, өçтө бөтөн бул ын, тип.

– Үҙең тегеп кейҙеңме?

– Уны батша арайының иң шәп итексе е теккән. Шуны миңә бүләк итеп кейҙерҙеләр.

– Ни өсөн?

– Яуыз батшаны ҡолатышҡаным өсөн. Бөтә ярлы-ябағаға бәхетле тормош яулап көрәшкәнем өсөн.

– Ҙурайғас, мин дә инең кеүек булырмын! – тине малай.

– Тырышып тиҙерәк ҙурай – ошо батша итектәрен үҙеңә алып бирермен.

– Үҙең нимә кейер ең?

– Ул саҡта мин, олатайың кеүек, ҡыуыш ҡорормон да тула сарыҡ ҡына кейеп түр башында ултырырмын.

– Олатайым түр башында ғына ултыра алмай, донъялар тыныс түгел...

– Ултырыр. Күмәкләшеп тырыш аҡ, донъялар тынысланыр.

– Амин, Ала ыәкбәр! – тип доға ҡылды Йәмил...

Улай-былай иткәнсе, йәйге ҡыçҡа төн үтеп тә бара ине – көнсығыш яҡлап тау үркәстәрен беленер-беленмәç таң ары ы ялмаған. Сәлимйән, серемендән кирелеп, Йәмилгә күҙ төбәне:

– Йә, мырҙам, артабан ни ҡылабыҙ?

– Саҡ ҡына көтәйек инде. Бына-бына Аҡмал олатай үҙе килеп етергә тейеш. Бәлки, Ил Инә е лә юлығыр.

– Ил Инә е?! Кем ул?

– Ҡоралланған сая ир-ҡыҙҙар әтрәтенең башлығы.

– Ундайҙарығыҙ ҙа бармы ни?

– Бар шул. Поленов әйтмәнеме ни? Амазонкалар тип атай, тиҙәр, уларҙы...

Сәлимйән аптыраны:

– Улар ҙа уғышамы?

– Ҡай ылайыраҡ уғыша әле – ирҙәренә бирге еҙ! Үл ә – үләләр, ләкин си-

генмәйҙәр. Аҡмалдың ғәййәр гвардия ы!

— Бынағайыш тамаша!.. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ ҙа ҡоралға тотонғас...

— Түҙерлегебеҙ ҡалманы, тимәк.

— Йә Алла. Үҙең ярлыҡай күр беҙҙе, гона лы ҡолдарыңды! — Ғайса ҡулдарын юғары күтәреп ялбарҙы. Халыҡ, берҙәм ҡуҙғалышып, болонлоҡтан төнгөлөккә тышаулы менгеләрен тота, эйәрләй ине инде. Шул арала биш-алты ыбайлы килеп етеп, аттан төштө.

— Әссәләмәғәләйкүм, Аҡмал ҡарт буламын, -- тип күреште Ирәмәл түбә еләй салланғаны. — Кем икәненде беләм — яҡшы хәбәр килтерҙеләр. Ваҡыт тар, ҡыуышҡа инеп өйләшәйек.

Иркен генә өшәләктә буйылы балаҫ өҫтөнә урынлашҡас, тур ыҡлы ҡымыҙ килтереп, ағас туҫтаҡтарға ҡойҙолар, ҡулдарға тотторҙолар.

— Бисмилла, әйҙәгеҙ, тамаҡтарҙы сылатайыҡ та үгеҙҙе мөгөҙөнән алайыҡ. Мәсьәләнең төп-асылын төшөнгән еңдер, комиссар?

— Бөтә е Сергей, Вәлиулла тигән бәндәләрҙән башланды, тиҙәр ине.

— Их, мырҙам, уларҙа ғынамы ни эш?! Бер урыҫты йәки башҡортто үлтереүҙән донъяның мөйөшө кителеп төшәме ни?! Сәбәбе тәрән ята...

— Йәғни ҙә?

— ин, мырҙам, күреп торам, йәш бул аң да, комиссар кеше, мәғрифәтле кеше. Донъяны миңә ҡарағанда ла нығыраҡ белә еңдер. әм мин дә, ошо ҡара аңым менән бул а ла, уйлаштырам, ата-бабалар тарихын күп барлайым... Бик көлкө лә, илағыс та был тормош. Әҙәм бала ының ғүмере, ботона ыштан тегеп кейгәндән алып, ер өсөн даулашып- уғышып үткән. Шулай түгелме? Ер еҙҙәр — ер алам тип, ерлеләр — еремде бирмәйем тип ҡырталашҡан. Бер үҙ менән әйткәндә, әҙәм бала ын яралтҡан да — ер, туйҙырған да — ер, үлтергән дә ер булып сыға түгелме?

— Шулай булып сыға.

— Шулай булма ын өсөн нимә кәрәк тип уйлай ың, комиссар?

— Аҡ аҡал, ин миңә үҙең әйтеп бир.

— Закон кәрәк, бына нәмә! Ата-бабалар Рәсәйгә үҙҙәре теләп ҡушылғанда уҡ аҫабалыҡ хоҡуҡтарын, йәғни үҙ еренә үҙе хужа булыуҙы закон менән нығыттыртҡан; аҡ батшалар шул законды быуындан-быуынға үтәгән. Яҡшымы- яманмы, хатта батша закондары ла бәғзеләрҙең нәфселәрен тыя килде... Хәҙерге ен и ә нимә күрәбеҙ? Батша ҡолатылды, хөрриәт килде, тигәс тә, башҡорт ерҙәрен таларға, башҡорттарҙы үлтерергә хөрриәтме? Хәлдәр үҙеңә мәғлүмдер, комиссар ҡустым: әр төрлө килмешәктәр, шул бәлшәүиктәр хөрриәтенә таянып, ауылы-ауылы менән үҙҙәрен ҡыҙыл большевик тип иғлан ҡыла ла, РСФСР биләмәләрендә тороп ҡалған Ырымбурҙан, Өфөнән йәки башҡа тарафтарҙан килтерелмеш мылтыҡтар менән ҡоралланып, коммунистик әтрәттәргә уҡмашып, аҫаба ерҙәребеҙҙе баҫып ала, халыҡтарыбыҙҙы ҡыра... Бына ниҙән килеп сыҡты башҡорттоң ҡуҙғалышы. Сөнки ер бирмәк — йән бирмәк, ер еҙ башҡорт — юҡ башҡорт...

— Аңлайым.

— Аңлау ғына аҙ — йөм үриәт етәкселегенә туҡып аңлатырға кәрәк! Эш үтмәҫе борон мәсьәләне ҡап-уртаға алырға, уртаҡ тел табырға кәрәк!

— Табыр өсөн килдем дә.

— Инш-Алла, улай а, килешербеҙ! — Күмәкләшеп доға ҡылдылар. — Беҙ ине beләбеҙ, беҙ иңә ышанабыҙ.

— Ышанабыҙ! — Бер тауыштан хупланы табындағылар.

— Инде ҡуҙғалышайыҡ, алда ҙур эштәр көтә: Вәлиулла ярҙамсыма иртәгә үк йыйын йыйырға ҡушып киттем — илдең тын алышын ишетер егеҙ. Поленов ҡырғынсылары бөлдөрмөш тирә-яҡ ауылдарҙан ҡасаҡтар килеп тулған — ваҡиғаларҙы үҙ ауыҙҙарынан өйләтеп тыңлар ығыҙ.

5

Ҡай ы ы – ҡабыҡ, ҡай ы ы – алам, ҡай ы ы таҡта түбәле эреле-ваҡлы йорттарҙан хасил ауылға килеп керҙеләр. ыу ағышынса бормасланып, тау ара ында ике урам булып теҙелеп ултырған кирем генә башҡорт төйәге ине был. Юл йөрөп күнеккән аттар, алда оҙайлы туҡталыш әм оло була ын тойоп, бышҡырып тәбрикләнеләр, йылдамыраҡ юрттылар. Сәлимйән урам буйҙарын ағайып байҡаны: халыҡтың ҡырмыҫҡа иләүенә таяҡ тығып болғатҡандай ҡайнашыуы бошондорҙо. Ҡайҙа ҡарама – туғарылған ылау, тубырсынған бала-саға, тәнтерәкләгән ҡарт-ҡоро, сарбайлаған ҡатын-ҡыҙ: ғаилә-ғаилә ишек алдарына, ҡойма буйҙарына – ҡайҙа тура килә шунда ҡыуыш ҡороп ятҡандар; бәғзеләре тәртәләре ҡайырылған арба аҫтарына кейеҙ, септә, балаҫ түшәп төпләнгән; эргәләрендә төйөнсөктәр, андыҡтар, еҙ самауырҙар аунай, тирә ендә аҙашҡан кәзәләр, арыҡ бәрәстәре инрәп-баҡырып йөрөй, улығып эттәр олой; унда- анда усаҡ бурап ут үрләтелгән ҡаҙан тирәләрендә олпат инәйҙәр булаша...

Арғы ос урам урта ынан тупыр-тупыр елдереп килеүсе ун бишләп ыбай күренде – ҡылыс таҡҡан, карабин аҫҡан йәш кенә ҡатын-ҡыҙҙар... Көллө ҡәүем йәнләнеп үрә ҡатты:

– Ил Инә е!

– Ил Инә е килә!

Мөләйем муйыл күҙле, арҡа ына уҙылып ятҡан беләк йыуанлыҡ ҡуш толомло Ил Инә ен, биленә ҡылыс тағып, яурынына карабин аҫҡан яугир ҡыҙ-ҡатынды, Аҡмал ҡарт омғол беләгенән тотоп аттан төшөрҙө, комиссар ҡаршы ына етәкләп килтерҙе.

– Аб-ба! Кемде күрәм, Сәлимйән ағай, инме был?! – Сая ир-ҡыҙ ис кем көтмәгәндә комиссарҙы туғандарса яратып ҡосаҡланы. Сәлимйәндең ҡылт итеп иҫенә төштө: 1918 йыл, Ырымбур, татар китапхана ы...

– Уф! Әклимә ылыуҡайым, инме был?!

– Мин, ағай, мин! Исемеңде ишетеп, ашығып ҡайтып еттем. Ныҡ үҙгәргән ең, ағай...

– Донъя баштан ыйпаманы... Ә ин гөлсәскәләй саф, матур көйөңсә аман! Теге саҡта Ырымбурҙа үҙеңде урлар хәлгә еткәйнем, ике шағир араланы... – тип йылмайҙы Сәлимйән, ҡыуаныслы күҙ йәштәрен йәшермәй өртөп.

– Эй, ағай, шулай ғына ит әгеҙ ни! – Ҡоралды яугирлығын онотоп, буғай, ҡыҙҙарса иҫертеп көлдө.

– Бешмәгәнерәк инем шул...

– Ай- ай! – Бармаҡ янаған булды. – Гөлсәсәгем бар ине бит, тип әйт тә ҡуй инде!

– инең дә шағирың бар ине шул... – Ике енең дә тамағына ҡаты төйөр тығылып, арауыҡ тыйылдылар. Ни айәт, башына килгәнен әйтте: – ылыуым, әллә аман тормошҡа сыҡмаған ың?..

– Эй, ағайым, күрә ең бит... – Бите буйлап эре йәш бөртөгө тәгәрләне. – Былтыр ғына ошо ерҙә Ша изада менән тап килешкәйнек... Уны харап иткән ҡара көстәр инде Башҡортостаныбыҙҙың башына етергә йөрөй...

– Ат өҫтөндә елдергән яугир ҡыҙҙарыңды күреп иҫем-аҡылым китте – ысынлап та Геродот яҙған амазонкалармы тип торам... Ҡайҙа боролдо был донъя?! Беҙгә, ир-атҡа, инде ярай, ә быуна еҙгә, сәскәләй генә сағығыҙҙа...

– Башҡа әмәл ҡалманы... Ҡылысҡа баш эймәҫкә – уғып ындырырға кәрәк ҡылысты!

– ынма а нишләр егеҙ?

– Бабаларыбыҙҙай сая уғышып, аҫаба еребеҙҙә башты алырбыҙ.

үҙ артыҡ ҡуйырманы. Сәмләнеп тыңлаған кешеләр ауыр уфтанды. Аҡмал ҡарт, ике ҡулын ике енең яурынбашына алып, ҡәнәғәтлек белдерҙе:

— еҙҙең кеүек аҫыл өйәк таныштарҙың тап килеүенә ҡыуанам. Былайғас, тотҡан ниәттәребеҙ бойомға ашыр, ҡан ҡойошто туҡтатыуға ирешербеҙ, Алла бир ә. Барығыҙ, ҡасаҡтарҙың хәлен белә тороғоҙ. Иртәгә йыйын икәнен онотмағыҙ — төп мәсьәлә ил алдына алып хәл ителәсәк. Мин йыйынды ойошторорға китәм, иҫән бул аҡ, шунда осрашырбыҙ, Инш-Алла.

Ир-аттың күбе е Ҡыҙыл Армия сафтарында Көнбайыш фронтта аҡ пандарға ҡаршы уғышып йөрөгәнлектән, ә ҡалғандары баш күтәреп тауҙарға киткәнлектән, коммунистик ҡырғын этрәттәренән йәбер-яфа тәү сиратта ҡатын-ҡыҙ башына төштө... Инабатлы Ил Инә е менән бергә орашып әм ҡағыҙға теркәп йөрөгән комиссарға улар асы күрмештәрен йәшермәйенсә өйләне, был документ баш ҡалаға ирешергә, партия әм хөкүмәт етәкселегенә хәҡиҡәтте асып алырға тейеш ине:

***Протокол. 1920 йылдың яңы стиль буйынса 30 июлендә коммунистик батальондың ҡыҙыл әрмистәре тарафынан ҡылынған үлтерештәр, ҡатын-ҡыҙҙарҙы көсләүҙәр буйынса тикшереүҙәр ваҡытында С. ауылы кешеләре ошолай аңлаттылар.***

1. Рәхимә Сыуаҡаева. Ҡыҙыл әрмистәр өжүме ваҡытында ул әм унең килене балалары менән бергә иҙән аҫтына йәшенде, шул саҡ ыҙмаға билдә еҙ ғәскәри бүлектең Ҡурамшин фамилиялы ҡыҙыл әрмис кавалерисы керҙе, Өммикамалды иҙән аҫтынан өйрәп сығарҙы, башҡа ыҙмаға алып китте әм уны көсләй башланы. Шунда уҡ ул үҙе (Рәхимә) иҙән аҫтынан сыҡты ла ихаталағы ире Лоҡман Сыуаҡаевҡа сарбайланы, ул и ә ҡусты ы Усман менән бергә ишеккә атлыҡты, сығып килеүсе ҡыҙыл әрмистең яға ынан алдылар, артабан ни булғанын ул (Рәхимә) күрмәне, сөнки ихатанан сығып ҡасты, мылтыҡтан атыуҙарын ғына ишетте. уңынан мәғлүм булыуынса, унең ире Лоҡман әм ҡусты ы үлтерелгән, шулай уҡ Сыуаҡаевтың 88 йәшлек әсә е Мәхүбъямал да ошо ваҡыт улының өйөндә сағында үлтерелгән. Мәхүбъямалдың килененең инәлегенә (оят еренә) ыныҡ ҡалаҡ тығып киткәндәр. Шунан уң Ҡурамшин уны (Өммикамалды) үлтереү өсөн ике тәүлек буйынса эҙләп йөрөй, ләкин таба алмай. Бөтә мөлкәт ҡыҙыл әрмистәр тарафынан таланған әм алып кителгән. Уҡый-яҙа белмәй, унең өсөн Низамитдин Таулыбаев ҡул ҡуйҙы.

2. Өммикамал Сыуаҡаева. Ыҙмаға кергән ҡыҙыл әрмис уны иҙән аҫтынан өйрәп сығарҙы, айырым ыҙмаға өйрәкләп алып китте әм уны көсләне, шуны ын тамамлағас, ыҙманан сығып китте, шунда уны ҡайны ы Лоҡман Сыуаҡаев үҙенең ҡусты ы Усман менән теткеләргә кереште. Ул (Өммикамал) и ә ыҙманан сығып ҡасты әм күршеләрҙә йәшеренде, артабан ни булғанын күрмәне. Унең ҡайны ы Лоҡман әм унең ҡусты ы Усман үлтерелгән булып сыҡты, шулай уҡ уларҙың ыҙмала булған әсә е Мәхүбъямал да үлтерелгән.

Шул уҡ көндө, бер ни тиклем ваҡыттан уң, 8 ҡыҙыл әрмис төркөмө уны Заған-бай Әмилев өйөндә эҙләп тапты, Ғәйни Таулыбаевтың өйөнә өйрәкләп алып киттеләр ҙә, шунда бөтә 8 кеше уны көсләне. Артыҡ бер ни ҙә аңлата алмай, уҡый-яҙа белмәй, ә унең өсөн унең орауы буйынса Низамитдин Таулыбаев ҡул ҡуйҙы.

3. Ғәйниямал Таулыбаева. Ҡыҙылдарҙың өжүме ваҡытында унең ихата ына ыбайлы 10 ҡыҙыл әрмис керҙе, ыҙмаға инделәр, уға уҡтылар әм ихатаға ҡыуып сығарҙылар. Мейес башында ятҡан 22 йәшлек ауырыу ҡыҙы Хәҙисәне ыҙманан өйрәп сығарҙылар ҙа башҡа ыҙмаға алып киттеләр... килене Ма итапта ҡалдырҙылар. Шул уҡ көндө алты ҡыҙыл әрмис унең өйөнә Өммикамал Сыуаҡаеваны килтерҙе, шунан йәнә ике ҡыҙыл әрмис килеп ҡушылды. Өммикамалдың “Ни өсөн килтерҙегеҙ?” тигән орауына ҡыҙыл әрмистәр уны тәфтишләйәсәктәрен әм

атып үлтерәсәктәрен әйттеләр, ә Ғәйниямалды ихатанан урамға ҡыуып сығарҙылар, ҡыҙыл әрмистәр ыҙмала нимә ҡылғандарын ул күрмәне. Уҡый-яҙа белмәй.

4. Мәрүәсафа Ҡускилдина. Ҡыҙыл әрмистәр унан май таптырҙылар, ул "май юҡ" тигәс, ҡыҙыл әрмис уны соланға алып сығып иҙәнгә йыҡты ла көсләргә маташты, ләкин бер ҡыҙыл әрмис "иптәш, ташла, ҡарсыҡ бит ул" тип ҡысҡырғас, уны көсләмәнеләр. Өс көндән уң ниндәйҙер ҡыҙыл әрмис унын аяҡ теген машина ын әм бер мендәрен, бер кейеҙен алып китте. Уҡый-яҙа белмәй.

5. Фәрхиямал Мөнбәйҡолова, 18 йәшлек. Өйгә 7 ҡыҙыл әрмис килеп керҙе, был ваҡыт ул тубыҡтарында ауырыу ҡарсыҡ Ишбикәнең, йәғни ҡәйнә енең, башын тотоп ултыра ине. Ҡыҙыл әрмистәр уны, Фәрхиямалды, башҡа бүлмәгә алып киттеләр ҙә, бөтә ете кеше уны көсләнеләр, шул уҡ көндө унын ире Ғирфан Мөнбәйҡоловты үлтерҙеләр. Уҡый-яҙа белмәй.

6. Ишбикә Мөнбәйҡолова. Ул, ауырыу килеш, килене Фәрхиямалдың тубыҡтарында ята ине. Өйгә ҡыҙыл әрмистәр килеп керҙеләр, Фәрхиямалды башҡа бүлмәгә алып киттеләр, ә нимә ҡылғандарын күрмәне. Унын улы Ғирфан аҙаҡ ҡыҙыл әрмистәр тарафынан үлтерелгән булып сыҡты. Унын улы десятский ине, ылауҙар ебәрә ине. Уҡый-яҙа белмәй.

7. Хәширә Сәлишева. Унын өйөнә ике ҡыҙыл әрмис килеп керҙе, уны амбарға алып киттеләр ҙә көсләнеләр. Көсләгәндән уң ике мендәрҙе алып киттеләр. Уҡый-яҙа белмәй.

8. Сәғиҙә Таулыбаева. Ихатаға бер нисә ҡыҙыл әрмис килеп керҙе, "хужалар өйҙәме?!" тип ажғырҙы. Ире Нәзмитдин улар янына сыҡҡас әм улар менән аҙыраҡ өйләшкәс, бер ҡыҙыл әрмис уға мылтыҡтан атты ла шунда уҡ үлтерҙе. Ире үлтерелгәндән уң, ул балаларын күрше ауылға мәрхүмдең икенсе ҡатыны Хөббөлнисаны саҡырырға ебәрҙе, балалары әйләнеп ҡайтҡас, ҡапҡа төбөндә үк ҡыҙыл әрмистәр шул кырандас егеүле атты тартып алып киттеләр. Өс көндән уң ыбайлы алты ҡыҙыл әрмис килеп етте, балаларҙы өйҙән ҡыуып сығарҙылар, ә уны, Сәғиҙәне, күмәкләп көсләнеләр. Уҡый-яҙа белмәй.

9. Әсхәбъямал Дәүләтбирҙина. Унын улы өйҙә юҡ — ҡалала ине. Шул саҡ ҡыҙыл әрмистәр тейәлеп килделәр, унын биш баш ауын ыйырын, яңы тунын, быймаларын әм 3 мендәрен талап алып киттеләр. Уҡый-яҙа белмәй.

10. Шәриғә Сәлишева. Ҡыҙыл әрмистәр унын көрән айғырын тартып алдылар, шунан уң, ниндәйҙер башҡорт Муса ауылынан бул а кәрәк, ерән ҡашҡа алаша атын, самауырын әм башҡа төрлө әйберҙәрен алып китте. Уҡый-яҙа белмәй.

11. Миңлеямал Мөхәммәтәминева. Ҡыҙыл әрмистәр унын 2 кейеҙен әм 2 мендәрен тартып алдылар. Шунын өсөнсө көнөндә ҡолонло ерән бейә ен алып киттеләр. Уҡый-яҙа белмәй.

12. Хәкимә Сәлишева, тол ҡатын. Ҡыҙыл әрмистәр унын 3 йәшлек ҡола айғырын алып киттеләр. Уҡый-яҙа белмәй.

13. Шәрип Сәлекәйев. Ҡыҙыл әрмистәр унын әсә е Миңлекамалды, еңгә е Сафияны, 15 йәшлек Хәбибъямалды көсләнеләр әм ата ы Кәримдең ҡулын ҡылыс менән өҙә саптылар. Уҡый-яҙа белмәй.

14. Сәлимә Сәлекәйева. Ҡыҙыл әрмистәр унын 200 умлыҡ төрлө әйберҙәрен алып киттеләр. Уҡый-яҙа белмәй.

15. Усмана Сыуашбаева. Ҡыҙыл әрмис арығын, кейеҙен, баласын тартып алған, ауыт- абаларын ватҡан, бөтә е 400 умлыҡ ҡаза. Уҡый-яҙа белмәй.

16. Талха Дәүләтбирҙин. Ҡыҙыл әрмистәр унын 300 умлыҡ ике арығын тартып алған. Дәүләтбирҙин.

17. Ғилман Ғәбитов. Ҡыҙыл әрмистәр унын бөтә е 1800 умлыҡ быймаларын, тунын, 2 кейем тула ҡата ын, 2 шәлен, ике ат арба ын әм әйәрен тартып алған.

18. Мөхәммәтрәхимә Ҡускилдина. Ҡыҙыл әрмистәр унын бөтә е 600 умлыҡ 6

бот орлоҡ оло он, бер сирек сәйен, бер шәлен, 2 ҡаҙаҡ абынын талап алған. Уҡый-яҙа белмәй.

19. Ғөбәйҙулла Кинйәбаев. Балаҡлы ауылынан уҙып барыусы кавалерист ҡыҙыл әрмистәр уның 2000 умлыҡ ерән ҡашҡа алаша атын тартып алып киткәндәр.

20. Исҡаҡ Йәлилев. Ҡыҙыл әрмистәр уның 1000 умлыҡ тимерләткән кырандасын талап алып киткәндәр. Уҡый-яҙа белмәй.

21. Рәхимйән Мөхәммәтйәнов. Ҡыҙыл әрмистәр уның көтөүҙә йөрөгән 1500 умлыҡ ала ыйырын талап алып киткәндәр. Уҡый-яҙа белмәй.

22. Ауыл Советы рәйесе Сыуалбаев. Коммунистик батальон өгөтсө ө Аникин тарафынан ауыл халҡынан 9 баш ат, 3 ҡырҡмыш тай, 37 ауын ыйыры, 33 башмаҡ, 70 баш арыҡ әм бәрәстәр, 33 йөктән артыҡ ашлыҡ, 20 ыйыр тире е, төрлө йорт-ҡура ҡаралты ы әм мөлкәте тартып алынған...

өйләүселәр әр бере е Үҙәктән килгән ғәҙәттән тыш комиссар-ревизорға ышанып әм ҙур өмөттәр бағлап ҡарай, ҡасан бола баҫылыр, ҡан ҡойоштар туҡталыр, тыныс тормош килер икән беҙҙәргә лә, тип үтенеп орай ине. “Бөтә е лә булыр, еҙҙең а -зарҙарығыҙҙы, изге теләктәрегеҙҙе, түкмәй-сәсмәй, юғарыға еткерермен” тигәс, Ил Инә е лә түҙмәне – ҡуйынынан дүрткә бөкләнгән дәфтәр алып, Сәлимйәнгә тапшырҙы:

– Баймаҡ заводында яуыз Поленов аттырткан бөйөк уҙамандарыбыҙҙың бере е Әхмәҙи Ғүмәровтың тол ҡалмыш хәләл ефете Ситдиҡа ханымдың ҡанлы күҙ йәштәре еңгән сәхифәләр – киләсәктә ғәҙел хөкөм әм тарих өсөн, бәлки, файҙа- ы тейер:

Иремдең туғандарының бере е: “Эстәрленән хәбәр килгән – уларҙы төрмәнән сығарырға[68]”,– тип мине шатландырып китте. Мин, иптәшем ҡайтыуға тип, өйҙәрҙе йыйыштыра башланым. Кискә табан мин солан баҫҡысын йыуып бөтөрөп торғанда, ҡапҡа асылып китте, ҡапҡанан Нәфисә менән Булатовтың[69] алдаттан алып ҡайтҡан ҡатыны килеп инделәр. Уларға күтәрелеп ҡара ам, төҫтәре ап-аҡ булған, бик ҡурҡышҡандар ине. “Беҙҙекеләрҙе харап иткәндәр бит, Ситдиҡа йәнем!” – тип илай башланы Нәфисә ханым. “Всех убили” тип, ҡулы менән муйынын ыйпап күр әтеп, Ғәләлкәрйә лә үк ене. Ә мин бит яңы ғына, иптәштәребеҙ нахаҡ бәләнән ҡотолоп ҡайтыр – тағы шатлыҡлы көндәр күрә ебеҙ бар икән, тип ҡыуанып йөрөгәндә, ҡапыл шундай фажиғәле хәбәр ишетеүемә таш кеүек ҡатып ҡалдым, илай ҙа алманым, исма ам...

Бер аҙ ваҡыт үткәс, баламды күтәреп, Камил Мусиндарға киттек. Улар ҙа, был насар хәбәрҙе ишетеп: “Ситдиҡа ишетеү менән беҙгә килер инде, бахырҡай, уның беҙҙән башҡа бер кеме лә юҡ бит, тип Зөләйха ханым мине көтөп кенә тора ине; ҡаршы сығып, моңло ғына итеп мине ҡаршы алды. Мин, өйгә ингәс, баланы иҙәнгә ултырттым да үҙем дә иҙәндәргә аунап, үк еп-үк еп, туйғансы иланым, Зөләйха ханым да ҡушылды.

Күп тә үтмәне, Ғәләлкәрйә мине эҙләп Зөләйхаларға килеп инде. (Уны Мөхәммәтйән Булатов армияла йөрөгәнендә алып ҡайтып, ауылға ҡайтҡас Ғәләлкәрйә тип исем ҡуйҙырған икән; ул үҙе мосолман диненә инергә риза булып, эйәреп ҡайтҡан урыҫ ҡыҙы ине). Беҙ уның менән хәҙер үк Баймаҡҡа китергә[70] булып, Нәфисәләргә барҙыҡ. Нәфисәнең ата ына үтенеп, беҙҙе атың менән Баймаҡҡа алып бар, күпме ора аң да бирәбеҙ, тинек. Ул ризалашманы: “Унда барып, ҡанда йөҙәр хәлем юҡ, еҙгә лә барырға кәңәш бирмәйем, Нәфисәгә лә барырға рөхсәт итмәйем”, – тине. Беҙ, уларҙан сығып китеп, ат эҙләргә тотондоҡ. Күн заводына ла барҙыҡ. Ахырында Әбүбәкер мулла Хөсәйеновтан башҡа өйҙә

торған Мәхфи еңгәйгә индек. Ул еңгәй үҙемде байтаҡ яҡын күргән бул а кәрәк – беҙгә ҡаршы булманы. Үҙе ҡарап үҫтергән Юныс тигән 13-14 йәшлек кенә баланы беҙгә күсер итеп бирҙе лә юлға сығарып ебәрҙе.

Ул көндө беҙ Иҫән тигән ауылда туҡтап, уҡытыусы ы өйөндә ҡундыҡ. Иртәгә ен иртәрәк сығып китеп, төш ваҡыттарында Дәүли ағайҙарҙың ҡапҡа ына барып еттек. Күсер арбанан төшөп, ҡапҡа асып, беҙҙе ҡапҡанан индереүенә, ишек алдында ҡапҡаның уң яғына өйөп ҡуйылған күп кенә оҙон ағастар өҫтөнә йәйелеп ятҡан, ҡанға батҡан Әхмәҙиҙең арғылт төҫтәге костюмы менән жилетка-ын күрҙем. Мин ҡороп оҙ (тирәс еҙ) хадуҡ арбала аяҡтарымды алындырып ултыра инем. Костюмдарҙы күргәс, алдымда бала барын да онотоп, арбанан нисек төшкәнемде лә иҙмәй, барып костюмды ҡосаҡлап алып, иҫем китеп йығылғанмын. Ғәләлкәрйә ерҙә аунап илап ятҡан баланы күтәреп алып, өйгә йүгергән. Шәмси апайҙар йүгереп сығып, мине үлгән тип ҡурҡып, битемә ыуҙар бөркөп, өйҙәренә алып инделәр. Байтаҡ ятып хәл алғас, мин Дәүли ағайҙарҙан фажиғәле эш тура ында ораша башланым. Улар ошолай итеп өйләне:

“Беренсе август көндө кискә табан тотҡондар таш арай янындағы ҡоҙоҡ янына сығып, ҡоҙоҡтан ыу алып, бере е икенсе енә ыу ҡойоп тороп, абынлап йыуынып, аҡ өлгөләргә өртөнөп, арайға инеп киттеләр. Бер аҙҙан бары ы ла, аҡ күлдәктәр кейеп сығып, арай янындағы бүрәнәгә теҙелешеп ултырҙылар. өйләшеп-көлөшөп бер аҙ ултырғас, аҡсылар уларҙы индереп, арайҙы бикләп алды.

Төнгө сәғәт икеләрҙә урамда ҡаты атыш тауыштары ишетелгәс, беҙ, уянып, парадный ишек ярығынан ҡара аҡ, таш арай янында күп кешеләр йөрөнә. арай алдында ай яҡты ында ап-аҡ нәмәләр күренә, а -ух килгән ыңғырашыуҙар ишетелә – бисараҡай Әхмәҙиҙең тауышын беҙ танып торҙоҡ. Ул бик оҙаҡ ваҡыт “Алла, Алла” тип ҡысҡырып ятты, уңынан уның да тауышы баҫылды. Шул арала ай яҡты ына көн яҡты ы ҡушылып яҡтырып китте; оҙаҡламай ҡатындар көтөүгә ыйырҙарын ҡыуа башланы. Улар арай янында ап-аҡ күлдәктәре ҡыҙыл ҡанға буялып үлеп ятҡан кешеләрҙе күреп, ҡыҙғанышып илап торғандарын күргәс, аҡсылар уларҙы ҡыуып ебәрҙеләр. Оҙаҡламай врач алып килеп, тотҡондарҙың үлеп етеүҙәрен әйтеп, Руденко менән Поленовты тынысландырғас, шә иттәрҙе шахта соҡорона алып барып ташларға ҡуштылар. Кешеләр күп йыйылып киткәс, мин сыҡтым да, рөхсәт орап, 6 (алты) кешене үҙем күмдерәм тип, атҡа киң таҡта арбаны егеп урамға сыҡтым, 3-4 бабай менән барып, зыяраттың бирге яғында киң генә, күмелгән иҫке шахта соҡоро бар икән – шуны көрәктәр менән уңайлаштырып, **Әхмәҙи Ғүмәровты, Билал Ғабдрахмановты, Мөхәммәтйән Булатовты, Дулат-Али** тигән бер егетте шул киң соҡорға теҙеп алып, өҫтәренә кейем- алымдарын яптыҡ та күмеп ҡуйҙыҡ. **Тарташов** тигән урыҫ егете менән **Кузнецовты** ике ен бер соҡорға күмдек”,– тине Дәүли ағай. Беҙ Дәүли ағайҙан шул үҙҙәрҙе ишеткәс, Дәүли ағайҙың ҡулдарын үбеп иланыҡ. әм унан иптәштәребеҙҙең ҡәберен күр әтеүҙе үтенеп ораныҡ.

Ул ағай беҙҙең был теләгебеҙгә риза булманы: “Юҡ инде, мин унда бара алмайым, сөнки ул яҡта бик ҡурҡыныс, ул яҡҡа мал ҡарарға барыусыларҙы ла атып үлтерәләр”, – тине. Беҙҙе хәҙер бер нәмә лә ҡурҡытмай, ат алар атырҙар, тинек тә иптәштәребеҙҙең ҡәберҙәрен эҙләргә киттек. Ағай өйрәтеп ебәргәнгә күрә бахырҡайҙарҙың ҡәберҙәрен табып алдыҡ. Мин, ҙур сабырлыҡ менән үҙемде ҡулға алып, артыҡ тауыш менән илауҙан тыйылдым. Ә Ғәләлкәрйә, үҙҙәренең ғәҙәте буйынса, ҡәберҙең өҫтөнә ятып, ҡысҡырып-ҡысҡырып көйләп иларға тотондо...

Шул арала Ирәндек тауы яғынан ыбай кешенең Баймаҡ яғына килеүе күренеп ҡалды. Мин уны күреү менән ҡайтып китергә ашыҡтым. Тик Ғәләлкәрйәне ҡәбер

өҫтөнән айырып ала алмай бик аптыраным. ис тә булдыра алмағас, баламды күтәреп ҡайтыу яғына әйләндем. Мин бер аҙ киткәс, ул да көйләп-көйләп илап артымдан килеп етте. Беҙ ҡайтҡанда тау өҫтөндәге ҡалҡып-ҡалҡып торған таштар артында мылтыҡлы кешеләрҙең боҫоп ултырғандарын күр әк тә, улар беҙгә теймәне.

Шулай итеп, беҙ өйгә ҡайтҡан булдыҡ. Ләкин әле аман беҙҙең күңелдәр баҫылманы.

Беҙ инде Руденко менән Поленовтың урынлашҡан кантура ына барып, иптәштәребеҙҙең кейемдәрен орамаҡсы булдыҡ. Баймаҡта[71] сиркәү бар, уны, ҙур урын биләп, ҡойма менән әйләндереп алғандар. Шул ҡойманың эсендә Баймаҡ заводының элекке хужа ы Кабановтың алдырған ҙур-ҙур йорттары бар. Сиркәү ҡапҡа ынан инеп, аҙ ғына барғайныҡ, беҙҙе тәҙрәнән күреп ҡалдылар, ахыры: 4-5 хәрби кеше бер өйҙөң болдор баҫҡысынан икерешеп төшөп, яныбыҙға килеп, әйләндереп алдылар. " еҙ кем, ни өсөн бында килеп йөрөй өгөҙ?" – тип оранылар. Үҙебеҙҙең кем икәнебеҙҙе әйттек. Мин өйгә обыск я ағанда алған нәмәләрҙе ораным, баламды күр әтеп, ата ының пальто ын, хром итектәрен ораным. Балаға на память булыр ине, тинем. Улар был үҙемдән көлдөләр генә. Беҙҙең кемгә фатирға төшөүҙе оранылар. Беҙ, Яуышев Дәүли тигән кешегә, тигәс, Поленов беҙгә: "Вы арестованы!" – тип, бер ҡыҙыл әрмисте эйәртеп, беҙҙе, бер ҡайҙа ла сығармай, ашаттыртмай, Дәүли ағайҙың өйөндә аҡларға ҡушты.

Дәүли ағайҙар беҙҙе аҡсылар менән күреп ҡурҡыштылар, мин бер ҙә үлемдән ҡурҡманым. Апайға әйттем: "Сәмси апай, моғайын, беҙҙе төндә алып сығып атырҙар инде, тик еҙгә бер үтенесем шул: әгәр мине атып, Ризам тере ҡал а, еҙ уны Пластағы минең туғандарыма тапшырығыҙ; улар уны үҫтереп, уҡытып, кеше ит ендәр. Ғалинасирға ебәрмәгеҙ, унда ебәр әгеҙ, унда көтөүсе генә булып ҡалыр, – тинем. – Әгәр уны үҙемдең күкрәгемә ҡуйып бергә генә ат алар, донъяла бер үкенесем дә ҡалмаҫ ине", – тинем.

Кис булды, беҙгә ашатманылар. Ишек төбөндә мылтыҡлы аҡсы ултыра. Сәмси апай төпкө йоҡо бүлмә енә беҙгә урын алып бирҙе лә, балаға эсер, тип бер стакан өт биргән булды.

Аҙыраҡ йоҡлап киткәнбеҙ. Бер ваҡыт парадный яғындағы ишекте бик ныҡ ҡаҡҡан тауышҡа йөрәгебеҙ ярыла яҙып уяндыҡ. Дәүли ағай тороп, ишеккә сығып китте, беҙ тертләп тороп ултырҙыҡ.

Бер аҙ өйләшкәс, Дәүли ағай өйгә инде. Беҙгә ул, орама аҡ та, үҙе килеп әйтте: "Темәстән кантонлыҡ күсеп ята икән, шунан килгән таныш иптәштәр фатир орап килгәндәр икән. Мин уларға еҙҙең беҙҙә икәнде әйткәс, улар: "И, бисараҡайҙар, мында килеп еткәндәр икән, беҙ уларҙы борсомайыҡ инде, башҡа кешегә барайыҡ, тип киттеләр", – тине. Мин, шул ваҡыт йомшап китеп, беҙҙе лә ҡыҙғанған яҡшы кешеләр бар икән әле, тип таң атҡансы иланым.

Таң атты. Ҡояш бер аҙ күтәрелгәс, өйгә тағы мылтыҡлы бер кеше килеп инде лә беҙҙе аҡлаған аҡсыға, кеҫә енән сығарып, бер ҡағыҙ бирҙе. Уны ы, ҡағыҙҙы уҡығас, Дәүли ағайҙы саҡырып алып, беҙҙе уға тапшырып китәсәген әйтте. Әгәр быларҙы ҡасыр аң, башың менән яуап бирәсәк ең, тип ағайҙан ҡул ҡуйҙырҙы ла үҙе теге егет менән сығып китте. Улар киткәс, Сәмси апай беҙҙе яҡшылап туйҙырып алды.

Ул көн дә үтте, беҙҙе оноттолар, ахыры. Хужалар ашаталар ҙа ул, ләкин беҙҙе алып килгән аттың хәле мөшкөлләнә башланы. Кәртә башынан ҡарайған бесән, ыныҡ- аныҡ икмәк, аҙыраҡ он болғатып биргән ыу менән генә ат тотоп булмай бит, ә ҡырға сығарып ашатырға мөмкин түгел. Беҙҙе алып килгән бала көн буйы илауҙан бушанмай. Аптырағас, Дәүли ағайға әйттем: "Ағайым, ин Поленовҡа

бар. Беҙҙең хәлде, аттың хәлен әйт, бүтән мин уларҙы туйҙырып тота алмайым; йә, пропуск биреп, Темәскә ҡайтарып ебәрегеҙ, йә үҙ ҡарамағығыҙға алығыҙ, тип әйт, тинем. Дәүли ағай хәлде барып өйләгәс, улар беҙҙе, үҙҙәре кил ен, тип ҡайтарғандар.

Беҙ, ағайҙар, апайҙар менән хушлашып-бәхилләшеп, кәфенде муйынға урағандай булып сығып киттек.

Беҙҙе ҡаршылап, кантураларына алып инделәр ҙә кем икәнебеҙҙе ораша башланылар: ниндәй милләт, кем булып эшләү йәки эшләмәү .б. Мин уҡытыусы булып эшләүем, татар икәнемде әйткәс, улар: “Ни өсөн башҡортҡа барҙың, татар тапманыңмы?” – тинеләр. Яуап бирмәнем.

Ғәләлкәрйәне ораша башланылар: ул үҙенең урыҫ милләте икәнен әйткәс, уны төкөрөнә-төкөрөнә әрләнеләр ҙә, миңә обыск ваҡытында алынған алты аршин туҡыма тауарымды ғына биреп: “Башҡаса ирҙәрегеҙҙе юллап килеп йөрөмәгеҙ, әгәр бик тә ағын ағыҙ, үҙегеҙҙе лә улар янына ебәрербеҙ!” – тинеләр ҙә Темәскә ҡайтыуға пропуск яҙып бирҙеләр. Беҙ ағайҙарға ҡайтып тамаҡ туйҙырҙыҡ та, асығып торған атты егеп, ағай менән апайға мең рәхмәттәр уҡып хушлашып, юлға сығып киттек. Баймаҡтан 2-3 саҡрым ер үткәс тә атыбыҙ арыны, уны ситкә алып сығып туғарып, туйҙырғансы утлаттыҡ...

Комиссар-ревизор фажиғәле был яҙманы үҙе шунда, ҡанлы Баймаҡ заводында, етенсе булып атылғандай башын баҫып, йөрәге ҡан ырап уҡыны...

Ил Инә е алып ингән бер аласыҡта үҙәк ялғарға ғына ултырғайнылар, тышта ҡысҡырыш-илаш ҡупты ла, урамға атлыҡтылар. Өҫ-баштары өҙгөләнгән, биттәре сыйылып ҡанаған бер үҫмер, күрше ауыл йораты, хәле бөтөп ҡапҡа төбөнә ауҙы:

– Бәлә, ағайҙар-апайҙар, бәлә... Ауылыбыҙҙы Руденко әтрәте баҫты: “Башкир! Автономию захотел?!” – тип аҡырышып, өй беренсә атып-киҫеп йөрөйҙәр; мөғәллимәне сәсенән өйрәп сығарҙылар ҙа урам урта ында күмәкләшеп мәсхәрәләргә керештеләр...

– Ә?! Мөғәллимәне?! Уй Аллам, әхирәткәйемде!.. – Ил Инә е атына ырғып менде, ҡулын болғап өрәнләне: – Ир-ҡыҙҙар, әйҙәгеҙ минең арттан!

Ҡоралланған атлы төркөм тупыр-тупыр китеп күҙҙән юғалды, эҫе тымыҡ ауала саң болото борҡолоп ҡалды. Мырҙағолатов та, йә әт ыбайланып, башҡалар менән бергә, әйтелгән ауыл тарафына ашыҡты.

Улар барып еткәндә Әклимә әтрәте ҡырғынсыларҙы ауылдан ҡыуып сығарған да артабан эҙәрлекләп киткән; унарлап өй дөрләп яна, ләкин үндереүсе юҡ; ҡапҡа төптәрендә ҡанға батырып тураҡланған кәүҙәләр аунай. Мәктәп алдында урамда бер тәңгәлде халыҡ уратып алған. Сәлимйәнгә ҡот осорғос яман күренеш асылды: күлдәген ҡап-урталай ярып яланғаслатылған ҡатын кәүҙә е ҡанға батып ята; боттары әм ҡулдары дүрт тарафҡа – ергә ҡатылған ҡаҙыҡтарға тарттырып бәйләнгән; мәрхүмәне ҡаҙыҡтарҙан ысҡындырып маташҡан ҡарт уҡрана:

– Бына еҙгә Ленин бабай, бына еҙгә яҡты Совет власы! Ире Ҡыҙыл Армияла Варшауҙы алырға йөрөй, Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнгән. Ә бында... хәләл ефетен ҡыҙылдар нишләттеләр...

Инәлегенә имән ҡаҙыҡ ҡаҙалған, боғаҙы салынған бахырҙы Сәлмийән бер күреүҙән үк таныны: Гөлсәсәк!..

***

Ҡыҙылдарҙы ҡыуып киткән төркөм әйләнеп ҡайтты; Әклимә бер ҡыҙыл әрмисте муйынынан арыҡ ымаҡ арҡанлап, ҡамсылап яра-яра килтерҙе:

– Бише енең башын өҙҙөк, ә быны ы тереләтә эләкте. Руденко үҙе саҡ-саҡ ҡа-

сып ҡотолдо.

Боғалағынан арындыртҡас, уйылырға барған малдай башы-күҙе аларған әсир, кешеләрҙең нәфрәт ҡатыш ерәнесле баҡҡан күҙҙәренә ҡарап, комиссарҙың тәнгәлендә ергә лыпан тубыҡланып ялбарҙы:

– Минең бер ғәйебем дә юҡ, зин ар, харап итә күрмәгеҙ, харап итә күрмәгеҙ!

Арҡа ына ҡамсы тартып торғоҙҙолар:

– Йәлләт! Башҡорт башың менән башҡорт ҡанын эсеп йөрөй өң!

– Мобилизация менән алдылар, мәжбүр иттеләр... ләкин мин үлтермәнем! Юҡ, үлтермәнем!

– Мөғәллимәне мәсхәрәләүҙә лә ҡатнашманыңмы? – Ил Инә е ҡылысын ҡармаланы.

– Юҡ-юҡ, ҡатнашманым! Күреп кенә торҙом! Бер үк...

– Кемдәр әм нисек ҡатнашты, өйләп бир! – тине Сәлимйән, алҡымына тығылған үк еүен саҡ йотоп.

– Ҡурамшин тигән татар сәсенән өйрәкләне... салҡанятҡырып ҡаҙыҡтарға тарттырҙылар... күлдәген яра йырттылар... ун бишләбе сиратҡа торҙо... Зин ар, үлтерә күрмәгеҙ мине!

– өйлә, шаҡшы! – Йәмил ҡамсы ын жыйлатты.

– Башта Руденко үҙе килеп: “Сука! Вот тебе автономия!” – тип мәсхәрә ҡылды... Артынса Ҡурамшин да: “Сөйрәлтке! Автономия мона шулай була ул!” – тип оят эшен башҡарҙы...

– Етте! – Тештәрен ҡыҫып тыңлаған Сәлимйән йылан ымаҡ борғаланған бәндәнең йөҙөнә төкөрҙө. – Енәйәтсел төркөмөгөҙ оҙаҡламай ғәҙел Совет суды ҡаршына баҫасаҡ – Ревтрибунал язалаясаҡ еҙҙе! Шуны ҡайтып Руденкоға доложи. – Әклимә менән Йәмилгә боролдо: – Уҙамандар, риза ығыҙмы шуға, ебәрәбеҙме?

– Кит ен! – Ҡул елтәне Йәмил. Әклимә лә яугирҙарына өндәште:

– Иҫән-аман үҙ юлына төшөрөгөҙ мөртәтте!

Мосолманда үлектәрҙе иртәгәгә ҡалдырыу гона анала: барса ын йыйып алып, ашыҡ-бошоҡ йыуып-кәфенләп, ауыл күрке Рәсүл ишандан йыназа уҡытып, зыярат урта ына дөйөм ҡәбер ҡаҙып күмделәр. Иртәгә тағы ауыр әм яуаплы көн – ил йыйыны көтә ине.

## 6

Йәйге ҡыҫҡа төн аяғөҫтө йөрөп үтте, тау түбәләрен арылатып таң ыҙыла. Аттарға атландылар. Ете саҡрым араны алдыртҡансы, Көн-апабыҙ зәңгәр күккә тышау буйлыҡ ҡалҡынды.

Йыйын була ы ҡасаба атлыларҙы ағайыулы дөйөм тынлыҡ тойҙортоп ҡаршыланы, әммә дауыл алдындағы тынлыҡҡа оҡшай ине.

Үҙәк урамға төшкәс, ике яндан ҡоймаланып теҙелешкән өн өҙ-тын ыҙ ҡараңғы көс – ҡораллылар ағайыулы төбәлешеп оҙатты. Баштар өҫтөнән тырпайышҡан штык, әнәк, өңгө, мылтыҡ көбәктәре ара ынан шымып аңдыған януарҙың бер генә хәтәр өнө – ышылдап тын алыуы шомландыра; ирәк- аяҡ йүткереү, ҡоросҡа ҡорос тейеү сыңы тултыра был мөхитте. Алғы буйҙа үҙенә күрә иҫ киткес гвардия – ағас ҡылыслы әм өңгөлө иң уңғы яугир быуын – дүрт-биштән алып ун өс йәштәргәсә үтә етди малайҙар...

Киң майҙанда көмөш айлы манара ын аяҙ күккә ғорур сөйгән ағас мәсет алдына туҡтанылар; артынса уҡ ҡораллы халыҡ майҙанды әм урталағы етәкселекте – ғәҙәттән тыш комиссар-ревизор, кәбеҫтәләй аҡ салмалы, йәшел таяҡлы Рәсүл ишан хәҙрәт әм уның мөриттәре менән ҡуша баҫып торған Реввоенсовет ағзала-

рын божоралап уратты. Тәүҙә Рәсүл хәҙрәт ҡыҫҡаса аят уҡып, майҙан бер юлы “Алла Әкбәр!” иткәс, йыйынды Реввоенсовет рәйесе Аҡмал башлап асты:

— Йәмәғәт, илебеҙҙең мөбәрәк азаматтары әм уҙамандары! Беҙ ашығыс йыйылдыҡ — ил яҙмышын уртаға алып хәл иткес ҡарар ҡабул ҡылырға. Боғаҙ ярып сафсата атырға ваҡыт юҡ, шуға күрә дилбегәне, дөрөҫөрәге, теҙгенде, ҡыҫҡа тотайыҡ. Былтыр ғына тап ошо төбәктә Әхмәтзәки Вәлиди уҙаман етәкселегендәге башҡорт ғәскәрҙәренең делегаттары хәрби ҡоролтай уҙғарып, ҡан ҡойошто туҡтатырға — Советтар яғына сығырға, автономиябыҙҙы Советтар нигеҙендә ҡоророға тарихи ҡарар ҡабул ҡылғайны. Артабанғы ваҡиғаларҙы үҙегеҙ беләегеҙ. Инде килеп бөгөнгө көндә үҙегеҙ айлаған Реввоенсовет еҙҙең, йәғни ғәскәрҙәребеҙҙең делегаттары ҡаршы ына шулай уҡ хәл иткес мәсьәлә ҡуя: ҡан ҡойошто туҡтатыу, автономияны тыныс юл менән аҡлап ҡалыу әм нығытыу өсөн Үҙәк хакимиәт менән өйләшеүҙәр башларға...

— Ваҡыт!

— Күптән кәрәк ине! — Алғы буйҙа торған алдат кейемле йәштәр хуплап шауланы.

— Беләбеҙ. Быға тиклем дә вәкилдәр ебәреп ҡараныҡ, ләкин ҡыҙыл ғәскәр уларҙы үткәрмәй тураҡланы... Бына хәҙер ваҡиғалар үҙгәрҙе — Үҙәк хөкүмәт исеменән беҙҙең менән уртаҡ тел табырға Ҡыҙыл Армия штабынан күптәребеҙгә яҡшы мәғлүм комиссар, күренекле башҡорт коммунисы Сәлимйән Мырҙағолатов үҙе килде...

Халыҡ сафтары елгә бәүелгән диңгеҙҙәй тулҡынланды. Салмалы баштар алдында тауҙай ҡалҡынған Рәсүл ишан йәшел таяғын ергә төртөп, ыңар ҡулы менән битен ыпырҙы:

— Етте! Коммунистарға бәддоға! Йәмәғәт, ишет ен ҡолағығыҙ: башҡорт тип алданмағыҙ! Ғәли Шәмиғолов та үҙен башҡортмон тип күҙ буяй... Коммунистарҙың бары ы ла бер буҡлы сыбыҡтан ҡыуылған мөртәт, иман ыҙҙар!

— Ялған! — Йәмилдең көр тауышы. — Ишан хәҙрәт мине ғәфү ит ен, комиссарҙың кемлеген яҡшы беләм: ысын намыҫлы инсан! Быны мин үҙегеҙ ышанып айлаған Реввоенсовет ағза ы булараҡ раҫлайым! Ил Инә е дөрөҫләр!

Әклимәнең ни әйтерен көткән майҙан тын ҡалды. Йөҙәрләгән күҙҙәр уға төбәлде.

— Йәмәғәт, ағайҙар әм апайҙар, ҡустылар әм еңлеләр! Мин комиссар Мырҙағолатовты электән үк яҡшы беләм әм үҙемә ышанғандай ышанам!

Майҙан ҡәнәғәт гөжләне, баштар өҫтөндә ҡоралдар сайҡалды.

— өйлә ен!

— үҙ бирегеҙ үҙенә!

Кисәге фажиғәнән йәне киҫелеп мантый алмаған Сәлимйән, ҡапыл тертләп уянғандай албырғаныбыраҡ торғас, рухын туплап, етәкселәр төркөмөнән халыҡҡа яҡынланы, баш эйеп иҫәнләште. Аҡ салма аҫтынан тызырайған ишан хәҙрәткә күҙ ҡырыйын ирпегәс, тәрән улыш алып, бөтә майҙанға ишетелерлек оранланы:

— Йәмәғәт, тыңлағыҙ! Оҙон үҙҙең ҡыҫҡа ы: бында беҙ бер-беребеҙҙе ҡыйыр ытырға килмәнек — туғандарса кәңәшләшергә килдек. Рәсүл хәҙрәтте белмәгән кеше юҡтыр — милләтебеҙҙең аҫыл йөҙөк ҡаштарының бере е ул. Мин дә уны яҡшы беләм, ихлас ихтирам итәм. Ләкин хәҙрәт саҡ ҡына яңылыша, буғай: иман ыҙҙар түгел беҙ! Беҙ — иманлы коммунистар, беҙ милләтебеҙҙе атмайбыҙ!

— Ур-рааа! — Майҙандың алғы буйы, фронттан ҡайтҡан ҡыҙыл әрмис кейемле баш күтәреүселәр, винтовкаларын, карабиндарын юғары сөйөп алҡышланы, хатта бер нисә көбәктән йәҙрә лә гөр өлдәтте. Ҡулын күтәреп илде тынысландырғас, Мырҙағолатов иң кәрәкле ен әйтте:

— Реввоенсоветығыҙ рәйесе Аҡмал уҙаман бик дөрөҫ киҫәткәнсә, теҙгенде ҡыҫҡа тотайыҡ. Былтырғылай замана түгел хәҙер: башты ташҡа бәреп ташты ярып булмай. Ҡыҙыл Армия Колчакты ла, Антантаны ла әм башҡаларын да тармар ҡылды — еҙгә ҡаршы баштан-аяҡ ныҡ ҡоралланған ҙур көстәр ташланасаҡ, утлы ҡулса эсендә ҡалдырасаҡ. Үҙегеҙ менән бергә ҡатындарығыҙ, балаларығыҙ, атай-әсәйҙәрегеҙ хаҡында уйлағыҙ! Милләтте утҡа тығырға, көрсөккә таяндырырға ярамай, әле ваҡыт үтмәгән. Әгәр рөхсәт ит әгеҙ, еҙҙән бер вәкил алып, тыныс өйләшеүҙәр башлар өсөн Эстәрлетамаҡҡа юлланырбыҙ, хатта Мәскәүгә лә мәғлүм итербеҙ. Ризамы шуға?

— Риза! Риза! Риза! — Майҙан берҙәм хупланы. Ләкин шул уҡ бер мөҙҙәттә мәсет янындағы ирәк сауҡалыҡтан зә әр өрән яңғыраны:

— Отставить! Провакация! Ышанмағыҙ! — Ҡыҫҡа киҫелгән йыуан ағас тумарылай тәпәш буйлы, дүрткел-яҫы яурындары арҡыс-торҡос портупеялы, башы фуражка аҫтынан бысраҡ-ҡанлы марля менән тирәсләнмеш ғәййәр әҙәм атлығып килеп сыҡты ла халыҡ алдына ҡарғылды. Аҡмал ҡарт, Сәлимйәндең ҡолағына эйелеп: “Реввоенсоветҡа баш бирмәгән уҙаман — тауҙағы бер бәләкәй әтрәттең дыуамал атаманы Хәмзин”, — тип аңлатты. Ҡулын болғай-болғай лауларға керешкән ирҙе Йәмил ҡысҡырып бүлдерҙе:

— Хәмзин, иңә үҙ бирелмәй, сөнки ин делегат түгел!

Тегенең йөҙө ут ҡапҡандай ҡыҙарҙы:

— Нимә?! Сысҡанда — күт кәрәк, сысмағанда ник кәрәкме?! Яу ҡырында ла Хәмзин делегат түгел, ләкин ҡанын йәлләмәй ҡойоп уғыша! — Башындағы ҡатҡан ҡанлы марля ына төртөп яр ыны.

— өйлә ен, батырлығын күр әт ен! — тинеләр алғы буйҙағылар.

— Ярай, телләш, тик иҙелдәй уҙма, Хәмзин.

— Йәмәғәт, түҙер әмәл ҡалманы!.. Беҙҙе, халҡым өсөн тип йәнен аямай ҡыйышҡан яугирҙарҙы, бынауы Аҡмал кеүектәр, Йәмил кеүектәр анауы торған комиссарға — коммунистар шпионына ата! Ләкин шуны белегеҙ: бында беҙ — башҡорт милләтенең алтынға ла, көмөшкә лә, юха телгә лә атылмай торған тоғро яҡлаусылары бар! Ышанмағыҙ уларға, ышанығыҙ беҙҙәргә! Бөгөндән үк Баймаҡҡа ябырылырға, Эстәрлетамаҡҡа сапҡын я арға! Күп михнәттәр сиккән ошо тыуған тупраҡты үбеп ант итәм: ҡыныбыҙҙа ҡылысыбыҙ, тәнебеҙҙә йәнебеҙ барҙа милләтебеҙҙең бәхете өсөн уңғы тамсы ҡаныбыҙ ҡалғансы уғышып үлергә ант итәм! — Хәмзин төбөн салғы сапҡандай йөҙтүбән ауҙы, ауыҙ-мороно саңға сумып, ике ирене ара ына ҡара тупраҡ ҡыҫтырып килеп торҙо. Ытырғанып күҙәткән бер үҫмер малай, йыртыҡ кейемле көтөүсе, ер ашаған орансыға яҡынланы, “ инме был?” тип йөҙөнә тура баҡҡас, халыҡҡа боролоп иҫкәртте:

— Ағайҙар, апайҙар, Хәмзинға ышанмағыҙ! Мин уны күптән түгел Баймаҡта — яуыз Ә лиуллин әтрәтендә шәйләнем, Ә лиуллин менән ҡосаҡлашып араҡы эсә ине!

— Шаҡшы! Провокатор! — Хәмзин маузеры, ут төкөрөп, көтөүсене юл саңына быраҡтырҙы. Төтән бормаслатҡан көбәген уҫал болғап янаны: — Хәмзинға тел тейҙергәндең әр бере е ошолай телдән ҡаласаҡ! — Күкрәгенән ҡан борғоған кәүҙә тирә ендә халыҡ зыҡ ҡубышҡан арала, ат етәкләп көткән йәнуҙаҡтары менән йылғыр ыбайланып, сауҡалыҡҡа ташланды, тау егенә енде. Әммә делегаттар уның оранына ҡушылманы, Советтар менән өйләшеүҙәр башларға ҡарар ҡабул ҡылып, күңелле гөрләшеп таралды. Аҡмал менән Әклимә лә, комиссарҙы ваҡытлыса Йәмил әм башҡалар ҡарамағына тапшырып, ашығыс эштәренә йүнәлделәр.

— Анауы ауылға барып, етәкселәрҙе көтәбеҙ, — тине Йәмил, тау буйында өй ҡыйыҡтары ыҙатланған яҡҡа ымлап. — Тик аттар ҡырҙа бит әле...

Сәлимйәндең аттарҙы көткө ө килмәне – йәне түҙмәй ниңәлер:

–Яҡын бит, яйлап атлай торайыҡ.

– Ярай. Арттан килтереп еткерерҙәр.

Күпмелер аҙымлағас, улар юҫыҡланған ауыл осонан ала-ҡола ҡаршы төркөм бүҫерелеп сыҡты ла юл буйынса туҙраны: төйөнсөктәрен йөкмәгән, ыйырҙарын әм кәзәләрен етәкләгән ҡатын-ҡыҙ, бала-саға, ҡарт-ҡоро...

– Был ни хәл?!

Төркөмдән бер ыбайлы айырылды, елдереп килеп етте – Реввоенсовет ағза ы Ғайса ине:

– Туғандар!.. Тау артында, йылға бөгәлендә... бронепоезд! Туптарынан ауылға ут яуҙыра!..

– Атала-аар! Уф, Аллаҡайым, атала-аар!.. – Йән әселе ҡатын-ҡыҙ ыҡтауы телгеләне йөрәкте; аңшайышып, үркәстәрен зәңгәр офоҡ каймалаған тау яғына баҡтылар. Дә шәтле йән эйә енең ер елкетеп, ухылдап-ухылдап йүткереүе ишетелде; ауыл ыртындағы ғәм еҙ йылҡы өйөрө утлап йөрөмөш хәтфә-йәшел ҡалҡыулыҡта аҡ мамыҡтай ҡабарынҡы ике ялбыр болот хасил булды, артынса уҡ күк күкрәгәндәй гөр өлдәне; илаш, ҡарғыш, ләғнәт тауыштары ялғанды уға. Шул арала ауыл осонда тағы ла бер нисә аҡ болот ҡубарылып, бер өй түбә е күҙ алдында күккә осто. Ҡасҡын халыҡ тулҡыны быларға килеп етеп төкәлде, бары ы бергә буталды...

– Ә ә, күрҙегеҙме инде кемдең – хаҡ, кемдең нахаҡ икәнен?! – Ҡайҙандыр пәйҙә булмыш Хәмзин яман шарҡылдап көлдө. Ҡырт боролоп, йыуан бысраҡ бармағын Сәлимйән тарафына төртөп ажғырҙы: – Бына тора ажда аны килтертеп ауылға аттыртыусы, Шәмиғолов шпионы! Янында Йәмил- атлыҡйән – ботарлағыҙ я илдарҙы!

Ҡасҡынсыларҙың бер килке е, туҡталып, ошо икәү тирә ендә өйөрөлдө:

– Арт абағын уҡытайыҡ мөртәттәрҙең!

– Туҡма! – Күҙ-башы аларған унлап ҡатын-ҡыҙ, төйөнсөктәрен ташлап, “шпион”дарҙы йолоҡҡоларға кереште:

– Быны ы йылтыр итектәр кейеп алған! – Йығып алып, аяҡтарынан өйрәнеләр. Итектәрҙең ҡыҫтаулығы ҡотҡарҙы – урылманы...

– Апайҙар, тыйылығыҙ! – тип ҡараны шулай уҡ санда өйрәтелгән Йәмил, башын көскә ҡалҡытып. – Комиссар бит беҙгә илсе булып килгән – илсегә үлем юҡ!

– Ләңкелдәмә, бәдбәхет, коммунист өйрәлтке е! Тау артынан әжәл яуҙырта илсең!

Тупыр-тупыр ат тояҡтары яҡынланы, мылтыҡ гөр өлдәне, кешеләрҙең баш осонан бер нисә пүлә жыйланы:

– Йәмәғәт, Ил Инә е!

– Таралығыҙ! – Ҡурҡыштарынан асыуҙары баҫылып, ҡорбандарын ташлап ҡастылар, Хәмзиндан да елдәр иҫте. Аттарынан ырғып төшкән Әклимә менән Аҡмал аунап ятҡандарҙы торғоҙошто.

– Ғәфү итегеҙ беҙҙе, күҙе аларған халыҡты! – Яңынан атландылар.

– Зыян юҡ, – тине Сәлимйән, өҫтөнә ырыған санды ҡағып. – Ат бирегеҙ, кисекмәҫтән бронепоезға хәбәр итергә кәрәк!

Аҡмал ҡатарында ҡушарланып тау яғына текләп торған Вәлиулла ҡапыл күҙҙәрен аҡайтып, ауыҙынан аҡ күбеге аҡтарылып аҡырҙы:

– Аа-ай, Сәргәй ҡантураты! Ана килә Сәргәй ҡантураты! – Диуана йән ҡамсы абын төртөп күр әткән тарафтан ауа ярып ат кешнәне, эйәрле-йүгәнле менге, атлығып килеп, Сәлимйәнгә тиңәлде; Сәлимйән уны теҙгененән эләктереп тә алды, атланып та өлгөрҙө, туптар гөр өлдәгән тимер юл яҡҡа тура елдерҙе; комиссарҙы янлатып Әклимә, Йәмил, Ғайса әм унлап яугир-йәнуҙаҡ ҡалышманы. Ябай ха-

лыҡ быға шаҡҡатты:

– Ҡарағыҙ әле, ҡарағыҙ: Сәргәй ҡантуратын менеп алды!

– Үҙе килеп ырныҡты малҡай!

– Сәргәй ҡантураты эйә ен тапты!

– Инш-Алла, былайғас, ҡанлы бола туҡталыр, илгә именлек ҡайтыр!

Ни айәт, иҫенә килгән Вәлиулла менән Аҡмал ҡарт доға ҡылды:

– Амин, бул ын шулай!

Тимер юлға яҡынлашыу иҙелгәс, менгеләрҙе ҡалдырып, разъезд яғын байҡар өсөн дүртәүләшеп тауға үрмәләнеләр. Аҫта өҙөк-өҙөк паровоз ҡысҡыртты – тимер ажда а оҙон ҡара кеҫәрткеләй бормасланып, уҫал көбәктәрен улар килгән яҡҡа тоҫҡалдырып тора – йәҙрә яуҙырырға йыйына... Сәлимйән бер күреүҙән үк таныны – уны был тарафҡа килтереп ҡалдырған бронепоезд!

Өҫтәлташҡа иңкәйеп, ҡуйын дәфтәренең аҡ битенә яҙҙы:

“Командарм Н.Д. Каширин иптәшкә, ашығыс!!!

Хөрмәтле Николай Дмитриевич, үҙең белгән С.Ш. Мырҙағолатовтан мө им хәбәр.

Ҡораллы баш күтәреүҙе тыныс юл менән туҡтатырға яҡшы шарттар бар; етәкселәре лә, күпселек халыҡ та мәсьәләгә ыңғай ҡарай. Әле барған уғыш хәрәкәттәрен, әгәр хөкүмәт яғы ла ризалаш а, ун көнгә туҡтатып торорға ла килешеү өсөн өйләшеүҙәр башларға теләк белдерҙеләр; шул хаҡта Сталинға, Троцкийға, Дзержинскийға кисекмәҫтән еткереүегеҙҙе орайым, ә мин үҙем Эстәрлетамаҡҡа ҡайтам.

Ҡултамғамдан таныр ығыҙ: Сәлимйән Мырҙағолатов”.

Йыртып алып, Ғайсаға тотторҙо:

– Төпкәрәк ал әм елдәй елеп барып ет, командармдың үҙ ҡулына тапшырырға тырыш. Күр әт егетлегеңде!

– Күр әтер, тау уҡмаҡтарынан күҙ йомоп та үтә ул, – тине Йәмил. Ғайса тауташ ара ында йомолғас, Сәлимйәндән ораны: – Артабан ни эшләргә?

– Аҡмал олатаң әйткәнсә, инең менән Баймаҡ аша тура Эстәрлетамаҡҡа!

– Килегеҙ әле, тура юлды күр әтәйем. – Ил Инә е офоҡ буйлап монарланған Күк Ирәндек яғына ҡулын ондо. – Күрә егеҙме анауы үҙәндәге үлектәй тын ауылды? Ҡанэскес Руденко әтрәтенең алғы биләмә е ул. Шуның аша түтә юл – Баймаҡҡа, Баймаҡтан – Эстәрлегә... Аҡ әләм күтәреп үтегеҙ.

Кире түбәнләп, аттарға атландылар; оло юлда был икәү айырылды – коммунистик әтрәт торған ауылға ыңғайланы...

## 7

Саҡрымдай ара ҡалғас, биш-алты ҡыҙыл әрмистән хасил атлы ағауыл осраны; аҡ флаг болғап барғанғалыр, атманылар, тик шунда уҡ эйәрҙән тартып төшөрҙөләр ҙә типкеләп туҡманылар, Сәлимйәндең итеген алдырып алдылар (юлдашының ҡата ы кәрәкмәне):

– Башкир! Вот тебе автономия! – Арҡаларына ҡамсы ялата-ялата, ауыл осона еткерҙеләр. Унда атҡа атланған, сәфәр сығырға йыйынған әтрәт тора. Бер ситтәрәк ҡарт ҡарағай төбөндә томшайып күҙәткән Руденко әм ярҙамсы ы ҡаршыланы.

– Иптәш командир, бандиттарҙың лазутчиктарын тотттоҡ!

– Сыуашбаев, ко мне! – Руденко эргә енә елтерәп килеп еткән ҡыҙыл әрмисте Мырҙағолатов таныны – кисә генә Ил Инә е уғыш ҡырынан ҡороҡлаған, Мырҙағолатовтың итек баштарын яларҙай инәлгән әсир.

– Шулмы?

– Шул. Минән орау алған ҙур бандит.

– Ә ә, попался, голубчик!

Тотоп килтереүселәрҙең башлығы ҡағыҙ болғаны:

– Итегенең инесенән мандатын урып алдыҡ. Элекке контрреволюцион обком секретары Каспранский, Хөкүмәт рәйесе Йомағолов, Башчека рәйесе Имаҡов бандиттар ҡул ҡуйған.

– Бир бында! – Руденконың ярҙамсы ы ҡулын уҙып яҡынлағайны, баянан бирле сырамыта алмай торған Сәлимйән уны таныны – Орскиҙа саҡта үҙе партия сафына алған, партия билеты тапшырған урыҫ.

– Бәй, Ключников! ин нишләп бында йөрөй өң?

Ключников ҡаштары аҫтынан аҡайып ҡараны ла өндәшмәне, командирҙы ситкәрәк алып китте.

– Бандит ҡайҙан белә ине? – Шикләнеп ҡараны Руденко.

– Билдәле большевик Мырҙағолатов был. Дутов диктатура ы заманында беҙҙең өйәҙ комитетын ойошторҙо, йәшерен эш алып барҙы...

– О о! Аҫыл ҡош! Ике ен дә кисекмәҫтән канткомға оҙатырға, Поленов үҙе тикшер ен! – Кире әйләнеп килеп, күҙҙәре менән әрмәне: – Ниңә яланаяҡ?

– Евсеевтың табаны тишек ине бит, иптәш командир...

– Кире кей ен!

– Уныҡын Филимонов алды, үҙенекен күлгә ташланы...

– Ташлаған еренән тап ын! Ә быныҡын немедленно ҡайтарырға!

Тотҡондарҙы ике аҡсы менән ҡушарлап арбаға ултырттылар, икенсе енә кисә генә баштары сабылған биш мәйетте алдылар – кантон үҙәгендә матәм митингы ы менән хөрмәтләп күмергә. Алдан, арттан бер нисә ыбайлы оҙатышында ылау ҡара кискәсә әм төнө буйына барҙы. Баҡыр ҡаҙған иҫке шахталар тәңгәленән уҙған айын тын алғы ыҙ аҫы ауа ҡапланы улыштарҙы – күмелмәй ятҡан күмәк мәйет тарҡала... Кантон ҡасаба ы осондағы шахта и ә бигерәк тә тонсоҡторҙо. Йәмил, иҫе китмәй генә, Сәлимйәнгә аңлатты:

– Бындай шахталар күп беҙҙә. Поленовтың иң яратҡан өнәре...

Мылтығын ҡосаҡлап йоҡом ораған ағауыл, дүрткел көрәк аҡаллы Йылайыр урыҫы, кирелеп бер иҫәнләне лә күңел асырға итте:

– Бандит, күҙең яҙыу таный, буғай?

– Шулайыраҡ.

– Урыҫсаны ла уҡый ыңмы?

– Уҡыштырам.

– Александр Сергеевич Пушкин тигән шағирҙы белә еңме?

– Аҙ-маҙ белә инем.

– Уның “Тут русский дух, тут Русью пахнет!” – тигәне менән дә танышмы?

– Эйе.

– Бына шул Пушкин әле тере бул а, беҙ, ҡыҙыл партизандар, ошолай яҙҙыртыр инек: “Тут скверный башкирский дух, тут Башкирией смердит!” – ха-ха-ха! – ерт- ерт юртҡан ыбайлылар ҙа кинәнеп көлөштөләр:

– Иртәгә үҙҙәре шунда бөкләнеп төшкәс, үҙҙәренең Пушкины булған белопогонник Бабичевҡа сәләмдәрен бирерҙәр, “башкирский дух”ты бергәләшеп таратырҙар!

Ҡасабаға килеп ингәндә ҡояш күтәрелгәйне, тамаҡтарҙы киптертеп, ҡыҙҙыра ла башланы. Кантком бина ы алдындағы майҙанға ҡыҙыл әрмистәр теҙелгән; таҡта ҡойма йәнәшә ендә бейеклеге бил тиңентен бер нисә бағанаға йыуан-оҙон бүрәнәне алып-беркетеп ҡоролған ат бәйләгескә алама кейемле өс башҡортто, аяҡ-ҡулдарын аҫҡа ҡайырып, башлы-күтле йөҙтүбән ятҡыртып, муйындарынан, билдәренән бүрәнәгә беркеткәндәр; теҙемдәге иң арттағы ының оса ярығына карабин көбәгеп терәп бөгөлгән Поленов гөр өлдәтеп атҡайны, ҡорбандарҙың өсө өнөң дә оса ара ынан ҡан китте, берҙәм аҡтарылған түбә ҡапҡастарынан аҡ -

ыл-ҡыҙыл мейе бутҡалары сәсрәп, алдағы ынан сыҡҡан пүлә ҡоймаға сыртлап ҡаҙалды. Поленов, ҡәнәғәт турайып, эргә ендә көтөп торған ҡыҙыл әрмискә карабинды ҡайтарҙы:

– Күрҙегеҙме шанлы “русская трехлинейка”ның ҡөҙрәтле көс-ҡеүәтен?! Бер юлы өс бандитты буйҙан-буй тиште, ҡоймала ла елле тишек ҡалдырҙы! ис кем ис ҡасан ҡаршы тора алмаҫ беҙҙең ҡыҙыл пүләләргә, ура!

– Ур-ра-ааа! – Ҡыҙыл ғәскәр ҡыуанып алҡышланы.

Сәлимйән менән Йәмилде дөбөрләтеп Поленов ҡаршы ына баҫтырғас, Барановский ҡыҫҡаса аңлатты:

– Руденко участка ында эләктергәндәр. Мырҙағолатовтың контрреволюцион режим агенты икәнлеге документально раҫланды.

– Май сүлмәге тышынан уҡ билдәле, тигәндәй, баштан уҡ иҙенгәйнем уның яуыз бандит икәнен!

– Ниндәй яза бирәбеҙ?

Поленов ҡанлы ат бәйләгестең буш өлөшөн ҡарашы менән үлсәне:

– Бик яҡшы, унда как рас ике бандитлыҡ урын бар – маузерҙарҙың көсҡеүәтен ынарбыҙ. Әҙерләгеҙ!

Дүрт ҡыҙыл әрмис ҡыҙып эшкә керешкәнсе, Йәмил киҫәтеп өлгөрҙө:

– Командир, миндә ҙур хәрби секрет бар!

Барановский палачтарын туҡтатты.

– Әйт, бандит!

– Командующиҙың ғына ҡолағына әйтәм, бик мө им!

Сәмләнә төшкән Поленов сытырайып яҡыныраҡ килгәйне, Йәмил йәшен тиҙлегендә уның ҡылысын ҡынынан урып алып елтәнде; башын ҡаплап янтайып өлгөргән Поленовтың ул ҡулы тер әк тәңгәленән сурт өҙөлөп төштө[72], тәңгәлендә ҡылыс та ятып ҡалды: Йәмил мөғәллим, аймылышҡан хәрбиҙәрҙең ара ынан уҡтай атылып сығып,эҙәрләүселәренә ерҙән таш тырнап алып бәрә-бәрә, тау ара - ына дөндө, ләкин артынан жыйлап ҡыуып еткән пүләләр уны ҡая аҫтына тәкмәстерҙе...

Поленовтың яра ын бәйләнеләр, үҙе ирәйеп ултырып йөрөргә яраҡкан арҡалы кырандасына алып, лазаретҡа илттеләр, операция өҫтәленә ятҡырҙылар. Барановский, “Правда” гәзитенә төрөп, батыр командующийҙың саңға буялып ҡарайған өҙөк ҡулын да килтергәйне – эйә енән ораны:

– Быны... быны ни эшләтергә?

Йөҙө ҡағыҙҙай ағарып, тешен ҡыҫып түҙеп ятҡан Поленов ҡаты ыңғырашты, әммә тиҙ үк рухланып, ҡәтғи бойорҙо:

– Штабҡа!.. Ҡарауыл ҡуйып... аҡлағыҙ... үҙем сыҡҡансы!

Себендәрҙән ҡурсаларға ҡалын итеп тоҙ ибелгән Поленов ҡулы штаб бүлмә енең мейес башында көтөп ятты, эргә ендә алмаш-тилмәш ҡыҙыл әрмис хөрмәтле ҡарауыл торҙо...

Сәлимйәнде төрмәгә бикләнеләр, Поленовтың үҙенән бойороҡ бирелеүен көттөрҙөләр... Аҙна дауамында Эстәрлетамаҡтан Шәмиғолов ҡул ҡуйған телеграмма килде: енәйәтсе Мырҙағолатовты, Ревтрибунал хөкөмөнә тарттырыу өсөн, беренсе мөмкинлек менән үк Эстәрлетамаҡҡа оҙатырға...

8

“Революция ҡорбандары”н матәмле-тантаналы күмәк ерләү көнө төрмәләге Мырҙағолатовҡа ла мәғлүм булды; уны, кейенергә бойороп, штабҡа оҙаттылар – командирҙар үҙҙәренсә сәхнә еҙ спектакль ҡороп, сәйәси уйын я айҙар ине, буғай. Аҡ марля сырмаулы ул ҡулы муйынына аҫылған Поленов, ерәнесен йәшермәй, ҡара ҡойолоп ажғырҙы:

— Йәл, теге көндә ат бәйләгескә ятҡырып өлгөрмәнем... Инде килеп Шәмиғолов иптәш тә араға төштө. Тик шуны яҡшы белә еңдер, ренегат: Эстәрлетамаҡка инең турала “юлда ҡасырға маташҡанында атылды” тигән мәғлүмәт кенә етеүе бик ихтимал!..

— Беләм мин еҙ бандиттарҙы.

— Бандит ул ин, ә беҙ — ысын коммунист. Коммунизм хаҡына көрәшәбеҙ.

— Шахталарға гона ыҙҙарҙың кәүҙәләрен тынҡыслапмы?

— Бандиттарҙың, тип төҙәт.

— еҙ үлтергән Дулат-Али — 1905 йылдан, Булатов1917 йылдан РКП(б) ағзалары, намыҫлы коммунистар ине. Ике ен дә бик яҡшы белә инем.

— Беҙ ҙә бик яҡшы беләбеҙ. Бөтә е лә башҡорт-бандит, төҙәлмәҫлек автономист-националист.

— Ә Кузнецов менән Парташов? Улар ҙа башҡорт националистары инеме?

— Башҡорт яҡлы урыҫ уғата хәтәрерәк; ундайҙарҙы, Феликс Эдмундович Дзержинский бик хаҡлы ҡушыуынса, ҡуша рәхим еҙ епереп түгәсәкбеҙ. — ыңар ҡулы менән өҫтәлгә укты. — Етте! Автономия уйыны тамам!

— әм башҡортҡа ла каюк! — Барановский, ары ат тештәрен ыржайтып, уҫал йылмайҙы. — Тамырын ҡоротасаҡбыҙ!

Үҙҙәре ҡыҙыл байраҡ сөйөп яулап алған ҡыҙыл Рәсәйҙә түгел, ә аҡтар лагерында ултырғандай тойолдо Сәлимйәнгә; нәфрәте тулышып, Поленовҡа бер ҡалҡынып ҡараны:

— Бына еҙ, Владислав Евгеньевич, коммунист әм кантон партия комитетының үҙегеҙ иғлан ҡылған етәксе е булараҡ, бындай әләкәтле сәйәси линияға нисек юл ҡуйҙығыҙ?

— Сугубо партийный линия был — партиябыҙҙың стратегик линия ы. Әлбиттә, был иңә, культура ыҙ ҡырағай башҡортҡа, бөтөнләй аңлайыш ыҙ. Россия ла, партия ла милли каморкаларға бикләнә алмай. Юҡҡамы ни партиябыҙ Уставы ла милли принциптарҙан азат — монолитлыҡҡа нигеҙләнгән! — Барановскийға әйләнеп ҡарап өндәште: — Фекереңде ослап ҡуй, Степаныч.

— Осо шул: Волга — Урал арауығында Россиябыҙҙың йөрәгенә ҡаҙалған зә әр төркилек шырауын урып алып ташлау көнө етте: башҡорт бөт өн, ирәк-мирәк ҡалғаны ла үҙен “башҡортмон” тип атауҙан дер ҡалтырап ҡурҡ ын! Тиҙләтелгән темп менән иң элек башҡорт — татарға, аҙаҡ татар урыҫҡа әйләнергә тейеш!

— Браво, Степаныч! — Поленов, сулаҡлығын онотоп, буғай, ҡул сабырға иткәнендә ыҙланып ыңғырашты.

Тышҡы яҡтан ишек тибеп асылды, ҡыҫығынан үрә ҡараған Михайлычтың мыйығы күҙгә салынып, уның аҫтынан лап-лоп баҫҡан тәбәз әҙәм ашығып аҙымланы: йыуан дүңгәк кәүҙәле, арҡыс-торҡос портупеялы, өйрәлмеш “селедка” ҡылысла ла маузерлы; ике ҡулына, иҙәнгәсә әлендереп, ҡарбуз ымаҡ тумалаҡ нәмәле киндер тоҡсайҙар тотҡан.

— Абба, Хәмзин?! Яраң бөтәште ләме ни, башыңдың сырмауы ҡайҙа? — тине Сәлимйән.

Кәрлә өндәшмәне. Поленов менән Барановский күңелле хихылданы. Хәмзиндың бында күренеүе тегендә ул атҡан көтөүсе үҫмерҙең фашлауын дөрөҫләне... Шомло бәндә, ерәнеп күҙәткән Сәлимйәнгә ҡалҡынып та ҡарамай, лап-лоп баҫып түргә уҙҙы, тоҡсайҙарындағын өҫтәлгә тумарлатты — Аҡмал менән Вәлиулланың башы...

— оп! Ҡабул ҡылып алығыҙ, задание үтәлде! Ғайса тигән атаҡлы бандитты тимер юл буйында дөмөктөрҙөк, былары — алдығыҙҙа.

— Браво, Хәмзин!

— Тимәк, гидра баш ыҙландырылды? “Реввоенсовет” тигәндәре өйләргә генә ҡалды? — Кәйефләнгән Барановский устарын ҡәнәғәт ыуҙы. — Шулаймы, иптәш Хәмзин?

— Юҡ шул... Ил Инә е тигәндәре теҙгенде үҙ ҡулына йомарланы, тиҙ үк тәртип урынлаштырҙы.

— Амазонкамы? Быны ы насар... — Поленов етди борсолоп хәүефләнде.

— Уны ының да башына етербеҙ, ҡуш толомонан усмаҡлап килтерербеҙ.

— Молодец! Ә лиуллин әтрәтенең йөҙөк ҡашы, партиябыҙҙың лайыҡлы улы еҙ, Хәмзин! Барығыҙ, изге эшегеҙҙе дауам итегеҙ!

— Есть! — Билендәге “селедка” ын даңғыр-доңғор өйрәлтеп йә әтләне.

— Күрҙегеҙме? Башҡорт коммунистары тап ошондай булырға тейеш! — Сәлимйәнгә ирпелеп ҡарап хупланы Барановский.

— Шулай булыр. Булдырырбыҙ! — Поленовтың күҙҙәре уҫал ялтыраны.

— Владислав Евгеньевич, был серек кәбеҫтә күсәндәрен ҡайҙа быраҡтырырға?

— Урам сатына сығарып, ҡаҙыҡ баштарына ҡат ындар... күргәҙмәле абаҡ ҡылып!

Ике ҡыҙыл әрмис, дөбөрләп кереп, баштарҙы әлпек аҡалдарынан услап алып сығып киттеләр.

— Бына шулай! Башҡорттоң башын беҙ уның үҙ ҡулынан ҡырҡтыртабыҙ, хе-хе-хе....

Сәлимйәндең ҡан баҫымы күтәрелеп, күҙ алдары ҡараңғыланды, ҡолаҡтары шауланы.

— Яуызлыҡтың сигенән сыҡҡан ығыҙ, коммунист әхлағы юҡ еҙҙә!

— Хе, әхлаҡ ти егеҙме? — Барановский өҫтәл тартма ынан хәрби устав урынына ҡулланған “Правда” ын сығарҙы. — Ленин иптәш үҙе бына нимә ти: “Морали в политике нет. Будьте образцово беспощадны!” әм бына уның бөтә Совет Рәсәйенә таратылған, беҙҙәргә лә килеп ирешкән ҡиммәтле әмерҙәре: “Надо поощрять энергию и массовость террора... Расстреливать, ничего не спрашивая и не допуская идиотской волокиты... Тайно подготовить террор: необходимо — срочно!.. Товарищи! Восстание должно повести к Беспощадному подавлению. Этого требует интерес Всей революции, ибо теперь взят “последний решительный бой” с кулачьем. Образец надо дать:

1) Повесить (непременно повесить, дабы Народ видел) каждый раз не меньше 100 заведомых кулаков, богатеев, кровопийц.

2) Опубликовать имена.

3) Отнять у них Весь хлеб.

4) Назначить заложников.

Сделать так, чтобы на сотни верст кругом народ видел, трепетал, знал, кричал: Душат и задушат!..

Телеграфируйте получение и Исполнение...

P.S. Найдите людей Потверже. Ленин”[73]. Так что, бывший чекист и коммунист, а теперешний вонючий ренегат, беҙ саф Ленин юлы менән барабыҙ!

— әм беҙ ысын коммунист-ленинсылар! — Тештәрен ҡыҫып, ыңғырашмаҫҡа тырышҡан Поленов торҙо. — әм беҙ ине ошонда уҡ юл саңына әйләндерергә әҙер. Эстәрлетамаҡҡа иҫән-имен барып етергә телә әң, бында бер шартты үтәй ең.

— Мәҫәлән?

— Революция ҡорбандарын ерләгәндә аң ыҙ башҡорт халҡы алдына сығып, ошоға тиклем хаталы юл тотоуыңды, ә беҙҙең, ысын коммунистарҙың, хаҡ юлдан барыуын таныырға әм раҫларға, баш күтәреүселәрҙе юлбашсыларын үҙ ҡулдары менән уйып юҡ итергә саҡырырға тейеш ең. Шуны үтәмә әң...

— Ҡарап ҡарармын.

— Ҡарап ҡара, сукин сын! — тине Барановский.

— Митингыла беҙҙең арттан сыға ың трибунаға. Әйтербеҙ.

Майҙан тулы ала-ҡола ерле халыҡ, ҡораллылар теҙмә е уларҙы тығыҙ ҡоршауға алған. “Революция ҡорбандары” алынған алты табут-гроб: бише ендә — баяғы

төнгө арбала ҡайтҡан мәйеттәр, ә уларға юлбашсылап ҡуйылғаны – аршин буйлыҡ ҡына гроб, сәскәләргә күмелгән Поленов ҡулы...

Ағас трибунаға баҫып командующий өйләп төшкәс, “хатта дошмандар ҙа беҙҙең хәҡиҡәтте таный” тип, Мырҙағолатовты төрткөсләп мендерҙеләр. Ул, үҙенә тоҫҡалған мылтыҡ көбәктәренә ҡарап, уңғы форсатты өҙөмтәле файҙаланырға булды, тәрән тын алды:

– Ҡыҙыл әрмис иптәштәр, халыҡ ҡанын ҡойоуҙы туҡтатығыҙ, хата юлдан бара ығыҙ... Совет юлы – был түгел! Поленов – яуыз әүерелмән, коммунист битлеген кейгән уҫал енәйәтсе...

Ябай халыҡ ут ҡапҡандай шаулашты, ҡыҙыл әрмистәр сафы кинәт боҙолдо, командирҙар теҙемде тәртипкә килтерергә ташланды. Арҡалы кырандасына янтая биреп, тештәрен ҡыҫып күҙәткән Поленов әшәке үгенде лә револьверҙан бер нисә ут сорғолтто – Мырҙағолатов салҡан әйләнеп төштө. Ике ҡыҙыл әрмис, йүгереп килеп, ҡанға батҡан кәүҙәне трибуна артына сығарҙылар ҙа итектәрен алдырып алдылар; аяҡтарын боғалаҡлап, ат ҡойроғона тағып шахта соҡорона өйрәттеләр.

Тынлы оркестр ер елкетеп матәм маршы уйнаны, ҡыҙыл әрмистәр табуттарҙы яурын баштарына күтәреп илтте; иң бәләкәс табут – Поленов ҡулы – иң алдан юл башланы; ҡулдың эйә е арттараҡ арҡалы кырандасында ҡырын ятып эйәрҙе, эргә енән атлы эскадрон яланғас ҡылыстарын ялҡылдатып барҙы; ҡыҙыл йондоҙ таҡҡан йәшел фуражкалы командирҙар, ауыҙҙарын арандай киреп, революция ҡорбандарын ҡомарлап йырланы:

*Вы жертвою пали в борьбе роковой...*

Ҡасаба осондағы ҡалҡыулыҡта алты башҡорт оло ҡәбер ҡаҙып әҙерләп торған; матәм моңо яңғырашында алты табутты төшөрөп, тиҙ генә күмеп ҡуйҙылар; уба өҫтөнә тере сәскәләр алынды. Ҡәберселәрҙе, өйҙәренә ебәрмәй, шахта соҡоро ситенә ҡыуып килтереп теҙҙеләр: аҡ аҡаллы ике ҡарт, урта йәштәрҙәге өс ир, тал сыбыҡтай оҙон буйлы бер малай. Эскадрондың бер өлөшө ҡылыстарын айҡай-айҡай ҡыҙыу елдереп килде лә, әр бере е бер башҡорттоң муйынын өҙә сапты, кәүҙәләр шахта төбөнә тәкмәсләне. Аҡ аҡаллы ҡарттарҙың бере е генә, әллә ҡото осопмо, соҡор ситенә сүгәләгәйне, Поленов үҙе йүгереп килеп бабайҙың башын өҙҙө лә кәүҙәне тибеп төшөрҙө.

Кырандасына ҡабат менеп ултырып, ҡулының ыҙлауын баҫыр өсөн шешә боғаҙынан хәмер емергән Поленов ҡалҡына биреп оранланы:

– Йәшә ен өсөнсө Коминтерн! Йәшә ен иптәш Ленин менән иптәш Троцкий! Яҡты коммунизм ҡояшына табан алға, ура!

– Ур-ра-ааа! – Боғаҙҙарҙан көр өрән яңғыраны. Тынлы оркестр өҙҙөрөп марш уйнаны, коммунизмға юл ярыусы коммунистик батальон, тығыҙ сафтарға теҙелеп, ҡасабаға йүнәлде. Шахта өҫтөндә күктә, яҡты коммунизм ҡояшы балҡыр тәңгәлдә, емтек ейергә эркелешкән ҡап-ҡара ҡоҙғон-таҙғаралар ҡанат киреп өйөрөлдө.

**1969.**
**06.01.2008.**

**ЫЛТАНМАЛАР:**

*[45] Ғәбйәлиловтар – 1921 йылда Автономиялы Башҡорт Совет Социалистик Республика ына ҡаршы хәҙерге Ырымбур өлкә ендә ҡораллы фетнә ойоштorған әм Муса Мортазин тарафынан баҫтырылып ҡулға алынған ағалы-энелеләр.*

*[46] Ҡөрьәне-хафиз – Ҡөрьәнде яттан белеүсе.*

*[47] Утыпша (утопший) – ал ағыҙғанда төпкә батып ятып ҡала торған бүрәнә.*

*[48] ~~Әле (~~ә ел) – эйә.*

*[49] Нә и сикләнмеш – сикләнеше тыйылған.*

*[50] Ҡыҫҡаса алына.*

*[51] Ылыҫ – улус, волость.*

*[52] Багбестан – Бағбостан Вилдан ҡыҙы Мөьминова (1884, хәҙерге Ырымбур өлкә е арыҡташ районы Ҡабан ауылында –1963, Өфө ҡала ында) – танылған мәғрифәтсе, Ырымбурҙа ҡыҙҙар мәктәбе асҡан, совет осоронда Өфөлә уҡытыусы.*

*[53] Тәсаллыт – тәьҫире, йоғонто о.*

*[54] Маәшбә ә – шуның кеүек.*

*[55] Лазым – тейешле.*

*[56] Шөғбә – бүлек.*

*[57] Гру – төркөм, группа.*

*[58] азым – еңдереү.*

*[59] Мөнасип – тиңдәш.*

*[60] Муафыйҡ – килешле, ярашлы.*

*[61] Хәсис – әшәке, түбән, аран кеше.*

*[62] Ибра им Бикчәнтәйев – 30-ынсы йылдарҙа РКП(б)-ның Ырымбур өлкә комитетының татар телендәге органы – “Коммуна” гәзите редакторы, совет яҙыусы ы Әнүәр Бикчәнтәйевтең ата яғынан туғаны.*

*[63] Татар милләтселәренең баяғы “ҡыҙыллашҡан”ойошма ы.*

*[64] Ҡот – кит, кит балығы.*

*[65] Пак ауз – тимер юл станция ындағы йөктәр келәте.*

*[66] Б.В. Точисский – башҡа ҡараштағы ис кем менән килешмәүсән ҡарт большевик; 1918 йылда уны өйөндә Н.Д. Кашириндың ҡыҙыл казактары үлтереп, мәйетен ҡала ситендәге тиреҫлеккә сығарып ташлап, бер нисә көн үткәс өҫтөнә сүп өйөп яндыралар.*

*[67] Гайдар – әйҙәр, хәйҙәр, әйҙәр ( уғышҡа әйҙәүсе).*

*[68] Кире енсә, ҡанлы Шәмиғолов режимы уларҙы юҡ иттерергә юҫыҡланған.*

*[69] Таҫыллы дәүләт эшмәкәре Мөхәмәтйән Ғәлиулла улы Булатов.*

*[70] Ирҙәре эшләп йөрөп ҡулға алынған кантон үҙәге Темәстән.*

*[71] Буласаҡ мәктәп урынында.*

*[72] Был ваҡиғаны хәҙерге Әбйәлил районы Асҡар ҡасаба ынан билдәле Мөғәллим сәсән Мирхәйҙәров авторға ошолай яҙҙы: “Беҙ кисә генә (29.01.1972) ик ән йәштәге Моратша Абдулла ҡарт менән осраштыҡ, башҡа ҡарттар ҙа бар ине.*

*Ул Поленов хаҡында бик асыҡ белә.*

*Баймаҡ районы Ҡуштүбә ауылынан 7 башҡортто атырға алып сыға, улар менән әле генә пленден ҡайтып килгән уҡытыусы Ша имырҙанов та була – бик мыҡты, көслө; Герман уғышында атлы ғәскәрҙә хеҙмәт иткән. Ете кеше ара ында: “Былар беҙҙе Темәскә кантон төбөнә еткермәй үҙ хөкөмдәрен ҡылмаҡсылар. Шулай була ҡал а, тотайыҡ та аймылышайыҡ. Яулашып шә ит үләйек”, – тиҙәр.*

*Атырға булғанда, был ҡаса. Ҡара арғымаҡ менгән Поленов ҡыуып етеп, ҡылысы менән елтәнә, был ергә ята. Поленов үтеп боролғас, был тағы аунай; өс-дүрт елтәнгәс, ҡылысын тартып ала, палачтың уң ҡулын ҡушҡарынан өҙә саба. Икенсегә асыу-көс менән елтәгәнендә, ҡаяға тейеп, ҡылысы сурт урталай ына. Нагандан атып үлтерелә Ша имырҙанов уҡытыусы әм башҡалары ла. орашып яҙып алыусы: М. Мирхәйҙәров”. Автор менән осрашыуында ул тәүҙә себен эйәләтеп штаб бүлмә енең мейес башында ятҡан, шунан уң ҡыҙыл табутҡа алынған Поленов ҡулының матәм митингы ы үткәреп, оркестр уйнатып күмелеүен өйләне.*

*[73] уңынан был “Комсомольская правда” гәзитенең 1990 йылғы 12 февраль анында ла баҫылып сыҡты.*

*Башҡортостандың халыҡ шағиры*
*Рауил БИКБАЕВҠА 70 йәш*

# ҮҘЕ — БАҪЫУ, ҮҘЕ — АБАНСЫ

Бынан утыҙ йылдар ашыу әүәл Сәғит Агиш менән Ырымбур далалары буйлап Туҡ-Соран яҡтарына юл тотҡаныбыҙҙа бер айырмала машинабыҙҙы туҡтатып, уңғамы, улғамы, тип икеләнеп ҡалдыҡ. Тыуған яҡтарынан байтаҡ замандар айырылып торған юлдашым ҡайтыр юлын онота төшкән икән.

«Былай булғас, йырҙағыса килеп сыға бит әле, — тине Сәғит ағай. — Сит илдәрҙә күп йөрө әң, тыуған илең ят була...» Шул ваҡыт, ҡола яландың ҡылғанын ярып, беҙҙең эргәгә йәш кенә ыбай егет елдереп килде лә эйәренән икерҙе.

— Ни хәстәр бар, ағайҙар? — тине ул хужаларса олпатлыҡ менән. Был ылыу егеттең ҡояшта янған ҡарағусҡыл йөҙө, сабыр хәрәкәттәре, торош-ҡарашы яғымлы, мөләйем ине. Үҙендә эске шуҡлыҡ та бар кеүек.

Беҙ юл ораштыҡ. Ул өйрәтте. Беҙ ҡуҙғалып китмәйенсә, атына менмәне, ерҙә көйө оҙатып ҡалды. Йола аҡланы.

Рауил Бикбаевты тәү тапҡыр күреп, уның Соран буйынан икәнен белгәс тә, теге ыбайлы ҡапыл иҫемә килеп төштө. Ул, әлбиттә, Рауил булмаған. Быны ы хатта ҡыҙғаныс. Әммә, нишләптер, минең аңымда улар йәнәшә килеп баҫты әм тора-бара бергә ҡушылды. Шағирҙы ыбайлы әм юл өйрәтеүсе итеп күреү ис кенә лә ғәжәп түгел.

Йөрәгендә йырҙар яралыуын иҙгән йәш егет танылған яҡташтары «Амантайҙың аманатын алып, Юлтыйҙың юлына юлығырға» өмөт итеп, нәҡ ана шул беҙгә ыбайлы тап булған йылда Өфөгә ҡарай сәфәр сыҡҡан. Бәлки, шул мәлдә үк әле, тыуған төйәгенә бер әйләнеп ҡарағас, уның болоҡ оған күңелендә бынан байтаҡ ваҡыттар үткәс бөрөләнәсәк шиғырҙың орлоғо шыта башлағандыр:

*Далам, далам — даланым.*
*Йәйрәп ятҡан яланым!*
*ыуҙарының боҙон имдем,*
*Еренең тоҙон яланым.*

Сәфәренә иртәнге мәлдә сыҡҡандыр, күрә ең, юлы унды, башҡорт поэзия ына уңламай килеп инде. Әллә хәтерләп бөтөрмәйем, әллә ысынлап та шулай булған: мин уның «башлап яҙыусылар» ҡоронда йөрөгәнен иҙмәй ҙә ҡалдым шикелле. Күрә ең, әлеге ҡорҙа оҙаҡ ултырмағандыр. Унан алда әҙәбиәткә килгән Рәми Ғарипов, Әнғәм Атнабаев, Рафаэль Сафин, Марат Кәримов менән дә шулай булды. Ә бит теге «ҡор»ҙан унар йыл буйы сыға алмай йөрөгән аҡаллы сабыйҙар күпме. Ултырып ҡалған ҡыҙҙың әле ҡасан бул а ла кейәүгә сығыу өмөтө бар. «Йәштәр» иҫәбендә төпләнеп ҡалғандарҙың ысын шағир булыуҙарына өмөт юҡ.

Тәүге шиғыр китаптары күп тыуа, ләкин тәүге китабы менән бергә өрәнләп донъяға килгән шағир ирәк. Шул ирәктәрҙең бере е Рауил Бикбаев булды.

— Нинә ин имзанды ҡыҫҡартып «Бикбай» тип кенә ҡуймай ың? — тип ораным мин әүәл бер саҡ уйынлы-ысынлы.



*Рауил Бикбаев Мостай Кәрим менән.*

Ул уйын ыҙ яуап ҡайтарҙы:

— Баязит Бикбай барҙа баҙнат итеп ҡара.

Бойондороҡ оҙ тәбиғәтле, үҙ фекерле, үҙ үҙле шағирҙың ихлас тыйнаҡлығы күңелемә еңеп ҡалды. Йәшлек бит күберәк инҡар итергә ашыға, табынырға яратмай. Өлкән әҙипкә ҡарата Рауилдың ошондай ихтирамы — табыныу уҡ тип әйтмәйем быны — ижадсы әҙәбенең бер сағылышы ине. Юҡҡамы ни Ғайса Хөсәйенов әҙип менән әҙәп төшөнсәләрен йәнәшә ҡуя.

Шағирлыҡ хайран ҡалыуҙан башлана, тиҙәр. Был йә әттән Рауил Бикбаев та бүтәндәрҙән әллә ни айырылмай. Уның да тәүге ауазы — донъяны сәләмләү ауазы, тәүге хистәре — оҡланыу, тәүге ниәттәре гел изгелек булды. әм болот аҫтына ингән ҡояшты, майлы икмәк менән алдатып («Ҡояш, сыҡ, сыҡ») саҡырған сабыйҙарса, өмөтлө үҙ әм яҡшы теләк көсөнә инаныу Рауил Бикбаев поэзия ының тәү мәлдәрҙә төп ыҙаттарының бере е ине. Донъя менән бәхәскә ингәнсе, уны аңлап өлгөрөргә, ер яҙмышы тура ында хафаға төшкәнсе, уны яратып өлгөрөргә ашыҡты шағир. Уйҙарға батыр алдынан тойғоларҙа йөҙҙө. Әммә алда ҡаты бәхәс тора — донъя менән дә, шәхестең үҙ-үҙе менән дә.

*Саҡ-Суҡ, Саҡ-Суҡ! Әллә еҙме икән*
*Бер йәнемдең ике киҫәге? —*

тиәсәк ул бер саҡ. әм тағы шуны әйтәсәк:

*Бер ҡанатым ығылып йыр яҙғанда,*
*Икенсе е еперә Ер шарын.*

Бәхәс тиҙ башлана. Уның барышында йәшәү асылын аңлау тәрәнәйә, борсолоуҙар ишәйгән айын, тормошҡа мөхәббәт арта. Аҡыл менән хистәр бергә ҡушылып, ижади фекерҙе камиллаштыра. Тойғоларҙың мәғәнә е, фекерҙең тәьҫире көсәйә. Шағирҙың лирика ы философик йүнәлеш ала, яңы сифатҡа күсә.

Байтаҡ йылдар әүәл Рауил Бикбаев ижадына ҡарата үҙемдең яҡшы ҡарашымды әйтеп, күңел ихласлығымды асып, шиклерәк бер фекеремде лә белдергәйнем, йәғни яҙып сыҡҡайным: шағир тасуирлаған биҙәктәрҙе, төҫтәрҙе күрәм, ул

әйткән үҙҙәрҙе аңлайым, тик бәғзе урында ул иҙгәндәрҙе иҙеп еткермәйем. Ниндәйҙер күҙгә күренмәҫ яры ҡамасаулай минә... Әйтелгән үҙҙәр, бәлки, бүтәнерәк булғандыр. Ләкин йөкмәтке е ошолайыраҡ ине инде. Хәҙер килеп үҙ фекеремдән кире дүнәм. Әллә таланты ныгынған айын, шағир асығыраҡ, үтемлерәк, ябайыраҡ (ябайлаштырмай) яҙа килде, әллә мин үҙем унын шиғыр юлдарына оҙағыраҡ туҡталып, ныгыраҡ төшөнә барҙым. Теге яры тигәнем аҡрынлап юҡҡа сыҡты. Бәлки, хикмәт шундалыр: Рауил Бикбаев поэзия ына унын үҙ үҙенсәлектәренән сығып, уға ғына хас алымдарҙан, образдар үрелешенән, ҡай ы берҙә художество сараларының шартлыраҡ булыуынан сығып, дөйөм аршын менән түгел, уға яраҡлы үлсәү менән килергә кәрәк булғандыр. Утыҙ йыллап беҙҙең әҙәбиәтебеҙҙә эшләп килгән шағирҙың шиғырҙары әм поэмалары менән ошо арала тулыраҡ әм бер юлыраҡ танышҡас, бошоноборaҡ та ҡуйҙым. Был тос ижад тәнҡитселәр әм ғалимдар тарафынан бәйнә-бәйнә тикшереү түгел, быға са дөйөмләштерелгән ба а алғаны ла юҡ. Күҙ алдындағы мөлкәттең ҡәҙере самалыраҡ шул. Боронғо хазиналарҙы бөртөкләп йыйыу – әйтеп бөтөргө өҙ кәрәк эш, хатта изге эш. Шул уҡ ваҡытта услап оҫорлоҡ бөгөнгө ҡиммәттәрҙе лә иғтибарҙан ситтә ҡалдырмаҫҡа ине.

«Үҙе — баҫыу, үҙе — абансы» булған йырсының оҡланыу әм мауығыуҙан башланған йырында Ер тәҡдире хаҡында борсолоу, хәүефләнеү моңдары торған айын йышыраҡ ишетелә, артабан ул моңдар ғазап ауаздарына әйләнә, тетрәткес оран булып яңғырай. Хәҙер беҙ торғонлоҡ тип атаған осорҙоң әле яралып ҡына килгән сағында яҙылған «Күк әрем» поэма ында, сәскә еҫтәре менән бергә, донъя әременең әсе тәме лә ныҡ уҡ иҙелә. Инде «Мәңгелек мәл»дә шағирҙың ҡолаҡ ишеткән бәләләр арҡа ында ғына түгел, күҙгә күренеп өҫкә ябырылып килгән фажиғәләр арҡа ында тыуған ыҙалары йөрәкте өйкәй, әммә өмөттө өҙҙөрмәй. Дөрөҫ, хәлдәр шундай — икенең бере е: йә был донъянан ваз кисергә, йә уны, хафаларҙан аҡлап, мәңгелек итергә, тимәк, көрәшергә. Шағир көрәшкә өндәй. Сөнки, ҡабатлайым, донъябыҙҙың хәлдәре хәтәр:

*Берҙән-берем, Ерем! Янғыҙ ҡалып,*
*Уйлағанда донъя хаҡында.*
*Хәлдәремде минең әгәр бел ә,*
*ЭВМ-дар яҙыр аҡылдан.*

Күптән түгел «Ағиҙел» журналында баҫылып сыҡҡан « ыу аным, ыуҙар бирегеҙ» исемле лирик-трагик поэма фекер әм тойғо көсөргәнешлеге йә этенән, йәғни эске яныуы менән, ғөмүмән, поэтик әҫәр булараҡ, миненсә, шағир ижадында яңы бер күтәрелеште билдәләй, юғары бер аккорд булып яңғырай. Уны, бәлки, төрлө кеше төрлөсәрәк ҡабул итер, ҡараңғы буяуҙар, фажиғәле күренештәр, хәсрәтле уйҙар, ҡыйыу иҫкәртеүҙәр әр күңелгә ятып та бармаҫ. Ләкин ыу буйҙарында тамсы ыуға тилмереп йөрөр көнгә төшөргә теләмәйбеҙ икән, тормош дөрөҫлөгөн дә, сәнғәт дөрөҫлөгөн дә нисек бар шулай ҡабул ҡылырға тура килә. Ҡабул ҡылырға, уйланырға, хәрәкәт итергә...

Әлбиттә, бөтә Ер шарына, үҙебеҙҙең ер- ыуыбыҙҙың әр ҡарышына, әр биҙәгенә, халҡыбыҙ рухынын бөртөк-бөртөк хазиналарына янаған ҡурҡыныстар тура ында әрнеп ауаз биргәндәрҙән Рауил Бикбаев беренсе әм берҙән-бер түгел. Уғаса беҙ, мәҫәлән, Назар Нәжми, Муса Ғәли, Рәми Ғарипов әм бүтәндәрҙең борсоулы шиғри тауыштарын ишеттек. әм ишетеп торабыҙ. Ләкин Рауил Бикбаевтың тауышы башҡаларҙыҡына күмелеп ҡалманы, үҙенсә яңғыраны, үҙенсә сыңлап, айырылып тора.

Поэзияны шәхес, унын таланты әм тәбиғәте тыуҙыра. Шундай бер күренеш

күҙ алдымдан китмәй. Таулы Алтайҙың Алтын күле ярында беҙ, был ерҙең ҡунаҡтары, ҡаянан ҡаяға уғыла- уғыла әллә ҡайҙан бейектән геүләп төшкән шарлауыҡҡа ҡарап, оҡланып торабыҙ. Ҡойоп йәшенле ямғыр яуа. Ҡай ыбыҙ зонт аҫтына боҫҡан, ҡай ыбыҙ ағас ышығына ҡасҡан. Бер мәл баҡ ам, шарлауыҡ аҫтында Рауил Бикбаев сума-ҡалҡа ыу керә. Бына бер дыуамал! Ләкин дыуамаллыҡ ҡына түгел, саялыҡ та ине был. уңынан беҙ әрләй башлағас, ул тыныс ҡына былай тине: «Тағы ҡасан күрәм әле ошондай сихри күлде, ошондай шашҡан шарлауыҡты. Тамаша ҡылып ҡына түгел, татып, ынап та ҡарарға кәрәк бит». Шулай инде. Шағирмын тигән кеше бәғзе саҡта кескәй генә тәжрибә, ябай ғына иҫтәлек өсөн хәтәр ҡылыҡтар ҡыла. Ә ғәмәлдә ис нәмә бушҡа сыҡмай. Тынғы ыҙ хәтер үҙенекен итә, миҙгеле еткәс, кәрәк нәмәне тартып сығара ла шиғырға күсерә:

*Өҫкә ауа Ҡорбау шарлауығы,*
*Ҡаяларҙан миңә ташлана.*
*Ағымында — саҡ-саҡ ағып китмәй,*
*Тотоноп ҡалам тайғаҡ таштарға.*

*Ҡойонамын ҡойон ҡуйынында!*
*Янғырағыҙ, тауҙар!*
*Күл, ҡайна!*
*Әй, бер генә тапҡыр бар донъя ын*
*Өйөрмәләр менән елләтергә,*
*Шарлауыҡтар менән сайҡарға!*

Был ҡабалан яҙмаларҙа мин шағирҙың поэтик донъя ына үтеп үк инеп, ундағы бөтә емештәрҙе ҡапшап ҡарап, уларҙың тәмен татып, хуш еҫтәрен тойоп өлгөрмәнем. Дөрөҫөрәге, мин үҙем ҡапшаным, татыным, тойҙом. Тик бына уҡыусыларға шуларҙы еткерә алманым. Хәйер, мин үҙ алдыма ундай бурыс та ҡуймағайным. Уның инсафлы әм дәртле мөхәббәт лирика ынан, философик уйланыуҙарынан, тәбиғәттең йә хозур тынлығын, йә дауыллы миҙгелдәрен тасуирлаған шиғырҙарынан бик күп оҡланғыс өлгөләр килтереп, башҡорт поэзия ы тура ындағы мө им ғилми хеҙмәттәренә байҡау я ап, әңгәмә ҡуйыртырға мөмкин булыр ине. Тик үҙ оҙонайтыуҙан шикләнеп, бүленеп ҡалдым. Ҡыҫҡа ы, әгәр шағирҙың ыны, рухи йөҙө, моңдары, уйҙары бер аҙ төҫмөрлән ә, мин шуға ризамын.

Бындай саҡтарҙа өгөт биреү ғәҙәте лә бар. Миңең өгөтөм юҡ. Өгөт тыңлап ҡына шағир үҙенән яҡшыраҡ була алмай. Рауил Бикбаевҡа күп замандар әүәл әйткән бер кәңәшемде генә ҡабатлайым: «Былай тормошта ин ныҡ белгәнеңде лә өйләп бармай ың, ә шиғырҙарыңда бөтә белгәнеңде әйтергә тырыша ың. Иң кәрәкле ен генә әйт. Элеккегә йәнә шуны өҫтәйем. Белгәндәрең инең хәҙер бихисап күп. Шулай булғас, үҙең самала...»

Уның бер шиғыры ошондай юл менән тамамлана:

*Был тормошта мин дә бар әле!*

Башҡорт поэзия ында, илебеҙ поэзия ында ин дә бар, Рауил Бикбаев.

Был бик әйбәт.

**Мостай КӘРИМ.**

1988.

# РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ ТОРМОШ ЮЛЫ

Борон-борондан малсылыҡ менән шөғөлләнгән башҡорт ырыу-ҡәүемдәре йәшәр ауылдарын, мал туплар йәйләүҙәрен йылға, ҙур күл буйҙарына ҡорор булған. Яҙын ыу баҫыр утлы туғайҙары мал аҙығы өсөн муллығы менән дә үҙенә тартҡан. Шуға оло, кесе йылға, күл буйҙарына ҡорор булған. Туҡ-Соран буйҙары – төп йәшәү төбәктәре, ялан-туғайҙар, ҡылғанлы яландар, таулы үҙәндәр – тормош, көнкүреш майҙаны. Ҡәҙимге замандарҙан башҡорттарҙың ҡай ы яҡта йәшәүен: “Ниндәй йылға- ыуҙы ыулай ың?” – тип орар булғандар, ғәҙәттә.

Шулай ҡайҙа йәшәүҙәренә, ер- ыу атамаларына ҡарап, мәҫәлән, Оло Иҙел (Волга), Кама, Ыҡ, Эйек, Яйыҡ, Тубыл, Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим, аҡмар, Ҡармасан, Сәрмәсән, Өршәк, Туҡ-Соран, Ырғыҙ, Кәмәлек, Кәрәлек кеүек оло әм кесе йылғалар исемдәре менән аталған башҡорттар йәшәгән төп төбәктәр, географик регионлар барлыҡҡа килгән. Европа менән Азия ҡитғаларын берләштереп ятҡан Урал тауы эстәренән тиҫтәләгән ереле-ваҡлы йылғалар баш алып, ҙурайып кит әләр, шуларҙың буйынан-буйына тиерлек боронғо замандарҙан башҡорт ырыу-ҡәбиләләре төпләнеп йәшәр, мал уғарып тереклек аҫрар булған.

Мәҫәлән, Рауил Бикбаев – сығышы менән Туҡ-Соран буйы башҡорто. Ырыуҙаштарының тарихы хаҡында уйланып, шағир үҙе былай тип фаразлай: “Беҙҙең Соран, Ҡырсоран, Туҡ буйҙарындағы башҡорт ауылдарын, төрлө баш күтәреүҙәрҙән уң илгә ябырылған ҡаза-язалауҙар ваҡытында был яҡтарға Урал тарафтарынан килеп ыйынған халыҡ нигеҙләгән, тип аңлатыу бар. Йөҙәрләгән ауылдар ҡат-ҡат яндырылғас, алыҫ далаларға сәселгәндәр ҙә аҙ булмағандыр. Ләкин башҡорттарҙың Туҡ-Соран яҡтарында ғына түгел, унан көнбайыштараҡ Ырғыҙ, Кәмәлек, Кәрәлек буйҙарында ла борон-борондан тамырланып йәшәгәнлеге, был далаларҙың быуаттар төпкөлөнән аҫаба башҡорт ерҙәре булғанлығы, минеңсә, бәхәс еҙ. Юғи ә яҙмалар, Башҡортостан Себерҙән Волгаға тиклем йәйрәп ятҡан, тип раҫламаҫ ине. “Шундай ерҙәр фәлән ырыуға рус батша ы тарафынан фәлән ваҡытта бирелгән” тигән үҙҙәрҙе лә уҡып аптырап ҡала ың. Был ерҙәрҙе башҡорттар Рус батшалығы барлыҡҡа килгәнсе, бында йәйелгәнсе үк үҙенең изге төбәге, ватаны итеп йәшәгән. Аҙаҡ ул батшалыҡ документтарында рәсми теркәлгән генә”. Хаҡ үҙҙәр, тарихи хәҡиҡәт: унынсы быуаттың 922 йылдарында ғәрәп илселеге менән Болғар дәүләтенә үтеүсе Ибн Фаҙлан сәркәтип үҙ юлъяҙмаларында Яйыҡ, Ҡондорса буйҙарында башҡорттарҙың төпләнеп йәшәп ятыуҙарын тарихҡа теркәп тә ҡалдырған.

Рауил Бикбаев тыуып үҫкән Туҡ-Соран буйындағы Үрге Ҡунаҡбай ауылы ҡыпсаҡ ырыуы нигеҙләгән боронғо ауылдарҙан иҫәпләнә. Уның ҡыпсаҡтарҙың XI – XV быуаттарҙа Көнсығыш Европаға үтеп инеүенән унда бөйөк Дәшти-Ҡыпсаҡ дәүләте төҙөүе йәки ил емерелгәс, уның ҡалдыҡтарының Көньяҡ Уралға, Иҙел-Яйыҡ тарафтарына күсенгән дәүеренә ҡарауы ла бик ихтимал.

Үрге Ҡунаҡбай ауылынан түбәндә Түбән Ҡунаҡбай, Ҡалҡаман, Әхмәр исемле

ҙурыраҡ ауылдар ҙа бар. Уларҙан Ҡаран (йәки Ҡаранйылға), Исҡужа ауылдары бүленеп сыҡҡан. Рауил Бикбаевтың иҫәпләүенсә, был ауылдарҙың биләгән ерҙәре 100 мең тиҫтә гектарҙан да артыҡтыр. Ошо биләмәләргә хәҙер ике районның күпселек ерҙәре ыйған. Күрә ең, был Иҫке Ҡунаҡбай ауылы, унан сыҡҡан ауылдар бик күптәнән шунса ҙур биләмәләргә эйә булған. Ҙур-ҙур көтөүлектәр, йәйләүҙәр, ҡышлауҙар тотҡан.

Тарихтан билдәле булыуынса, ҡыпсаҡтар – ғәйрәтле, яусан, даусан тоҡом. Ҡырыҫ дала тәбиғәте, алҡын ҡыш шарттары уларҙы түҙем, тилбер итеп сыныҡтырған. Иректе, ватансыл, ғорур тәбиғәтле халыҡ итеп тәрбиәләгән. “Ҡырыҫ дала кешене бәләкәйҙән үк ҡаты ынауҙарҙа сыныҡтыра, – тип фекер йөрөтә Рауил Бикбаев. – Даланың күҙ асҡы ыҙ бурандарҙа кеше ышыҡланыр урындары ла, йәйге селлә ҡояшы өтөп барғанда йәшенер күләгә е лә юҡ. Сыҙамлығыңа ышыҡлана ың, сабырлығыңды күләгә итә ең. Йорт алырға ағасы, яғырға утыны булмаған был яландарҙа халыҡ барыбер әмәлен тапҡан, гөрләтеп донъя көтөр өсөн көсғәйрәт туплай алған”.

Алда күрербеҙ әле: Рауил Бикбаевтың “Дала офоҡтары” исемле беренсе китабында боронғолар, ата-бабалары йәшәгән ошо дала тәбиғәте, шуға ҡулайлашҡан сабыр яҡташтары тура ындағы шиғырҙары менән уның ижады башланыр, шиғри теле асылыр, поэтик үҙенсәлектәре асыҡлана башлар.

Кешенең рухы, холоҡ-ҡылығы, бар булмышы ата-бабалары, әсәй-ҡартәсәйҙәре нәҫел-ырыуына, тәрбиә енә ҡарай формалаша, сыныға.

Кемдәр булған Рауил Бикбаевтың ата-бабалары, әсәй-ҡартәсәйҙәре? Йәшәгән мөхите, тәрбиәләре ниндәйерәк? Анкетама биргән яуаптарында Рауил шуларҙы иҫләй әм нарыҡлай: “Ҡартатайым менән өләсәйем мин бәләкәй саҡта вафат булған, шуға уларҙы иҫләмәйем. Хәлле, тамырлы булғандар. Ике яҡлы ҙур йортта ике улдары ғаиләләре менән йәшәне. Ҡартатайымдар менән беҙ торған яҡ эре бүрәнәләрҙе уртаға ярып алынғайны. Киң ихата эре-эре таштарҙан өйөлгән ҡойма менән уратып алынғайны. Ишек алдындағы ҙур таш арай, таш келәт хәтерҙә ҡалған. Ҡартатайымдың йылҡылары Соранға ыу эсергә төшкәндә көтөүҙең башы йылғаға еткән саҡта осо әле арайҙан сығып бөтмәгән, тип өйләгәндәрен ишеткәнем булды. Аҙаҡ ҡартатайым малдарын ҡыҫҡартып, күберәк иген сәскән, хатта замана ы өсөн яңы техника ла алған. Үҙе мәсеттә мәзин булып йөрө ә лә, донъялыҡты ҡайғыртҡан, тормош ағышын иҙгән”.

Рауил Бикбаевтың шәжәрә ете быуыны шундай: Аҫылгәрәй – Бикбай – Ҡотлоәхмәт – Хәсән – Мөхәмәтша – Шәрәфетдин – Төхфәтулла – Рауил.

Ҡунаҡбай ауылында ике тоҡом, ике фамилия киң таралған: Бикбаевтар менән Табылдиндар. өйләүҙәренсә, Аҫылгәрәй оло олаталары үҙ заманында Соранда ғына түгел, Туҡ буйҙарында ла дан тотҡан. Ул XVIII быуат урталарында йәшәгән булырға тейеш. Тимәк, Кинйә Арыҫланов менән ырыуҙаш ҡына түгел, көрәштәш тә булыуы бик ихтимал. Туҡ-Соран буйы башҡорттары 1773–1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр уғышынан ситтә ҡалмаған. Туҡ-Соран буйы башҡорттары – яусыл халыҡ, 1773–1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр уғышынан ситтә ҡалыуы мөмкин булмаған хәл.

Аҫылгәрәйҙең ике улы Бикбай менән Табылдынан Бикбаевтар менән Табылдиндар фамилия ы таралып киткән. Бикбайҙан дүртенсе быуын булып Рауилдың ҡартата ы Шәрәфетдин, Табылдынан дүртенсе быуын булып Ғабдулла Амантайҙың ата ы Сәхипгәрәй тыуған. Тимәк, Рауил Бикбаев ауылдашы, атаҡлы шағир әм ғалим Ғабдулла Амантай менән бик яҡын туған. Ауылда уларҙың йорттары ла күршеләш булған. Рауилдың өләсә е Мәүлитбикә – Табылдиндар ҡыҙы. Шәжәрә ағасының бешкән алмалары йыраҡ төшмәй: үҙ заманында Ғабдулла Амантай ҙа,

беҙҙең Рауил Бикбаев та, Өфөгә килеп, билдәле шағир  әм әҙәбиәт белгесе булып китәләр.

Тамыр тамырға тарта. Рауилдың Мәүлитбикә өләсә е сәсән телле зат булған. Ауылдағы төрлө хәлдәр, ҡылым ыр ҡылыҡтар тура ында төртмә таҡмаҡтар сығарырға яратҡан, улар халыҡ теленә күскән. Ҡайғылы хәлдәр хаҡында бәйеттәр көйләгән. Иң кесе улы Ғизетдин Бикбаев 1940 йылда Алыҫ Көнсығышта  алдат хеҙмәтендә вафат булғас, уға оло бәйет бағышлаған. Шул бәйеттең бер күсермәенә нигеҙләнеп ейәне Рауил шиғыр яҙған.

Ул өләсә е  үрәт төшөрөргә лә әүәҫ булған икән. “Өйөбөҙ ишегенә өләсәйемдең майлы буяу менән төшөргән сәскәләре алтмышынсы йылдар урта ында мин инәйемде Өфөгә күсереп алып киткәндә моң оу бәхилләшеп ҡарап ҡалды”, – тип бойоғоп хәтерләй бер  үрәтен ейәне.

Донъялар бер көйгә генә аҡмай шул. Ҡай ы бер ғаиләләр юҡҡа сыға, хатта ауылдар бөлә, нәҫел ҡорой. Оло  уғыш касафаты  әр ауылға,  әр өйгә тиерлек ҡара ҡағыҙ алып килә. Йәтимдәр арта. Ҡунаҡбай ауылы ла оло  уғыш йылдарында ҡара ҡағыҙҙар алып бик миктәп, етем ерәп ҡала. Рауил Бикбаевтарҙың өйөнә лә әжәл керә – 1945 йылдың майында ата ы үлеп ҡала. Биш бала менән утыҙ өс йәшлек Рәкиә Бикбаева ата ы Латип Ва итовтың кәңәше  әм ярҙамы буйынса Ҡунаҡбай ауылындағы ҡуш өйҙөң ярты ын ҡутарып алып, үҙенең тыуған ауылы Ғабдрафиҡҡа күсереп  алдыртырға мәжбүр була. Был ауыр эштә, ярай әле, туған-тыумасалары ныҡ ярҙамлаша.

Рауилға,  игеҙ йәшлек балаға, тыуған ауылын, уйнаған тиҫтерҙәрен ташлап икенсе ауылға күсеүҙәре, шул өйҙө етем етеп ташлауҙары ла еңел булмағандыр. Эсе бошҡанда,  ағынып, тыуған ауылына ете саҡрымға ялан тәпәй ҡасып ҡайтҡылаған саҡтары ла була. Ләкин ҡуш өйҙөң ярты ы ғына  ерәйеп ултырыуҙан, ярты өй урынындағы баҙҙан, тирә-яҡҡа  ибелгән таштан  алҡын елдәр, шомдар ғына тарала кеүек, йә телдәр елдәр үпкә  үҙҙәрен  өйләй төҫлө.  ағыныу өҫтөнә өҫтәлеп ҡаты  ағыш, ҡыҙғаныс ҡына арта.

Бала күңеле – далала, әсә е, ҡартата ы ауылы Ғабдрафиҡҡа ла яйлап күнегә Рауил. Үҙенә яңы дуҫтар таба. Ғабдрафиҡ ауылы Ҡунаҡбайға ҡарағанда ҙурыраҡ та, малай-шалайҙары ла күберәк. Өҫтәүенә, башланғыс мәктәпте бөтөүенә Ғабдрафиҡта ете йыллыҡ мәктәп асыла, инде йәйәүләп йә өйҙәш булып ситтә уҡый ы түгел, ҡуш өйҙән ярты ы бул а ла үҙ өйө бар, ишле генә синыфташтарына ла өйрәнеп, дуҫлашып бара.

Ете йыллыҡ мәктәптең директоры, өҫтәүенә, – әсә енең бер туған аға ы, яраланып ҡайтҡан яугир. Сит итмәҫ әле.

Әсә енең ауылында, яңы мәктәптә Рауил тырышып уҡый. Туған әҙәбиәт дәрестәренең тәьҫире микән, әллә үҙ күңел талабымы – алтынсы-етенсе синыфтарҙа бүтәндәрҙән йәшереберәк шиғырҙар ҙа яҙа башлай.

Директор Рәкип Вахитовтың күргәндәрен шиғыр итеп яҙғандарын тыңлағаны бар. Уларҙың ҡай ыларын стена гәзиттәрендә лә күрҙе. Рауилдың үҙенә лә шиғыр яҙыу ниәтен көсәйтергә сәбәпсе булды былар. Өҫтәүенә, уларҙан ни яғы менән кәм, әгәр артығыраҡ булма а тағы. Уйы, күңеле шиғырға, рифмаға көйләнә барғандай. Шулай ҡыйыуланып, шиғырҙарын стена гәзитенә бирә башлай. Быны ы – үҙе бер ҡыуаныс.

Ете йыллыҡ мәктәп йылдарын иҫкә алып, Рауил Бикбаев былай ти: “Беҙҙең бәләкәй генә ете йыллыҡ мәктәптә үҙенсә әҙәби мөхит булған. Был мөхиттең тағы ла мө имерәге, көслөрәк арбай торғайны, бәлки, шул осорҙа беҙҙең яҡтарҙа ныҡ  аҡланып ҡалған, телдән телгә күсеп йәшәгән фольклор традициялары, бай ауыҙтел ижады хазиналары булғандыр. Ни тиклем тылсымлы  үҙ балҡыштары стихия-

ында үҫкәнебеҙҙе мин йылдар үткән айын нығыраҡ ба алай барам, нығыраҡ а-ғынам. Беҙ бәләкәй саҡта, кем күпме әкиәт, күпме таҡмаҡ белә, тип ярыша торғайныҡ. Йомаҡ ҡойошо ғәҙәти хәл ине".

Шағир үҙе өйләүенсә, ул ысынлап та ижади мөхит эсендә, телгә оҫта, әкиәткә, йырға, таҡмаҡҡа мәйел ололар ара ында үҫә, уларҙың өйләгәндәрен, көйләгәндәрен йотлоғоп тыңлай, рухын байыта.

Рауилдың үҙе әйткәнен тыңлайыҡ: "Ауылыбыҙҙа Нәзифә Байтимерова тигән уҡыр әбей торғаны әкиәт хазина ы ине. Уны әкиәт өйләтер өсөн ауылда өйҙән өйгә ҡундырып йөрөтөрҙәр ине. Уны ҡундырыр көндө балалар байрам кеүек көтөп ала торғайны. Ҡай ы бер әкиәттәр бер көндә генә бөтмәй, дауамы икенсе көн өйләнелә ине. Беҙҙең бала саҡтың сериалдары...

Ауылға кино кил ә, тамаша башланғансы балалар оло әбейҙе уратып алып, әкиәт өйлә, тип инәләләр ине. Клубтағы уйындарҙың күбе е (исемдәре лә ниндәй бит: "Социализм", "Паровоз" . б.) үҙ көйө, үҙ хәрәкәттәре таҡмаҡ менән, йыр менән үтер ине".

Бына шулай халыҡ ижадын яҡшы белгән ололар репертуарын тыңлап, мәктәптә үҙенсә ижади атмосферала үҫкән Рауил өсөн был йылдар үҙе бер ә әмиәткә эйә.

Бының тәү орлоҡтары, әлбиттә, ғаиләлә үк алынған. Бигерәк тә әсәй кешенең роле ҙур. "Мине кеше итеп аяҡҡа баҫтырған, кешелек сифаттарын зи енемә еңдергән, тормошта үҙ урынымды табырға, маҡсатҡа ынтылырға өйрәткәне — әсәйем", — ти Рауил үҙе лә. Әсә енең булмышы әм яҙмышы — үҙе бер ғибрәтле а-баҡ. Буласаҡ тарихсы Сәғит Мерәҫевтың еңле е тейеш әсә е Рәҡиә Латип ҡыҙы Вахитова етеш тормошло, дини рухлы ғаиләлә тәрбиәләнгән. Уны үтә йәшләй хәлле кешегә кейәүгә бирәләр. Ләкин 1930 йылда бик күп уңған крәҫтиәндәрҙе кулак тип йорттарын, мөлкәттәрен тартып алып, илдән өрөү башланғас, ун игеҙ йәшлек Рәҡиә лә ҡайны-ҡәйнәләре, ире менән — тотош ғаилә Архангель губерна-ындағы Котлас лагерҙарында нисәмә йылдар буйы күпме нужалар күрә. Ҡараңғы тайга төпкөлдәрендә, мәңге туң тундра аҙлыҡтарында иҫ киткес ыуыҡ, тубыҡтан батҡаҡ эсендә аслы-туҡлы торф сығара, ҙур-ҙур төньяҡ йылғаларында ал ағыҙа, аяҡ-ҡулдары ыҙлауға әйләнә. Шунса ыҙа-яфаларға түҙә алмайынса, ни айәт, 1936 йылда был мәхшәрҙән ҡасып ҡотолмаҡ була. Тимер юлына етеп, тауар вагондарының бере енә йәшеренеп, станцияларҙа бер составтан икенсе енә күсә-күсә, тыуған ауылына ҡайтып йығыла. Уны НКВД тынғы бирмәй эҙәрләй башлай. Рауилдың була ы ата ы Төхвәтулла Бикбаев армиянан ҡайтып, Рәҡиәгә өйләнгәс кенә, кире өрөләүҙән ҡотолоп ҡала әсә е.

Бикбаевтар матур ғаилә ҡоралар. Биш бала үҫтерәләр. 1938 йылдың декабрь айында донъяға килгән Рауил шул ишле ғаиләлә, етеш тормош шарттарында иркен үҫә. Әсә күңеле — балала, бала күңеле — далала, тигән шикелле, Рауил Бикбаев бала сағының бик күңелле, ғүмергә онотолмаҫтай алсаҡ, хәтирәле мәлдәрен, төрлө уйындарын, дала, йылға буйҙары күркен ғүмере буйы күңел түрендә аҡлай.

Ауылдарына терәлеп аҡҡан Соран йылға ының яҙғы, йәйге, көҙгө йәмдәре генә лә ни тора! Яҙын ҡотороп боҙҙар аҡҡаны, Сорандың ярҙарынан ташып сыҡҡаны, йәйен кинәнеп ыу инеүҙәре, әмәлен табып балыҡ тотоуҙары, яр буйындағы балалыҡ уйындары. Ә туғайлыҡтарҙың төрлө сәскәләргә күмелгән саҡтары уң! Йыуа, ҡуҙғалаҡтар тәмен татыу, бешкән еләк, бөрлөгән емештәрен йыйыу, әлмороно, ҡарағаты, баланы уңған саҡтар... Ә дала ерҙәре, ҡылғандары елдәр иҫкәндә диңгеҙҙәй тулҡынып ятыуҙары. Яҙғы ҡош айрауы, бөркөттәр саңҡыуы. Бесәнгә төшкән мәлдәр, ураҡ саҡтары. Баҫыуҙарҙа туғаҙаҡтарҙың каруан-каруан булып теҙелеп йөрөгәндәрен күреп ҡалыуҙар, көҙөн торналарҙың торҡолдашып көньяҡҡа осҡанын күҙәтеүҙәр. Утауға йөрөүҙәр, бесән осорҙары, баҫыу эштәре — үҙҙәре бер эш, күңел күрке.



*Ғайса Хөсәйенов, Рауил Бикбаев.*

Эйе, бала кешегә лә даланың үҙенсә бер даланы. Алда шағирҙың ижадын байҡағанда күрербеҙ – былар әммә е үҙенсәлекле сағылыш табыр, поэтика ына яңы биҙәктәр өҫтәр.

Бала саҡтарын, ялан-дала тәбиғәтен хәтерләп, Рауил Бикбаев шуларҙы өҫтәр: "Ауылдағы бала саҡ әм үҫмер йылдарым күберәк тәбиғәт менән, бигерәк тә ыу буйы, Соран йылға ы менән бәйләнгән. Даланың иң ныҡ хәтерҙә ҡалған саҡтарының бере е – яҙ килеүе, үҙәктәрҙең шаулап ярып килеп төшөүҙәре. Сорандың ташыуы, ҡар ыуы ҡойоп, йомран тотоуҙар .б. Йәйҙең йәмле көндәре, Ҡунаҡбайға барған юлдағы шау сәскәле яландар, Соран ярында теҙелеп киткән бесәнселәрҙең ҡыуыштарында йәшәүҙәр, урып алынған баҫыуҙарҙа туғаҙаҡтарҙың каруан булып теҙелешеп атлап йөрөүҙәре, йүгереп барып, саҡ-саҡ осоп киткән был эре ҡоштарҙы ҡай ы саҡта ағайҙарҙың баҫтырып уғып алыуҙары – иҫтәлектәр бихисап... Ә ҡышҡы дала бурандарының өйҙәрҙе ҡыйыҡтарына тиклем баҫып китеүҙәре...

Беҙҙә бик үҙенсәлекле йола бар ине: ҡышҡы селләлә көндәрҙе ауыл осондағы өйҙән иҫәпләй башлайҙар. Был көн фәләндеке, иртәгә тегенеке .б. Шулай селлә бөткәнсе, көндөң нисек килеүенә ҡарап, кешегә характеристика бирәләр йәки ҡаты, йәки йомшаҡ .б. тип. Шуға әр өй үҙенең етер көнөн хафаланып көтөп тора: нисегерәк килер, артыҡ ыуыҡ булып, рисауай итмәҫме? Хәйер, быңдай ынамыштан тыш та ауылда кешеләр бер-бере ен яҡшы беләләр, татыу йәшәйҙәр, ярҙамсылдар ине. Улай тигәс тә, бигүк идиллия түгел инде. Шатлыҡтар ҙа, ауырлыҡтар ҙа бергә үткәрелде. Берәй е ҡайт а, янына йыйылалар, берәй ҡунаҡ кил ә, хужа ҡунаҡ күр әтеп, аҙаҡ өй беренсә саҡыралар, өмә үткәреп, өй алалар .б."

Шулай ауыл көнкүреше, йолалары, үҙ-ара хеҙмәттәшлек үҫә килер яңы быуындарына, балалары күңелдәренә йәшләй матур йола, әйбәт ғөрөф-ғәҙәттәр орлоҡтарын ала, рухтарын күркәмләй булыр.

Ғабдрафиҡта етенсе синыфты уңышлы тамамлағас, Рауилдың тыуып үҫкән төйәгенән осор ҡоштай ситкә китерен, алыҫ яҡтарҙа уҡыуын дауам итерен өйләрҙән алда Ырымбур башҡорттарының яҡын тарихының ҡай ы бер хәсиәттәрен иҫкә төшөрөп үтәйек әле.

Туҡ-Соран буйҙары – башҡорттарҙың борондан йәйләү әм ултыраҡ ер- ыуҙары. Ундағы ҡыпсаҡ ырыуҙары ҡәрҙәш юрматы, үҫәргән, табын, түңгәүер ырыуҙары менән дә тығыҙ аралашҡан. Мәҫәлән, беҙҙең Ағиҙел буйы табындарының йәйләүҙәре Туҡ-Соран буйҙарында ла булған. XVIII быуаттарҙа Ағиҙел, Эйек, аҡмар буйҙарындағы ырыуҙарҙың күпмелер өлөшө шул алыҫ көньяҡ йәйләүҙәрендә ултыраҡлыҡҡа күсеп тә ҡалған. Был тарафтар 1773–1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр уғышына ла дәррәү күтәрелгән. Ырымбур губерна ы, Ырымбур ҡала ы күпселек башҡорттарҙың үҙәгенә әүерелгәс, был яҡта сауҙа, өнәр, кәсеп, уҡыу эштәренә лә йылдамыраҡ тартылғандар. Йәрминкәләр, мал баҙарҙары шаулап торған. Ырымбурҙа, Ҡарғалыла яңы мәҙрәсәләр асылыу йәштәрҙе үҙҙәренә

тартҡан. Үткән быуат башында Ырымбурҙа “Хөсәйениә” мәҙрәсә енең асылыуы, төрки-татар әҙәби телдәрендә гәзит-журналдарҙың, китаптарҙың сыға башлауы аң-белемдең, мәҙәниәттең үсешенә көслө импульс биргән. 1917 йылда Ырымбурҙың революцион-демократик хәрәкәт үҙәгенә әйләнеүе лә бик тәбиғи.

Башҡорттар ошонда Әхмәтзәки Вәлиди етәкселегендә үҙҙәренең тәүге ҡоролтайҙарын үткәрәләр, милли хөкүмәт ойошторалар, үҙ гәзиттәрен сығара башлайҙар. Каруан арайҙы үҙ дәүләт милке тип иғлан итәләр.

Бер аҙ уңыраҡ шул уҡ Ырымбурҙа донъяла тәү тапҡыр Башҡорт халыҡ мәғариф институты ла асыла, педтехникумдар барлыҡҡа килә.

Беҙҙең өсөн шуны ы иммәтле: Үрге Ҡунаҡбайҙан Рауил Бикбаевтың ата ы яғынан ҡәрҙәше Ғабдулла Амантай ошо Башҡорт халыҡ мәғариф институтына килеп уҡырға инә, ул аҙаҡ Башҡорт педтехникумына әйләндерелгәс, шунда уҡыуын дауам итә. Был уҡыу йорттары ике е лә Совет хөкүмәте тарафынан башҡорттарға бирелгән Каруан арайҙың зиннәтле бүлмәләрен биләй. Егерменсе йылдар дауамында был бинала Башҡорт педагогия техникумында Сәғит Агиш, Баязит Бикбай, Зәйнәб Биишева, Әбүс кеүек күренекле яҙыусыларыбыҙ, байтаҡ ғилем эйәләре белем алып оло юлға сыға.

Шуны ы ла өлгөлө: Рауил Бикбаев та яҡын өлкән туғаны Ғабдулла юлынан китә, гуманитар йүнәлештә юғары белем ала, аспирантураны тамамлай, филология фәндәре кандидаты әм докторы исемдәренә эйә була. Әүәл Ғабдулла Амантай директор булып эшләгән институтта ғилем эше менән шөғөлләнә, улай ғына түгел, Амантай башлап ҡуйған, утыҙынсы йылдарҙа эҙәрләүҙәрҙә әләк булғас, туҡтап ҡалғас, Шәйехзада Бабич тормошо әм ижады тура ындағы эшен дауам итеп, “Шәйехзада Бабич” исемле монографияны яҙып донъяға сығара. Тамыр тамырға тарта, тигән халыҡ үҙе хаҡ шул.

Әммә ләкин Рауил Бикбаев 1953 йылда етенсе синыфты уҡып бөтөп, “Алда ҡайҙа белем алырға?” тигән юлдар бик сикле ине инде Ырымбур өлкә е тарафтарында. Ырымбур ҡала ының үҙендә башҡорт пединституты, милли педтехникумы тигәндең, милли урта мәктәптәрҙең эҙе, еҫе-ҡоҫо ла юҡ ине. Башҡортостанға барып башҡортса уҡырға юлдар алыҫ, ғаиләлә мохтажлыҡ ҙур.

Уҡырға тырыш, зи енле улын әсә е нисек тә артабан уҡытырға теләгәндер, бала күңелен тойғандыр, уйлап-уйлап, улар үҙҙәренән урау юлдар менән йөҙ саҡрымдар ары ҡаҙаҡ далалары яғында ятҡан Аҡбулаҡ педучилище ын айлайҙар. Урау бул а ла, тимер юлы бар, училищела үҙ яҡташтары эшләй, ситкә ҡаҡмаҫтар әле. “Педучилище директоры Муллабаев Әхмәт ағай үҙе беҙҙең яҡтағы Юлдаш ауылынан ине, – тип иҫкә ала Рауил. – Туҡ-Соран буйындағы ауылдарҙан башҡорт балаларын йыл да үҙенә Аҡбулаҡҡа йыйып килтерә торғайны. Педучилищелар ул ваҡытта – бик престижлы уҡыу йорттары, сөнки уҡытыусыларҙың абруйы ҙур ине. Стипендия түләүҙәре ул ҡытлыҡ замандарҙа бер тин еҙ ауыл ғаиләләренән сыҡҡан бала өсөн үҙенсә бер ярҙам ине”.

Ләкин тормош, көнкүреш үҙ ҡануны менән йәшәй шул. Стипендия тигәндәре лә баҙарҙан ике бот он алырға ла фатирға түләргә генә етә. Ҡалған көндәрең аслы-туҡлы үтә. Тамаҡ ас бул а ла, күңел туҡ, башҡа белем, ғилем аҙығы туплай ың. Училище тигән исеме, даны бар.

“Дүрт йылым китап уҡып үтте, – тип хәтерләй Рауил. – Аҡбулаҡта күп ваҡыт тамаҡ яғы бик таҡыр бул а ла, китап уҡып кинәндек. Асығыуҙы баҫыр сара тапмағас, ял көндәрендә йыш ҡына ваҡытты китап уҡып үткәрә инек”.

Белем алыу, кеше булыу уй-хыялдары менән йәшәй училище уҡыусы ы. “Ҡаҙағстан менән Ырымбур өлкә е сигендәге Аҡбулаҡ педагогия училище ында

үткән йылдарымды мин яҙмыш бүләк иткән оло бәхет тип уйлайым. Был типтағы уҡыу йорттарының программалары бик йөкмәткеле әм киң төҙөлгән: музыка, ынлы сәнғәт тарихтарын үтеү, педагогика, гигиена, төрлө фәндәрҙе уҡытыу методикалары – былар урта мәктәп программаларында юҡ. Өҫтәүенә, бында музыка ҡоралдарында уйнарға өйрәтәләр. Юғарыраҡ курстарҙа мәктәптәргә педпрактикаға йөрөй өң, дәрестәр бирә ең. Уҡытыусы өнәренә әҙерләнгәс, төплө белем алғы килә, әйбәт белгес булғы килә. Уҡытыу тәртиптәренең быға мөмкинлектәре етерлек”, – тип йомғаҡ я ай Рауил Бикбаев педучилище йылдары тура ында. Ул дипломы менән башланғыс мәктәп уҡытыусы ы булып кит ә лә, әләтле уҡытыусы-педагог булыр ине.

Был йылдарҙа Рауил Бикбаевтың йәшәү, тормош принциптары ла нығына килә, тиергә кәрәк. “Йылдар еңел булманы, ләкин минең ауыр ынауҙарға бирешмәҫлек рухи таяныстарым, әхлаҡи ҡағиҙәләрем, тормош принциптарым нығынғайны, – ти ул. – Был көстө мин зи енемә, күңелемә ауылда әсәйем өлгө өндә, туғандарым, тиҫтерҙәрем ара ында, ололарҙың үҙҙәренән аҡыл туплап йыйҙым. Хәләл тир түгеп табылған икмәктең ҡәҙерен белергә, сабырлыҡҡа, ғәҙеллеккә өйрәндем”.

Әгәр тормош ғилеме уҡыу белеме менән дә нығытыла әм берегә икән, кеше үҫә, үҙ өлгө ө әм аҡылы, тәжрибә е менән бөтәндәрҙе лә тәрбиәләүгә әҙер тигән үҙ.

Педучилищеның уңғы курстарында уҡығанда Рауилдың күңелендә яңынан шиғри тойғолар йышыраҡ уяна башлай. Ҡай ы саҡтарҙа, хәҙер үҙе хәтерләүенсә, көнөнә бер нисә шиғыр яҙғылағаны була. Уларҙың ҡай ыларын аҡҡа төҙәтә-шымарта күсереп, Өфө, Ҡазан гәзит-журналдарына ебәреп ҡарағаны бар. Ләкин уларҙан бер ҙә күңелгә ятырлыҡ, дәртләнерлек яуаптар алғаны юҡ. “Теге яғы етешмәй, быны ы юҡ, күберәк уҡырға кәрәк” ымаҡ өгөттәрҙән уҙмайҙар.

Алыҫта, ҡаҙаҡ далалары яҡтарында, тыуған яғын, ауылын, йәшлеген уйлап хыялдарға батҡан саҡта уйҙары менән Урал тауҙарына ашҡан мәлдәре лә күп хәҙер. “Ләкин ғаиләнән, ҙур тормоштан ситтә йәшәү, барлыҡ даирәбеҙҙең уҡыу йорто ла торған йорт ара ы менән сикләнеүе беҙҙе ниндәйҙер дәрәжәлә ерҙән, ысынбарлыҡтан айырғандыр, практик булыуға ҡарағанда күберәк идеалистар итеп тәрбиәләгәндер” тигән фекергә килә ул аҙаҡ. Нишләмәк кәрәк, бәлки, йәшлек үҙе шиғриәт шауҡымлы кешене идеалист итеп күр әтә торғандыр. Йәш кеше уй-моңоҙ, идеал ыҙ ҙа йәшәй алмай бит.

Педучилищела бигерәк тә рус телен әм әҙәбиәтен үҙләштереүгә бар күңелен а-ла. Был телде ныҡлап өйрәнеү уға тормошта ла, әҙәбиәт донъя ында ла киңерәк майҙандарға, рус әҙәбиәте классика ын тәрәнерәк белеүгә мөмкинлектәр аса, рухын байыта. Математика дәрестәре үҙенә арбай. “Минең өсөн математик Алексей Иванович Окопной менән рус теле уҡытыусы ы Вера Михайловна Шипакина айырыуса ҙур абруй булды. Ошо фәндәрҙе ныҡ яраттым”, – ти Рауил.

“Училищеның уңғы курсында шиғыр миңә яңынан әйләнеп ҡайтты, – ти Рауил. – Хәҙер инде уларҙы редакцияға ебәрмәйем, әммә “Өфөгә уҡырға барырға!” тигән ныҡлы ҡарарға килгәнмен. Ике яҡташымды шуға өгөтләйем. әр ял айын уларҙы педучилищеға алып барам, Өфөләге ынауҙарҙы уңышлы үтер өсөн даими әҙерлектәр үткәрәм.

Педучилищела уҡыған йылдар минең ижад юлымда эҙ ҡалдырманы тиерлек. Ләкин был өйрәнсек дәүерен үтмәү мөмкин түгел ине. Был дүрт йыл миңә төплө белем бирҙе, үҙаллылыҡҡа өйрәтте”.

Аҙаҡ “Аҡ Булаҡ” тигән шиғырында шундай рәхмәтле юлдарҙы ла уҡырбыҙ:

*Аҡ Булағым минең, әй, аҡ шишмәм,*

*Улың keүek мине үҙ kүрҙең.*
*иңә килгән сибек бер малайҙы*
*Еткән егет итеп үҫтерҙең.*

*ин өйрәттең ис бер кәм етмәҫкә*
*Кешеләрҙең милләт-тоҡомон.*
*Дүрт йыл буйы бер үк абаҡтарҙы*
*Төрлө-төрлө телдә уҡыныҡ.*

Рауил Бикбаев Аҡбулаҡ педучилище ын тамамлаған 1957 йыл – Өфөлә Башҡорт дәүләт педагогия институтының Башҡорт дәүләт университеты юғары статусын алған йылы. Боронғо мәҡәл әйтмешләй, Хоҙай хыял иткән ҡолона – сығарып ҡуйыр юлына, ти.

“Оло исемде алған Башҡорт дәүләт университетында 1957 йылдың көҙөндә уҡый башлауым минең өсөн сүлдә сарсап килгән юлсының алҡын шишмәләре ағып ятҡан йәшел сәхрәгә килеп сығыуы менән бер ине. Мин йотлоғоп ыу ынымды ҡандырырға тотондом, ләкин сарсауым бөтөрлөк түгел ине”, – ти Бикбаев.

Өфө уй-хыялдарынан да юғарыраҡ өр-яңы мөхит, туған хазина иле булып тойола: “Өфөлә миңә өр-яңы донъя асылды. Ырымбурҙан автобус ҡалаға төндә килеп етте, бер йортҡа төнгө уттар менән “Балыҡ” тигән үҙҙең яҙып ҡуйылғанын уҡып, аптырап үткәйнем. Был Пушкин әм Ленин урамдары мөйөшөндәге балыҡ магазины булған икән. Бай ғына китапхана ында хатта бер дана ла башҡорт китабы булмаған педучилищела дүрт йыл ғүмере үткән, уға тиклем дә милли матбуғаттан бөтөнләй тиерлек мәхрүм йәшәгән кеше өсөн төнгө ҡалала башҡортса үҙҙең нурланып-баҙлап тороуы нисек инде хайран ҡалырлыҡ хәл булма ын?”

Ырымбур өлкә е, Ырымбур ҡала ы менән сағыштырғанда, Башҡортостан, Өфө ҡала ы алыҫ дала бала ына ер менән күк ара ы кеүегерәк тойола.

Инеү имтихандарын уңышлы тапшырып, университеттың филология факультетының студенты булып уҡыуҙар, лекциялар башланғас, курсташтары шикелле, Рауил Бикбаевҡа ла өр-яңы рухи донъя, университет мөхите асылып китә. Әммә уларҙың күбе енән айырмалы рәүештә, Рауилға әле башҡорт теле әм әҙәбиәтенең урта мәктәптә үтелмәгән программа ын үҙ алдына йә әтерәк үҙләштерә е бар. Ауылда ете йыллыҡта уҡытылғандарҙың байтағы онотола ла төшкән, уларын яңыртырға кәрәк. Курсташтарың ара ында ала ҡарға булып йөрөп булмай.

Рауил Бикбаев – алсаҡ әм тиҙ аралашыусан егет. Курсташтары менән тиҙ уртаҡ тел тапты, күптәре яҡын дуҫ-иш булып китте. Уның шикелле ҡәләм тибрәткәндәр, “шиғыр ене ҡағылғандар” бар ине. Ятаҡҡа ҡайтҡас, кистәрен берберe енә шиғырҙар уҡып тикшергән, бәхәсләшкән, фекер алышҡан саҡтары күп булды. уңынан үҙе әйтеүенсә, “китапханаларҙа үткәргән көндәр, әҙәби түңәрәктә ҡульяҙмалар тикшереүҙәр, йәш ҡәләмдәштәр менән аралашыуҙар минең әҙәби зауығымды тиҙ үҫтерҙе, үҙгә талапсанлығым көсәйҙе”.

Башҡорт дәүләт университетында Рауил Бикбаев студент булып уҡып йөрөгән 1957–1962 йылдар шиғриәтебеҙгә Рәми Ғарипов, Рафаэль Сафин, Әнғәм Атнабаев, Абдулхаҡ Игебаев кеүек әләтле йәштәр бер быуын булып эркелеп килгән осор ине. Улар поэзиябыҙға үҙ заманынса яңы пафос, лирик үткенлек ыҙаттарын өҫтәп ебәрҙеләр, шиғырҙы трибуналарҙан көслөрәк яңғыраттылар. Өлкән шағирҙар ижадына хасыраҡ булған декларативлыҡтан, риториканан ҡасырға тырыштылар.

Улар артынса алтмышынсы йылдарҙың икенсе ярты ында Миәссәр Басиров,

Булат Рафиҡов, Шакир Бикҡолов, Ғәлим Дәүләтовтар үҙ тауыштарын дәррәүерәк ишеттерә башланы. Рауил Бикбаевтың да тап ошо осорҙа поэтик тауышы асыҡлана барып, “Дала офоҡтары” (1964), “Ҡош юлы” (1967) исемле шиғыр әм поэма китаптары менән ошо йәштәр быуыны сафына инеп китте. Алтмышынсы йылдар дауамында айырыуса Рәшит Назаровтың поэзия ы шиғриәтебеҙ күгендә бер яҡты йондоҙ булып сағыу балҡыны.

“Алтмышынсы йылдарҙа башҡорт шиғриәтенә йәштәр ҙур, көслө төркөм булып килде, әм ижади аралашыуҙар, фекер алышыуҙар бик йөкмәткеле, файҙалы була торғайны, – тип хәтергә ала Рауил Бикбаев был осорҙо. – Минең шиғырҙарым тура ында ҙур өйләшеү 1962 йылдың көҙөндә Яҙыусылар союзында йәш яҙыусыларҙың республика семинарында булды, әйбәт ба а алдым. Был кәңәшмәләге төп ваҡиға Рәшит Назаров ине. Уның шиғырҙары миңә лә бик ныҡ тәьҫир итте әм шиғри үҙгә талапсанлыҡ тура ында ныҡ уйландырҙы”.

Әммә ләкин нисек кенә булма ын, был осорҙа бөтә совет поэзия ында, шул иҫәптән башҡорт шиғриәтендә лә, коммунистик идеология йоғонто онда, социалистик реализм методы талап итеүенсә ысынбарлыҡты күпертеп, биҙәп үрәтләү тенденция ы, декларативлыҡ әм ялтыр риторика шаҡтай көслө ине. Шуға бигерәк тә шағирҙар тормоштоң ҡатмарлы әм ҡаршылыҡлы яҡтарын, кеше күңелендә ҡайнаған драматик әм трагик уй-кисерештәрҙе ситләтеп үтергә йә айырым фажиғәләрҙә генә күпмелер ҡағылғыларға мәжбүр булдылар. Ләкин бынан ғына ысынбарлыҡтың да гөл булып китмәүе бик йәл.

Ошо яҡтарҙы иҫкә төшөрөп, Рауил Бикбаев былай ти: “Беҙ шиғыр яҙа башлаған йылдар – башҡорт шиғриәтендә декларативлыҡтың, шалтырауыҡ риториканың “сәскә атҡан” сағы. Шағирҙың шик-шөб әләргә, күңел еҙ уйланыуҙарға, ҡатмарлы фәлсәфәүи орауҙарға, икеләнеүҙәргә хаҡы юҡ ине. Бары ы ла асыҡ булырға тейеш. Уй-кисерештәр ҡатмарлылығына ҡоролған лирикаға “Йәшә ен тыныслыҡ!” ымаҡ лозунгылар заманында урын тар ине. Бөтөнләй тәжрибә е булмаған йәштәрҙең ҡарашын бындай өрөмдәр ныҡ томаланы, баштарын әйләндерҙе”.

Ул замандарҙа республикалағы юғары уҡыу йорттарында ижтимағи фәндәрҙе, телде, әҙәбиәтте, тарихты марксизм-ленинизм тәғлимәтенә ҡоролған тенденциоз әм шаблон ысулда уҡытыу студенттарҙың аңын әм фекерләү әләтен ысындан да ныҡ сикләй әм томалай ине. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, был шаблон әм тенденциоз ысулдың хәҙер ҙә тел, әҙәбиәт, тарих, педагогика дәрестәрендә бөтөнләй бөтөп етмәүе был фәндәргә студенттарҙың ҡыҙыҡ ыныуын әм төплө белем алыуҙарын күпмелер сикләмәй ҡалмай.

Был хаҡта Рауил Бикбаевтың: “Университетта башҡорт әҙәбиәте әм теле буйынса лекцияларҙы хайран ҡалып тыңланым, тип әйтә алмайым. Ижад донъяын байҡауҙар күпселектә аман да шул шаблонға ҡоролғайны”, – тигәне, үкенесле бул а ла, әле лә хаҡлығын юғалтмауы йәл.

Был студент йылдарында Рауилға ошондай бушлыҡты йә бушаҡлыҡты рус әм донъя әҙәбиәте классика ын, бигерәк тә шәреҡтең бөйөк шағирҙарын, Өфө үҙәк китапханаларында ултырып үҙ алдына уҡырға, белемен тулыландырырға, камиллаштырырға тура килә. “Университетта уҡыу миңә еңел бирелде, – тип тә ебәрә ул. – Педучилищелағы әҙерлектең дә файҙа ы ҙур булғандыр. унғы йылдарҙа лекцияларға йүнләп йөрөмәнем, төндәрен шиғыр яҙып үткәрҙем. Газеталарҙа исемем күренә башланы”.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**

# ШАҒИР ИЖАДЫНДА ЭПИСТОЛЯР ФОРМА

Шағирҙы “Халҡыма хат” исемле поэма ын яҙырға бер ҡыҙҙың мөрәжәғәт хаты мәжбүр итә. Туған башҡорт телен белеп тә, өйрәнмәүе, шул телдә аралашмауы, өйләшмәүе арҡа ында ҡайғыра ул ҡыҙ. Был хатын Р.Бикбаевҡа яҙып, бәлки, башҡаларҙың фә ем алыуҙарын орай. Башҡорт халҡының йолаларын, әҙәбиәтен, динен, тарихын, мәҙәниәтен .б. белмәүе уны хафаға ала. Автор үҙе: “Ә уң туған теленән айырылып та, был фажиғәне аңламағандары, был юғалтыуҙы кисерә белмәгәндәре күпме! Уларҙың йөрәген дә әлеге еңлекәште ыҙландырған ошо ыҙлатыу өтөп ал ын ине!” – ти.

“Халҡыма хат” әҫәренең тыуыуы тура ында шағир былай тип бәйән итә: “Уны айырым кешегә генә исемләү мөмкин түгел. Унда өйләнелгән аяныслы хәлдәр, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, барлыҡ халҡыбыҙҙың, хатта илебеҙҙәге бөтә милләттәрҙең яҙмышы өсөн уртаҡ. Шуға мин шиғри хатым менән барлыҡ халҡыма өндәшәм”. Бында ошондай юлдар бар:

*Туған телкәйемдең хәлдәренән*  
*Бәгерҙәрем яна, теленә.*  
*Халҡыма мин ошо хатты яҙам,*  
*Оран алам башҡорт иленә.*

Поэма строфаларынан күренеүенсә, автор – көслө рухлы, халҡы әм иле өсөн көйөүсе, ҡайғырыусы, ил күләмендәге донъя хәстәрен үҙ иңенә алғандай кеше булып баҫа. Ысынлап та, беҙҙә тел мәсьәлә е әр саҡ киҫкен. Туған телен белеп тә, башҡорт телен үҙ итмәгән, унан оялған күпме кеше бар арабыҙҙа. Уның артабанғы юлдары тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ, гүйә, ин үҙенде алыҫ үткәндәргә, тарих төпкөлөнә алып китә ең.

*Еркәйемдең тарих өйләмәгән*  
*Юҡ уҡмағы, ыуы, юҡ тауы.*  
*Ишетәмен әле ҡылыс сыңын,*  
*Әле ылыу ҡыҙҙың ыҡтауын.*

Салауат Юлаев әйкәле янында ҡулына килеп еткән ҡыҙҙың хатына яуап итеп, шағир бәгерҙәрен телгән, йөрәген өткән юлдарҙы теҙә:

*Быуылдымы әллә халыҡ рухы,*  
*Намыҫыбыҙ юҡмы әҙерәк?*  
*Ҡуйынында үҫкән сабыйҙарын*  
*Тырышып-тырышып ата-әсәләре*  
*Үҙ теленән үҙе яҙҙыра.*

Заманында рус теленең популяр булыуы, күпселек мәктәптәрҙә ошо телдә уҡытыу, башҡортса яҡшылап китаптар булмауы әлеге мәсьәләнең башылыр, моғайын.

Р.Бикбаев ҡулына эләккән хат, әлбиттә, рус телендә яҙылған. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, барлыҡ уй-фекерҙәрен, борсолоуҙарын, хатта ҡыуаныс-шатлыҡтарын еткереү өсөн генә лә ул, исма ам, башҡортса яҙа белмәй. Шағирҙың быға ҡағылышлы үҙ фекере:

*Ни мәғәнә башҡорт китаптары*
*Сит илдәргә еткән бер мәлдә,*
*Күпме бала тыуған телкәйендә*
*Әлифба ла таный белмәгәс?*
*Күкрәк ҡаға-ҡаға ниндәй хәлгә*
*Килеп терәлдек бит – ҡот оса!*
*Күпме әсә алдат улы менән*
*Хат яҙыша алмай башҡортса.*

Ул башҡорт теленең бындай аяныс хәлгә төшөүендә берсә баш ыҙ башлыҡтарҙы, берсә үҙебеҙҙе ғәйепләй. Башҡаларҙы ҡарғауы еңел шул, яуаплылыҡты үҙ иңдәребеҙгә алырға теләмәйбеҙ. Туған тел яҙмышына битараф ҡараған ғәм еҙҙәрҙе шағир сабыр балта менән сағыштыра. Дөрөҫ үҙҙәр бит был. Бөгөнгө йәшәйешебеҙҙә, Аллаға шөкөр, эштәр яйға алына башланы. Рус теле менән бер рәттән башҡорт теле лә дәүләт теле статусына эйә булды.



Раул Бикбаев Татарстандың халыҡ шағиры Ренат Харис менән.

Р.Бикбаев телгә ҡағылышлы проблемаларға эҫе мәлендә тотона, саң ҡаға. Ул әсә телен белмәгәндәрҙе ғәрипкә анай. Кинәт кенә милләттең дә ғәрипкә әйләнеп китеүенән ҡурҡа, борсола.

Борондан ата-бабаларыбыҙ беҙгә аманат итеп башҡорт халҡының ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын, бай хазина – үҙ өлгөләрен ҡалдырған. Киләсәгебеҙҙең уңышын, тыныс тормошон, әлбиттә, быуындар күсәгилешлеген, йәштәр, балалар ҡәҙерләргә әм аҡларға бурыслы. Үҙ нәүбәтендә, ошоларға үҙ ҡарашын белдереп, килә е юлдарҙы теҙә автор:

*Илдең иртәгә е хәстәрҙәрен*
*Беҙ күрмәйсә тағы кем күрер?*
*Сабыйҙарҙың телен ҡайғыртма аҡ,*
*Аҡ аҡалға булыр төкөрөү.*

Оло проблема күтәргән ҡыҙҙың хатына яуап хатын шағирыбыҙ бар халҡына адреслағанын әйтеп үткәйнем инде. "Халҡыма хат" – ябай тел менән, шул уҡ ваҡытта үткер итеп яҙылған әҫәр. Берәүҙе лә маҡтамай, хупламай автор. Ил булғас, беҙҙең менән йәнәш йәшәгән ғаиләләребеҙгә ярҙам итергә тейешбеҙ. Йәғни, Р. Бикбаев әйткәнсә:

*Аҡылыңдан әллә яҙҙыңмы ин,*
*Тере көйө телдән яҙырға?*
*Телдән яҙғанға бит оҙаҡ ҡалмай*
*Алҡымынан әжәл алырға.*

Был мөрәжәғәтнамәләрҙә халыҡҡа әйтелгән тәҡдимдәр, теләктәр, кәңәштәр бар. Әйтәйек, шағир “сабый телен сапҡан балтаны ҡулдар етмәгән ергә ырғытырға”ҡуша. Сөнки хата киткән икән (ә ул бигерәк тә оло хата – ил күләмендәге), беҙгә уны төҙәтергә кәрәк. Уны хәл итеү юлдарының ауыр буласағы көн кеүек асыҡ, әммә ҡоро үҙҙәрҙә әм ҡағыҙҙа ғына эштәр алға китмәйәсәк. Илдең иртәгә ен аҡлар йәштәр изге сафҡа тупланырға тейешлеген дә аңғарта ул. Юғи ә беҙҙәге моң оҙлоҡ та, аңҡаулыҡ та, ләғнәт ялҡаулыҡ та бөтмәйәсәк. Ә алда көтәсәк яҙмыштар, үткән меңәр йыллыҡ юлыбыҙ – беҙҙең уяулыҡта, беҙҙең эштә, беҙҙең намыҫта. Ил хәстәре, халҡы, туған әсә теле өсөн ихлас ҡайғырған шағир киң күңелллелек күр әтә. Ул хатта ҡорбандарға ла риза:

*Туған телем өсөн кәрәк икән –*
*Бар бәхетем, әйҙә, юҡ бул ын,*
*Туған телем өсөн кәрәк икән –*
*Ауыҙымдағы телем ҡырҡыл ын!*

“Халҡыма хат”шиғри хатында автор, бар халыҡҡа әм ғаләмгә өндәшеп, оран ала:

*Туғанынан яҙған – ярты йәтим,*
*Туған теленән яҙған – мең йәтим,*
*Телде тоҙаҡларлыҡ ғәм еҙлектән*
*Уян, халҡым, ҡуҙғал, милләтем!*

Быңдай көслө а әңле юлдарҙы бары ысын шағирҙар, ил ғәме әм мәнфәғәте өсөн йәшәүселәр генә яҙалыр. Тоҙаҡҡа эләккән бахыр сысҡандың унан ҡабат ҡотолорона ышанысы юҡлығын белгән шағир ҙа ошоға оҡшаш булған халыҡтың телде тоҙаҡларлыҡ ғәм еҙлегенә ғәрләнә. Ә бит туған телдә күпме матур үҙ ынйыларыбыҙ бар? Үҙенең тамырҙарын уйлап ғорурланған автор бөгөнгө өн күреп хурлана. Хаҡ үҙҙәр. Йөрәктәрҙе әйләндереп - тулғандырырлыҡ үҙҙәр.

Р.Бикбаевтың “Ҡайҙа?” исемле шиғыры “Халҡыма хат”тың дауамы ымаҡ. Күпме буш үҙҙәр өйләп, бер аҙ алға үҫеш өсөн бер нәмә лә эшләмәгән, булғанына ҡәнәғәт булмай ялыусы-яҙыусыларҙың күплеген, ә яныусыларҙың юҡлығын белдерә ул. Үкенес менән:

*Берәү бирмәй йүнле яуап...*
*Ни мәғәнә, ни файҙа, –*

тип уфтанып ҡуя. Шуға ла үҙенең хаттарын яҙа.

Хаттар кеше тормошонда ба алап бөткө өҙ ә әмиәткә эйә. Улар төрлө стилдә, формала әм йүнәлештә осрай. Элек, мәҫәлән, уғыш мәлендә, өскөл хаттар әр өйгә тиерлек яҙылған булған. Хәҙер матур биҙәлешле конверттарҙа йөрөй улар.

Башҡорт әҙәбиәтендә билдәле бер урынды эпистоляр яҙмалар – төрлө стилдә яҙылған хат, өндәмә, мөрәжәғәтнамә кеүек ҡомартҡылар алып тора. Башҡорттарҙа хат традиция ы XVI быуаттан уҡ килә – ил ә әмиәтендәге мәсьәләләрҙе күтәреп, Рәсәй дәүләте хакимдарына йәки юғары власть ә елдәренә хәбәрҙәр ебәреү, билдәле булыуынса, Иван Грозный заманында уҡ башлана. Унын үҙенең башҡорттарға биргән грамота әм ярлыҡтарын да урындағы халыҡ ҡыҙыҡ ыныу менән ҡабул итә, был яҙмаларҙың йөкмәтке ен шәжәрәләрҙә сағылдыра.

Эпистоляр әҙәбиәт – яҙыусыларҙың, сәнғәт әм йәмәғәт эшмәкәрҙәренең, ғалимдарҙың ижтимағи-эстетик ә әмиәткә эйә хаттарынан торған йыйынтыҡ әм китаптар. Эпистоляр әҙәбиәт стиленең традицион талаптары – аныҡлыҡ, ҡыҫҡалыҡ, аңлайышлылыҡ. Осорҙоң эпистоляр яҙмалары шул замандың фактик материалына таянып, булған хәл-ваҡиғаларҙы ҡағыҙға теркәп ҡалдырыуы менән дә ҡиммәт. Хаттар, тере хәтер кеүек, бик ҡиммәтле мәғлүмәттәр бирә. “Хатты ғәҙәттәге яҙма хәбәрләшеүҙән художестволы проза әҫәренә әйләнләндереүсе иң тәүге сфера – публицистика әм дидактика”, – ти Г.А. Миллер. әр бер фактҡа,

ваҡиғалар хәрәкәтенә авторҙарҙың үҙ баа ы бар. Ошо ба а аша уларҙың мөнәсәбәте, уй-ҡараштары, эске донъя ы асыла. “Эпистоляр форма авторға үҙ йөҙөн юғалтмаҫҡа мөмкинлек биреүсе лириклыҡ сифатына эйә”, – тигән раҫлау, тимәк, үҙ барған осорҙағы башҡорт эпистоляр әҙәбиәтенә лә хас.

әр авторҙың донъяға үҙ ҡарашы, уй-фекерҙәре, кисерештәре үҙенә бер төрлө булған кеүек, унын тәжрибә е, әләте, яҙыу манера ы ла башҡаса. Был йә әттән тағы ла Р. Бикбаевтың “Барып ет ен иңе хаттарым” шиғырына туҡталып кимәксемен. Автор шиғырға Б. Вәлидтең “Йырҙар яҙам, ләкин халҡым наҙан...” юлдарын эпиграф итеп алған. Тимәк, бында ла халыҡ менән бәйле проблемалар күтәреләсәк. Хәйер, үҙҙе шағирҙың үҙенә бирәйек:

*Йырҙар яҙам. Халҡым түгел наҙан,*
*Барып етер, тимен, хаттарым.*
*Барып етер шиғырым – хатымдағы*
*Өмөт - хыялдарым, а тарым.*

Тәүге куплеттан уҡ күренеүенсә, был әҫәрҙе автор башта уҡ шиғыр-хат тип билдәләп китә. Артабан бары ына ла үҙенең уй-маҡсаттары, әйтергә теләгән фекерҙәрен еткерергә ынтыла. Шағир нимәгәлер өмөт итә, хыяллана, а -зарҙары ла етерлек.

Илде уятҡан ғәрәсәттәр, ҡуҙғатҡан шартлауҙар булғанда, хатта ерҙең ете ҡаты ыҙырылғанда ни өсөн уң беҙҙең ҡыҙ-улдарыбыҙ баш аҫтына дипломын алып тороп йоҡлай уң?! Ә бит ғәзиз Уралыбыҙҙы ялмауыҙҙар аман талай, улар йоҡламай. Башҡорт инде килмешәк, үҙе лә атай нигеҙен ташлап, сит ерҙәргә таралған. Был юлдарҙан нисек ҡотолорға? Тыуған диңгеҙенән ҡыуылған дельфиндарҙай ярға ташланмаҫбыҙмы, үҙ еребеҙҙә бахыр хәленә ҡалмаҫбыҙмы?

*Бәрелергәме Урал тауҙарына,*
*Бәрелергәме сәсрәп ташына?..*

Шағирға, ил улына илдең зарлы уфтаныуҙары әллә күпме ут ала. Бар нәмә ағыуланған. Әгәр беҙҙең күңелебеҙ ағыулан а, ни ҡала? Башҡортостан тип аталған ғорур илебеҙгә әллә күпме ажда алар ағыу сәсә. Ажда а – фантастик образ. Уның йөҙөндә ерҙәребеҙгә әм илебеҙгә ҡул уҙырға тырышыусы олигархтар, сит ил етәкселәре сағыла. Авторҙың теләге, өмөт-хыялдары: йоҡлар йоҡо онан яҙ ын кеше, әммә еренән, иркенән яҙма ын.

Шиғыр-хатта автор ил зарҙары өсөн көр өнә әм уфтана, килеп тыуған мәсьәләләрҙең хәл итеү юлдарын эҙләй. Әммә яңғыҙ ҡарға яҙ килтермәгәндәй, яңғыҙ-ярым уларҙы хәл итеп булмай. Халыҡтың берҙәмлеге әм татыулығы, тырышлығы әм уңғанлығы ғына бары ын да хәл итәсәк. Шулай уҡ оҫта етәксенең булыуы ла зарур. Шуға күрә туған халҡына ошондай хаттар яҙа ла инде шағир.

Килә е шиғри хатын ул рәссам, сағыу үрәттәр оҫта ы Әхмәт Лотфуллинға яҙып, “Ашыҡ, рәссам!” тип атай.

*Яҙ ин, рәссам!*
*инең үрәт аша*
*Быуындарға быуын үрел ен, –*

тип мөрәжәғәт итә Р. Бикбаев уға. Ә ни өсөн шағир уны ашыҡтыра уң? “Иртәгә уң булыр, – тип башлай шиғри хаттың авторы. – Матурлыҡтар юйыла, тонсоға. Хатта сарсап-яныр килгән юлсыға эйелеп эсер шишмә- ыу ҙа ҡалмай башланы”.

*Күпме урман бөттө, аҙлыҡ кипте,*
*Әрәмәләр көйҙө, ҡыуарҙы.*
*Телә әк тә, бик-бик телә әк тә,*
*Яҙып булмаҫ инде уларҙы, –*

тип әсенә шағир.

Бөгөн беҙ бар матурлыкты таныйбыҙ ҙа ул, ә иртәгә табырбыҙмы уң уларҙы? Шуға күрә, тәбиғәткә бәндә яр ыбыраҡ ҡулын тыҡмаҫ борон, рәссамды ашыҡтыра. “Ҡоралайға мылтыҡ тоҫҡаусы инең үрәтеңә ҡарап, ерҙең йәнен той он, ҡулынан мылтығы төшөп кит ен” тигән идеяны еткерергә теләй. Бында тағы ла рәссамдың ысын оҫта, профессионал ижадсы булыуына ла баҫым я алған. Ябай үрәт төшөрөүсенең үрәте күңелдәргә үтеп инерлек, ниндәйҙер ваҡиғаның асылын асып алырлыҡ кимәлдә булмауы ла мөмкин. Был шиғыр-хат, үҙ сиратында, теләк тә кеүек, рухи ярҙам әм этәргес тә булып тора. Ә уңғы юлдарға аңлатма биреп тороуҙың кәрәге юҡтыр, минеңсә. Ағайҙарса терәк күр әтергә, яттар тарафынан ажғыр елдәр иҫкәндә яурыны менән ҡапларға, өйрәтергә лә, ярҙам итергә лә теләк белдергән шағир Рауил Бикбаев хатын шулай тамамлай:

*Көлөм өрәп мине тыңлай ыңдыр:*
*Нисә йылдар мине өйрәттеләр,*
*Тағы ла берәү, тиеп, табылды...*
*Ғүмерең буйы, беләм, яҙа ың бит*
*Буяуыңа ҡушып ҡаныңды.*

Килә е “Почтальон малай” шиғырында ҡыҫҡаса түбәндәгеләр бәйән ителә: үҫмер малай почта бүлегенән ҡайтып килә. Ә үҙе, сумка ында йылан ятҡандай, хаттарына тотонорға ҡурҡа. Үлем ҡағыҙҙары шулай йылан булып әсәләрҙең йөрәген саға. Малай бөгөн ике өйгә инеп сыҡты, гүйә, ул был ғаиләләрҙең ғүмергә шәмдәрен үндерҙе. Үҫмер бала! Ә ниндәй яуаплылыҡ инең иңдәрендә!? уғыш берәүҙе лә аяманы шул.

*Ул үҙенә үҙе орау бирә:*
*Был ҡайғыны нисек еңеләйтергә?*
*Донъя! Ҡыйын ине аңлауы.*

Хаттар бары ына ла тапшырылған. Тик бер генә хатты бирмәйенсә, ул яланға сығып олаға. Тамағына төйөр тығыл а ла, бахыр бала иламай. Инде:

*Таң арғая. Малай аман йөрөй,*
*Сәскәләрҙән ысыҡ тамыҙып,*
*Сумка ында йылан ымаҡ ята,*
*Сумка ында бер ай инде ята*
*Ата ының үлем ҡағыҙы.*

уғыш бөтөүгә инде байтаҡ ваҡыт уҙған. Ә шулай ҙа был шиғырҙы уҡыу менән күҙҙәргә йәштәр эркелә, күңел әрней. Дошманға нәфрәт уяна. Унда-бында сығып торған уғыштар ҙа аяу ыҙ, аман тынғылыҡ юҡ. Унның арҡа ында бер ғәйеп еҙ ҡатындар, бала-сағалар, тотош ил ҡайғы күрә.

Сағыу образдар аша автор был шиғырҙың тема ын оҫта итеп асыуға өлгәшкән.

Ғөмүмән алғанда, Р.Бикбаевтың халҡына тәҡдим иткән шиғырҙары көслө рух, юғары а әңлелек менән уғарылған. Ул әр саҡ уйлана, борсола, бигерәк тә йәштәрҙе илебеҙ үҫеше өсөн тырышырға, ялҡауланмаҫҡа өндәй.

Шағир үҙе: “Аҫыл шағирҙарҙың да ғүмере өҙөлә. Әммә үҙҙәренең бөйөк ижадтары менән халыҡты бөйөк итеп, унның яҙмышын киләсәк быуаттарға бәйләп-таштырып китә. Шағир үҙе, шағир намыҫы... Ғүмерем буйы шул үҙгә хеҙмәт иттем, шул намыҫҡа тоғро булырға тырышып йәшәнем. Киләсәктә лә яҙмыш ошо изге таянысымдан – шағир үҙенән, шағир намыҫынан айырма ын, – ти. – Асылда шағирҙың йәше ул тиклем хәл иткес сифат түгел, шағирҙың шағир булыуы ҡиммәт”. Ысынлап та, был йә әттән шағир Рауил Бикбаевтың ижады әҙәбиәтебеҙ өсөн ҡиммәтле хазина булып тора.

**Земфира ТА ИРОВА.**
**БДУ аспиранты.**

# *Әҙип хаҡында ҡәләмдәштәре*

***

*В его поэзии "я" и мир, человек и мир предстают в романтической глобальности. Его лирический герой постоянно оказывается, я бы сказал, в экспериментальной ситуации, в которой он может находиться всечасно в реальной повседневности, в ситуации "великого противостояния" к одной из широких сфер, к одной из стихий Вселенной.*

*Вот он ведет разговор с Солнцем ("Солнце, солнце, выходи!"). А вот наедине с собою и космосом:*

**Высоких звезд искристый лед**
**Мне неотступно сердце жжет.**

*В другом стихотворении ("В небесные пределы ушел, умчался я...") он уже смотрит на землю, горящую внизу слезой, с космических высот, стучась в ворота Вселенной.*

*Если лирический герой исповедуется, то перед собственной Родиной, взрастившей его и наполнившей поэзией ("Ак-Булак"), если клянется в верности, то Народу:*

**Народ!**
**Я не сверну**
**С твоей дороги.**

***"Встречаю ль новую зарю..."***

*В стихотворении "Жизнь, ведешь себя странно..." он беседует с Жизнью, пытаясь проникнуть в ее каверзны и парадоксы. Не менее абстрактен и опять-таки весьма показателен для лирической манеры поэта его собеседник в стихотворении "Забыв навеки о покое...". Здесь идет диалог со Временем.*

*Эти предпочтения в выборе лирического "контрагента" в поэзии Равиля Бикбаева свидетельствуют о нестандартности складывающейся поэтической системы, о нешаблонности мироощущения.*

***Виталий СМИРНОВ.***
*(Журнал "Урал", №12, 1979 г.)*

***

*Человек у Р. Бикбаева неизменно оказывается в центре мироздания. Он может при этом чувствовать себя и покинутым, и одиноким – в стихах Р. Бикбаева щемящий лиризм, мягкая элегичность. Таково его стихотворение "Луна": герой вспоминает, как когда-то в лунную ночь на водной глади родной ему реки Соран отражались две тени – рядом с ним*

*была любимая им девушка... Невольно вспоминается есенинское: "Вечером синим, вечером лунным был я когда-то красивым и юным". Но воистину ничто не вечно под луною – любовь оказалась всего лишь прекрасным виденьем...*

**Для чего опять пришел я**
**поглядеть на лунный серп?**
**Отчего бывает полной**
**жизнь и сходит на ущерб?**

*Простые вопросы, на которые не так-то просто, если вообще возможно, дать ответ... "Одинокая тень", "одинокая льдина", "одинокое облачко" – образы такого рода нередки у Р. Бикбаева. Но "одинокость" эта "снимается" у него не в житейском, а в лирико-философском плане. Само стремление найти в беспредельном пространстве "родственную душу" не дает стихам стать вяло-замкнутыми в своей отъединенности. Элегичность как бы взрывается изнутри энергией этого устремления – посмотрите, как динамично-звонко начинается хотя бы стихотворение об одинокой льдине:*

**Словно море, на просторе,**
**не вмещаясь в берега,**
**тащит льдину посредине**
**Караидель – моя река.**

***Венера ВАЛИЕВА.***
*(журнал "Литературное обозрение", №2, 1988 г.)*

* * *

**В Башкирский обком ВЛКСМ**

*Дорогие товарищи! Я не успел выступить в печати по поводу выхода книги стихов Равиля Бикбаева "Автобиография", но, как поэт и как бывший комсомольский работник, должен сказать свое слово членам комиссии по присуждению премий комсомола имени Г. Саляма.*

*В лице Равиля Бикбаева в башкирскую литературу пришел большой самобытный поэт, талантливейший представитель молодого поколения нашей многоголосой поэзии 60-х годов.*

*Равиль Бикбаев, прежде всего, глубоко национальный поэт, но не ограниченный в своем национальном своеобразии, поэт широкого масштаба и высокого полета. Мир его поэзии многокрасочный, человечный и, я сказал бы, при этом тревожный, как само время. Он, как поэт-гражданин, очень чуток к голосу времени, самозабвенно верен героической и трагической истории своего народа и весь устремлен в светлое будущее его.*

*Глаза поэта зорки, и видят не то, что лежит сверху, а то, что нужно и необходимо. Поэтому он в своих творческих поисках больше находит, нежели ищет. В своем поэтическом мышлении, в образном видении мира он очень смелый, даже дерзкий, но он поэт-новатор в лучшем смысле, весь*



*Раушл Бикбаев менән Валентин Распутин.*

*опирающийся на лучшие традиции родной поэзии. При этом он поэт большой интеллектуальной культуры, хорошо усвоивший все достижения восточной и русской поэзии, значит всей современной.*

*Поэтому-то его "Автобиография" вобрала в себя все лучшее прошлого и современного и так естественно сочетает личное с общим. И его личная автобиография превращается не только в художественную самоописанию его поколения, но и в своеобразную поэтическую историю своего народа, возрожденного революцией, при этом не теряя индивидуальный почерк, чисто бикбаевский голос его. И голосу этому не внимать нельзя, ибо голос этот чист, искренен и мудр, как сама молодость. Равиль Бикбаев – поэт молодости, ибо настоящая поэзия не может по своей сути жить без молодости. Поэтому поэзия близка и дорога молодежи, нашему комсомолу.*

*Р. Бикбаев быстро, энергично растущий поэт, поэт большого будущего. Тому порукой является его "Автобиография", потрясающее стихотворение "Сонгми" и великолепная поэма о Ленине, одна из лучших созданных о нем в башкирской поэзии.*

*Лично я считаю, что сам Салям достоин Бикбаевской премии!*

**Рами ГАРИПОВ.**

***

**Мостай КӘРИМ**

Сая бейенең ∞ин, менеп бер сак
Упкын өҫтөндәге ҡаяға,
Ҡурҡманым мин, була күрмә∞ен тип
Ошо саялығың заяға.
Күҙ алдымда ташландың
∞ин бер көн
Тауҙан атылып төшкән ташҡынға,
Мәкерле ∞ыу ∞ине йотмағай тип,
Хатта шик инмәне башыма.

Ил алдына сыҡ∞аң, мин
тынысмын –
∞өйләмәҫ∞ең вакты, яманды,
Изгеләрҙе яуыз я∞амаҫ∞ың,
Хакка сығармаҫ∞ың ялғанды.

Кисә ∞ине “03” алып китте,
Ышанамын, доктор, коткарыр.
Ҡаты сырхау йыккас, ∞инең өсөн
Тәү ҡат, Рауил, осто ҡоттарым.
1990.

***

**Тимер ЙОСОПОВ**

**БӨРКӨТ САҢҠЫУЫ**

Сама тигән аттар тыпырсынып,
Алмашынған сакта дәүерҙәр.
∞ин ҡалка∞ың алға,
Оло булып,
Кесерәйгән сакта дәү ирҙәр.
Тере ҡуҙҙай күҙҙә оскон ян∞а,
Өмөттәрҙең кал∞а остоғо,
∞ин ҡалка∞ың алға,
Сая рухлы
Рәмиҙең дуҫы, ҡусты∞ы.
Күңелдәрең яҙға сарсағанда,
Ал ҡояшка тейә устарың.
∞ин елә∞ең,
Йәшен тынын тоя
Эйәрҙәш тә килгән дуҫтарың.
∞өрән ∞алмай,
Илгә оран ∞алдың,
Тик ил ғәме генә уйыңда.
Үҙәгеңә үткәс,
Йыр йырланың,
∞әм сарсаның йылға буйында...

**Оранында бөркөт саңҡыуы бар,**
**Ҡылыстарҙың унда бар сыңы,**
**Сәсәндәрҙең алыҫ ∞ин бер осо,**
**Ғәййәр Кинйәләрҙең ярсығы.**

1995.

***

**Ирек КИНЙӘБУЛАТОВ**

**Көн – бер тотам, төндәр**
**озон саҡта,**
**Сатнағанда ерем ∞ыуыҡтан,**
**Ҡайҙан ∞индә шундай ҡайнар йөрәк,**
**Донъя ҡырыҫ сакта тыуып та.**

**Ҡыш ҡынамы йәнде өшөткәне,**
**Төн генәме әле ҡараңғы, –**
**Әле бөтә∞енән хәүефлерәк**
**Күңелдәрҙең туңа барғаны.**

**Өйрәнгәнбеҙ, талант талмаҫ, тиеп,**
**Өйрәнгәнбеҙ, талант түҙә, тип.**
**Ана, аҙым ∞айын бер Моцартты**
**Биш Сальери йөрөй күҙәтеп.**

**Айға ҡарап өргән эттәр ∞ымаҡ,**
**Талант∞ыҙҙар талай талантты.**
**Ҡанлы ауыҙҙар яламаҡсы була,**
**Йөрәгеңде ҡат-ҡат ҡанатып.**

**Бәләкәйҙәр ҙур булғы∞ы килеп,**
**Үс алғы∞ы килә ҙурҙарҙан.**
**Юҡҡамы ни улар, сөгөлдөрҙәй,**
**Ни эшләргә белмәй буҙарған.**

**Оят∞ыҙҙар оят талап итә,**
**Ғәм хаҡында ∞өйләй ғәм∞еҙҙәр.**
**Ике йөҙлө бөгөн биш йөҙләнә –**
**Ырғып торор быға йән∞еҙ ҙә.**

**Ниҙәр әрнет∞ә лә бәгереңде,**
**Йөрәгеңә ҡандар ∞ау∞а ла,**
**Ҡыуа∞ың ∞ин халҡың ҡыуған юлды,**
**Башҡа юлда алтын яу∞а ла...**

# Сибай яҙыусылар ойошма ына – 15 йыл

## ҠОТЛО ҺӘМ ЯҠТЫ ЙОРТОБОҘ

Сибай төбәк яҙыусылар ойошма ының асылыуына 15 йыл. Ошо арауыҡта ул башлап яҙыусыларҙың, ҡәләм тирбәтеүселәрҙең килеп йөрөгән йылы  әм яҡты йортона әүерелде. Бөгөн уның сафында 40-тан ашыу башлап яҙыусы  әм 8 РФ  әм БР Яҙыусылар союздары ағ-



*Сибай яҙыусыларынан бер төркөм.*

за ы  иҫәпләнә. Төбәк яҙыусылар ойошма ы ҡарамағына Баймаҡ, Хәйбулла, Йылайыр, Бөрйән райондары, Сибай, Баймаҡ ҡалалары әҙәбиәтселәре инә. Асылғас та ойошманы тәү башлап Рәйес Түләк, артабан Аҫылғужа Ба уманов, Таңсулпан Ғарипова, Гөлназ Ҡотоевалар етәкләне. Исемдәре республикала киң танылыу яулаған был шағирҙар  әм яҙыусылар ойошма ныға ын ын өсөн күп тырышлыҡ алды. Бөгөн ойошманың төп көстәрен Зө рә Фәйзуллина, Лира Яҡшыбаева, Инсур Йә үҙин, Ай ылыу Ғарифуллина, Сәрүәр Ғәләүетдинов, Буранбай Исҡужин, Зөлфирә Ҡаҙаҡбаева кеүек исемдәре танылған әҙиптәр

тәшкил ит ә, уларҙың сафын Әминә Яхина, Фирүзә Алсынбаева, Миләүшә Ҡа арманова, Рәмилә Ибра имова, Фәнис Сирбаев, Айгөл Ишемғужина, Әлнисә Алдырханова, Рузидә Үтәшева, Зөлфиә Хәкимова, Мотал Рәмов кеүек үткер ҡәләмлеләр тулыландыра.

Йәштәргә лә оло өмөттәр бағлайбыҙ. Яңыраҡ ҡына Йылайыр ҡыҙы Зарина Бағышаева үҙнәшер юлы менән донъя күргән “Тамсы йыры”н ҡулына алды, яңы ғына Илгиз Ишбулатовтың йыйынтығы баҫылып сыҡты.

Уҡыу йорттары менән дә киң хеҙмәттәшлектә йәшәйбеҙ. Сибай ҡала ының бөтә мәктәптәрендә лә әҙәби түңәрәктәр эшләп килә. Улар менән ойошма ағзалары – тәжрибәле ҡәләм оҫталары етәкселек итә. Ҡала мәғариф бүлеге, башҡорт теле уҡытыусылары – иң яҡын ярҙамсыларыбыҙ әм дуҫтарыбыҙ. Йыл айын йәш яҙыусылар әм шағирҙар бәйге е үткәрелә. Унда йыл буйы мәктәптәрҙә барған әҙәби эштәргә йомғаҡ я ала, еңеүселәр билдәләнә. Ошо бәйгегә арнап әр мәктәп матур биҙәлгән китапсыҡтар әҙерләй.

Ошо бәйгеләрҙең өҙөмтә е булып уңғы биш йыл эсендә Сибай типография ында “Бала саҡтың яҡты хыялдары”, “Еңеү яҙы”, “Тыуған ҡалам уттары” исемле йыйынтыҡтар донъя күрҙе, әлеге көндә 4-се е баҫыуға әҙерләнә. Был йә эттән Хәйбулла, Йылайыр районлары эштәре маҡтауға лайыҡ: хәйбуллалар уҡыусылар ижадын туплаған “Ҡыуаныстар бүләк ит” йыйынтығын әҙерлә ә, йылайырҙар быйыл яҙ “Йылайырым – дуҫлыҡ иле” китабының исем туйын үткәрҙе. әр ижад емеше донъя күр ен өсөн иң әүәл финанс сығымдары кәрәк. Урындағы хакимиәттәр яҙыусыларҙы күтәрмәләргә, уларға ярҙам ҡулы уҙырға әр ваҡыт әҙер, мин уларға ойошма исеменән ихлас рәхмәтемде белдерәм.

Әле, ойошманың юбилейына бағышлап, ике телдә, 26 авторҙы берләштергән “Йәйғор төҫө” исемле матур йыйынтыҡ баҫылып сыҡты. Был да – ойошма өсөн ҡала хакимиәте тарафынан күр әтелгән ҙур ярҙам әм иғтибар.

Сибай төбәк яҙыусылар ойошма ы киләсәккә ҙур пландар менән йәшәй, ил амланып ижад итә. Әйҙәгеҙ, уға ошо эштәрендә уңыштар теләйек.

**Хәйҙәр ТАПАҠОВ.**
**Сибай төбәк яҙыусылар ойошма ы етәксе е.**

---

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА**

## *Таң*

*Яңы таңдың ыҙылыуы*
*Сорналып ҡош моңона*
*Бешкән икмәктәй ҡояшты*
*Тау аша ына она.*
*Йылға өҫтө – алтын бөҙөр –*
*Ҡояш юлы нур ғына.*
*уҙып ыйыр баҡырыуы*
*Ғәм уята, борғолай.*
*Әтәстәрҙең иң шәптәре*
*Ҡоймала өрән уға.*
*Егәрле еңгәләр бара*
*Иртә таң менән ыуға.*
*Көңгөр-каңгыр, шаптыр-шоптор –*
*Иртәләре – хәрәкәт.*
*Иртә торған бәндә енә*
*Хоҙай бирер бәрәкәт.*
*Яҙғы ауыл уяныуы*
*Дауамлы бер йыр бына.*
*Ошо моңға иҫең китеп*
*Иләҫләнеп тор ғына!*

## *Башҡорт баштарына башҡорт етә*

*Башҡорт баштарына башҡорт етә,*
*Был хәҡиҡәт икән – ышандым.*
*(Баш бирмәгән, үҙе юҫыҡланған*
*Ажғыр аттар ғына тышаулы).*
*Башҡорт баштарына башҡорт етә,*
*Иҫән әле Мөҡсин, Ямғурҙар.*
*37 нисә ҡабатланып,*
*Ил ҡаймағын өҙөп алырҙар?*
*Үҙеңдеке үҙеңә яу бөгөн –*
*Түтәлдәрҙә кәмей аҡтамыр.*
*Ҡурай остарынан ҡан тама,*
*Ҡасан ғына унан аҡ тамыр?*
*Башҡорт баштарына башҡорт етә,*
*Ҡәберҙәрҙе тәрән ҡаҙмағыҙ.*
*Аҙарынмай башҡа бәлә килмәй,*
*Башҡорттарым, шуны аңлағыҙ,*
*аҙмағыҙ!..*

## *Парадокс*

*Ярҙарына ыймай ятҡан була –*
*Алағуян ыуын әйт әле!*
*Ҡуш услап та ирпеп алып эс әң,*
*Ерҙең тәм генә ен әйтәме?!*
*Ҡомаҡ ултыртмаҫ ул баҡырсаңа –*
*Йомшаҡлығы йәнең иретер.*
*ирәк- аяҡ ҡалған өйәнкенең*
*Шыбырлауын мәңге сер итер.*
*Буръяҡтарҙан йылға арыныр бер –*
*Тәбиғәттә ябай бары ла.*
*Әҙәм күңеленең бысрағынан*
*Йән йәнселә, йөрәк ярыла.*

## *Күрмәнең*

*Күңел сөмбәйеңә төшә ал ам,*
*Инер инем йөрәк түреңә.*
*Уй-ауыңда сырмалыр ҙа инем,*
*Балыҡ булыр инем үҙеңә.*
*Күңел сөмбәйеңә төшә алмам,*
*Ҡармаҡ алған унда бүтәндәр.*
*Уй-ауыңда – алтын балыҡ – күптән –*
*Бәхетемдән мәхрүм иткәндәр.*
*Өйрөлтмәктә яңғыҙ өйрөләм –*
*Тарта мине ағыш сөмбәйе.*
*Тик ин генә ике томбойоҡтоң*
*Бере улығанын күрмәнең.*

**Сәрүәр ҒӘЛӘҮЕТДИНОВ**

## *Хәләл ризыҡ ҡапҡаным*

*Аҫыл таштар әҙләп ил гиҙмәнем,*
*Йәшәмәнем байлыҡ ҡоло булып.*
*Ҡай берәүҙәр белмәй кесе булып,*
*Ҡай ы берәүҙәр бит – оло булып.*
*Аҫылташтар әҙләп ил гиҙмәнем,*
*Шөкөр ҡылдым эшләп тапҡанға.*
*Ҡыҙыҡманым төҫлө буяуҙарға,*
*Ым ынманым көмөш, алтынға.*
*Ҡай берәүҙәр йыйҙы*
*тауҙай байлыҡ,*
*Хәләлдәре булды, харамы.*
*Нәфселәре ҡанмай, аҙаҡ улар,*
*Айырманы аҡты-ҡараны.*
*Кәрәк түгел миңә тауҙай байлыҡ,*
*Бар байлығым –*
*эшләп тапҡаным.*
*Сит табындар ыйы миңә булмаҫ,*
*Хәләл ризыҡ бул ын ҡапҡаным.*

## Йәй хозуры

*Ҡупшылап та атай кәбән ала,*
*Ос әнәге уйнай ҡулында.*
*Ә мин и ә, өлгөртәйем тиеп,*
*Күбә тарттырамын болондан.*
*Әсәкәйем күбә ебәргәндә,*
*Элмәкләп тә бәйләй арҡанды:*
*– Атайыңа оҡшап,*
*тилбер ең, – тип*
*Тупылдатып өйә арҡамды.*
*Көтөп алам әр йәй бесән мәлен,*
*Иң сәмле эш – кәбән алган мәл.*
*Күгүләндә аунап ял иткәндә*
*Мәтрүш сәйе эсеп алган мәл.*
*Арыным инде, ҡуҙгалмаҫлыҡ ти әң,*
*Табандарҙан инә яңы хәл.*

## иңә бул ын

*Мин – яҙҙарҙы, яҙҙар мине*
*Бик тә агынган икән.*
*Ғашиҡтар ҙа бөгөн таңда*
*Яҙга табынган икән.*
*Сыйҙым ага, ыуҙар таша,*
*Эй, быйылгы яҙҙары:*
*Зәңгәр күҙем, иңә бул ын*
*Күңелемдең наҙҙары!*

**Инсур АРТУР**

***

*Япраҡтарҙың шундай матур сагы,*
*Ғүмерҙәрҙең көҙө уларҙа.*
*Ҡәҙимгелек төҫө ыйган мәл был,*
*Юҡ, кәрәкмәй өҫтәп буярга.*
*Яҙҙар, йәйҙәр шаңдауы ла бында,*
*Бәхет- агыш, өйөү-көйөүҙәр...*
*Ҡырауҙар бар ниҙер аңгартҡандай,*
*Ысыгы бар – йәшме төйөлгән.*
*Булганы – бар!*
*Шөкөр, агынырлыҡ,*
*Хәтерләрлек мәлдәр әҙ түгел.*
*Япраҡтарга аунап хыял тыуа,*
*Тимәк, сабый әле был күңел.*
*Ел ялына тагы йәбешербеҙ,*
*Алтындарҙы күмгән ҡар яуыр.*
*Яҙ көттөрөп тагы килер әле –*
*Нуҡта күрмәгәне миҙгелдең.*

***

*Мин, юлдарҙан үткән сакта,*
*Тапанам уҡмағымда.*
*Гүйә, керешкә ҡуймайҙар*
*Башаҡлы уҡ сағымда.*
*Ә йәшендәр тертләне бит*
*Ҡосаҡта ятҡанымда.*
*Көн үндермәк булдылар бит*
*Күҙ нурын ватҡанымда.*
*Доғамды ла гәйбәт тигән*
*Әҙәм бар яндарымда.*
*Намыҫ ҡына, ғашиҡ, тине*
*Йөрәкте атҡанымда!*

***

*Йөрәгемде онтап күккә сөйәм,*
*Беҙҙең өсөн ян ын йондоҙҙар.*
*Аҙашҡандың күҙе күккә баҡ ын,*
*Өмөттәр бит үнмәй,*
*Той ондар.*
*Ғашиҡтарга үнмәҫ осҡон булыр,*
*Балҡып тор а хатта бер сатҡы.*
*агынгандар табыр тура юлды,*
*Беҙ беләбеҙ яҙмыш бар сакты.*
*Йондоҙҙар бар,*
*Биләп галәмдәрҙе,*
*Йондоҙлоҡҡа әр саҡ ойошҡан.*
*Йөрәгемде онтап күккә сөйәм,*
*Бәхет көтәм мин дә тормоштан.*

**Рәмилә ИБРА ИМОВА**

## *Гөлмөн*

*Баҙнат ыҙлыҡ менән ҡыйыулыҡтың*
*Ике е лә минең үҙемдә:*
*Мин бит – гөлмөн шаулап сәскә атҡан*
*Ғүмеренең моң оу көҙөндә.*
*Сәскә- хистәр шиғри юлдар булып*
*Теҙелгәндә ҡағыҙ битенә,*
*Мин бәхетле, йомарт, гәйрәтлемен,*
*Быны күреп дошман сигенә.*
*Ҡабатланмаҫ биҙәк- сәскә менән*
*Сыбарланган гүмер юлдары.*
*ушты алыр гөлләмә ул – тормош,*
*Ә мин и ә гөлмөн ни бары.*

## *Миләш*

*Тәлгәш-тәлгәш ҡыҙыл миләш*
*Ап-аҡ ҡыш урта ында –*
*иҫкәндереп уйландырҙы*
*Йәшәйеш тура ында.*

*Миләш бит ул – алҡын ҡышҡа*
*Көҙҙөң суҡ-суҡ сәләме.*
*Миләш төҫлө оҡландырғыс*
*Була ығыҙ киләме?*

*Моң оу көҙҙөң ары төҫөн*
*Алмаған ул үҙенә.*
*Ауырлыҡты еңеп була,*
*Ышан аң тик үҙеңә.*

*Миләш үҫкән ер әйләнгән*
*Ғашиҡтар төйәгенә.*
*Бәхетле була кешеләр*
*Эскер еҙ өй ә генә.*

*Миләш, миләш, утлы тәлгәш –*
*Наҙлыҡай ылыу кәләш.*
*Миләш, миләш, тоғро бул, тип*
*Бирә ул беҙгә кәңәш.*

## *Йәш килен*

*Йәш килен төшкән ауылға,*
*ыу башлай бикәстәре.*
*ынсыл ҡараш ала кемдер,*
*Йылмая өйгән йәре.*

*Биҙрәләрҙә – сәскә-биҙәк,*
*Көйәнтә е семәрле.*
*Аяҡ баҫыуын ҡарағыҙ:*
*Килен булыр егәрле.*

*Тфү-тфү! Күҙ теймә ен*
*Берәүҙең бәхетенә!*
*Йүгерә-атлай ҡайтып бара,*
*ыу алып йә әт кенә.*

*Тап шундайға әйтәләрҙер,*
*Ҡалаҡҡа, тип, ал да йот.*
*Гүйә, Бәхет шишмә енән*
*Өйөнә ул ташый ҡот.*

## Фирүзә АЛСЫНБАЕВА

***

*Ер менән Күк уйнай серенада,*
*Ила и мәл яҙғы баҡсала.*
*Ҡот-бәрәкәт ерҙән урғылғанға*
*Бар тереклек итә тантана.*

*Йән  өйөнә, йән ҡыуана бында,*
*Нур-ептәрҙән нағыш сигелә.*
*Ошо йырҙы тыңлап китер инем*
*Бер ҡайғы ыҙ шатлыҡ иленә.*

*Алмағастың сағыу күлдәгенә*
*Мәрйен төҫлө бал ҡорт(о)   ырыған.*
*Ә сәскәләр терелгәндәр, гүйә,*
*Яҙ туйының гәмле йырынан.*

*иҙмәйем дә тәндең ауырлығын,*
*Йәнем иҙерәй моңло даръяла.*
*Әйтер ең, ул игеҙәген тапҡан*
*Ик еҙ-сик еҙ яҡты донъяла.*

## Өләсәйемә

Мин аңланым шуны:
ин – мин үҫкән
Уңдырышлы тупраҡ.

Р. Хисаметдинова, “Өләсәйемә”.

*Аҡ әбейҙәр була: кәңәш  орап,*
*Кеше өҙөлмәй уның йортонан.*
*Исеме лә, үҙе – есеме лә*
*Пакланған бит иман ҡотонан.*

*Тиҫбеләрҙе күпме әйләндерҙең,*
*Туҡ ан тугыҙ тапҡыр ҡабатлап?*
*Иман теләр инең. Аҡ доғаңды*
*Ҡалалманым, өләс, мин ятлап.*

*Уйлы саҡта рухың уйҙаш миңә,*
*ине  әр саҡ иҫкә төшөрәм.*
*инән отҡан*
*Шиғри доға менән*
*Әҙәм күңелдәрен өшкөрәм.*

**Рузидә ҮТӘШЕВА**

## *Көҙгө урман*

*Көҙгө урман, биҙәнгән ең,*
*Тик алтындан нагыштарың,*
*Хайран ҡалдым хозурлыҡҡа,*
*Юғалдылар ағыштарым.*

*Ер-әсәмдең күкрәккәйен*
*Нуры менән ҡаплай урман.*
*Гүйә, улар шыбырлайҙар:*
*Тиҙҙән килә алҡын буран,*
*Ел-дауылда беҙгә уран.*

*Еркәйемде ел-дауылдан*
*Ҡурсалар гел изге урман.*
*Киләсәкте ҡурсаларлыҡ*
*Тыуырмы уң уҙамандар,*
*Ҡасан тыуыр шул уҙаман?*

**Рәшиҙә МАНСУРОВА**

## *Ыҫлы ҡорот*

*Күстәнәскә килгән ыҫлы ҡорот,*
*Хуш еҫтәре өттө зи енде.*
*Беләм, инәй, әйтер теләгеңде,*
*Байрам килде, нурлап күңелде.*
*Ыҫлы ҡорот, ырыҫымдан бер ҡот,*
*ыйлан, балам, ағышыңды онот.*
*Өҫтәлемдә ята ыҫлы ҡорот,*
*Бармаҡ эҙе оло инәмдең.*
*Ил инә е – инәм, ҡарашыңда*
*Сабырлы саф аҡыл күрәмдер:*
*Ыҫлы ҡорот, ырыҫымдан бер ҡот,*
*ыйлан, балам, ағышыңды онот.*
*Бер йомғаҡҡа ыйған туғай еҫе,*
*Аҡта тәмен иҙәм күрәндең.*
*Татлы мунсаң, ҡайнар самауырың,*
*Шифалары аят-сүрәңдең.*
*Ыҫлы ҡорот, ырыҫымдан бер ҡот,*
*ыйлан, балам, ағышыңды онот.*

## *Моңом ҡайт ын*

*Уйындарҙан йүгереп ҡайтҡаным бар.*
*Иркә ҡосаҡ, гәм еҙ бала саҡ.*
*Әсәйемдең төҫө – сын- сынаяҡ,*
*Иҫтәремдә мәңге ҡаласаҡ.*

*Алыҫтарҙан осоп ҡайтҡаным бар.*
*Мөхәббәтем, аҡлан, тиле саҡ;*
*Гармун моңо, тау башында усаҡ –*
*Күңелемдә мәңге янасаҡ.*

*Донъям, тиеп донъя ҡыуғаным бар,*
*Баҡсам тулы емеш, гөлсәсәк.*
*Яҙмағаны яҙмаç. Яҙғандары*
*Юлдарыма әле үçәсәк.*

*Йы ан иңләп йөҙөп ҡайтыр булам,*
*Ауылыма болот ағыл а,*
*Шул болотҡа ҡарап бер йырлайым,*
*Моңом ҡайт ын тыуған яғыма.*

## Ҡайтыр өсөн китәм

*Киттем үк еп. Киттем баçалмайса,*
*Яр ыуҙарым сиктән ашҡайны.*
*Тубыкланып йыйған тормошҡынам*
*Албаçтылай ҡаршы баçҡайны.*

*Ашыҡмағыҙ! Ҡайтыр өсөн китәм!*
*Сәскә атыр минең баҡсалар.*
*Үткән ғүмер үҙәгемде өтмәç,*
*Күршеләрем ҡаршы ал алар.*

*Атлап кит әм, осоп ҡайтырмын мин,*
*ынған ҡанаттарым төҙәл ә.*
*Әле китәм... Онот үпкәңде, тип*
*Юлдарыма сығып инәлмә.*

**Фәрүәз ӘБДРАФИҠ**

## Тере ыу

*инең менән ҡайтҡы килә,*
*Ҡайтып булмай – эшем бар.*
*ине үлер сиккә етеп*
*Яратыусы кеше бар.*

*Ул – мин. өйөү тулҡынында*
*Кәмә булып сайҡалам.*
*Түңкәреләм, күтәреләм,*
*Күккә теймәй саҡ ҡалам.*

*Көлдөрә ең, үлтерә ең,*
*Эсерә ең тере ыу.*
*... ине өйөү – мең ҡат үлеп,*
*Мең ҡат ҡабат терелеү.*

## *Мөхәббәт усағында*

*Утыҙ минут – утыҙ мең ут*
*Мөхәббәт усағында.*
*Утыҙ минут ҡына булдың*
*ин минең ҡосағымда.*

*Өн өҙ ҡалып ин тыңланың*
*Йөрәктәр өйләшеүен.*
*Ғашиҡтарҙың бәхетенән*
*Йәшермәй көнләшеүен.*

*Яңғыҙ ҡайын ағасына*
*Кәкүк килеп ултырҙы.*
*Ултырҙы ла: “Мин кәкүк!” – тип*
*Утыҙ тапҡыр ҡысҡырҙы.*

*Кәкүк шулай өҙгөләнде*
*Яңғыҙаҡ булғанына.*
*...Утыҙ тапҡыр бышылданым*
*“ өйәм!” тип ҡолағыңа.*

**Зөһрә ФӘЙЗУЛЛИНА**

## *Атай үҙе*

*Таңда тороп, фатиха ын биреп,*
*Озатыр ине атай улдарын.*
*Йәшереп кенә әсәй күҙен өртә,*
*Яурынымда атай ҡулдары.*

Ҡушымта: Атай, атай, әле аман иҫтә
Беҙ хушлашҡан изге шул иртә.
“Исем атма, бер үк ебеп ҡалма,
Ир-егеттәр үтмәҫ юҡ кәртә”.

*алдат бутҡа ының төрлө тәмен,*
*Татып ҡайттым өйҙө ағынып.*
*Атай үҙҙәренең бөйөклөгө,*
*Күңелемдә ҡалды нығынып.*

*Ҡанат ҡуйыр ошо үҙҙәреңде*
*Ҡабатлармын мин дә улыма.*
*Атай үҙен иманылай күреп*
*Тота белгәндәрҙең юлы уңа.*

***

*Йәшер әм дә ҡай саҡ серҙәремде,*
*Әсәй, ҡайҙан үтә күрәең.*
*Тетрәнеүҙән, ҡайғы, шатлыҡтарҙан*
*Нисек түҙә, әсәй, йөрәгең?*

*Дуҫтар гәфү итмәҫ яҙыҡтарҙы*
*Кисерә тик әсә йөрәге.*
*Тормошомдоң үнмәҫ ҡот-ырыҫы,*
*Йәшәүҙәрҙең алтын терәге.*

*Әсә өйөүенә тиңләшерлек*
*Бармы икән ерҙә үлсәүҙәр.*
*Киткәндә лә беҙҙән мәңгелеккә,*
*Балам, тиеп ығыла әсәйҙәр,*
*Бала, тиеп өҙөлә әсәйҙәр.*

## *ағыш*

*Бына тағы юлдар саҡыралар,*
*инән китәм, әсәй, айырылып.*
*Күңелдәге болоҡ оуҙы еңеп,*
*Ҡул болғаным артҡа ҡайырылып.*

Ҡушымта: Әсәкәйем, йылы ҡарашыңдан
Балҡып китте ҡабат был донъя.
Балам, тиеп, өҙөлөп өндәшеүҙән
Сорналғандай булдым наҙ-моңға.

*ағыштарға тулы беҙҙең хаттар*
*Араларҙы бәйләр әлегә.*
*Тыныс булсы, мин ис ынатмамын,*
*Бер ҡайтырмын, әсәй, эргәңә.*

*Беләм, әсәй, изге теләктәрең*
*Йән ҡурсалар хәтәр мәлдәрҙә.*
*Әсә фатиха ын алғандарҙы*
*Бәхет көтә тыуыр көндәрҙә.*

## *Офоҡтарым*

*Көлдә янып ҡабат тыуған*
*Мин әкиәт ҡошомон.*
*Ҡанаттарым елпеп алып,*
*Йыраҡтарға осормон.*

Ҡушымта: Йәшәү дәртем үрелмәгән,
Өмөттәр өҙөлмәгән.
Саҡырып тора офоҡтарым
БыҒаса күрелмәгән.

*Ҡаурыйҙарым уңалмаған,*
*Яраларым улҡылдай.*
*Ташҡа әйләнмәгән йөрәк,*
*Өмөт-осҡон йылҡылдай.*

*ынауҙарҙы еңеп үтеп,*
*Ҡаяларҙы артылдым.*
*Аҡ юл теләп юлдарыма*
*Елдәр ҡалды артымдан.*

**ПАРСАЛАР**

## Васыят

– Кил әле, ҡартым. Эргәмә ултыр, әйтер үҙҙәрем бөтмәне бит. Мин түшәктә оҙаҡ ятмам, ахыры. Юҡ, тимә. Үҙ хәлемде яҡшы беләм. Булыр-булмаҫ медсестра, врачтар кәрәкмәй ҙә. Әйткәнде тыңла. Кәфенлек, хәйер-саҙаҡа өсөн алған нәмәләр шифоньерҙың аҫкы кәштә ендә ята. Мине әсәйем янына ҡуйыр ығыҙ. Кейем- алымды ҡыҙҙар алыр. Үҙҙәре киймә ә лә, үтеп, балаларына бирәй нәмә өтмәләрҙәр. Ауыр заманда ярап ҡалыр. Мал-тыуарҙы таратып ташлама. Яңғыҙ йәшәй алмаҫ ың, балалар ҙа ауылға ҡайтырға риза түгел, ҡырҡ көнөмдө үткәргәс, өйлән.

Тик Хәсбиямалды алма. Ул сихырсы бит. иңә сығам тип, мине харап итте. Үҙеңде лә им-том итер әле. Ауырып, ин дә донъя ҡуйыр ың. Бөтә ҡаралты уға ҡалыр...

Зөмәрәгә лә өйләнмә. Ул әпрә менән уңмаҫ ың. Өйө гел бола. Өҫбашын да ҡарай алмай. Аш- ыу яраштыра белмәй бит ул. Мин ине тәмле-татлы аҙыҡҡа өйрәткәнмен шул...

Хөснә менән дә йәлсемәҫ ең. Белгәне – ауыл ҡыҙырып, ләстит атыу. Донъя ында эше лә юҡ. Эскеләй ҙә шикелле. Әйберҙе атып бөтөр йә тыумаларына оҙатыр, яуыз...

Тағы кем бар? Йүнле бисә-сәсә юҡ икән шул. Ни эшләр ең инде? Бахырҡайым... Нимә әйтергә лә белмәйем бит. Эй, әттәгенә е... Бик йәл ең. Юҡ! ине әллә кемдәр ҡулына ҡалдырып китергә башыма тай типмәгән. Торғоҙ, больницҡа апар, бәхетеңә күрә Алла у субхәнә ү үә Тәғәлә шәфҡәтен насип итер әле...

## Ике хат

“ ауғынамы, әхирәткәйем. Күптән күп, суҡтан суҡ сәләмдәр ҡабул ит. Күрешмәгәнгә байтаҡ булып китте. Күпме ыуҙар аҡты. Бер осрашып, йәш саҡтарҙы хәтерләп, төнө буйы гәпләшеп ала ы ине. Тормош хәҙер икенсе шул. Минең ғаиләлә үҙгәреш бар. Донъям былай бөтөн. Ике балам үҫеп килә. Тик ирем хөртәмеш булып сыкты. Мансурҙы әйтәм. Эштән ҡайта ла телевизорға төбәлә, донъяла ҡайғы ы юҡ. Әңгәмәләшәм ти әң, Гоголдән Гегелде айырмай. Бисә тип иркәләй ҙә белмәй. Өйгә аҡса ын да минән аҙ килтерә. Бик эсеп бармай ҙа ул. Тик

сит кеше кеүек. Әрләп тә, иплəп тә әйтеп ҡараным. Булмай икән булмаған сөсө күмәс баҙарҙа, тигәндәй. Шунан бер йәнем көйгән саҡта костюмын, мандолина ын тоттороп сығарҙым да ебәрҙем. Хәҙер рәхәт. Уға нимә яраштырайым тип ултырмайым, ыштанын йыуып ыҙаламайым. Күңелем дә тыныс. Тик...

Эй, ярар. Әллә ниҙәр яҙҙым шикелле. Яуап көтәм, балалыҡ дуҫың – Лилиә”.

“Шәпме, әхирәткәйем. Хатыңды алып ҡыуандым. Исән- ау икән ең. Минең хәл иңә мәғлүм түгелдер әле. Өс бала менән тол ҡалдым бит. Ирем оҙаҡ ауырып япты. Вафатына ике йыл. әйбәт кеше ине. Йәне йәннәттә бул ын. Ир зат ыҙ ҡаралты ныҡ туҙҙы. Аптырағас, былтыр берәүҙе индерҙем. Эшкә-нигә оҫта икән. Ҡулынан килмәгәне юҡ. Донъям бөтәйеп китте. Өйөмдә үтеп, яңынан кәртинкә кеүек итеп ултыртты. Балаларым тәүҙә “ағай” тиҙәр ине. Хәҙер атай” тип әйтә башланылар. Уларҙы үҙенекендәй күреп ярата шул... мине лә. өйләшеп үҙебеҙ бөтмәй. Ваҡыт-ваҡыт байрам я ап ташлайбыҙ. Ул мандолинала уйнай. Мин ҡыҙҙарым менән бейеп зыҡ ҡубабыҙ.

Мин ни, электән йыуаш кеше, ауыр үҙ әйтмәйем, ыңғайына ҡуям. Әхирәткәйем, ҡыуанысым эсемә оймай. Ир менән донъя көтөү үҙе бер бәхет икән ул. Әхирәткәйем, тиҙҙән ғаиләбеҙ ишәйә. Хуш булып тор.

Йәмиләң.

**P. S.** Әйткәндәй, ирем инең Мансурың икән дә ба а”.

Ошо ерҙә Ишмөхәмәт ҡарт: “Ирҙе ир иткән дә, хур иткән дә бисә”, – тип әйтер ине.

**Фәрит ӘБҮБӘКЕРОВ.**
**Баймаҡ районы,**
**Иҫке Сибай ауылы.**

# ҠАЛА КЕЙӘҮЕ

## УЙМАҠ ХИКӘЙӘ

Күршелә  генә йәшәгән Мөхәмәтдиндең үҙҙәренең еткән ҡыҙы эргә ендә сыуалыуы бер  ҙә генә күңеленә ятманы Хәмдиәнең. Көн  айын майға ҡатҡан фуфайка кейеп, өҫ-башы бысраҡтан арынмаған ауыл егете өсөн  үҫтермәне ул берҙәнбер,  ыу  өлөгө кеүек  ылыу Ләйсәнен! Үҙенең ғүмер буйы ауылда  ыҙалап  йәшәүе лә еткән. Көн  айын бер үк тормош: яҙ  ет ә — баҡсаңда соҡоноп көнөң уҙа, йәй — бесән тип йүгерә ең, ҡыш – мал-тыуар менән гөж килә ең. Шуға, исма ам, ҡыҙым рәхәтләнеп йәшә ен тип, ҡалаға уҡырға ебәрҙе. Институт хәтлеменә инә алмағас, этеп-төртөп тигәндәй, бухгалтерҙар курсына  урынлаштырҙылар. Ҡыҙы ялға ҡайтҡан  айын, Хәмдиә уға, нисек тә ҡалала урынлашырға тырыш, тип тәтелдәне, ире Фәттәх өндәшмәне.

Күп көттөрмәй, ҡыҙы бер ялында ят  егет эйәртеп  ҡайтма ынмы!  омғол буйлы, төҫкә лә сибәр генә, кейгән кейемдәре лә  килешеп тора. Исеме лә матур  ымаҡ: Эдик. Ни ти әң дә, телеңде  ындырырҙай теге Мөхәмәтдин түгел инде. Тик ире Фәттәхкә генә егет бик оҡшап етмәне, бигерәк “шыйыҡ”, йәнә е. Ауылда беренсе тапҡыр икән –  ыйырҙы, кәзәне күреп аптыраны. Бешергән бәлештәрҙе маҡтап-маҡтап ашаны. Хәмдиә егеттең бер алдында, бер артында өтәләнде. Әсә енең берҙән-бер улы икән. Әсә е спекулянт, әй әттәгере, эшҡыуар. Бик хуп, тип эстән генә ҡыуанды Хәмдиә.

Ике ай тигәндә буласаҡ ҡоҙағыйҙан хат килеп тә төштө. Улыма ҡыҙығыҙ,  еҙҙең йорт-ҡурағыҙ бик оҡшаған, икенсе йомаға килеп етегеҙ, туй ресторанда үтәсәк, тип яҙған. Хатты Хәмдиә ҡат-ҡат уҡыны, эшләгән урынында ла, күршекүләндәргә лә күр әтте. Бары Фәттәхе генә, ҡабаланмайыҡ, күргән-белгән кешеләр түгел, тигәйне лә, тиҙ япты унын ауыҙын Хәмдиә е: “Туй ресторанда үтәсәк,  инән бер тин аҡса  орамағандар”.

Әйткән көндәренә, сумкаларына күстәнәстәр тултырып, Хәмдиә менән Фәттәх ҡалаға  юлланды. Вокзалда уларҙы ҡыҙы менән буласаҡ кейәүе ҡаршыланы. Машинаға ултыртып, туп-тура ЗАГС   арайына елдерҙеләр. Шунда уҡ бер бүлмәлә ҡыҙына туй күлдәге, туфли алдылар. Тик баяғы  кейәү тигәне, ҡабаланып, аҡса- ын өйҙә онотоп ҡалдырған икән. Ярай, Хәмдиәнең аҡса ы бар ине, биреп торҙо... үтескә. Ни эшләй ең, үҙ балаларың бит.

ЗАГС-тан  уң тура  ресторанға инделәр. Йәнең ни теләй — бары ы ла өҫтәлдә, ҡош  өтө генә  юҡ. Ҡоҙағыйҙың туған-тыумаса ы күп икән, кейәүҙең дә дуҫиштәре етерлек булып сыҡты. Туйғансы ашанылар, рәхәтләнеп эстеләр. Инде хушлашабыҙ тип торғанда, төп ҡоҙа менән ҡоҙағыйҙы директор саҡыртма ынмы? “Бына счет”,– тип бер ҡағыҙ киҫәге  уҙҙы. Фәттәхе  ҡараны ла өндәшмәй генә ҡағыҙҙы Хәмдиәгә  уҙҙы. “Нимә ул?”— тине бер нәмә лә аңламаған Хәмдиә. “Ун

мең",— тине Фәттәхе. "Ниндәй ун мең?"— тамам аптыраны Хәмдиә. "Столовый өсөн",— тине тешен ҡыҫып Фәттәх. "Ә ҡоҙағый ҡайҙа?!"— тип ян-яғына ҡаранды Хәмдиә. Шул саҡ өтәләнеп ҡоҙағыйы ла килеп инде. Сумка ын бер асты, бер япты, эҙләгән нәмә ен таба алмағас, ҡысҡырып илап та ебәрҙе. Баҡ аң, туйға тип алып килгән аҡса ын урлағандар икән. Аҡса юҡ икәнен белгәс, ресторан хужа ы, асыуланып, милиция саҡыртырға итте. Расписка яҙып, аҡсаны өс көндән килтерәбеҙ, тип саҡ ҡотолдолар.

Ҡоҙағыйҙың йәшәгән фатиры бер бүлмәле генә икән. Таң атҡансы йоҡо ҡайғы ы булманы, ҡоҙағыйҙары үҙенең а -зарын өйләп үткәрҙе. Эшләгән заводында ҡыҫҡартыу булғас, алып- атыу менән шөғөлләнә башлаған, ләкин, процентҡа алған аҡса ын ваҡытында түләмәгәнгә, атыуҙан файҙа сыҡмаған, отолоп ҡына ҡалған. Бына хәҙер уңғы аҡса ын да урлатҡан. Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар алдында шундай оятлы булдым, тип ыҡтаны. Уны йәлләп, Хәмдиә иренә ҡарап алды ла: " ыйырыбыҙ икәү, бере ен тотонорбоҙ инде",— тигән булды. Шатлығынан ҡоҙағыйы Хәмдиәне лә, Фәттәхте лә ҡосаҡлап-ҡосаҡлап үпте, аҡсаны кире ҡайтарырға ҡатҡат вәғәҙәләр бирҙе. "Дә,— тип ҡуйҙы Фәттәх. Ҡыҙҙары кемдәргә килеп юлыҡҡанын аңлап, иплән кенә ҡатынына: – Әллә ҡыҙҙы алып ҡайтайыҡмы?"— тип ысҡындырҙы. " ин нимә, ҡарт тиле, аҡылыңдан яҙҙыңмы? Бөтә ауыл бот сабып көләсәк бит",— тип уға башҡаса ауыҙ асырға ла ирек бирмәне ҡатыны.

Ауылға ҡайтҡас, ҡазаланған тигән ылтау менән тиҙ генә ыйырҙарын уйып, баҙарға илтеп атып, аҡса ын ресторан хужа ына тапшырып ҡайттылар. Был турала бер кешегә лә ләм-мим: белеп ҡал алар, ояты ни тора!

Ял айын балалар ауылға ҡайтты, Хәмдиә менән Фәттәх уларҙың сумкаларын тултырып, оҙатып торҙо. Кейәү тигәндәре ялҡау булып сыҡты, бер эштә лә оҙаҡ ҡыбырлай алманы. Ауылға килгән арала ла бар белгәне балыҡ тотоу, ыу буйында ҡыҙыныу йә булма а, бала-саға кеүек, күбәләк баҫтырыу булды.

Бер-бер артлы ике балалары тыуҙы, "уны ы инде баяғы кейәүҙе армиянан алып ҡалыу өсөн" тигән булдылар. Ҡыҙҙары ла, эҙләп-эҙләп эш тапмағас, урам епереүсе булып эшкә төштө, унын өҫтәүенә, күп ҡатлы йорттарҙа баҫҡыс йыуа. Ни эшләй ең, ике баланы, ирҙе аҫрарға кәрәк бит.

Уларға ярҙам итәбеҙ тип, хәҙер Хәмдиә менән Фәттәх, ике ыйыр өҫтөнә, ун баш сусҡа көтә. Көнө буйы шулар артынан йүгереп, кисен аяҡтан яҙып, бер-бере е менән өйләшә лә алмаҫлыҡ булып йығылып яталар. Яңыраҡ президент фондынан балаларға фатир алып бирҙеләр, хәҙер ай айын шуның взносын түләйҙәр.

Бер ҡайтҡанында ҡыҙы: "Автобуста йөрөүе ауыр, машина кәрәк",– тип ысҡындырҙы.

"Ах,– тип көр өнә Фәттәх эстән генә, күрше ендә шыңғырҙап торған ҡарағайҙан бына тигән өр-яңы йорт алып ингән Мөхәмәтдингә ҡарап. – Мал-тыуары ла ишле, ҡатынын да бына тигәнен алды. Уҡытыусы уны ы. Бар эште лә емертә Мөхәмәтдин. Күршеләренә лә ярҙам итергә өлгөрә".

Фәттәх иҙә: Хәмдиә лә көн дә иртән үҙҙәренең өй эргә енән ҡурсаҡ ымаҡ кейенеп, ҡупшы баҫып үткән күрше йәш ҡатынға көнләшеңкерәп ҡала, тик, ауалығына барып, бер ни өндәшмәй, көр өнөп кенә ҡуя.

**Әминә ЯХИНА.**

# “ЕТЕ ЫРЫУ” БЕҘҘЕ КӨТӘ

## ОЧЕРК

Салт ҡояшлы көндөң йәме булып Урғаҙа йылға ы берсә уйнаҡлап, берсә моңланып, берсә ағышланып аға ла аға. Донъя иллеген иҙгәнең йә тойғаның бармы? Булма а, мөғжизәүи сер йомғағын аҡлаған Баймаҡ районының ожмах мөйөшө – Ман ыр ауылына килеп кит. Йән тыныслығы, күңел дауа ы табыр ың. Эйе, бында әр ялан, әр үҙән, ҡая – тарих хәтере. Урғаҙа аша сығып, тау итәге буйлап кит әң – ер еләге түшәлеп үҫә, үргәрәк күтәрелеп, шыр селеклекте йырып үт әң – ҡояш нурҙарынан тирткән тау сейә е... Кире боролоп, Урғаҙа йылға ы аша сыҡҡас та, мөғжизә яланына тап булыр ың. Бында бөйөк Мөжәүир хәҙрәт үҙе бесән сапҡан, донъя йөрәген тыңлаған, ярҙамына мохтаж кешеләрҙең ҡай ы тарафтарҙан килерен шәйләү генә түгел, уларға ҡаршы йүгереп сыҡҡан урындарын күреп хайран ҡалыр ың. Заманында кемдәр генә килеп китмәгән был ерҙәргә: бөйөгө лә, байы ла, фәҡире лә. Ман ырҙа йәшәгән әр кешенең ғүмере төбәк тормошонда булып үткән ваҡиғаларҙа ҡатнашҡан кешеләр менән бәйле. Хөснөтдин Хәйбулла улы Хәмитов үҙенең ауылдаштары менән ысын мәғәнә ендә ғорурлана ала.

Тәбиғәт серҙәрен үҙ булмышына еңдергән, рухи мираҫыбыҙҙың айырылғы ыҙ йәдкәрҙәре – бөйөк күрәҙәселәр, мәғрифәтселәр Абдулла Сәиди, Зәйнулла ишан Рәсүлев, Мөжәүир хәҙрәт Сиражетдиновтар тура ындағы легендаларҙы атай-олатайҙарынан ишетеп, шуларҙан ут, ил ам алып, әҙәп төбө – матур ғәҙәт икәнен аңлап, аң-белемгә ынтылыуҙан башлап ебәрә үҙенең яҡты яҙмышлы ғүмер юлын Хөснөтдин Хәйбулла улы. Эйе, изгеләр исемдәрен телгә алыу тыйылған осор була ул замандар. Әммә, нисек кенә булма ын, кеше зи ененең мөмкинлектәре ҡыҙыҡ ындыра уны, сөнки ул бала сағынан төрлө-төрлө яҙмышлы кешеләрҙе күреп, кеше ҡәҙерен белеп үҫә. Батырлыҡ әм бахырлыҡ, яуыҙлыҡ әм изгелек кеүек дөйөм кешелек ҡиммәттәрен, әхлаҡи әм йы ани ҡанундарҙы үҫмер сағынан иҙә, тоя. Шуға ла, кеше күңеленә изге орлоҡтар сәсеү маҡсатында, уҡытыусы булырға хыяллана. Бала саҡ хыялы Хөснөтдин Хәмитовты Темәс педагогия училище ына алып килә. Уҡыу йортон уңышлы тамамлағас, хеҙмәт юлын башланғыс кластар уҡытыусы ы булып башлай. Тәүҙән үк халыҡ педагогика ының иң юғары ҡаҙаныштары менән ярашып та, даулашып та эшләргә тура килә йәш уҡытыусыға. Шул уҡ ваҡытта алдына оло маҡсаттар ҙа ҡуя: киң эрудициялы булыу, донъя мәҙәниәтен әм мәғрифәтен үҙләштереү, билдәле педагогтарҙың хеҙмәттәрен өйрәнеү. Үҫештең тәүге баҫҡысында уҡ абруйлы тәрбиәсе-уҡытыусылар Т.Аслаев, А.Ғәлләмов, М.Ғөбәйҙуллиналарҙан абаҡ алыу ҙа интеллектуаль бейеклеккә күтәрелергә булышлыҡ иткәндер уға. Шулай булма а, мендәр ара ынан айырылып сығыр инеме?

Балаларға белем әм тәрбиә биреү теләге уҡытыусыны Сибай ҡала ының 1-се мәктәбенә алып килә. Бында Хөснөтдин Хәйбулла улы башҡорт кластарын хәрби

әҙерлек әм төрлө фәндәрҙән уҡыта. Бәлки, ғүмеренең иң иҫтәлекле йылдары оло уҡытыусыларҙан тәжрибә туплау, ә йәштәре менән янып-көйөп эшләгән осоро булғандыр. Уҡыусылары уға үҙ күреп, яҡын итеп «Хөснөтдин ағай» тип өндәшеүҙәре бөтә борсолоуҙарын, шик-шөб әләрен оноттороп, артабанғы юлына көс-ҡеүәт, дәрт-дарман, ышаныс биргән. Ә бит, уйлап ҡара аң, ошо йылдар арауығында ул тәрбиәләгән балалар ара ынан башҡорт интеллигенция ының йөҙөн билдәләгән, йола, ғөрөф-ғәҙәттәрен яҡшы аңлаған, әхлаҡ-этика серҙәрен яҡшы үҙләштергән бер нисә быуын үҫеп сыҡты. Мәҫәлән, «Диниә» назаратының хәҙрәте Н.Ниғмәттулин, полковник А.Хәмиҙуллин, уҡытыусылар Н.Буркина, З.Ғөбәйҙуллина .б.

1-се мәктәп уҡыусыларын республика, Рәсәй кимәлендә ойошторолған туристик слеттарҙа ҡатнаштырып, призлы урындар яулауға өлгәшә ул. Был иҫтәлекле сараларҙы ҡаланың оло быуын уҡытыусылары бөгөн дә ҙур ғорурлыҡ менән иҫкә ала. Бер-бер артлы яуланған уңыштары коллегалары ара ында билдәлелек яуларға ярҙам итә. өҙөмтәлә, ошо әм башҡа күркәм сифаттары өсөн, 1964 йылда Х.Х. Хәмитовты Сибай ҡала мәғариф бүлеге мөдире итеп үрләтәләр. Ошолай башлана ла инде ихлас етәкселек итеүҙең сағыу бер миҙгеле. Заңы менән бергә заманы ла үҙгәрә. Ә ҡасан уң заманалар еңел булған? Шулай ҙа, әр замандың ауырлыҡтары булған кеүек, асыштары, өйөнөстәре, батырлыҡтары ла етерлек. «Хеҙмәт ҡотон өркөтмә әң, юл уңа, эш ҡарышмай»,– ти үҙе Хөснөтдин Хәйбулла улы.

Был осорҙа заман талаптарына яуап бирерлек итеп үҙгәртелә тәрбиә әм уҡытыу барышы. Балалар баҡсалары, төрлө учреждениелар күпләп төҙөлә, кадрҙарҙы туплау, уларҙың квалификация ын үҫтереү, алдынғы алымдар файҙаланыу буйынса ғәйәт ҙур эштәр башҡарыла. Республика буйынса Сибай мәғариф бүлеге алдынғылар рәтенә баҫа. Ошо әм башҡа юғары күр әткестәре өсөн Сибай мәғариф бүлеге ике тапҡыр Башҡортостан Хөкүмәтенең күсмә Ҡыҙыл байрағына лайыҡ була. Әйтеүе генә еңел, ә бит ҡай ы саҡ биләгән вазифа етәксенән ҡаты ҡуллы булыуҙы ла талап итә. Йәнә лә яурындарына ауыр йөк күтәрергә йөрьәт иткәндәрҙе тормош әр саҡ ынай: егәрлеләрҙе бейеклектәргә күтәрә, кәлгәүҙәрҙе түбәнгә тәгәрәтә. Ниҙәр генә кисер ә лә, Хәмитов тормош ынауҙарын уңышлы үтә. Сибай бәләкәй бит, кемдең кем икәнен әр кем белә, таный.

1972 йылда бер юлы бер нисә эшкә егелгән өлгөр етәксене Сибай педагогия училище ының директоры вазифа ын биләүгә күндерәләр. Ниәтләгән – тауҙы тишеп сыҡҡан тигәндәй, әр эште лә етеҙ, еренә еткереп, күңел биреп башҡарырға өйрәнгән кешегә өр-яңы эште башлап ебәреү әллә ни ҡыйын да булмай. Эште уҡыу йортоноң йөрәген тәшкил иткән көслө ижади коллектив туплауҙан башлай. Яҙмыш уға йәнә гүзәл мәлдәрҙән торған бер ғүмер арауығы бүләк итә. Ул үҙ ғүмеренең 26 йылы дауамында ыуҙа йөҙгән балыҡтай кинәнеп, бөтә Башҡортостанға ғына түгел, хатта Рәсәйгә кадрҙар әҙерләй. Уҡыу йортоноң матди-техник база ы камиллаша: бер нисә спорт, тамаша залы, ҙур ашхана, музыка бүлеге блогы, хеҙмәт бүлегенең ике ҡатлы корпусы, биш ҡатлы дөйөм ятаҡ төҙөлә. Сибай педагогия училище ы Башҡортостанда өлгөлө уҡыу йортона әүерелә. Шуға ла хеҙмәт уҡытыусыларын әҙерләүсе урта махсус уҡыу йорттары директорҙарының Бөтә Рәсәй кәңәшмә ен үткәреү өсөн ошо уҡыу йортоноң айланыуы осраҡлы түгел. Был – директорҙың тынғы ыҙ хеҙмәтенә оло ба а. Кешене өмөт әм камиллыҡҡа ынтылыу йәшәтә. Йылдар уҙған айын уҡытыусылар коллективы етәкселегенә заман талаптары ла артты. Уҡытыусылар шәхес булараҡ төрлө яҡлап үҫте. Юғары уҡыу йорттары система ына рәсми рәүештә яҡынлаштырыу фәнни нигеҙҙә тормошҡа ашырыла башлай. өҙөмтәлә уҡыу йортон тамамлаусыларға ҡыҫҡартылған программа буйынса әр кем үҙе теләгән юғары уҡыу йорттарында белем алыу мөмкинселеге булдырыла. Емеше лә оҙаҡ көттөрмәне. Бөгөн улар ара ында төрлө өлкәлә уңышлы хеҙмәт итеүселәр үҫеп сыҡты: Гөлфиә Аллабирҙина, Ал ыу Бәхти-

ева, Гәү әр Мөхәмәтйәнова, Гөлсөм Бикбулатова, фән кандидаттары Гөлсәсәк Сибаева, Илдар Хәмитов, Рөстәм Тураев, Азамат Көмөшҡолов, Рида Латипова .б.

Хөснөтдин Хәйбулла улының фекерләүенсә, уҡыу йортоноң умыртҡа өйәген нығ тотоп тороусылар: Ф.Д. Бикбаева, Ф.М. Бикбаев, Л.П. Пономаренко, Н.Н. Бүләкова, Р.Б. Ураҡсина, Н.Н. Иманова, С.К. Буранбаева, Ф.А. Сәфиуллин, З.З. Яхина, Ф.А. Шакиров, В.З. Шакиров, З.В. Качалова, Р.Ш. Аллабирҙина, Ә.Я. Ғөбәйҙуллина, Н.И.Карпова, Г.Р. Дәүләтбаева, Ф.Ф. Сарбулатовалар өлгөлө эштәре менән бөтә Башҡортостан мәктәптәре уҡытыусыларына яҡшы таныш. Был бер ҙә арттырыу түгел. Шуға ла Сибай педучилище ын тамамлаусылар ҡайҙа ғына эш орап барма ындар, бөтә ерҙә лә уларҙы ҡуш ҡуллап ҡабул иттеләр, әм бөгөн дә шулай. Кеше булараҡ та, тәрбиәсе-етәксе булараҡ та ниндәй генә эшкә тотонма ын, хеҙмәтенең фәнни яңылығын күҙалланы, рухиәтебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе, белемебеҙҙе арттырып, йәшәйешебеҙгә файҙа килтererлек сараларҙы оҫта ойошторҙо Х.Х. Хәмитов. Дүрт уҡытыусы республикабыҙҙың «Йыл уҡытыусы ы», ә үҙе «Директор-1994» конкурсында лауреат булды. Быларҙан тыш, республикабыҙҙың башҡа махсус белем биреү йорттары менән хеҙмәттәшлекте киңәйтте, хатта сит илдәргә сығып тәжрибә тупланы, коллегаларына өлгө күр әтеп, башҡаларҙы үҙе артынан әйҙәне. Төрлө конкурстар, фестивалдәр, спорт ярыштары уҡыу йортоноң абруйын күтәрҙе.

26 йыл ғүмер... Бер урында ал ыҙ-ял ыҙ эшләү ҡай ы саҡ тәҙрә еҙ-ишек еҙ ҡара диуар эсендә ҡалған ымаҡ. Шул уҡ ваҡытта өйөнөс-көйөнөстәрен дә йәлләмәгән яҙмышты үҙ эсенә алған тормоштоң арауығы ҡиммәтле әм иммәтле. Ҡыҫҡа ы, оҙон-оҙаҡ йылдар дауамында оло хеҙмәте менән абруй ҡаҙанған остаз-мәғрифәтсе исеме киләсәктә педучилищеның йылъяҙма ына алтын хәрефтәр менән яҙылыуына иманым камил. Йәшәлгән ғүмер юлдарында йәштәргә белем биргән, хеҙмәткә көйләгән, йәшәргә өйрәткән. Үткәне йәл түгел, ә артабан ни эшләргә уң? Олоғайыла ла, йәштәр ҙә үксәгә баҫа... Әсә е мәхрүмә лә иҫенә төштө. Тутыя апай ҙа Йолалы, Сибай шахталарының бүрәнә таяуҙары бына-бына ишелеп төшәм тигәндә лә, үҙенә ошондай уҡ орау биргәндер. Бирмәй ни, бирер шул. Дүрт бала ын етем итке е килмәй, етмә ә ауыр уғыш йылдары... Ә Хөснөтдин, әсә енән айырмалы рәүештә, тотороҡло заманда йәшәй, ерҙә үҙ аяғы менән нығ баҫып тора. Изге уйҙар таң ыҙылып атҡанда тыуа. «Ниәтеңде көн башланғанда барлау – уң юл», – тип өйрәткәйне әсә е Тутыя иҙиәт ҡыҙы. Ул да бер абаҡ. Ана, таң ары ы беленде. Йы андың үҙенә төбәп биргән орауға яуап та алды. Ни ти әң дә, йы ан аҡылы киң әм тәрән. Бәхетле яҙмышы аҡ аҡалға ғүмеренең тағы бер сағыу битен бүләк итте. Күп тә үтмәне, дәртле күкрәгенән белеме ташып торған, донъя күргән тәжрибәле уҡытыусы-ветеранды БДУ-ның Сибай филиалына уҡытыу-производство бүлеге мөдире итеп эшкә саҡырҙылар. әр бер кеше менән эшләү даирә е киң әм сик еҙ булған уҡытыусы студенттар ара ында оло абруй ҡаҙанды. Әлеге мәлдә Сибай институтында унын етәкселегендә йәштәр башҡорт халҡының ете ырыуының мәҙәниәтен, кәсепселеген өйрәнә. Әйтергә кәрәк, ауылдарға экспедицияларға йөрөп, бай материал тупланылған. Анығыраҡ әйткәндә, бөрйәндәрҙең, үҫәргәндәрҙең, түңгәүерҙәрҙең милли мәҙәниәте, художестволы промысло ы буйынса байтаҡ материалдар тупланды. Был турала хатта китап та баҫтырып сығарырға мөмкин. Бәлки, студенттарҙың байтағы фән юлынан китмәҫтәр, әммә ҡыҙыҡ ыныусан, үҙҙәренең рухи ҡиммәттәрен байытып йәшәргә өйрәнерҙәр, тигән фаразды иҫбатлай Х.Х. Хәмитов.

Уҡыусылар ҙур ҡыҙыҡ ыныу менән бөрйән ырыуы тарихын яҙҙы. Төрлө темаларға арналған диплом эштәренән торған матур әм бай күргәҙмәләр ойошторолдо. Шуны ы ҡыуанысл ы: йәштәрҙең күбе е «Мин ҡай ы ырыуҙан?», «Мин

кем?», «Ҡайҙан мин?» тигән орауҙарға яуап табырға, яңыса йәшәргә өйрәнергә әм башҡаса фекерләргә кәрәклекте төшөндөләр. Был – уҡытыу-производство бүлегенең иң ҙур ҡаҙанышы. Беҙ йәшәгән донъябыҙ иҫ киткес тиҙлектә үҙгәрә. Борон «асылмаған серҙәр»ҙе әм бөгөнгө асыштарҙы белеү, сағыштырыу, барлау өҙөмтә ендә донъяны танып-белер өсөн белем әм тәжрибә генә етмәй, фәлсәфәне белеү ҙә, күрә белеү ҙә мө им, тип фаразлай йәштәр. Мәҫәлән, студенттар аҡмар йылға ының ул яғында ултырған бөтә үҫәргән ауылдарында, Хәйбулла, Ейәнсура райондарында, Ырымбур өлкә ендә булдылар. Бөтә ырыуҙарҙы ла киләсәктә ошолай өйрәнеп, «Ете ырыу» музейын асасаҡбыҙ тип, ҙур ҡыҙыҡ ыныу, дәрт менән янып йөрөй Х.Х.Хәмитов.

«Ни сәс әң, шуны урыр ың». Халҡыбыҙҙың мәҡәлдәре бигерәк фә емле. Эйе, күренекле остаз дәрәжә енә етеү еңелдән түгел. Әгәр ҙә үҙ бауырың аша ел-буран-дарҙы үткәрмә әң, үҙ елегендә эҫе ен дә, ыуығын да тойма аң, уларҙан уң ығылма аң, бөгөлмә әң, – шул булалыр ул сынығыу, шул булалыр ул оло шәхес. Ана шундай сыныҡҡан аҫыл заттарҙың бере е ул – ҡалабыҙҙың абруйлы мәғрифәтсе е, почетлы гражданины. Тик милләттәштәребеҙ ундайҙарҙы көндөҙ сыра яғып, ситтән эҙләмә ен ине. Ул беҙҙең арала, беҙҙең юлдан йәнәш йөрөй. Ошо юлдарҙы яҙғанда миндә тағы бер фекер тыуҙы. Ауыр замандарҙа шахта буйлап руда тейәлгән вагонеткаларҙы этә-этә балаларына ризыҡ тапҡан, уны йәйәүләп Ирәндек тауҙары аша улы Хөснөтдингә илткән Тутыя апайҙың рухына баш эйә е ине. Сөнки Әсә кеше ҡала тарихына ыймаҫ дан ҡалдырырлыҡ ул үҫтергән. Бөгөн дә Хөснөтдин Хәйбулла улы талым ыҙ хәрәкәттә әм хеҙмәттә...

Эйе, Хөснөтдин Хәйбулла улының ил алдындағы фиҙакәр хеҙмәте «Почет Билдә е» ордены, хеҙмәт ветераны миҙалы менән ба аланыуын, Рәсәй Федерация ы әм Башҡортостан Республика ының атҡаҙанған уҡытыусы ы, СССР, РСФСР әм Башҡортостан Республика ының халыҡ мәғарифы алдынғы ы тигән юғары исемдәргә лайыҡ булыуын аныҡ ҡына әйтә алма а ла, сағыштырмаса иҙгәндер, тойғандыр аҫыл зат Мөжәүир хәҙрәт. Шулай булма а, кескәй Хөснөтдинден арҡа ынан өйөп, яратып: «Улым, ин киләсәктә прокурор булыр ың»,– тимәҫ ине. Ышаныр ыңмы-ышанмаҫ ыңмы, фаразлауҙарҙың бойомға ашыуына ғәжәпләнә ең. Ысындан да, ул ғүмер буйы кешеләрҙе әҙәпкә өндәне, кәңәш бирҙе, ҡыйралған яҙмыштарҙы үҙ юлына көйләне. Шуны ла әйтеү мө им: Хөснөтдин Хәйбулла улының ҡорған донъя ы ла өлгөлө. Миңә уларҙың шәжәрә байрамдарында булырға тура килде. Унда күренеүенсә, ете быуынының да тәү бурысы – ғаилә ҡиммәттәрен юғалтмау. Хөснөтдин Хәйбулла улының ғүмер юлдашы, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусы ы Фәниә Зиннәтулла ҡыҙы, өс ҡыҙым – өс таймаҫ йыуанысым бар, тип шатлана. Олоно ниндәй – япрағы шундай, тигәндәй, оло ҡыҙҙары Зөлфиә – Ҡаҙағстанда дәрәжәле етәксе, уртансы ы Гөлнара – Сибай ҡала телевидение ы директоры, кесе ҡыҙҙары Әлфиә – педколледж уҡытыусы ы.

Хөснөтдин Хәйбулла улы ҡайҙа ғына йөрө ә лә, «Берлектә әм татыулыҡта бәрәкәт» тигән әйтемгә хыянат итмәй. Шуға ла әр ерҙә үҙе лә үтемле, эше лә ырамлы. Тиҙҙән уның етәкселегендә республикабыҙҙа тәүгеләрҙән булып «Ете ырыу» музейы үҙ ишектәрен асасаҡ.

**Таң ылыу ҒӘЙНУЛЛИНА.**

# ҮҘ АЛЛЫ БАШҠОРТОСТАН ҠОРОУ ЮЛЫНДА ТЕЛӘКТӘШТӘР МӘСЬӘЛӘ Е

1917 йылдың 15 ноябрендә барлыҡҡа килеп, 1919 йылдың февраленә тиклем йәшәгән Башҡортостан демократик республика ы – ҡабатланмаç әм үҙенсәлекле күренеш, сөнки батша Рәсәйендә ундай хәл күҙәтелмәгән. Билдәле булыуынса, Петр I үҙе нигеҙ алған империяны игеҙ губернаға бүл ә, Екатерина II и ә Рәсәй губерналары иçәбен иллегә еткерә. XVIII быуат аҙағы – XIX быуат башы Рәсәйе ғәмәлдә көслө үҙәкләштерелгән, унитар дәүләт булып күҙ алдына баçа. Урыç булмаған халыҡтар кеше мәртәбә ен ныҡлы кәм еткән милли иҙеүгә дусар ителә. Закон ыҙлыҡ, көс ҡулланыу, баш-баштаҡлыҡ әм енәйәтселек буйынса Көнбайыш Европа колонияларының бере е лә Рәсәй менән ярыша алмаған. Батша властары тарафынан алып барылған баçып алыу, геноцид йә әтенән ҡаза күреүсе халыҡтар ара ында башҡорттар беренсе рәттәрҙә була.

Башҡортостан Демократик Республика ы 1917 йылдың 15 ноябрендә II фарман менән иғлан ителеп, шул уҡ йылдың 8–20 декабрендә Ырымбур ҡала ында эшләгән III Бөтә башҡорт ҡоролтайы тарафынан раçлана. Республика Демократик Рәсәйҙең автономиялы өлөшө булараҡ барлыҡҡа килә, сөнки 1918 йылдың 31 ғинуарына тиклем Ырымбур ҡала ы әм Ырымбур губерна ы ҡанлы большевистик диктатура йөҙөндәге Совет власы килеп етмәгән үҙенсәлекле утрау булып ҡала. Был принципиаль мәсьәлә, сөнки 1917 йылдан йәшәп килгән Башҡортостан Республика ы Рәсәйҙең яңы – большевиктар хакимлығының ми ырбанлы сәйәсәте арҡа ында түгел, хатта уға ҡаршы нигеҙҙә барлыҡҡа килә.

190 милләт әм халыҡтарҙан торған Рәсәйҙә Февраль инҡилабы еңеүенән уң ойоша башлаған милли-территориаль үҙбилдәләнеш өсөн башланған хәрәкәттең алғы сафында алты: поляк, эстон, латыш, литва, украин – Рәсәйҙең европалашҡан көнбайыш өлөшөндә йәшәгән халыҡтар, төрки телле, ислам динле халыҡтарҙан башҡорттар бара.

Статистик мәғлүмәттәргә күҙ алайыҡ. 1897 йылда, халыҡ иçәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса, хәҙерге сиктәрҙәге Рәсәйҙә 67,5 миллион кеше йәшәгән. Шулар ара ында башҡорттар 1,3 миллион тәшкил итеп, бөтә халыҡтың 0,93 процентын алып торған. 1914 йылғы мәғлүмәттәр буйынса, ошо уҡ сиктәрҙәге Рәсәйҙә 90 миллион кеше йәшәүе теркәлгән. 1914 йылғы иçәп буйынса теүәл мәғлүмәт башҡорттар йә әтенән күренмәй. I Бөтә Рәсәй халыҡ иçәбен алыуҙан уң уҙған 17 йылда ил халҡының 33 процентҡа артыуын иçәпкә алып, ошо процентты башҡорттарҙың 1897 йылғы иçәбенә ҡабатлағанда, яҡынса 1,7 миллион килеп сыға. Башҡорттарҙың 1917–1921 йылдарҙағы милли азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнашыусыларҙың ул

*Әлим Зарипов "Ағиҙел" журналының әүҙем авторҙарының бере е ине. "Бере е ине" тиергә тура килә, сөнки ул вафат булып ҡалды. Был мәҡәлә е – уның беҙгә ебәргән уңғы яҙма ы.*

ваҡытта 2 миллионлы халыҡ исеменән эш йөрөтөүен Әхмәтзәки Вәлиди яҙып ҡалдырған. Бөгөнгө кеүек, ул саҡта ла күплеге яғынан башҡорттар Рәсәй халыҡтары ара ында дүртенсе урын биләгән. Шуға күрә, 1917 йылда автономиялы республика статусына өлгәшерлек кеше ресурстары башҡорттарҙа етерлек булған, тип раҫлауға тулы нигеҙ бар.

Башҡорттарҙың сәйәси лидерҙары, иң элек Әхмәтзәки Вәлиди, илдә власты закон ыҙ тартып алған большевиктар етәкселәренә, уларҙың ялған вәғәҙәләренә ышанмай. уңынан ваҡыт уларҙың дөрөҫ ҡараштa тороуын раҫлай. Конституция ыҙ юл менән урынлаштырылған режим, власты үҙенең бысраҡ ҡулында аҡлап ҡалыу өсөн, иң әшәке енәйәттәрҙән дә баш тартмай. Ошоно яҡшы аңлаған башҡорт милли хәрәкәте башлыҡтары үҙ ҡораллы көстәрен ойошторорға ҡарар итә. Был көс менән улар Рәсәйҙең яңы властарының милли-территориаль дәүләтселекте бөтөрөргә маташыуына ҡаршы торорға иҫәп тота.

Алда Башҡортостан Демократик Республика ын танытыу өсөн ауыр әм оҙон көрәш йылдары тора. Дөйөм кешелек ҡиммәттәрен әм демократияны танырға теләмәгән ҡанлы большевистик диктатуранан айырмалы, Башҡортостан Республика ы үҙенең тәүге көндәренән үк демократия идеалдары яғында тороуын күрәтә. Илдә тәртип еҙлек әм закон ыҙлыҡ хөкөм өргәндә, кешеләр суд ыҙ, тикшереү еҙ үлтерелгәндә, баш-баштаҡлыҡ йүгән еҙләнгәндә әм әхлаҡ менән әҙәп иҫкелек ҡалдығы ымаҡ бөтөнләй инҡар ителгәндә, Демократик Башҡортостандың артабан йәшәүе шик аҫтында була.

Башҡорттар, тарихтан мәғлүм булыуынса, – ғорур, азатлыҡ өйөүсе халыҡ. Сыңғыҙ хан әм уның вариҫтары дәүерендә монголдар башҡорттарға ҡаршы 1221 йылдан 1234 йылға тиклем уғышҡан, әммә буй ондора алмаған. Шуға күрә ҡурҡыу белмәгән башҡорт атлыларын үҙ армия ына ҡушыу өсөн, монголдар улар менән союздашлыҡ тура ында килешеү төҙөргә мәжбүр булған. Башҡорт атлылары Батый хан яуы менән 1237–1238 әм 1239–1240 йылдарҙа төньяҡ-көнсығыш әм көньяҡ-көнбайыш урыҫ кенәзлектәренә рейдта, 1241–1242 йылдарҙа Көнбайыш походта ҡатнаша. 1242 йылда немец рыцарҙарын Чудь күле боҙонда ҡыйратыуҙа башҡорт атлылары хәл иткес роль уйнай.

I әм II мең йыллыҡтар сигендә барлыҡҡа килгән Башҡорт әм Табын ханлыҡтары 1391 йылда ғына йәшәүҙән туҡтай. Улар Урта Азияның ҡеүәтле ханы, 1391–1396 йылдарҙа Урта быуаттарҙа сәскә атҡан дәүләттәрҙән аналған Алтын Урҙаны сүллеккә әүерелдергән Тамерлан йәки Аҡ аҡ Тимер яуы арҡа ында әләк була. Башҡорт әм Табын ханлыҡтары Алтын Урҙала ярым үҙ аллы йәшәгән берәмектәрҙән анала.

1430–1552 йылдарҙа башҡорт милли частары Сыңғыҙ хандың бөйөк империя ы ярсыҡтары – "татар" ханлыҡтары алып барған барлыҡ уғыштарҙа ла әүҙем ҡатнаша. 1557 йылдан 1798 йылға тиклем, йәғни 200 йылдан ашыу башҡорт атлы полктары урыҫ армия ы сафтарында була; 1612 йылда Минин менән Пожарскийҙың ополчение ында Мәскәүҙе поляк баҫҡынсыларынан азат итеүҙә ҡатнаша. 1798–1865 йылдарҙа дөйөм Рәсәй армия ының бер өлөшө булараҡ айырым Башҡорт ғәскәре ойошторола. 1866 йылдан башҡорттар урыҫ армия ына дөйөм нигеҙҙә саҡырыла башлай. Шулай итеп, Урта Азия, Ҡаҙағстан, Себер халыҡтарынан айырмалы, 1917 йылда башҡорттар ҡулға ҡорал тота әм заман талаптарына ярашлы уғыша белгән милләт булараҡ ҡаршылай. Тиҫтәләрсә мең башҡорт Беренсе донъя уғышы окоптары аша үтә. XX быуат башында ла башҡорттарҙың хужалығында төп тармаҡ булып малсылыҡ иҫәпләнә әм унда йылҡысылыҡ өҫтөнлөк итә. Ғәмәлдә башҡорттар ыбай яҡшы йөрөй, шуға күрә уларҙан эре атлы берләшмәләр туплау мөмкинлеге була. Быға өҫтәп, башҡорттарҙың байтағы унар

менән шөғөлләнгән, тимәк, оҫта ата ла белә. Халыҡтың тарихи хәтере, рух күтәренкелеге, үҫешкән милли аң, милли дәүләтселек өсөн ҡорбан булырға әҙерлек кеүек мө им сифаттарҙы ла ҡушҡанда, – былар бары ы ла милли армия төҙөү мәсьәлә ен ярай ы еңеләйтә.

Ошоға өҫтәп, элекке Дәүләт Дума ы депутаты, абруйлы әм белемле Т.И. Сидельниковтың үҙҙәрен килтереү ҙә урынлы булыр. Ырымбур казактарынан сыҡҡан, “Башкиропомощь”тың Үҙәктән ебәрелгән тәүге вәкиле В.И. Ленинға 1920 йыл баштарында яҙған хатында былай ти: “... ысынбарлыҡ күҙлегенән ҡарағанда, Башҡорт Республика ының хәрби сығышы шик тыуҙырмай. РСФСР-ҙың яуаплы етәкселәренең күбе е уны Ҡыҙыл Армияға яҡшы уғышсылар биреүсе булараҡ ба аланы әм ба алай. Республикала хәрби эш башҡа күрше губерналарға ҡарағанда яҡшыраҡ ҡуйылған”.

1920 йылда хәл шулай була. Ә инде 1917–1918 йылдар сигендә – бөтөнләй башҡа. Башҡорт ғәскәрен туплау бер ни еҙ башлана. Ҡорал әм уға боеприпастар, хәрби кейем- алым, алдат әм офицерҙарға түләү өсөн аҡса, йәшәү өсөн квартиралар әм казармалар... Быларҙың бере е лә юҡ. Ғәскәргә ябай алдаттар саҡырыу йә әтенән мәшәҡәт булмай әм булыуы ла мөмкин түгел. Иң ауыры – башҡорт милләтенән булған офицерҙар еткереү. Татарҙар менән мөнәсәбәттәр ҡырҡа боҙолоп киткәндән уң, уларҙың башҡорт армия ына килеренә ышаныуы ла ҡыйын. Урыҫ офицерҙары башҡорт ғәскәре ойоштороуға, шом менән булма а ла, шикләнеп ҡарай.

1917 йылдың 8–20 декабрендә Ырымбурҙа йыйылған III Бөтә башҡорт ҡоролтайы милли ҡораллы частар ойоштороу мәсьәлә ен законлаштыра. 1918 йылдың 5 ғинуарында 70 атлы әм йәйәүле кешенән торған башҡорт отряды төньяҡ-көнсығышҡа юл ала. Уның менән башҡорт офицеры Ғимран Мағазов етәкселек итә. Башҡорт офицеры Әмир Ҡарамышев етәкселегендәге атлы отрядта Башҡорт Республика ына хеҙмәт итергә ялланған йәш поляк офицерҙары Гонара, Хайнатский, Гарлитский, Ванчилинский, Шимановский, Кимчинскийҙар ҙа була. Йәйәүлеләргә башҡорт офицеры Ғабдулла Иҙелбаев етәкселек итә. Ошонда уҡ поляк офицерҙарынан Гольнштейн, Зайчковский, Зигирт, Сталицкий, Васильевский, Фольковский әм Козловскийҙар ҙа була. Башҡа халыҡтар вәкилдәре ара ында отрядта татар офицеры Усман Йә үҙин күренә. Шулай итеп, йыйылма отрядтағы 70 кешенән 17- е офицерҙарҙан тороп, ғәмәлдә поляктар күпселекте тәшкил итә. Тарихсыларыбыҙ тарафынан нигеҙ еҙ онотолған 13 поляк офицеры ара ында беренсе башҡорт полкын ойоштороуҙа ба алап бөткө өҙ ярҙам иткән тағы бер поляк – прапорщик С.Бриц та бар. Был офицер ойошторолоп ятҡан башҡорт полкына ҡыҙыл гвардия отрядтары инер алдынан Орск ҡала ынан алып сыҡҡан 300 винтовка (патрондары менән) әм 60 мең ум аҡса тапшыра.

Макрушин спирт заводында складтарҙа ятҡан араҡыны яҡын-тирәләге мосолман булмаған халыҡтарға атып, полк ихтыяждары өсөн байтаҡ аҡса туплап, йыйылма отряд Башҡортостан эсенә юл ала. 1918 йылдың 20 ғинуарында отряд Ҡаҙырша ауылына (хәҙерге Йылайыр районы – **Ә.З.**) ялға туҡтағанда улар менән осрашыу өсөн Ырымбурҙан башҡорт милли хәрәкәте юлбашсы ы Әхмәтзәки Вәлидов килеп төшә. Артабан отряд Йомаш ауылына күсенә. Эшсе депутаттарының Таналыҡ-Баймаҡ Советы менән өйләшеп килешкәндән уң, эшселәр ҡасаба ының етәкселеге ризалығын алып, 8 февралдә йыйылма отряд Таналыҡ-Баймаҡ эшселәр ҡасаба ына килә.

Бер нисә көн эсендә йыйылма полк үҫеп сыға. Отряд менән килгән поляк офицерҙары вазифаларға тәғәйенләнеп, яңы алынған башҡорт егеттәрен уғыш өнәренә өйрәтергә тотона. Полктың үҙ имамы булып, ғәскәр йәшел байраҡ аҫтында

сафҡа баҫа. Полк командирҙары, офицерҙар, урындағы халыҡ, эшселәр менән яҡшы мөнәсәбәт  аҡларға тырыша  әм полк уларҙың ышанысын яулай. Таналыҡ-Баймаҡ Советы эшселәр отряды ойоштороуға аҡса  орағас, полк етәкселеге уларға 100 эшсене ҡоралландырырлыҡ аҡса бирә.

Әммә был яҡтарҙа ижтимағи-сәйәси хәл көндән-көн ҡатмарлана. 1918 йылдың 31 декабрендә Ырымбурҙы ҡыҙыл гвардия отрядтары баҫып ала. Советтарға ҡаршы көстәр атаман Дутов тирә енә берләшеп, Орск яғына сигенә. 3-нән 4 февралгә ҡаршы төндә Башҡорт хөкүмәтенең  игеҙ ағза ы, шул иҫәптән Әхмәтзәки Вәлидов та, Ырымбур Мосолман (татар) хәрби-революцион комитеты тарафынан ҡулға алына  әм, революцияға ҡаршы эш алып барыуҙа ғәйепләнеп, төрмәгә ябыла. 1918 йылдың 13 февралендә Таналыҡ-Баймаҡта полк етәкселегенә Иҙелбай ауылына (Ҡыуандыҡ тимер юл станция ынан дүрт саҡрым ситтә) 300 винтовка  әм патрондар алып ҡайтырға ебәрелгән 11 кеше Мосолман (татар) хәрби-революцион комитеты тарафынан ҡулға алыныуы тура ында хәбәр ителә. Шул уҡ көндө уларҙы ҡотҡарырға Әмир Ҡарамышев  әм алты поляк офицеры етәкселегендәге атлы отряд юлға сыға. Шул уҡ йылдың 16 мартында төнгө сәғәт дүрттә башҡорттар аҡса ына, башҡорттар ярҙамында ойошторолған Таналыҡ-Баймаҡ Советының эшселәр отряды йоҡлап ятҡан офицерҙарға  әм полк етәкселәренә  өжүм я - ай. Командирҙар ара ынан 30-лап кеше ҡулға алынып, ҡасаба төрмә енә бикләнә. Улар ара ында ете поляк офицеры ла була. Бына улар: Гольштейн, Зайчковский, Зигирт, Сталицкий, Васильевский, Фольковский, Козловский. Приклад менән төйөүгә, төрлөсә мыҫҡыллауға, түбән етеүгә уларҙы ла дусар итәләр. Йыртҡыс ҡиәфәтенә кергән эшселәр уларҙың йәш Башҡорт Республика ына хеҙмәткә инеүҙәрен ғәфү итә алмай. Ете тәүлек буйы туҡмап, төрлөсә язалағандан  уң офицерҙарҙы ҡасабаның көнбайыш яғына сығарып, юлда ете ен атып үлтерәләр.

Большевик йыртҡыстар ҡулынан батырҙарса  әләк булған башҡорт офицерҙарының исеме билдәле: улар Ғабдулла Иҙелбаев менән Ғимран Мағазов. Атып үлтерелгән биш поляк офицерының исем-фамилияларынан бере енең — Ғимран Мағазовтың адъютанты Козловскийҙыҡы ғына билдәле. Ирек  өйөүсе поляк халҡының Башҡорт Республика ы йәшә ен өсөн йәнен биргән башҡа улдарының исем-фамилиялары әле лә билдә еҙ.

Бер ғәйеп еҙ ҡулға алынып, төрлөсә мыҫҡыллап,  уңынан атып үлтерелгән йәш башҡорт  әм поляк офицерҙарының ғүмере Таналыҡ-Баймаҡ Советы эшселәренең намыҫында. 21 февралдән 22- енә ҡаршы төндә ҡасабаға Ырымбурҙан Мосолман (татар) хәрби революцион комитеты тарафынан ебәрелгән “ өрөлгән кулак” Баранов етәкселек иткән ҡыҙыл гвардиясылар отряды баҫып инә. Башҡорт полкы офицерҙарын ошо отрядтың иҫерек гвардеецтары язалап үлтерә лә инде. Башҡортостан биләмәләрендәге ҡанлы ваҡиғалар бының менән генә сикләнмәй. 24 февралдә полктың өйҙәренә ҡайтарып ебәрелгән 10  алдаты урыҫ утарҙарының бере ендә атып үлтерелә. Шулай итеп, Таналыҡ-Баймаҡ ерендә генә өс көн эсендә 17 йәш башҡорт  әм поляк ҡан ыҙ большевиктар тарафынан язалана.

Ни өсөн поляктар ара ында башҡорт дәүләтселеге ҡайнар яҡлау таба? 13 поляк офицерының башҡорт хөкүмәтенә  әм башҡорт халҡына хеҙмәт итергә ризалыҡ биреүен нисек аңлатырға? Башҡорт ғәскәре сафына баҫырға уларҙы нимә мәжбүр иткән? Ошо  орауҙарға яуап эҙләп ҡарайыҡ.

Тарихтан билдәле булыуынса, Рәсәйҙә Екатерина II батшалыҡ иткән дәүерҙә Польшаны өс тапҡыр бүлгеләп, поляк халҡы үҙенең дәүләтселегенән мәхрүм була. 1772 йылдан 1863 йылға тиклем күп тапҡырҙар ҡорал күтәреп, поляктар үҙ иленең милли азатлығын тергеҙергә маташып ҡарай. Әйткәндәй, Суворов — поляктар өсөн бөйөк полководец түгел, ә язалаусы  әм кеше үлтереүсе. 1918 йылда

ғына тергеҙелгән дәүләтселек өсөн поляк халҡы бик күп ҡан түкте, ҡорбандар бирҙе. Башҡорттар әм украиндар кеүек үк, поляктар ҙа крепостной хоҡуҡты үҙ елкә ендә татыманы, унының ниндәй түбән күренеш икәнен белмәне. Бойондороҡ-оҙ Польшаның патриоттары дәүләтселек юғалыу менән бер ҙә килешмәне. Шуға күрә улар башҡорт халҡының үҙ дәүләтен тергеҙергә теләүен аңлап ҡабул итте әм, яҙмыш ҡушыуы буйынса, Ырымбур крайына килеп юлыҡҡан поляк офицерҙары ис бер икеләнеү еҙ башҡорт ғәскәренә хеҙмәткә инде.

Кесе офицер вазифа ында хеҙмәт иткән поляк офицерҙарына Рәсәй армия ында урыҫ офицерҙары әр саҡ шикләнеп ҡараны. Өлкән урыҫ офицерҙары поляктарҙы насар уғышсы, "ышаныс ыҙ элемент" тип ҡараны. Офицер дәрәжә е (запастағы ына тиклем) алыу өсөн поляк үҙенең сәйәси ышаныслылығы тура ында полк командирынан документ алырға бурыслы була. Офицерҙар ара ында поляктарҙың күп булмауына сик ҡуйыу өсөн ниндәйҙер квоталар уйлап табалар. Православный диненә күсмәгән полякка хәрби академияларҙа белем алыу тыйылып, генераль штабта эшләү мөмкинлеге юҡҡа сығарыла.

Поляк офицерҙарының башҡорт милли ғәскәрен ойоштороуға яҡшы мөнәсәбәттә булыуы уларҙың тыуған иленә ҡайтып китеүенә саҡлы дауам итә. 1918 йылдың аҙағында Беренсе донъя уғышы тамамланыу менән иҫән ҡалған поляк офицерҙары Польшаға ҡайтып китер алдынан ҡулынан килгәнсә башҡорттарға ярҙам итә. Башҡорт етәкселәре лә поляктарға тулы ынса ышана, төрлө вазифаларға тәғәйенләй. Башҡорт хөкүмәтенең 1918 йылдың 29 сентябрендәге бойороғо менән Станислав Бриц хәрби милиция начальнигының ярҙамсы ы итеп ҡуйылып, бер юлы башҡорт милиция ы начальнигы вазифа ын да алып бара. 1918 йылдың сентябре башында прапорщик Бриц Комуч ( амар хөкүмәте) менән "ҡорал-яраҡ, кейем- алым әм башҡа хәрби кәрәк-яраҡ алыу тура ында" өйләшеүҙәрҙә Башҡорт хөкүмәтенең тулы хоҡуҡлы вәкиле була. Бриц шулай уҡ беренсе башҡорт полкын ойоштороуҙа ла әүҙем ҡатнаша.

"Башҡорт хөкүмәте мөхбире" гәзитенең 20 октябрь сығарылышында Ырымбурҙа поляк хәрби частарын ойоштороусы В.Банкович, башҡорт халҡын күҙ уңында тотоп, түбәндәге юлдарҙы яҙып ҡалдырған: "Милләттең азатлыҡ өйөүенә, унын кәрәкле ваҡытта азатлыҡты ҡулға ҡорал алып яҡларға әҙерлегенә оло ихтирам менән поляк милләте вәкиле булараҡ, йәш, сәләмәт рухлы, үҙ идеалдарына тоғро башҡорт ғәскәренә сәләм ебәрәм. Унын маҡсатына өлгәшеүен ихлас күңелдән теләйем". Был үҙҙәрҙә бөйөк мәғәнә бар. Ул, башҡорт дәүләтселегенең яҙмышы поляктарҙы ла башҡорттарҙы борсоған кеүек борсоған, тип әйтергә нигеҙ бирә.

Европаның эре дәүләттәренең бере е булған Польша элекке социалистик дәүләттәрҙә, элекке СССР республикаларында демократик режим нығыныуҙа йоғонтоло роль уйнай. Поляктар үҙенең тарихына ихтирам менән ҡарай, азат Польша өсөн көрәшкән ҡа армандарын онотмай. Беҙ, Башҡортостанда йәшәүселәр, тәүге Башҡорт Республика ы төҙөүҙә башҡорт халҡына ярҙамға килгән йәш поляк офицерҙарын иҫтә тоторға бурыслыбыҙ. Башҡорт әм поляк халыҡтарының иң яҡшы улдарының ҡаны менән нығытылған башҡорт әм поляк союзы быуаттар дауамында йәшә ен.

**Әлим ЗАРИПОВ.**

# АҪЫЛ ҒЫНА ЗАТЫ БАШҠОРТТОҢ...

*(Мөхәмәтша Буранғоловтың тыуыуына 120 йыл)*



Мәш үр фольклор белгесе, танылған драматург, Башҡортостандың халыҡ сәсәне Мөхәмәтша Буранғолов 1888 йылдың 15 декабрендә Быҙаулыҡ өйәҙе (хәҙерге Ырымбур өлкә е) Йомран-Табын волосының Үрге Ильяс ауылында Абрахман исемле урта хәлле башҡорт ғаилә ендә тыуа. Уларҙың нәҫеле тархандар тоҡомонан булып, Туҡ-Соран яҡтарында тамырланыр өсөн Мәскәү батшаларына барып етеүҙәре, ә Ғәлимйән олата ының йортауай писарь, ә ата ының волость старшина ы кимәлендәге дәүләт эшмәкәре булыуы билдәле. Бик иртә үк еҙ етем ҡалған үҫмер туғандарының ярҙамында әм ҡурсалауында үҙ аллы тормошҡа аяҡ баҫа.

Ырымбурға барып, йәйҙәрен кәсеп итеп уҡыу өсөн аҡса йыя. Юлдаш ауылында рус башланғыс мәктәбен тамамлай, артабан белем алыу өсөн Ҡарғалыға килә әм Сәғит биҫтә ендәге Ғәликәев мәҙрәсә енә уҡырға инә. Мөхәмәтша уҡыуҙан бушаған араларҙа хәлфәгә ярҙамлаша, йәйгеен официант булып эшләй, өс йыл рәттән Аҡтүбә ҡала ы тирмәнендә иген ҡабул итеүҙә тир түгә, аҙаҡ, байтаҡ белем туплап алғас, Аҡтүбә өйәҙенең ҡаҙаҡ ауылдарында балалар уҡыта. 1907 йылғы халыҡ иҫәбен алыу ваҡытында тәржемәсе булып йөрөгән Мөхәмәтша Ғәбит сәсән менән осрашып, «Урал батыр» кеүек ҙур күләмле мәш үр эпостарҙы яҙып ала.

Ҡарғалы мәҙрәсә енән уң Ырымбурҙағы «Хөсәйениә» мәҙрәсә ендә белем ала. Уны 1911 йылда тамамлап, Иҫәнғол, Ҡайыпҡол ауылдарында мөғәллим булып эшләй.

1914 йылда, I Бөтә донъя империалистик уғышы башланғас, М. Буранғолов хәрби хеҙмәткә саҡырыла. Ҡайыпҡол ауылы халҡы сходҡа йыйылып, уны мулла итеп тәғәйенләү хаҡында ҡарар сығара әм, уны фронтҡа алмауҙы орап, хөкүмәт органдарына юллама яҙа. Ошо йылдарҙа Мөхәмәтша Буранғоловтың «Ваҡыт» гәзитендә «Башҡорт ерҙәренең ситтәргә китеүе әм уның нәтижә е», «Соран вә Туҡ буйы башҡорттары» публицистик мәҡәләләре баҫыла.

1916 йылда ул Быҙаулыҡ ҡала ына күсә әм 1918 йылдың башынаса ауыл мәктәптәре буйынса инспектор булып эшләй. 1917 йылдың декабрендә Ырымбурҙа Бөтөн башҡорт учредительный съезында Башҡорт автономия ы положениелары раҫланып, хөкүмәт ойошторолғас, ғинуарҙа Шура рәйесе Ш.Манатов ҡарарҙарҙы раҫлатыу өсөн Ленин эргә енә Мәскәүгә китә. Башҡорт хөкүмәте тулы составы менән ҡулға алына, Ырымбурҙа башҡорт халҡының тулы хоҡуҡлы вәкилдәренең йыйылышында Башҡортостан Ваҡытлы революцион советы төҙөлә. Йыйылыш исеменән хөкүмәтте ҡулға алыу мәсьәлә ен асыҡлау өсөн 12 кешенән комиссия билдәләнә. Халыҡ вәкиле буларак, Буранғолов та унда индерелә. «Яңы ваҡыт» гәзитендә тиҙҙән уның «Башҡорт туғандарға» тигән мөрәжәғәте баҫыла. Буранғолов яңы ойошторолған контревкомға рәйес итеп ҡуйыла, Бөтә Рәсәй мосолман уҡытыусылары съезында ҡатнашып, Ҡазандан ҡайтып килешләй, аҡ казактар тарафынан ҡулға алынып, 1918 йылдың август-сентябрь айҙарында төрмәлә ултыра. Күп тә үтмәй, Башревком эшен тергеҙгәс, халыҡ мәғарифы бүлегендә тағы ла эш башлай, әммә, властың ҡулдан ҡулға күсеүе өҙөтә ендә, посын ташлап ауылына ҡайтып китә. 1919 йылдың мартында Башҡортостан хөкүмәте әм ғәскәре ҡыҙылдарға ҡушылғас әм Үҙәк тарафынан автономия танылғас, Туҡ-Соран кантонында июнь айында уҙған Советтар съезында М.Буранғолов

тағы ла кантком рәйесе итеп  айлана. Быҙаулыҡ өйәҙенең мәғариф бүлегендә,  уңынан Туҡ-Соран канткомында эшләгәндә ул ябай халыҡ ара ында үҙенең ғәҙеллеге, бер  үҙлелеге менән ышаныс, ихтирам яулап өлгөрә. В.И.Ленин ҡул ҡуйған Килешеү нигеҙендә Башҡорт хөкүмәте (Башревком) Башҡортостан дәүләтселеген формалаштырыу эшенә тотона, әммә Үҙәк власть башҡорт лидерҙарын башҡорт автономия ына ҡаршы торған бүтән милләт вәкилдәре менән алмаштырыу эштәрен дә ойоштороп ебәрә. Башҡорт етәкселәренең  әр бер аҙымы күҙәтеү аҫтына алына. Тарихи тикшеренеүҙәрҙә «ғинуар путчы, ғинуар конфликты, заговор, мятеж» тип аталып йөрөтөлгән ваҡиғалар, башҡорт милли хәрәкәте яулап алған бик күп мөмкинлектәрҙе юҡҡа сығарып, Башҡорт хөкүмәтенең идара органдарынан башҡорт кадрҙарын алып ташлай. Дүрт айҙан  уң Башҡорт хөкүмәте үҙ ихтыяры менән таралып, властан китергә мәжбүр була. 1920 йылдың аҙағында чекистар алып барған «Вәлидовсы Башревкомдың контрреволюцион эшмәкәрлеге тура ындағы енәйәт эше»ндә лидерҙар ара ында М.Буранғоловтың да фамилия ы бар.

1921 йылдың 13 февралендә Кремлдә В.И.Ленин уны шәхсән ҡабул итә,  әм улар байтаҡ әңгәмәләшеп ултыра. Башнаркомпростың  ораауы буйынса, М. Буранғолов юлбашсынан Башҡортостан мәғариф селтәре өсөн финанс ярҙамы  әм уҡыу кәрәк-яраҡтары  орай, унының был үтенесе ыңғай хәл ителә. Был хаҡта сәсәндең үҙ ҡулы менән яҙылған иҫтәлеге  аҡлана. 1921 йылдың ғинуар аҙағында аҡланып, Мәскәүҙәге төрмәнән ҡотолоп сыҡҡандан  уң, М. Буранғолов власть даирә енән алыҫлашып, халыҡтың ауыҙ-тел хазина ын туплау эшенә, әҙәби ижадҡа тотона. 1922 –1928 йылдарҙа Мөхәмәтша Буранғолов Стәрлетамаҡта ойошторолған «Башҡортостан шуралар йөм үриәте мәғариф комиссариаты янындағы ғилми-фәнни вә тарихи ойошма»ға ағза була  әм халыҡ тарихына ҡағылышлы материалдарҙы йыйыу, өйрәнеү  әм баҫтырыу эшенә ең  ыҙғанып тотона. Ошо осорҙа ул драматург та булып танылa. 1923 йылда айырым китап итеп баҫылған «Ашҡаҙар» пьеса ы,  уңынан «Ялан Йәркәй», «Тәфтиләү», «Шәүрәкәй», «Ай ылыу»  әм башҡа сәхнә әҫәрҙәре, бигерәк тә «Башҡорт туйы» милли театрҙар репертуарын биҙәй. 1929 йылда М.Буранғолов тағы  аҡ аҫтына алына. Аҙаҡ Мәләүез, Шишмә, Әлшәй райондарында башҡорт теле  әм әҙәбиәтен уҡыта, ситтән тороп хоҡуҡ факультетын, пединституттың 4 курсын тамамлай. 1937 йылдың август ында эштән бушатыла  әм 23 декабрендә, репрессиялар башланғас, йәнә Өфө төрмә енә ябыла. 1938 йылдың аҙағында Мөхәмәтша Буранғолов, тәжрибәле фольклор белгесе булараҡ, Өфөләге Тел  әм әҙәбиәт ғилми-тикшеренеү институтына хеҙмәткәр итеп алына. «Башҡорт тарихи йырҙары», «Башҡорт тарихи йырҙары  әм легендалары», «Башҡорт халыҡ поэзия ы» тигән хеҙмәттәрен яҙа, «Башҡорт туйы» монография ы тамамланыу өҫтөндә. «Мәргән» опера ы либретто ын яҙа. «Башҡорт туйы»ның яңы вариантын әҙерләй, «Өлгө», «Иҙеүкәй менән Мораҙым» драмаларын тамашасы хөкөмөнә сығара. 1942 йылда «Ватан  уғышы» ҡобайыры донъя күрә. 1943 йылда «Батырҙар тура ындағы эпос» китабы баҫыла. 1944 йылда уға импровизация сәнғәте өлкә ендәге юғары хеҙмәттәре өсөн, Ф.Дәүләтшин,  С.Исмәғилевтар менән бер юлы, “БАССР-ҙың халыҡ сәсәне” тигән юғары исем бирелә. Ҡыуаныслы көндәр күпкә бармай, тағы сәсән өҫтөндә болоттар ҡабара: унының ижады 1946 йылдың 26 октябрендә үткән Яҙыусылар союзы идара ының киңәйтелгән ултырышында махсус ҡарала. Унда, М.Буранғоловты ағзалыҡтан сығарырға  әм сәсән исемен тартып алыуҙы  орарға, тигән ҡарар сығарыла. Әммә СССР Яҙыусылар союзы был ҡарарҙы ҡапыл ғына раҫламай, яҙыусыға  ынау срогы бирә. Уға «...ҡанлы ҡуллы бысраҡ шәхес Иҙеүкәйҙе популярлаштыра... «Башҡорт туйы»нда ырыусылыҡты  әм феодаль ҡоролошто идеаллаштыра...» тигән ғәйептәр тағалар. 1949 йылдың  6 февралендә булып үткән яҙыусылар йыйылышында «Шәүрә», «Ысын мөхәббәт» пьесалары халыҡ театрҙары репертуарынан алып ташлатыла. М.Буранғолов Яҙыусылар союзынан ҡыуылып, халыҡ сәсәне исеменән мәхрүм ителеп кенә ҡалмай – 1950 йылдың 18 октябрендәге суд ҡарары менән мәңгелеккә Себергә оҙатыла. Алты йылдан ул Өфөгә әйләнеп ҡайта. Ун йылдан  уң ғына рәсми реабилитациялана. Әммә ситләтеүҙәр  аман дауам итә. Тере сағында юбилейы айҡанлы яҙылған «Рәхмәт хаты»нан башҡа бер әҫәре лә баҫылмай. Аҙаҡ ҡына, сәсәндең тыуыуына 100, 110 йыллыҡтары айҡанлы, республикабыҙ матбуғатында унының хаҡында иҫтәлектәр баҫылды, ижадына ба а бирергә тырышылды, әҫәрҙәре тупланып, ике томлыҡ рәүешендә донъя күрҙе («Таштуғай», 1994; «Сәсән аманаты», 1995).

Мөхәмәтша Буранғолов 1966 йылда вафат була.

# УЙСАН ДА, МОҢСАН ДА, ДАУСАН ДА ИЖАД

*(Ғиззетдин Иҫәнбирҙиндың тыуыуына 120 йыл)*

XX быуат башының шаулы ла, даулы ла, шомло ла йылдарында әҙәбиәтебеҙ майҙанына йәшәп килгән тәртиптәрҙән йөҙ бороп, ауыр тормошҡа нәфрәтен ә м протест ауаздарын ишеттерергә ынтылып, унда толҡа, йәм таба алмауын, болоҡ- оноуын белдереп, тәрән хистәргә, яр ыу уйҙарға бирелеп килеп ингән ижадсылар ярай ы күп булды. Уларҙың ҡай ы берҙәре, унда үҙ уҡмағын таба алмай, юғалып ҡалды. Шул уҡ ваҡытта араларында әҙәбиәтебеҙ күгендә кинәт балҡып китеп, са- ғыштырмаса тиҙ үнеп тә, унда үҙ эҙҙәрен ҡалдыра алғандары ла булды. Тыуыуы- на ошо көндәрҙә 120 йыл тулып үткән уйсан да, моңсан да, даусан да шағир Ғиз- зетдин Иҫәнбирҙин – ана шундай ҡәләм оҫталарының бере е.

1888 йылда Бөрө өйәҙендәге, хәҙерге Саҡмағош районындағы аҫаба башҡорт- тар ауылы Аблайҙа Сабит атлы мулла ғаилә ендә тыуған. Башланғыс белемде ул ата-әсә енән, тыуған ауылы мәҙрәсә ендә, артабан аға ы – Әхкәметдин менән бергә Бөрө өйәҙенең Рәсмәкәй ауылы мәҙрәсә ендә ала. Аң-белемдең алтын- көмөш менән дә ба алап булмай торған хазина икәнен яҡшы аңлаған Сабит мул- ла 1907 йылда улын, ҙур өмөттәр бағлап, Өфөләге шул заманда иң алдынғы иҫәп- ләнгән «Ғәлиә» мәҙрәсә енә уҡырға ебәрә. Егет тырышып белем ала, буш ваҡыт- тарында ижади эш менән шөғөлләнә. Бында ул Мәжит Ғафури, Ғәлимйән Ибра - имов, Вәсим Солтанов, Әхкәметдин Иҫәнбирҙин (бер туған аға ы), Хөсни Кә- рим кеүек шағирҙар ә м прозаиктар менән бергә уҡый, аралашып йәшәй. «Ғә- лиә»ләге ошондай ижади атмосфера, әҙәби мөхит уның ижадҡа килеүенә ҙур йо- ғонто я ай.

«Ғәлиә»лә өс йыл белем алғандан уң, Ғ. Иҫәнбирҙин мөғәллимлек эшенә тото- на. 1910 йылдың көҙөнән алып ул хәҙерге Бүздәк районы Килем ауылында, арта- бан Кушнаренко районы Ҡормаш ауылында балаларға белем бирә. Биш йыл са- ма ы бөтә күңелен биреп эшләй ул мәғариф өлкә ендә. Тиҙҙән тормош елдәре уны Башҡортостандың Урал аръяғы яҡтарына килтерә. 1915 йылдан алып 1917 йылғы Февраль революция ы көндәренә тиклем ул хәҙерге Әбйәлил районы үҙәге Аҫҡа- рҙа земство тарафынан ойошторолған төбәк китапхана ында мөдир вазифа ын башҡара. Бында ла ул халыҡты мәҙәниәткә, әҙәбиәткә, аң-белемгә ылыҡтырыуҙа арымай-талмай эшләй, үҙен оҫта ойоштороусы итеп таныта. Артабан шағир бөтә аңлы ғүмерен үҙе яраткан эшкә – уҡытыусылыҡҡа арнай. Белемен заманға яра- шлы камиллаштырыу өсөн дә күп көс ала. Уҙған быуаттың 20-се йылдары аҙағы – 30-сы йылдарҙың тәүге ярты ы арауығында, Үзбәкстан яҡтарында эшләп йөрөгән сағында, ул 1931–1933 йылдарҙа Андижанда дәүләт педагогия институ- тының киске бүлегендә уҡый, унғараҡ ситтән тороп А.К. Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтының (1957 йылдан университет – Ғ. Ҡ.) башҡорт теле ә м әҙәбиәте бүлегендә белем ала.

XX быуаттың 20–50-се йылдарында Ғиззетдин Иҫәнбирҙин Башҡортостандың Кушнаренко, Дүртөйлө, Бөрө, Илеш, Борай райондарында уҡытыусы булып эшләй. 1949 йылда, педагогик эшмәкәрлегенә 40 йыл тулыу айҡанлы, «Почет Билдә е» ордены менән наградлана. Был ваҡытта ул 1943 йылдан алып Борай районының Туҡай башланғыс мәктәбендә мөдир әм уҡытыусы вазифа ында эшләгән була. 1957 йылда ғына, үҙенә 69 йәш тулған көндәрҙә, Ғ.Иҫәнбирҙин яратҡан эшен ҡалдыра. Ул 1968 йылдың 16 ғинуарында педагогик эшмәкәрлегенең уңғы төйәге булған Туҡай ауылында вафат була.

Ғ. Иҫәнбирҙиндың ижады 1914 йылда Өфөләге «Шәреҡ» нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан «Ғиззетдин Иҫәнбирҙин шиғырҙары» тигән китаптағы өс тиҫтәнән ашыу әм 1917 йылға тиклемге осорҙа гәзит-журналдарҙа баҫылған 30-лап шиғыр менән сикләнә. Уларҙың авторы – тәбиғәте менән лирик шағир. Медитатив башланғыс, хис-тойғолар тулҡыны, элегик мотив уның ижадында төп урынды алып тора. Үҙе яҙғанса, тормоштағы идеалы «шаҡтай сыуалсыҡ» булған шағир, кеше ғүмере, йәшәү мәғәнә е, халыҡ әм тыуған ил яҙмышы тура ында уйланғанда, төрлө сиктәргә ташлана. «Ҡайҙа ул?», «Үтте», «Ҡыҙыҡ ыҙ үткән ғүмер», «Йәйләү» кеүек әҫәрҙәрендә ул:

*алҡын ыуҙар баҫмай был йөрәкте,*<br>
*Әллә илем ташлап китә е.*<br>
*Белмәйем шул, донъя ҡайҙа ла шул,*<br>
*Әллә бер ҙә тормай бөтә е? –*

тип төшөнкө йырҙарын уҙ а, «Ҡара урмандарҙың эсенә... Иң ҡараңғы тып-тып төшөнә» илтерҙәй, «әҙәмдәрҙе, шайтан, ендәрҙе» ерҙә ҡалдырып, ай, йондоҙҙар ара ында «мәңге яңғыҙ ҡалыр» өсөн осоп күккә күтәрерҙәй ҡанаттары булмауға үкенес белдер ә («Йәйләү»), икенсе бер әҫәрҙәрендә инде «боҙ булып туңған... ашҡынмаған» йөрәгенә дауа эҙләп, тәбиғәт ҡосағына – «шаулаған урманға... тын яланға юл алған» осраҡта ла, «был тәбиғәт диңгеҙе»нән иң элек халҡы өсөн «тәм алыу»ҙы беренсе планға ҡуя, лирик геройын шуны «эҙләү юлында йән-тәнен ҡыҙғанмаҫҡа» саҡыра. Тап бөйөк Бабичса. Әгәр уның лирик геройы халҡына ай нурын алып сәс ә, Иҫәнбирҙиндыҡы, – «тәбиғәт диңгеҙенән... тәм алып» еткерергә ынтыла. Улай ғына ла түгел, ул «өмөттәрҙе өшөткән зәм әрирҙең ( алҡын елдең) өрмәүен», «иректәрҙе алыр дошмандың ирекле булмауын» теләй («Ныҡ хәтер»). Ҡай саҡта хис-тойғоларға, ғазаплы уйҙарға үтә лә бирелеп китеп, төшөнкөлөк йырҙарын йырлап ташла а ла, был лирик герой ебеп төшкән, рухи яҡтан ынған кеше түгел. Шағир үҙенең «Мин теләрмен» тигән шиғри монологында:

*Был оҙон тормош юлы – михнәтле юл был, мин ышанам,*<br>
*Әлегә саҡлы түҙгәнем төҫлө үк түҙермен мин аман.*<br>
*Алда булған идеалым шик еҙ сыуалсыҡ бул а ла,*<br>
*Күҙҙәрем уҡырай а ла, арғай а ла йөҙ, улы а ла...*<br>
*Мин ялҡмам, мин аман да бик күп теләрмен иҫкесә,*<br>
*«Юҡ» тимәм тәҡдир етеп, тормош юлымды киҫмәйсә, –*

тип тормоштан, йәшәү өсөн көрәштән ис кенә лә ваз кисергә йыйынмауын асыҡтан-асыҡ оран алып белдерә.

Ғөмүмән, Ғ. Иҫәнбирҙиндың лирик геройы үҙ зарын әм михнәтен генә көйләп, үҙ яҙмышы әм бәхете өсөн генә янып-көйгән кеше түгел. Уның төрлө сиктәргә ташланып китеп борсолоу-болоҡ оуҙары иң элек туған халҡы, тыуған иле яҙмышына бәйле. Милли-колониаль әм социаль иҙеү, деспотизм әм закон ыҙлыҡ бермә-бер көсәйгән ҡара реакция йылдарында был яҙмыш айырыуса аяныс, «ҡуҙғала алмаҫ, тын да алмаҫ» хәлгә килтергән, «өҫкә ауған мең ботло гер» кеүек ауыр. Бына шуға күрә лә шағир «осратмаҡ булып таҙа, аҡ ерҙәрҙе» тарих биттәрен аҡтарып ҡарағанда ла:

*Юҡ уның да шатланырлыҡ бер төшө —*
*Эс бошорғос ҡанлы йәш тик көллө ө, —*

тип әйтергә, был тормошто «ҡыҙыҡ ыҙ үткән ғүмер» менән тиңләргә мәжбүр. Ул айырым кеше бәхетен әм булмышын халҡы яҙмышынан, йәмғиәт бәхетенән айырып ҡарамай, улар ара ындағы диалектик бәйләнеште ярай ы төҫмөрләй. Кешенең тулы бәхете, ғүмеренең шатлыҡлы үтеүе халыҡ, йәмғиәт бәхетле булғанда ғына мөмкин, тигән фекерҙә тора. Шуға ла шағир, үҙен «бәхет дуҫ-иштәренән элгәре алға өрөп», эштәре көйлө булып та, халҡының хәл-әхүәле әм эштәре ул теләгәнсә булмауына ныҡ әсенә:

*Кәмселек тик: мин тигәнсә милләтемдең ифрады (үҙ аллылығы),*
*Алға баҫҡан эҙҙәре лә башҡаларҙай булманы.*

Ошо поэтик юлдарҙы теркәгән «Мин вә мөхитем», «Егетлек», «Ғаләм вә мәшәҡәт», «Мин телләрмен», «Үтә көндәр...» кеүек әҫәрҙәрҙә шағирҙың заманы проблемалары менән яныпкөйөп йәшәүе, шәхес әм халыҡ, шәхес әм йәмғиәт тема ын әр саҡ ижадының үҙәгенә ҡуйыуы асыҡ күренә. Уның лирик геройы — милләтенең, тыуған иленең ауыр яҙмышын үҙ йөрәге аша үткәргән, яуызлыҡ, монафиҡлыҡ, деспотлыҡ хөкөм өргән донъяла саф выжданды, әхлаҡлылыҡты әләм итеп күтәреп йәшәргә ынтылыусы шәхес. Мәғрифәтселек идеяларын йырлағанда ла ул иң беренсе сиратта әхлаҡ төҙәтеүҙе, намыҫлылыҡты алға өрә. Шуға ла бер талай әҫәрҙәрендә, айырыуса тәүге ижад емештәрендә, төп иғтибарын ул ғаиләләге, дуҫ-иштәр ара ындағы мөнәсәбәт мәсьәләләренә йүнәлтә. уңғараҡ инде шағирҙың мәғрифәтселек ҡыҫа ы менән сикләнгән әхлаҡи-этик фекерҙәре, а -зарҙары офоҡтары киңәйә барып, йәмғиәттәге тәртиптәргә, социаль проблемаларға йүнәлтелә башлай. Кеше яҙмышын әм бәхетен ана шул йәмғиәттәге тәртиптәрҙән айырып ҡарамай башлаған шағир, өгөт-нәсихәттән, зарланып ыҡтауҙан арына төшөп, хәҙер үҙенең «намыҫ-йөҙҙө» аяҡ аҫтына алып тапатмаҫ, «зарҙы күр әтмәҫ» өсөн көрәшкә тотонорға, «яу күр әтергә» ниәтләүен асыҡтан-асыҡ белдерә. Бөйөк Ғ.Туҡайҙың «Шағир» тигән шиғырына эйәреп яҙған «Егетлек» әҫәрендә бына нисек белдерә ул үҙ позиция ын:

*Етер, артыҡ түбәнлеккә, малайлыҡҡа был йән түҙмәй,*
*Аяҡ аҫтына алырға олтораҡлыҡҡа бар намыҫ йөҙҙө.*
*Ашыҡмаҫтан кисермен диңгеҙен әм тәп-тәрән ярын,*
*Текә тау, ҡап-ҡараңғы төн, ҡара урмандарын барын.*

Бында Ғ. Иҫәнбирҙиндың М. Ғафури, Ғ. Туҡай кеүек демократик ҡарашлы шағирҙарҙың, рус әҙиптәренең ижад емештәре менән ныҡлап таныша башлауы ла үҙ ролен уйнамай ҡалмаған. Тикмәгә генә йәш шағир 1913-1914 йылдарҙа А.Пушкин, А.Кольцов кеүек күренекле рус шағирҙарының әҫәрҙәрен тәржемә итергә йә ижади эшкәртергә тотонмаған. Был рус, башҡорт, татар шағирҙары ижадының гуманистик асылын, халыҡсан-демократик идеяларын үҙләштереү, поэтик оҫталығынан өйрәнеү, әлбиттә, уның донъяға ҡарашы үҫеүгә, художество оҫталығы камиллашыуға, шиғриәтенең идея-тематик даирә е киңәйеүгә ҙур этәргес биргән. Уның ошо йылдарҙа яҙған «Мин телләрмен», «Ныҡ хәтер», «Теләк бул а», «Тормош», «Ҡаты көрәш» әҫәрҙәре — бының асыҡ дәлиле. Уларҙа шағир, кеше өсөн был донъяла үҙ әм халҡы бәхете, рухи камиллылығы, яҡты киләсәк өсөн көрәштән дә изге эш юҡ, тигән фекерҙә тора әм уны киң ҡатлам уҡыусы күңеленә үтемле итеп еткерергә ынтыла. Йәшәүҙең маҡсатын ул:

*Бүләк көтмәй, киреп күкрәк барыу тик*
*Әҙәмдәргә бәхет эҙләү юлында, —*

тип билдәләй.

Әҙәбиәттә төшөнкөлөк, романтизмдың пассив, консерватив йүнәлештәре

өҫтөнлөк алған осорҙа: «Әсир йән, ғазап менән тулды выждан... Ағып йылдар бере артынса бере е. Дәриғ (үкенес), ғүмерем юғалды, бөттө бары ы», – тип пессимизмға бирелгән шағир, ысынбарлыҡҡа, реаль тормошҡа яҡыныраҡ килгән, айығыраҡ күҙ алған айын, ябай халыҡ масса ына ихтирам менән ҡарай, уның ижади көсөнә, киләсәгенә өмөт менән ҡарай, хеҙмәткә, алға ынтылышҡа дан йырлай, халыҡ ҡанын урыусы әрәмтамаҡтарҙы тәнҡит утына тота башлай. «Ғаләм вә мәшәҡәт», «Кәйефең ҡырыу» кеүек поэтик мөрәжәғәт-хаттарында – мәктүбтәрендә ул, «эш вә хиссиәт менәндер инсандың (кешенең) инсанлығы» тигән позициянан тороп, замандаш ҡан-ҡәрҙәштәрен:

*Киң ғаләмгә кил фәҡәт эшләр өсөн ең ыҙғанып,*
*Буш-бушыңа башҡалар икмәк ашатмаҫ тоҙ алып...*
*Солғап ал ын дүрт яғың эш әм мәшәҡәт атҡы ы,*
*ытма йөҙ, әр дәм дә (мәлдә лә, улышта ла)*
*бул эшлекле ир әм шат кеше, –*

тип хеҙмәткә, актив эшмәкәрлеккә, «туғанлыҡҡа, мөхәббәткә әр заман тулы булырға» өндәй. Ә инде шул уҡ уҡыусыға мөрәжәғәт итеү форма ында ижад ителгән «Ауыл» тигән икенсе бер мәктүбендә – шиғри хатында инде ул ғибрәт өсөн ана шул «тереклектә уңай яҡты алырға», «тәбиғәтте егергә... уғарырға.. тарттырырға» ынтылмай, «ҡабынмай», янмай ғына вайым ыҙ йәшәү арҡа ында хараба хәленә килтерелгән башҡорт ауылының «йән еҙ, хәят ыҙ... яҡты көн өҙ» аяныс картина - ын тыуҙыра. Шуның менән шағир ялҡаулыҡтың, йүнсел еҙлектең әм вайым ыҙлыҡтың ниндәй аяныслы эҙемтәләргә килтереүен сағыу итеп күҙ алдына баҫтырыуға өлгәшә.

Ғ. Иҫәнбирҙин шиғриәтендә ҡара реакция әм яңы революцион күтәрелеш йылдарында ижад иткән күп шағирҙарҙың әҫәрҙәренә хас булған тәбиғәт тема ы ла ярай ы ғына урын ала («Ҡаты ямғырлы төн», «Юҡ бер әйбер», «Ҡышҡы юл (Пушкинға эйәреп)», «Тәбиғәттә», «Ҡышҡы төндә» .б.). Моң оу ҙа, шатлыҡлы ла ноткалар менән уғарылған шиғырҙарында шағир, ҡай ы бер ҡәләмдәштәре кеүек, ижтимағи ысынбарлыҡтан, халыҡ тормошонан айырылып китеп, бары тәбиғәт ҡосағына ташланған, унда тынғылыҡ эҙләгән әм тәбиғәт бала ына әүерелгән кеше ҡиәфәтендә сығыш я амай. Тәбиғәт картиналары аша ул заманының типик образын тыуҙырырға, улар менән йәмғиәт тормошо ара ында параллель үткәрергә, тәбиғәт күренештәренә фәлсәфәүи мәғәнә алырға ынтыла. Уның «Тәбиғәттә» әҫәрендә әйтелгәнсә:

*Тыңла, бел, тап: нәмә былар, ниндәй хикмәт, ниндәй сер,*
*Ниндәй иркен, хөр, матур батшалыҡ был үҙ-ара!..*
*Унда мәжлес, унда шатлыҡ, мәңге гөрләү, төн вә көн...*
*Таң ҡалырлыҡ был ғәжәп серҙәрҙе аҙыраҡ уйла аң...*

Ғ. Иҫәнбирҙиндың тәбиғәт тема ына яҙылған шиғырҙарын, шалтырауыҡ риторика түгел, бәлки, бик тә тәбиғи образлы фекер йөрөтөү өҫтөнлөк итә. Бында рус шиғриәте, А. Пушкин кеүек бөйөк шағирҙар ижады йоғонто онон роле бик ҙур. Тап Пушкинса, Некрасовса, Кольцовса тәбиғәт менән ижтимағи тормош күренештәре ара ында бәйләнештәрҙе күрергә әм күр әтеп бирергә ынтылыу башҡорт шағирының тәбиғәт тема ын сағылдырған медитатив лирика ы офоҡтарын тыуған ергә, тыуған илгә мөхәббәт, уның алға китеше өсөн көрәш темаларын, социаль-сәйәси проблемаларҙы яҡтыртҡан, граждандлыҡ рухы менән уғарылған манифестацион-публицистик характерҙағы шиғриәт донъя ына килтереп тоташтыра. Социаль әм милли-колониаль иҙеүгә, иҡтисади әм мәҙәни артталыҡҡа ҡаршы көрәш әүҙемләшкән, башҡа «илдәр япрағын ярған», революцион-демократик идеялар ныҒыраҡ тамыр йәйгән XX быуат башы шарттарында уның туған халҡының, тыуған еренең бөгөнгө хәле, киләсәк яҙмышы өсөн янып-көйөп яҙған

түбәндәге шиғри юлдары – шуның асыҡ миҫалы:

*Килде яҙҙар, тулды ярҙар  ыу менән,*
*Был бәхет еҙ илдә иремәй ҡар ҙа әле.*
*Күккә сыҡты, күкрәне гөл-гөнсалар,*
*Беҙҙең илдәр япрағын да ярманы.*

Ә инде Ғ. Иҫәнбирҙиндың шиғри мөрәжәғәт форма ында ижад ителгән «Тыуған ил» әҫәрен XX быуат башында башҡорт шиғриәтендә был темаға арналған  әм Ш.Бабич, Ғ.Туҡай, М.Ғафури кеүек күренекле шағирҙарҙың тыуған ил, халыҡ  әм тел тура ындағы халыҡсан мәҙхиә-одаларына а әндәш булған иң  әйбәт ижад емештәренең бере е тип әйтергә мөмкин.

*Эй, тыуған ил, мин яратҡай вә бар булған илем,*
*Иң беренсе ҡат ҡына башлап  улыш алған илем;*
*Әсәйемдең бик яратып, ҙур бәхет, абруй теләп,*
*Тәҡдим иткән пак  өтөн башлап ҡына  урған илем, –*

бына ошолай эске бер нескәлек, тәбиғилек менән белдерә шағир үҙенең тыуған төйәгенә ҡарата булған  өйөү хисен, мәҙех  үҙен.

Яңы революцион күтәрелеш  әм империалистик  уғыш йылдарында Ғ. Иҫәнбирҙин ана шулай тормошҡа айығыраҡ баға, оптимистарса ҡарай, заманының үтә лә ҡатмарлы асылына тәрәнерәк үтеп инә барғанлығын күр әтә. Ул милли  әм социаль азатлыҡ, тигеҙ еҙлек  әм ғәҙел еҙлек мәсьәләләренә көндән-көн йышыраҡ мөрәжәғәт итә, буржуаз йәмғиәттең мораль йөҙөн, социаль асылын ҡыйыуыраҡ  үрәтләй, үҙенең «көрәшкә әҙер көслө яугир булыуын, яҡты өмөт-маҡсаттары» өсөн «күкрәк киреп» көрәшкә сығыуын, киләсәккә ҙур өмөттәр бағлап йәшәүен асыҡтан-асыҡ белдерә («Шуға ла йөҙ  ытмайым донъяға мин... Була бит ҡыш  уңында йыл  айын йәй»). Хатта әҙәп-әхлаҡ тема ын үҙәккә ҡуйған шиғри парсаларында ла ул йыш ҡына социаль мәсьәләләрҙе урап үтмәй. Бына бер генә миҫал:

*Яҡшымы алтын кейеү, ҡәрҙәш  өйөү, меңдәр йыйыу?*
*Остоҡ саҡлы булма а күңелдә инсанлыҡ  өйөү.*

Шулай итеп, башҡорт поэзия ында  романтизм  методы өҫтөнлөк ала, әҙәбиәт күгенде ҡара реакция шәүлә е ҡаплай барған шарттарҙа ижад майҙанына моң оу, төшөнкө рухлы  әм мәғрифәтсел йүнәлешле әҫәрҙәр яҙып килеп ингән Ғиззетдин Иҫәнбирҙин артабан, үҙе үк яҙғанса, выжданды әләм итеп, «яуыз яҙмыш бүре кеүек өҙгөләргә... асырмай күҙ... өҫтән осҡан» мөхиттә «аяҡ таймаҫ, еңелмәҫ ипле яҡты... ныҡлап эҙләй», тыуған иле, халҡы тормошона, заманы проблемаларына йөҙ бора  әм реалистик пландағы шиғырҙар ижад итә башланы. Уларҙа ул осор трагедия ының, ярлылыҡ, яуызлыҡ, әхлаҡи шөҡәт еҙлек күренештәренең ниндәйҙер абстракт көстәрҙең ҡушыуынан, халыҡтың наҙанлығынан, ялҡаулығынан килеп сыҡмауын, бәлки, «бер кешенең көсөн икенселәр ашауы»нан икәнлеген аңлау  әм шуны киң ҡатлам уҡыусыларға аңлатыу юғарылығына күтәрелде. Медитатив  әм манифестацион-публицистик тәбиғәтле, гуманистик рухлы бындай әҫәрҙәре менән ул XX быуат башы башҡорт шиғриәтенең матур бер битен яҙыуға, унда үҙ урынын алыуға өлгәште.

**Ғиниәт ҠУНАФИН,**
**филология фәндәре докторы,**
**БДУ профессоры.**

# НЫҠЛЫ ҒАИЛӘ – ЙӘМҒИӘТТЕҢ ТОТОРОҠЛО ҮҪЕШЕ НИГЕҘЕ

Рәсәйҙә “Ғаилә йылы” тип иғлан ителгән 2008 йыл ғаилә проблемаларын дәүләт әм ижтимағи тормош үҙәгенә ҡуйып, был өлкәлә дәүләттең оҙайлы сәйәсәтен эшләү өсөн нигеҙ булып әүерелде. Илдә аҡрынлап ғаилә менән дәүләт әм йәмғиәт ара ында мөнәсәбәттәрҙең яңы философия ы барлыҡҡа килә.

Ғаилә йылы, әлбиттә, иҫтәлекле даталар йыйылма ы түгел, ә иҡтисад, психология, хоҡуҡ өлкәләрендә тикшеренеүҙәргә таянып алып барылған ғаилә менән ғәмәли эшмәкәрлек. Республикабыҙҙа исемле йылдар традиция ы, социаль проблемаларҙы хәл итеүгә йәмғиәттең көсөн туплау байтаҡтан бирле йәшәй. Шуға күрә лә Башҡортостанда “Ғаиләне социаль яҡлау йылы” ғаилә институтын нығытыу, демографик мәсьәләләрҙе хәл итеү, халыҡтың аулығын нығытыу буйынса оло эште артабан дауам итеү булды. Ғаиләнең федераль кимәлдә лә дәүләт сәйәсәтенең өҫтөнлөклө йүнәлеш итеп ҡаралыуы беҙ айлаған курстың дөрөҫлөгөнә ышанысты нығыта, ошо өлкәлә алып барылған эшмәкәрлекте федераль программалар менән яраштырырға, өҙөмтәлерәк эшләргә булышлыҡ итә.

Республикала ғаиләне социаль яҡлау йылы буйынса сараларҙы ғәмәлгә ашырыу комплекслы программаға әм ҡала, район округтарының программаларына ярашлы алып барыла. Иҡтисади хәлдең тотороҡлолоғо балалы ғаиләләргә күр әтелгән социаль яҡлау күләмдәрен арттырырға мөмкинлек бирә. Ғаиләгә дәүләт ярҙамы күр әтеүгә йүнәлтелгән норматив хоҡуҡи акттар әҙерләү – Башҡортостан Республика ында ғаиләне социаль яҡлау комплексы программа ының иң мө им бүлектәренең бере е. Ошо өлкәлә барлығы игеҙ документ әҙерләнде. Мәҫәлән, Башҡортостан Президентының 2008 йылдың 14 июлендәге Указына ярашлы, “Башҡортостан Республика ының 2025 йылға тиклем демографик сәйәсәте концепция ы” ҡабул ителде. Был документ дөйөм күр әткестәр әм хәҙерге демографик хәл үҙенсәлектәренә анализ я ай, Башҡортостан Республика ы Хөкүмәте тарафынан был өлкәлә билдәләнгән маҡсаттар әм бурыстар, уларҙы хәл итеү юлдарын үҙ эсенә ала. Ошо йылдың 1 авгусынан күп балалы ғаиләләрҙең ҡай ы бер категорияларына айлыҡ пособиелар арттырылды. Дүрт балалы ғаиләләр өсөн был пособие 1 мең умдан 1,5 мең умға етте. Ә биш әм унан да күберәк балалы ғаиләләргә элекке 1,5 мең урынына хәҙер 2 мең ум түләнә. Башҡортостан Республика ы Хөкүмәте билдәләгән тәртиптә был пособиелар артабан арттырылып тороласаҡ. Хәҙерге көндә ошондай пособиеларҙы 7 меңдән ашыу ғаилә ала. Уларға өҫтәмә рәүештә 18,5 миллион ум түләнәсәк.

Башҡортостан Республика ының “Балаға айлыҡ пособие тура ында” законының 4-се статья ына өҫтәмәләр индереү тура ында закон проекты әҙерләнек. Уға ярашлы, БР Хөкүмәте тарафынан билдәләнгән пособиеларҙың күләмен арттырыу тәртибе әм ваҡыты күр этелеп, балаларға айлыҡ пособиены арттырыуҙы тиҙ арала башҡарып сығыу мөмкинлеге асыла. Был закон проекты Башҡортостан Республика ы Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай тарафынан беренсе уҡыуҙа ҡабул ителде лә инде. Бынан тыш, Башҡортостан Республика ы Президентының Указына индерелгән төҙәтмәләр буйынса 2008 йылдың 1 ғинуарынан 9 әм унан да күберәк бәлиғ булмаған балалар тәрбиәләгән ғаиләләргә “Газель” тибындағы бәләкәй автобустар бирелә башланы. Уға тиклем быңдай автобустар 10-дан кәм булмаған бала аҫраған ғаиләләргә генә бирелә ине. Күп балалы ғаиләләргә барлығы 32 автобус тапшырылды, тағы ла 4 ғаилә буйынса документтар әҙерләнә.

Ошо йылдың 1 февраленән “Әсә даны” миҙалы менән бүләкләнгән күп балалы әсәләргә бер тапҡыр бирелә торған аҡса 8 мең умдан 10 мең умға тиклем артты. Ошондай бүләккә хәҙерге көндә 4 меңдән ашыу әсә лайыҡ булды. Башҡортостан Республика ы Хөкүмәтенә күп балалы ғаиләләргә коммуналь хеҙмәттәр, балалары юл йөрөүҙә түләүҙәр өсөн дәүләт ярҙамы күр этеү буйынса ҡарауын ябайлаштырыу йә этенән төҙәтмәләр индерелде. Дәүләттән ошондай ярҙамды әлеге ваҡытта 16 меңдән ашыу күп балалы ғаилә ала. Комплекслы программаның 26-сы пунктына ярашлы, 2008 йылда бала матди тәьминәткә мохтаж әм тыныс булмаған ғаиләләрҙән 107 мең бала эшкә урынлаштырылды, аулығын нығытты. Быйыл барлығы 418 мең бала, үҫмер әм йәштәр (2007 йылғы кимәлдә) эш менән мәшғүл булды, ял итте, сәләмәтлеген нығытты. Матди тәьминәткә мохтаж ғаиләләргә ярҙам итеү әм комплекслы программа сараларын ғәмәлгә ашырыу өсөн Башҡортостан Республика ының Хеҙмәт әм халыҡты социаль яҡлау министрлығында юридик әм физик шәхестәрҙән килгән аҡсаларҙы иҫәпләп барыу өсөн бюджеттан тыш иҫәп асылды. Был иҫәпкә күсерелгән аҡса 28 миллион 494 мең умға етеп, ул ғәрип әм етем балаларҙы, матди яҡтан мохтаж әм күп балалы ғаиләләргә ярҙам күр этеү, ғәрип балаларға тиҙ әм ҡиммәтле операциялар эшләүгә, ғаиләне социаль яҡлау менән бәйле сараларға тотонолдо.

Ошо иҫәпкә күсерелгән аҡсаларҙың бер өлөшө, мәҫәлән, 2 миллион ум, 2-се Республика клиник дауахана ының психоневрология әм эпилептология балалар клиник үҙәгенә “церебраль паралич” диагнозы ҡуйылған балаларға реабилитация үткәреү өсөн яңы ҡоролма алыуға файҙаланылды. 5 миллион 750 мең ум Республика балалар клиник дауахана ының клиник диагностика лаборатория ына яңы ҡоролмалар атып алыуға китте. 4 миллион 580 мең ум 2007-2008 уҡыу йылында мәктәп тамамлаған 259 етем әм ата-әсә тәрбиә енән мәхрүм ҡалған балаға бирелде. Туғыҙынсы класс тамамлағандарға 15-әр мең, 11 класты тамамлағандарға 20-шәр мең ум. Бынан тыш, шәфҡәтлелек фондтарынан тулы булмаған ғаиләләрҙә үҫкән ғәрип, шулай уҡ ике әм унан да күберәк ғәрип балалы ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән 2940 балаға матди ярҙам күр этелде. Ҡаты ауырыуҙарҙан яфа сиккән балаларға ҡиммәтле тиҙ ярҙам күр этеү, ишетеү әләтен ҡайтарыу өсөн 13 ғаиләгә барлығы 3 миллион 134 мең умлыҡ матди ярҙам күр этелде.

Шулай итеп, мохтаж ғаиләләргә ярҙам итеү өсөн шәфҡәтлелек күр этеү

фонды иҫәбе асылғандан алып 27 миллион 42 мең умлыҡ сығымдар тотонолдо. Был ғаиләләр ара ынан матди ярҙамға айырыуса мохтаж булғандарҙы, ғәрип әм ҡаты ауырыуҙарҙан яфаланған, ата-әсә еҙ ҡалған балаларҙы айырып атарға кәрәк. Ойоштороу комитетының 2008 йылдың 11 июнендәге ҡарары буйынса муниципаль ҡала әм райондарҙың хакимиәт башлыҡтарына матди ярҙамға мохтаж әм күп балалы ғаиләләргә ярҙам күр әтеү өсөн махсус иҫәптәр асырға тәҡдим ителде. Анализдарҙан күренеүенсә, 34 муниципаль ҡала әм районда ошондай иҫәптәр асылған, был мохтаж ғаиләләргә өҫтәмә матди күр әтеүгә мөмкинлек биргән. Сибай әм Баймаҡ ҡалаларында, Благовещен, Ғафури, Дүртөйлө, Учалы әм башҡа ҡай ы бер райондарҙа был эш яҡшы ойошторолған. Байтаҡ муниципаль берәмектәрҙә социаль ярҙамға мохтаж булған күп балалы, тулы булмаған, ғәрип балалы ғаиләләргә, ветерандар әм пенсионерҙарға торлаҡты йүнәтеү, кисектерге еҙ көнкүреш проблемаларын хәл итеүҙә шәфҡәтлелек акциялары ойошторалар.

Ғаилә – күп яҡлы күренеш. Әлеге закондар нигеҙендә күр әтелгән ғаиләне социаль яҡлау сараларының бөтә булған проблемалар йыйылма ын хәл итеп бөтә алмауы ла ихтимал. Йыш ҡына ярҙамға мохтажлыҡ көтмәгәндә килеп тыуып, тиҙ арала хәл итеүҙе талап итә. Шәфҡәтлелек иҫәбенең булыуы ошондай ярҙамды йөҙәрләгән ғаиләгә ваҡытында күр әтергә ярҙам итә лә инде.

Комплекслы программа сиктәрендә шулай уҡ мәктәп-масса әм спорт саралары уҙғарыу ҙа ҡаралып, улар ғәмәлгә ашырыла килә. Ваҡытлы матбуғатта ғаилә традицияларын, сәләмәт тормошто маҡтаған материалдар күбәйҙе, социаль закондарҙы аңлатырға ла ҙурыраҡ иғтибар бирелә башланы. Башҡортостан телевидение ында социаль реклама барлыҡҡа килде. Ғаилә тормошон пропагандалауҙы муниципаль ҡала әм райондарҙа ла әүҙемерәк алып барырға кәрәк ине, тип теләге килә. Бының өсөн ҡала әм ауыл урамдарындағы информацион стендтарҙы йоғонтолораҡ файҙаланыу маҡсатҡа ярашлы.

Социаль етемлек, балалар енәйәтселеге әм башҡа социаль яҡтан зарарлы күренештәрҙе булдырмау буйынса ла күрелгән саралар бар. Ғаиләне социаль яҡлау йылында ғәмәлгә ашырылған сараларҙы ентекле анализлау ойоштороу комитетының йомғаҡлау ултырышында булыр тип көтөлә. Ләкин йыл тамамланыу менән генә социаль проекттарҙы тормошҡа ашырыу туҡталмаясаҡ, сөнки ғаилә йылы – бер тапҡыр үткәрелә торған акция түгел, ә оҙайлы программа әм ул ғаилә институтын нығытырға тейеш. Башҡортостан Республика ы Президенты М.Ғ. Рәхимовтың Башҡортостан Республика ы Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайға йыллыҡ Мөрәжәғәтнамә ендә әйтелеүенсә: “Хәлдәрҙең яҡшыға үҙгәреүен Башҡортостанда йәшәгән әр ғаилә, әр кешенең тойоуы иң мө име”. Ҡуйылған бурыстарҙы үтәү өсөн ҡулдан килгәндең бары ын да эшләргә бурыслыбыҙ. Ныҡлы ғаиләнең илдең тотороҡло үҫеүенең, йәмғиәттең алға барыуының нигеҙе икәнлеген тормош раҫланы инде.

**Фидус ЯМАЛЕТДИНОВ,**
**Башҡортостан Республика ы Хөкүмәтенең Премьер-министр урынбаҫары, хеҙмәт әм халыҡты социаль яҡлау министры.**

# ИНТЕЛЛИГЕНЦИЯ ӘМ ИНТЕЛЛИГЕНТЛЫЛЫҠ:

***өйләшеүҙе дауам итәбеҙ***

## Уйсандарҙың дүрт юлы

«Агиҙел» журналының быйылғы бер нисә анында ошо темаға алып барылған өйләшеүҙә мин шәхсән хөрмәт иткән кешеләр үҙ фекерен белдерҙе инде. Улар менән бәхәскә инергә теләмәйем, сөнки мәҡәләләрҙә «интеллигенция әм интеллигентлылыҡ» төшөнсәләренә аңлатма бирелде әм уларҙың әр бере ендә лә дөрөçлөк бар.

Хәйер, интеллигентлылыҡ төшөнсә енә тулы аңлатма биреү, — минеңсә, хәйер еҙ шөғөл. Уға аҡыллы кешеләр элегерәк тә күп төрлө билдәләмә я ап ҡараған инде. Интеллигенцияны яратмаусылар уға кире мөнәсәбәт белдерә. Ленин, мәçәлән, «интеллигенция милләттең сәскә е түгел, ә буғы» тип ебәрә хатта. Тик бит ундай ҡатлам бар, әр хәлдә милләттең интеллигенци я ы вәкиле булырға ынтылыш та юҡ түгел.

Ә ниндәй булырға тейеш уң ул? Бәлки, интеллигентлылыҡ — йәмғиәттең йәшәү шарттарына күрә тәрбиә алыусының холоҡ-фиғеленең тышҡы кәүҙәләнешелер? Күргәнебеҙ бар ҙа инде: бәғзе кешеләр (йәнә е лә, интеллигентса) униформа кеүегерәк кейенә, артыҡ үҙ ысҡындырмай, үлсәп өйләй, башын уйлап ҡына бора, йәтеш итеп кенә йылмая, кәрәккән ерҙә лә өндәшмәй ҡалырға көс таба... Ысынында, төшөнсә эсенә яҡындарыңа, сит-яттарға ҡарата итәғәтле мөнәсәбәттә булыу, бүтән төрлө фекерле кешеләрҙең фекеренә ҡарата сабыр, түҙемле ҡараштa тороу, уны ҡабул итергә әҙерлек, әммә аумаҡайланмай, башҡаларҙы рәнйетмәй генә үҙ фекереңде яҡлай белеү, бүтәндәрҙе кәм етмәйенсә үҙ бәçеңде, мәртәбәңде юғалтмау кеүек сифаттар ыйырға тейештер ул.

Төшөнсә үҙе XIX быуаттың ижтимағи әм сәйәси даирә енең эшмәкәрлек әм ғүмер итмеш үҙенсәлеге арҡа ында айырым бер кастаның фиғел сифаттары нигеҙендә формалашты, буғай. Рус интеллигенция ы бына бер нисә быуат инде тайпылыш ыҙ ыналған мораль кодексҡа буй онорға тырыша.

Ана шул бер нисә быуат буйы рус интеллигенция ы «рус халҡының яҙмышы, уның менталитеты» алдында баш эйә әм ошоларҙы яҡлау маҡсатында «Рәсәй власы» менән көрәшкә инә. (Әммә был бирелгәнлек уның ҡай ы бер вәкилдәренә теләә ниндәй власть структура ы ҡалыбы әм идеология ына ыйып, яраҡлашып китергә, унан мораль әм матди дивиденд а уырға әм үҙ инаныстарына хыянат итергә ҡамасау итмәй.)

Ошондай аумаҡайлыҡ арҡа ындалырмы, уйсан, фекерле, ижади ҡарашлы ҡатламдағы шәхестәрҙе ҡыйыр ытыу, уларҙың халыҡ алдындағы абруйын төшөрөү XX—XXI быуат власть органдарының әҙмә-эҙлекле сәйәсәтенә

әүерелде. Кәм етелгән интеллигенция сара ыҙлыҡ тотҡононан ысҡыныу юлдарын таба алмауҙан йыш ҡына депрессияға, эскелеккә бирелде.

Билдәле булыуынса, кешенең тәбиғәтендә күрәлмаусылыҡ тигән сифат етерлек. Кешеләр бүтән берәүҙең матурлығынан, байлығынан көнләшә. Әммә был ике сифатты ла ғәфү итергә  әләт тә таба. Заманалар ҙа, замандаштар ҙа бер нәмәне генә бер ҡасан да ғәфү итмәй: ул — аҡыл. Үҙенән аҡыллының өҫтөнлөгөн таныу, уға оҡланыу  әм ба алау  әләте — тик ысын интеллигентҡа хас күренеш ул. Тимәк, интеллигентты кәм етеүҙән ләззәт кисереү, уның еңелеүен көҫәү — кешелектең регрестан сыға алмауының нигеҙе ана шунан да ғибәрәт.

Тоталитар режимы менән халыҡ массаларын дөрөп алып барған компартия идеология ының кешелек еҙ сәйәсәтенә риза ыҙлыҡ белдереү  әм уны реформалар аша үҙгәртеү идея ы, әлбиттә, элитар интеллигенцияның хыялы ине. Әммә, үкенескә ҡаршы, идея ашығыс-бошоғослоҡ, үҙгәртә алыу эйфория ы аша башланып китте,  әм был күтәрелеште эләктереп алған подлецтар уны үҙ файҙа ына буй ондорҙо.  әм беҙ ғүмер иткән уңғы ике тиҫтә йыл сама ы ваҡыт — халыҡтарҙың нисәмә-нисә йылдар буйы юғалтыуҙар аша яулаған байтаҡ мораль, матди ҡаҙаныштарын юҡҡа сығарҙы. Халыҡ төшөнкөлөккә бирелде  әм унан әле лә сыға алғаны юҡ. Эҙемтәләре бала сағы  әм йәшлеге шул смута йылдарына тура килгән быуын яҙмышында тәрәнерәк тә асыласаҡ әле…

Ә башҡорт интеллигенция ы и ә, минең аңлауымса, властарға ышаныс менән ҡарай. Сөнки, власть органдары милләт үҫеше, уның мәҙәни үҙенсәлектәре юғалмауы өсөн  яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алырға бурыслы, тип иҫәпләй. Шуға ла башҡорттар өсөн власть органдары,— кузовына ресурс тейәп алған административ аппарат булыуҙан бигерәк, халыҡтың күңел  әм зи ен талаптарын ҡәнәғәтләндереү мөмкинлегенә эйә, уның матди хәлен яҡшыртырлыҡ ҡаҙна ы булған таяныс. Шатлыҡҡа күрә, уңғы йылдарҙа бындай хеҙмәттәшлек ярай ы ғына уңыштарға ла килтерҙе. Халыҡ яҙмышына аяулы булырға саҡырыусы интеллигенцияның күп кенә идеалдары власть органдары тарафынан тормошҡа ашырыла килә. Халыҡтың рухи талаптарына ҡарата ҡараштың үҙгәреүе, милләттең үҙаңы асыла барыуы — интеллигенция менән дәүләт органдарының уртаҡ ҡаҙанышы ул. Бындай тандемдың нигеҙендә халыҡтың да, власть органдарының да ҙур Рәсәй дәүләте эсендәге дессидентлыҡтың хәйер еҙ булыуын аңлау  әм ба алау ята, әлбиттә. Был тәңгәлдә Башҡортостан халҡы тарафынан хупланған Республика Конституция ының яҙмышын иҫкә төшөрөү ҙә етә.

Интеллигенцияның төп сифаты — мораль принциптарға тоғролоҡ.  әм был быуат-быуаттар буйы халыҡ аҡылы  әм хәтере иң ҡиммәтле хазина тип таныған принциптар  әм ҡанундар "заман үҙгәрә" тип кенә үҙгәреш кисерергә тейеш түгел. Шуға ла, дөйөм алғанда, интеллигенцияның төп бурысы — йәшәп килгән йәки замана килтереп тыуҙырған рамкаларға ҡарата риза ыҙлыҡ белдереү  әләтенә  әм ҡыйыулығына эйә булыуҙыр ул. Сөнки ҡалыптарҙы киңәйтмәй, ҡыҫымдарҙан ҡотолмай  тороп прогресҡа өлгәшеү мөмкин түгел. Был — аксиома. Рамкаларҙың үҙе и ә төрлө-төрлө булыуы ла ихтимал. Ә интеллигенцияның аңында  әм күңелендә яралған, объектив тарихи үҫеш ҡанундарына таянған прогрессив фекер  әм авангард идея бер ваҡытта ла халыҡ тарафынан да, власть тарафынан да тиҙ генә ҡул сәпәкәйләп ҡабул ителмәй.

Халыҡ масса ын Кандинский, мәҫәлән, өсмөйөштөң нигеҙен тәшкил итеүсе тип нарыҡлай. Ә уның иң осон ижади фекергә әләтле, яҡтылыҡҡа  әм юғарылыҡҡа хәрәкәт итә белеү серҙәрен тоҫмаллаусы интеллигенция —

ижадсылар тәшкил итә. Нәҡ интеллигенция ошо осто үргәрәк этәрә, ә аҫтағылар, ҡаршылаша-ҡаршылаша, был идеяны ҡабул итеү бейеклегенә күтәрелеп еткәндә, ижадсы яңы юғарылыҡты тоҫмаллап өлгөргән була. Цивилизациялар, прогресс тап шундай фиҙакәрлек менән өлгәшелә лә инде. Эйе, интеллигентлылыҡтың төп асылы — белем, интеллект. Ә беҙҙең шарттарҙа? Әйтәйек, Россияла университеттар бынан 300 йыл элек барлыҡҡа килә. Ә Европала? Россияныҡынан йәнә лә 300 йыл тирә е алдараҡ! Университеттарҙың нигеҙендә фән үҫешә. Ә фән — ул прогресс! Ә башҡорттарҙың тәүге университеты ҡасан барлыҡҡа килеүен иҫкә төшөрөү кәрәкме икән? Хәйер, бармы ул беҙҙә милләттең мәҙәни ҡанундарын, психология ын, менталитетын, табыш, юғалтыуҙарының этимология ын өйрәнеүсе әм ғилми нигеҙләү менән етди шөғөлләнеүсе университет? Милли идеябыҙ ниндәй, беҙ ҡайҙа табан әм ниндәй нигеҙгә таянып китеп барабыҙ? Юғары милли интеллект әм үҙенең милли традицияларын булдырған интеллигенцияның булыуы беҙҙә мөмкинме? әр хәлдә милләттәштәрем ара ынан бер генә тарихи шәхесте лә донъя мәҙәниәте ҡабул иткән мораль нигеҙҙәренә әм ҡанундар талабына ыйған йәки күтәрелгән интеллектуал әм интеллигент тип атарға телем әйләнмәҫ кеүек күренә миңә. Эйе, кемдер «ана-ана, халҡын яратмай» тип тә ысҡындырыр. Әммә үҙ бит юғары категориялар хаҡында бара, әм мин, ғәзиз милләттәштәремә сөй ҡағып, « ин шәп тә мин шәп» тигән күҙ быуыу менән шөғөлләнергә йыйынмайым (кәрәгем тей ә, майҙан алдына баҫып, уның кем икәнен әйтерлек әм яҡлырлыҡ аҡылды ла, көстө лә табырмын, иншалла), хатта ки, тура ын әйтеп өйләшергә мораль хоҡуғым да бар, тигән фекерҙәмен. Хәйер, уны ы бәләкәй нәмә. Ысынбарлыҡ хаҡында бара үҙебеҙ.

Рус дворяндары, разночинецтарының эҙләнеүҙәре, гуманизм төшөнсә ененең иң юғары нөктә е — «Ер әм азатлыҡ» («Земля и воля»), тигән ығымтаға килтерә. Ер институтының ә әмиәте аңлашыла, ул — бәхәс еҙ. Был — кешелектең мәңгелек идеалы, өмөтө әм ил ам сығанағы. Ә азатлыҡ?

…Рус яҙыусы ы Федор Решетниковтың «Подлиповцы» тигән романы бар. Уның геройының 25 йәштәр тирә ендә «күҙе асыла»: «Теперь я очень хорошо понял, — ти ул,— что те, которые ратуют за свободу,— или богачи, или такие люди, которые пользуются особенным почетом у тех, которые давят человечество. Настоящей свободы человеку нет: человек всегда будет подчиняться другому и будет находиться в зависимости от людей богатых. Бедному человеку с ничтожным знанием нечего и думать о свободе».

Ысынлап та, азат фекер, властарға ҡаршы ниндәйҙер дәрәжәләге оппозицияла булыу өсөн хатта йәмғиәт талап иткән юғары белемле, тәбиғи аҡыллы булыу ғына аҙ. Бының өсөн ин үҙең дә матди етеш еҙлектән азат йә уға битараф булырға тейеш ең. Әйтәйек, шул уҡ рус интеллигенция ын ғына алайыҡ. Диссиденттарҙы, мәҫәлән. Уларҙың күбе енең системанан азат булырлыҡ мөмкинлеге бар. Сөнки нәҫеленең өсөнсө быуын интеллигенты ул — ҡағиҙә булараҡ. Йыш осраҡта бала сағын « ыйыр ҡойроғон бороу», кәртүф баҡса ын өҙләк өҙ мәтүк менән туҡмау, көйәнтәләп ыу ташыу, мең ғазаптар менән юғары белемгә өлгәшеү, эшләй башлағас, етеш еҙлек, фатир ыҙлыҡ арҡа ында баш баҫып, система ҡанундарын еренә еткереп үтәү генә түгел, уның «хеҙмәтсе е» булыу мәжбүрилеге шарттары, рус әйтмешләй, «выживание»ға дусар кешегә, интеллигенция ҡатламын тәшкил иткән осраҡта ла, үҙ фекерен, үҙ мәртәбә ен ысынтылап яҡларлыҡ мөмкинлек бар инеме ни? Ә бит тотош быуын инек беҙ. Аңра, ялҡау ҙа түгел инек. Дөрөҫ, матди кәрәк-яраҡтан баш тартып, идея хаҡына, суфыйдәрүишлек юлын да айларға мөмкин… Ә уны ына… рухи көсөң ет ә ин-

де… Әммә конъюнктура талап иткәне өсөн әм кемдеңдер ихтыярын быуыуҙан уңай шарттар яулау ниәтенән азат булырға беҙҙең ҡай ы берҙәребеҙгә бер кем дә ҡамасауламаны. Аҡты — ҡара, ҡараны аҡ тиергә, буй онғанлыҡ шарттарында ла, намыҫыбыҙ ҡушманы. Быны ын үҙ ыңғайында ғына әйтеүем…

Минең уйымса, интеллигентлылыҡты ба алау үтә ҡыйын бул а ла, уны дүрт юл менән төҫмөрләргә мөмкиндер:

— интеллект юғарылығы;
— традицияларға тоғролоҡ;
— рухиәт кимәле;
— намыҫ.

Уларҙың өсө ө йәмғиәттәге тәртип,ҡанундар (ҡанундар ыҙ йәмғиәт булмай), йолаларҙы хөрмәт итеүгә хеҙмәт ит ә, прогресс и ә тик **намыҫ** категория ы аша ғына тәьмин ителә. Намыҫ — беҙҙең эсебеҙҙәге Ила иәт тауышы ул. «Минең өсөн былар ят нәмә,» — тип әйтеүсе табылмаҫ, әммә был төшөнсәләр нисек кенә күңелгә ятышлы булма ын, уларҙы байраҡ итеп күтәреү, шуларға тоғро булыу — иң ҡыйыны. Бының өсөн үҙеңдең кем булыуыңды ныҡлы билдәләргә әләтле булыу зарур. Ә кеше өсөн был донъяла иң ауыры — үҙен әм үҙенә оҡшаш, бер үк популяция вәкилен аңлау әләтенә эйә булыу ул.

Атаҡлы француз яҙыусы ы Антуан де Сент-Экзюпери, «Бәләкәй принц»тың авторы, ошолай ти:«Донъялағы иң ҙур юғарылыҡ — кешенең кеше менән аралашыу бәхете. Тәүтормош саҡтарынан бирле кешеләр күп нәмәләрҙе үҙләштереү шатлығын кисерергә өйрәнә, бер-береңде аңлап әм хөрмәт итеп аралаша алыу әләте — ер өҫтөндәге иң юғары талант ул». Мин был «аңлау»ға йәнә «аяу», «сабырлыҡ» үҙҙәрен генә өҫтәй алыр инем. Хәйер… аңлау — үҙе үк аяу инде ул. Был юҫыҡта әлеге лә баяғы Россия менталитетына «интеллигенция» төшөнсә ен тәкрарлап индергән XIX быуат (серебряный век) иҫкә төшә.

…Үлер алдынан Гоголь граф Александр Петрович Толстойға шундай үҙҙәр әйтә:« Я сжег главы второго тома «Мертвых душ». Жаль, мнение окружающих становится… **окружающим (** мин ыҙҙым — **Т.Ғ**.) мнением…»

Виссарион Белинский Николай Гоголдең «Ревизор» әм «Мертвые души» әҫәрҙәрен бөтөнләй ҡабул итмәй. Николай Васильевичҡа яҙған хатында (1847 йыл, 3 июль) уның ижадына ҡарата асыҡтан-асыҡ мыҫҡыллы үҙҙәр әйтә. Мәҡәләләренең бере ендә хатта ошондай ығымта я ай: «Гоголь, при всей неотъемлемой великости его таланта, не имеет решительно никакого значения в всемирно-исторической литературе». Сығышы менән разночинец, тәбиғәте менән интеллигент Гоголгә былдай пасквилдең нисек тәьҫир итеүен күҙ алдына килтерергә була. Белинскийҙың Н.В. Гоголдең яҙмышына ғәйәт ауыр йоғонто я ауына ша ит дәлилдәр етерлек. Тәнҡитсе яҙыусының «Выбранные места из переписки с друзьями» тигән китабы хаҡында ла пыран-зыран килтереп яҙып сыға. Уның ташланыуҙарына декабрист Г.С. Батенков ҡушылып китә. Ҡыҫҡа ы, йәмғиәттең (интеллигенция талап иткән) социаль етеш еҙлектәре менән көрәшеүсе, уларҙы юҡ итеү хыялы менән ҡулына ҡәләм алыусы Гоголде әр яҡлап дөмбәҫләү йыш ҡабатланып тора. «Мертвые души»ның икенсе китабын яҙыу менән мәшғүл яҙыусыны дөрөп алып баралар. Ул Белинскийға яуап хаты яҙып та ҡарай. Унда шундай юлдар бар: «Три первостепенных поэта: Пушкин, Грибоедов, Лермонтов, один за другим, на виду у всех, были похищены насильственной смертью… и никого это не поразило. Даже не содрогнулось ветренное племя…»

Ә Белинский?.. Алдынғы ҡарашлы йәш быуын ара ында осло ҡәләме менән абруй ҡаҙанған тәнҡитсе күтәргән күҫәген ташларға уйлап та ҡарамай. Нисек инде, тик Белинский ғына тәнҡитләгән Рәсәй етеш еҙлектәрен йәнә кемдер ҡәләменә эләктереп маташа? Быға, йәнә е, уның, Белинскийҙың, ғына хоҡуғы бар!

Халыҡ мәнфәғәтен яҡлаған ниндәй генә юғары идеалдар менән янма ын, ижад кеше енең нерв система ы нескә була. аҡ ыҙлыҡты, гәҙел еҙлекте улар тәрән кисерә. Нисек кенә сабыр, итәғәтле, интеллигентлы булырға тырышма ын, ахыр килеп, Гоголдең психика ы ла, нервылары ла ныҡ ҡына ҡаҡшай. Телгә алынғанса, яҙылып бөткән «Мертвые души» әҫәренең икенсе томын ул утҡа ташлай. Был хәл 1847 йылдың 11 февраленән 12 февраленә ҡаршы төндә була. Яҙыусының хеҙмәтсе е Семен был хаҡта түбәндәгеләрҙе өйләй:

«Төндә ул үҙенең бүлмә ендә оҙаҡ итеп уҡынды. Сәғәт өстәр тирә ендә мине саҡырып алды. Икенсе бүлмәгә алып сығыуымды ораны. Бүлмәләр буйлап суҡына-суҡына атланы. Шунан, өйҙәгеләрҙе уятмаҫ өсөн, шкафты шығырлатмай ғына асып, унан портфелен алып биреүҙе үтенде. Портфеленән дәфтәрҙәр тартып сығарҙы ла мейескә тыға башланы әм уларға ут төртөп маташты. Мин уның алдына теҙләнеп үтендем: «Барин, нишләүегеҙ был? Туҡтағыҙ!» «Был инең эшең түгел!» – тип яуап бирҙе. Мин илай башланым. Дәфтәрҙәр ҡапыл ғына дөрләп китмәгәс, ул уларҙы мейес эсендә таратып ебәрҙе, әм ҡағыҙҙар ялҡынланып янып китте. Уларҙың көлгә ҡалғансы яныуын ҡарап ултырҙы ла, урынынан тороп, мине үпте әм үҙ бүлмә енә табан ыңғайланы. Йомарланып диванға ятты әм илап ебәрҙе».

Ун көндән, 21 февралдә, Гоголь вафат була.

Гоголдең замандашы А.В. Никитенко «Мертвые души»ның икенсе томын ҡулъяҙманан уҡыуы, әҫәрҙең иҫ киткес көслө булыуы хаҡында яҙа. Үле йәндәрҙең Чичиков атып алғандар түгел, ә уларҙы атыусылар булыуын, әҫәрҙең милли трагедия кимәлендә булыуын билдәләй.

Александр Блок Гоголдең вафаты хаҡында ошолай ти: «Ярар, Белинский танылған тәнҡитсе лә бул ын, ти. Әммә Гоголь алдындағы гона ы менән ул рус интеллигенция ының башына етте. Интеллигенция, башы менән баҫҡыстарға уғыла- уғыла, түбән тәгәрәне әм иң аҫтағы, 1917-1918 йылғы революция баҫҡысына бәрелеп башын сатнатты».

Эйе, тарих өсөн Белинский ҙа, Гоголь дә – берҙәй юғары шәхестәр. Йырткыс аналған суртан балығының ите тәм еҙ, тип кем әйтә ала?.. Ә бөгөнгө, интеллигенция тимәйем, үҙҙәрен «шәхес» тип танытыуға өлгәшкәндәр ара ында суртандар аҙмы ни?

Ә XX быуатта уң? Кемде XX быуаттың халыҡ мәнфәғәттәре ағында тороусы намыҫлы, фиҙакәр шәхес тип атап була? Билдәле сәйәсмәндәрҙе, Ватан уғышының ҡа арман патриоттарын иҫәпкә алып булмай, сөнки интеллигенцияның урыны – замананың сәйәси оппоненты булыу икәне билдәле. Уны мин уйлап сығарманым. Кем уң? Рәсәй күләмендә Солженицынды милләттең намыҫы тип күтәреп маташалар. Әммә имперڅ әм шовинист фекерле Солженицынды күп милләтле Рәсәйҙең рухи таянысы тип атап буламы? Минеңсә, был – уңғы арала милли идея эҙләгән әм уны рус менталитетының мәҙәни ҡиммәттәрен тергеҙеүгә генә ҡайтарып ҡалдырыуҙы өҫтөн күргән националь-шовинистарҙың аламға тотоноп маташыуы ғына.

Рәсәйҙең интеллигенция ы бөгөн ике йүнәлешле, минеңсә. Бере е әлеге лә

баяғы империя идеалы (Проханов, мәсәлән) менән аташа, икенселәре глобаллек, сиктәрҙе юйыу эм, йәнә е лә, үҙен аҡлаған көнбайыш цивилизация ы эсенә инеп сумыу хыялы менән йәшәй. Миңә ҡал а, йүнәлештәрҙең ике- е лә ерлек еҙ. Петр Беренсенең Европаға тәҙрә уйып йөрөүен дә, Рус кенәзлегенең сигендә ятҡан дәүләттәрҙе буй ондороу юлы менән империя төҙөүе юлын да беҙ үттек. Белмәйем, бөгөнгө смутанан сығыу юлдарын эҙләү интеллигенцияның ғына бурысы микән әле... Заманалар үҙгәрә. Кешелекте фекере аяҙ, уйлы әҙәмдәр түгел, матди мәнфәғәт нығыраҡ ҡыҙыҡтыра.

Башҡорт ерлегендә и ә... Зәйнулла ишан, Мөжәүир хәҙрәт тирә ендә уралыусылар бар. Минеңсә, руханиҙарҙың миссия ы интеллигенлылыҡ төшөнсә е талаптарынан алыҫ. Уларҙың гуманитар даирә е бүтән. Миңә ҡал а, фанатиктарса бирелгәнлек менән балалар уҡытҡан уҡытыусыларҙан башҡаны атап булмай. Улар әр мәктәптә лә тиерлек бар. Мин ниндәйҙер мәктәп сара ын уҙғарғандан уң йыйылышып араҡы эсеп ултырыусыларҙы эйтмәйем. Мәктәп — изге урын, унда рюмка күтәреү — интеллигент өсөн табу.

Башҡорттар башлыса, урыҫтар кеүек үк, үҙен бүтәндәргә оҡшамаған милләт тип танытыу яғында. Әммә бөгөнгө көндә йомарланған, бөгөлгән билмәнде кире тағатып маташыуҙан фәтеүә юҡ. Бирелгән, танауға килеп терәлгән шарттарҙа үҙеңде лә юғалтмаҫлыҡ, кәм-хур ҙа булмаҫлыҡ йүнәлеш кәрәк тә бит, идеологтар юҡ. Шәхес тип танырлыҡ намыҫлы кешеләр юҡ. Әҙме-күпме күҙгә күренгәненең кеме енең арҡа ынан ҡаҡ аң да, кеҫә енән ялағайлыҡ юлы менән ҡалынайған кошелегы килә лә төшә...

Шулай итеп, кешелек, юҡ, уйсан кешеләрҙең идеалы булырҙай интеллигент булыу еңел түгел. Идеал — камиллыҡ хаҡындағы хыял ул. Кешелек гуманизм, камиллыҡ, ҡорбандарса фиҙакәрлекте йүнәлеш маяғы итеп айлай икән, тимәк, ниндәй генә алданыуҙар, гона тар эсенә батма ын, яңылышлыҡтарға дусар булма ын — яҡшылыҡҡа өмөтөн юғалтмаған әле. Ә яҡшылыҡҡа өмөт — этәргес көс тә ба а.

Минең үҙемдең и ә инаныс идеалым Джавхарлал Неру менән Мать Терезаға барып тоташа.

Россияла быйыл ил менталитетын билдәләүсе шәхесте айлау менән булашалар.

Минеңсә, Гоголь ул...

Ә бөгөнгө интеллигенцияның төп идеалымы?.. Минеңсә, замананың эм интеллигенцияның төп баш ауырыуы эм ғәрлекле проблема ы — бөгөн, ошонда йәшәгән әр бер кешенең етешлеккә, кәм енеү еҙлеккә, мохтаж ыҙлыҡҡа хоҡуҡ ыҙлығы. Йәшәү шарттарын яҡшыртырға кәрәк беҙгә.

Медицина байҙарға ғына түгел, әр кемгә тейешле ярҙам күр әт ен, судтар ярлы кешене лә байҙарҙы хөкөм иткән кеүек хөкөм ит ен. Рәсәй гражданы булған әр кемдең бала ы сифатлы белемгә өлгәшә ал ын — бына ҡайҙа йүнәлтелә ала бөгөнгө интеллигенцияның ҡарашы.

Ә асылда... Былар бөтә е лә — хөкүмәттең эш майҙаны...

**Тамара ҒӘНИЕВА.**

# ҒИЛЕМ ТЕҮӘЛЛЕКТЕ ЯРАТА
## *йәки* ТӨҘӘТЕРГӘ ВАҠЫТ ТҮГЕЛМЕ?

Бөйөк кешеләрҙең тормошон  әм ижадын өйрәнгәндә әр бер мәғлүмәткә, әр датаға, исемгә, хатта әр бер үҙгә, хәрефкә тиклем иғтибарлы булыуҙың ни тиклем мө им икәнлеге тура ында оҙон-оҙаҡ өйләп тормаҫҡа ла мөмкиндер. Иң элек шуны әйтеп үтмәксемен: элеккерәк осорҙарҙа, документаль сығанаҡтарҙың ул саҡтарҙа бик аҙ булыуы арҡа ында, әйтәйек, Аҡмулла биография ына арналған хеҙмәттәрҙә күп кенә эреле-ваҡлы хаталар, бигерәк тә шағирҙың сығышы, ата-әсә енең кем булыуы тура ында бәхәсле версиялар бар ине. Дөрөҫ, Аҡмулланың тормош юлындағы бик күп моменттар артабан да ҡат-ҡат тикшереүҙе, яңы сығанаҡтарға таянып аныҡлауҙы, тулыландырыуҙы талап итә. Ләкин, фәнебеҙҙең бөгөнгө торошонан сығып ҡарағанда, күптән инде төҙәтергә тейешле хаталарҙың әле аман да бер хеҙмәттән икенсе енә күсеп йөрөүе аптырашта ҡалдыра.

үҙҙе Аҡмулланың тыуған урыны, тыуған көнө әм йылы тура ындағы мәғлүмәттәрҙән башлайыҡ. Күп кенә хеҙмәттәрҙә шағирҙың тыуған урыны "Өфө губерна ының Бәләбәй өйәҙе Елдәр улысы Туҡ анбай ауылы" тип күр әтелә. Ҡайы берҙә хатта бер ҡасан да донъяла булмаған Жилем тигән улыс та уйлап сығарыла. Әммә был осраҡта губерна ла, улыс исеме лә дөрөҫлөккә тап килмәй. Күренекле тарихсы, профессор Әнүәр Әсфәндиәров та, мин дә Аҡмулланың тыуыуына 150 йыл тулған көндәрҙән бирле, йәғни сирек быуат буйы, был мәсьәләгә әленән-әле асыҡлыҡ индерергә тырышҡан булабыҙ. Мәҫәлән, 1981 йылда уҡ әле рус телендә ҙур тираж менән нәшер ителгән "Шиғриәт йондоҙо. Мифтахетдин Аҡмулла" тигән китабымда мин шағирҙың тыуған урынын, күп төрлө сығанаҡтарҙы, шул иҫәптән архив документтарын (1834, 1850, 1859 йылдарҙа теркәп ҡалдырылған халыҡ иҫәбен алыу, йәғни ревизия мәғлүмәттәрен) сағыштырып өйрәнеп, ошолай тип билдәләнем: Ырымбур губерна ы Бәләбәй өйәҙе 12-се башҡорт кантоны Күл иле-Мең улысының Туҡ анбай ауылы. Әйткәндәй, беҙҙең "Шиғриәт йондоҙо" тигән монографияның 2006 йылда 3-сө баҫма ы нәшер ителде, хәҙер уның менән таныш булмаған әҙәбиәт белгестәре, башҡорт әҙәбиәт әм мәҙәниәт уҡытыусылары ирәктер, тип уйлайым. Әле килтереп үткән мәғлүмәт шул уҡ 1981 йылда уҙғарылған юбилей тантаналарында, ғилми конференциялағы докладтарҙа ла йыш ҡабатланды. Ярай әле, "Башҡортостандың ҡыҫҡаса энциклопедия ы" (Өфө, 1996; 1997. Урыҫса әм башҡортса баҫмалар), "Башҡорт энциклопедия ы"ның I томы (Өфө, 2005) ымаҡ баҫмаларға Аҡмуллаға арналған персоналияларҙы миңә яҙырға тура килде. Унда, әлбиттә, элекке хатаға юл ҡуйылманы. Ә инде Әнүәр Әсфәндиәров үҙенең "Шағирҙың биография ына ҡарата" тигән докладында (Акмулле – 150 лет. Уфа, 1984. 42–55-се биттәр), "Олатайҙарҙың бар тарихы" тигән киң билдәле китабында (1996 әм 2005 йылдарҙа баҫылып сыҡты) Аҡмулланың тормош юлын, генеалогия ын, тарихи документтарға нигеҙләнеп, махсус тикшереү өҙөмтәләрен иғлан итте. Мифтахетдин Камалетдин улы тыуған йылда Өфө губерна ы ла, Елдәр улысы ла булмаған, тип яҙҙы ул. Елдәр улысы 1864 йылда ғы-

на барлыҡҡа килгән, ә Өфө губерна ы 1865 йылда, Ырымбур губерна ы икегә бүленгәндән  уң, ойошторолған. Сәйнәп ҡаптырырға теләгәндәй, Елдәр улысы барлыҡҡа килгәндә Аҡмуллаға – 33 йәш, Өфө губерна ы ойошторолғанда 34 йәш булған, тип тә билдәләп ҡуя Әнүәр Закир улы. Әммә ләкин нәҡ бына Аҡмулла хаҡындағы  әр бер мәғлүмәткә үтә иғтибарлы булырға тейешле әҙәбиәт белгестәре лә әле  аман бер үк хатаны ҡабатлайҙар: күп кенә етди баҫмаларҙа хатта бөгөнгә тиклем уның хаҡында яҙғанда “Өфө губерна ы Елдәр улысы” тип раҫлау дауам итә. “Башҡорт шиғриәте антология ы” (Өфө: Китап”, 2001), “Антология поэзии Башҡортостана” (Өфө: “Китап”, 2007), “Башҡорт әҙәбиәте антология ы. II том. XIX быуат” (Өфө: “Китап”, 2007) шул уҡ хәл ҡабатлана, урта мәктәптәр өсөн “Башҡорт әҙәбиәте” дәреслегендә лә хәҙер инде нисәмә йылдар буйы Аҡмулла тыуған ваҡыттағы губерна  әм улыс исеме яңылыш яҙыла.

Был хатаның ҡайҙан килгәнлеге тура ында ла әйтеп үтергә кәрәктер. Тәү башлап бул а кәрәк, беҙ уны Фәтих Кәримдең 1928 йылда Ҡазанда “Беҙҙең юл” журналының 6-7-се  андарында (32-се бит) баҫылған  “Шағир Аҡмулла турында” тигән мәҡәлә ендә осратабыҙ. Фәтих Кәрим дә, уға ғәжәп ҡиммәтле мәғлүмәттәр яҙҙырған Туҡ анбай аҡ аҡалы Шәйхетдин Динмөхәмәтов та ул дәүерҙән тотош бер быуат элек булған административ бүленеш нескәлектәренә иғтибар биреп тормағандар. Өҫтәүенә, был йылдарҙа Туҡ анбай ауылы ысынлап та Елдәр улысы составында булған. Артабан Фәтих Кәрим яҙып алған материал профессор   Ә. И. Харисовтың “Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы. XVIII – XIX быуаттар” (Өфө, 1965) тигән монография ы аша хәҙерге әҙәбиәт белеменә кереп киткән. Әммә хәҙер күп нәмәләр асыҡланды, элекке сығанаҡтарҙы ғилми аңлатмалар биреп ҡуллана белергә ваҡыт бит инде. Ә бына Фәтих Кәрим яҙып алған иҫтәлектә Аҡмулланың тыуған көнө, айы, йылы тура ындағы мәғлүмәт әҙәбиәтебеҙ фәне өсөн иң теүәл  әм иң ышаныслы булыуы менән айырылып тора. Сөнки Шәйхетдин Динмөхәмәтов ул хаҡта “элекке заман метрика ы”на таянып ша итлыҡ иткән. Беҙ хәҙерге заманда был датаны айы, көнөнә тиклем теүәллек менән нәҡ ана шул иҫтәлеккә таянып билдәләйбеҙ. Шуның менән генә Фәтих Кәримдең был материалын Аҡмулла биография ын өйрәнеү эшендә иң ҡиммәтле сығанаҡтар иҫәбенә ҡуйырға мөмкин. Әйтергә кәрәк, шағирҙың тыуған йылына ҡараған мәғлүмәт  уңыраҡ табылған документаль сығанаҡтар менән тулы ынса раҫлана. Ул ғына ла түгел, Фәтих Кәрим Шәйхетдин сәсәндән шағирҙың ата ы, әсә е, милли сығышы хаҡында ла мәғлүмәт яҙып ала. Бына иҫтәлектең шул мәсьәләгә арналған өлөшө: “Ата ы Ишмүжә уғлы Камалетдин, әсә е Бибигөлсөм Сәлимйән ҡыҙы тиеп яҙылған. Троицкиҙың бер Дусмайыл хажи тигән ҡаҙаҡ минән  ораған ваҡытта мин, Туҡ анбай ауылы Шәйхетдин Динмөхәмәт уғлы, яҙып, метриканан иҫбат иттем. Дусмайыл хажи шул заманда миңә хат  алды. Аҡмулла әфәнденең башҡорт бала ы булыуы хәҙер раҫланды. “Мәрҫиә-и Ши абетдин” китабында Аҡмулла әфәнде ҡаҙаҡ бала ы тип яҙылған. Ул дөрөҫ түгел...”

Шәйхетдин Динмөхәмәт улының был ша итлыҡ итеүе әллә күпме архив документтарына торошло. Сөнки ул бит бер ҙә кемдәндер  әм ҡасандыр ишеткән  үҙҙәрҙе түгел, ә, бәлки, үҙ ҡулында булған документҡа нигеҙләнеп  әм, быны ы инде тағы ла мө имерәк, бала сағында Аҡмулланы күреп белгән, уның тормош юлын баштан-аяҡ белгән, уның “бөтөн шиғырҙарын йырлап йөрөүсе” ил аға ы  әм уҡымышлы ы буларaҡ әйтеп яҙҙырған үҙенең бөйөк ырыуҙашы тура ындағы мәғлүмәттәрҙе. Ана бит, “мин, Туҡ анбай ауылы Шәйхетдин Динмөхәмәт уғлы, яҙып, метриканан иҫбат иттем” тип хатта рәсми эш ҡағыҙҙары стиленә лә күсеп китә ул. Был да  ис тә осраҡлы түгел: Шәйхетдин мулла менән Дәүләтбай мулла революцияға тиклемге дәүерҙән үк оҙаҡ йылдар буйы ауылда метриканы алып барыусылар булғандар. Шәйхетдин Динмөхәмәтов ауылдың  арайлы меңлеләргә ҡараған Кесекбай аймағы, ә Дәүләтбай мулла Алдар аймағы, йәғни Күл иле-Мең ырыуы кешеләрен теркәп барған.

Ауылдың күпселек халҡы – Күл иле-меңләләр, аҫаба башҡорттар. Ә Мифтахетдиндең ата ы Камалетдин – нәҡ бына Кесекбай аймағы башҡорто. Был арайлы меңләләр Туҡ анбайға элекке Ҡырҡ өйлө-Мең улысы (хәҙерге Дәүләкән районы) Ҡаҙанғол ауылынан күсеп килеп ултырғандар. Социаль статусы буйынса улар – әтәмбәйҙәр. Шул айырмалыҡ арҡа ында Туҡ анбайҙа метрика ла аҫабалар әм әтәмбәйҙәр өсөн айырым алып барылған. Ул заманда был айырма халыҡ тормошонда ғәйәт мө им роль уйнаған. "Беҙгә, башҡорт бул аҡ та, бик аҙ – йән башына ни бары 3,5 гектар ер бүленгән", – тип өйләне миңә 1981 йылдың сентябрендә Туҡ анбай ауылының аҡ аҡалы Хәбебетдин Бәҙретдинов. Ошо урында Туҡанбайға Кесекбай аймағы башҡорттарының, йәғни арайлы меңләләр ара ының Ҡаҙанғол ауылынан күсеп килеп ултырыуы тура ындағы мәғлүмәткә тағы бер тапҡыр иғтибар итәйек. Хикмәт шунда: Аҡмулла йәшәгән дәүерҙә документтарҙа шул уҡ исемдә тағы бер – быны ы инде Туҡ анбай эргә ендә генә күренеп ҡалған Яңы Ҡаҙанғол тигән ауыл[1]. Аҙаҡ ул, Туҡ анбайға ҡушылып, бөтөнләй онотолған. Аҡмулланың ата ы – Ҡаҙанғолдан сыҡҡан арайлы мең ара ы башҡорто, йәғни Ҡаҙанғол кеше е. Ризаитдин Фәхретдинов "был әҙәмдең тәржемәи хәленә мөнәсәбәтле мәғлүмәт хаҡында бер нәрҫә лә орашманым" ти ә лә, "мәгәр ҙә үҙе үҙ ара ында ата-ана ынан бере Ҡаҙан кеше е булғаны хәлдә, икенсе е хәлис башҡорт икәнлеген өйләгән ине, шул нәрҫә хәтеремдә ҡалған" тигән хәбәрендә ана шул " үҙ ара ында" ғына әйтелеп, сала-сарпы ғына ишетелеп ҡалған Ҡаҙанғол кеше е, йылдар үтеү менән, уның хәтерендә "Ҡаҙан кеше е"нә әйләнеп киткән булырға тейеш. Шуға күрә Ризаитдин Фәхретдиновтың "Бере Ҡаҙан кеше е булғаны хәлдә" тигән үҙҙәрен "татар кеше е" тип аңлатырға бер ниндәй ҙә нигеҙ юҡ. Айырма шунда ғына: Аҡмулланың ата-әсә е – ике е ике ара башҡорттары.

"Ата ы Ишмүжә уғлы Камалетдин, әсә е Бибигөлсөм Сәлимйән ҡыҙы" тип уҡыйбыҙ Фәтих Кәрим яҙып алып донъяға сығарған иҫтәлектән. Был мәғлүмәт менән архив документтары әм башҡа сығанаҡтар ара ында бары тик бер нисә хәреф айырма ын ғына күр әтеп үтергә мөмкин. Беренсенән, Камалетдиндең ата ының исеме фәҡәт типография хата ы арҡа ында Ишҡужа урынына Ишмүжә булып киткән, тип фараз итергә була. Үкенескә, шул хәреф хата ы арҡа ында был исемдең яҙылышы оҙаҡ ваҡыттар серле булып ҡала. Өҫтәүенә, Риза Фәхретдинов та Камалетдинде "Ишмөхәмәт уғлы" тип хәтерендә ҡалдырған. Ни эшләмәк кәрәк, Р. Фәхретдинов Аҡмулла хаҡындағы иҫтәлектәрен шағир үлгәндән уң күп йылдар үткәс кенә ҡағыҙға төшөргән. Әммә дөрөҫ әйтелеш: Ишҡужа Ишбулдин (перепись материалдарында урыҫса яҙылышы – Ишкузя). Икенсенән, Мифтахетдиндең әсә енең исемен ул "Сәлим хәҙрәт ҡыҙы Биби" тип атай. Фәтих Кәрим мәҡәлә е буйынса ул – Бибигөлсөм Сәлимйән ҡыҙы. Айырма – исемдең тулыраҡ әм ҡыҫҡартылған варианттарында ғына. Урыҫ телендәге ревизия материалдарында: Бибимигул (1834 йыл), Бибей Салимьянова (1850). Хәбебетдин Бәҙретдинов аҡ аҡалдан и ә "Аҡмулла, йәғни Мифтахетдин – Камалетдиндең беренсе ҡатыны Бибиөммөгөлсөмдән тыуған улы. Камалетдиндең фамилия ы Исҡужин булырға тейеш" тип яҙып алғанмын. Тимәк, шағирҙың әсә енең тулы исеме – Бибиөммөгөлсөм Сәлимйән ҡыҙы, ата ы – Камалетдин Ишҡужа улы, 1859 йылда үткәрелгән перепись материалында "Камалетдин Ишкузин, указной мулла из башкир" тип теркәлгән. 1834, 1850 йылдарҙа ла шул уҡ исем-фамилия эҙмә-эҙлекле ҡабатлана. Күренеүенсә, Фәтих Кәрим яҙып алған иҫтәлек Мифтахетдиндең ата ы әм әсә е Туҡ анбай ауылы башҡорттары Камалетдин Ишҡужа улы менән Биби(өммө)гөлсөм Сәлимйән ҡыҙы булғанлығын дәлилләп тора.

Шәйхетдин Динмөхәмәтовтың иҫтәлегендә шундай деталь иғтибарҙы йәлеп итә. Ул "яҙып, метриканан иҫбат иттем" тип белдерә әм: "Дусмайыл хажи шул заманда миңә хат алды. Аҡмулла әфәнденең башҡорт бала ы булыуы хәҙер

---

[1]*Населенные пункты Башкортостана. Часть I. Уфимская губерния. 1877. Уфа: Китап, 2002. С. 470. 1870 йылда был ауылда 8 йорт иҫәпләнеп, барлығы 42 кеше йәшәп ятҡан.*

раҫланды. “Мәрҫиә-и Ши абетдин” китабында Аҡмулла әфәндене ҡаҙаҡ бала ы тип яҙылған. Ул дөрөҫ түгел...” – тип нығытып ҡуя. Ләкин, үкенескә ҡаршы, Дусмайыл Ҡасҡынбаев, иҫтәлектә әйтелеүенсә, Шәйхетдин Динмөхәмәтовҡа “Аҡмулла әфәнденең башҡорт бала ы булыуы хәҙер раҫланды” тип яуап хаты яҙып ебәреүенә ҡарамаҫтан, үҙенең яҙмаларында был версияны бөтөнләй иҫкә лә алмай, асылда Аҡмулланың башҡорт булыуын танымау юлына баҫа. Ул ғына ла түгел, шағирҙың тыуған йылы тура ында ла 1839 йыл тип буталыш индереп ебәрә. Аҙаҡ ҡаҙаҡ әҙәбиәт ғилемендә “Аҡмулланың ата ы – Мөхәммәдйәр исемле ҡаҙаҡ, әсә е Бибигөлсөм исемле башҡорт булған” тигән версия урын ала. Әлбиттә, был версияның үҙенең билдәле бер тарихы бар. “Ата ы – Мөхәммәдйәр” тигән легенданы яҡлаусылар, ғәҙәттә, Аҡмулла көтмәгәндә фажиғәле әләк булғас, уның ҡәбер ташындағы үҙҙәргә ылтаналар. Ләкин был хаҡта ла ваҡытында шул уҡ Шәйхетдин Динмөхәмәтов төплө аңлатма биргән дә ба а:

“Хибескә кереүенең сәбәбе шул уҡ Аҡмулла тура ында быҒаса мәғлүм булып килгән ваҡиғаларҙыр, – ти ул. – Аҡмулланың башҡортлоҡтан ҡаҙаҡлыҡҡа “күсеүе” лә шул ваҡиға менән бәйләнгән. Иҫәнгилде Батучкин[2] уны “ алдаттан ҡасып йөрөүсе башҡорт” тип төрмәгә яптырғас, Аҡмулла шунан ҡотолоу өсөн “Мин башҡорт бала ы түгел, Мөхәммәдйәр исемле ҡаҙаҡ бала ы” тип хәйлә ҡорған. Минең атам Динмөхәммәд Сәфәрғәли уғлы уның тәржемәи хәлен, бөтөн ваҡиғаларын баштан-аяҡ өйләп бирә торғайны. Минең атам күп кенә тәрбиә биргән уға”.

Шәйхетдин Динмөхәмәтовтың Аҡмулланың биография ындағы был ваҡиға, йәғни уның “башҡортлоҡтан ҡаҙаҡлыҡҡа күсеүе” менән бәйле мәсьәлә хаҡында ла яҡшы хәбәрҙар булғанлығы күренеп тора. Шуға ла ул “быҒаса мәғлүм булып килгән ваҡиғаларҙыр” ти әм ул әлеге мистификацияның Аҡмулланың үҙе тарафынан ҡоролған хәйлә булғанлығын да яҡшы белгән. Был хаҡта хәбәр иткәндә, “уның тәржемәи хәлен, бөтөн ваҡиғаларын баштан-аяҡ өйләп бирә торғайны” тип ата ы Динмөхәммәд Сәфәрғәли улын да иҫкә төшөрә, “минең атам күп тәрбиә биргән уға” тип өҫтәп тә ҡуя[3]. Бына ул, Аҡмулланың тормош юлын бөтөн ваҡиғаларына тиклем белгән өлкән замандашы Динмөхәммәд Сәфәрғәли улы, ошо белемде хәтерендә аҡлаған, Аҡмулланың “бөтөн шиғырҙарын үҙенә башҡа көй менән йырлап йөрөүсе Шәйхетдин Динмөхәмәтов (1862–1939) әм шағир тыуған изге төйәк Туҡ анбай, уға күрше Сафар, Йәнәби-Урсай, Тамъян-Таймаҫ үә бәғзе башҡорт ауылдары ҡарттарының йөрәк түрендә аҡланған иҫтәлектәр! Аҡмулласылыҡ фәне өсөн был мәғлүмәттәрҙең ҡиммәте ба алап бөткө өҙ, әм беҙ шуға айырыуса ҙур иғтибарлы булырға тейешбеҙ.

Аҡмулланың “башҡортлоҡтан ҡаҙаҡлыҡҡа күсеүе” мәсьәлә ен Шәйхетдин Динмөхәмәтов ҡыҫҡа ғына итеп, бер генә фраза менән “быҒаса мәғлүм булып килгән ваҡиғаларҙыр” тип башта әйтеп кенә китмәксе, йәғни, уныңса, был хәлдәр

---

[2]*Дөрөҫө: Иҫәнгилде. Ә Иҫәнгилде әм Батыш – ике е ике кеше.*

[3]*Аҡмулланың тормош юлына әм ижади мираҫына арналған баҫмаларҙың йөкмәтке ен өйләп сығыу рәүешендә яҙылған мәҡәлә ендә Ҡазан ғалимы Р. Ф. Исламов, Шәйхетдин Динмөхәмәтовтың был үҙҙәрен шик аҫтына алып: “1828 йылда тыуған әм Мифтахетдиндән ни бары өс йәшкә генә өлкән булған Динмөхәмәт Сәфәрғәли улы буласаҡ шағирға ни рәүешле ярҙам итте икән?” – тип о-рау ҡуймаҡсы (ҡарағыҙ: Исламов Р. Ф. Мифтахетдин Аҡмулланың тормош юлы әм ижади мирасы (Өйрәнелеү торошона ҡарата) // Рәсәй Фәндәр академия ы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел әм әҙәбиәт институты хеҙмәттәре. I сығарылыш. Өфө, 2007. 183-сө). “Өс йәшкә генә өлкән булған” тигәнде, “дүрт йәшкә өлкәнерәк” тип иҫәпләргә лә була, әлбиттә, сөнки Аҡмулла бит йылдың аҙағында, декабрҙең уңғы көндәрендә, тыуған. Был – бер. Икенсенән, беҙҙең башҡортта, бигерәк тә йәшерәк ваҡытта, өс-дүрт йәшкә генә булғанда ла, йәш ара ы бер ҙә аҙ тип иҫәпләнмәй. Сөнки, йола буйынса, беҙ бит олоно оло, кесене кесе итеп күрергә, кәрәк саҡта ана шул ололарса ярҙам ҡулы уҙырға ғәҙәтләнгән халыҡбыҙ. Динмөхәмәт Сәфәрғәли улы ла Мифтахетдингә ҡарата шундай хәстәрлек күр әткән әм аҙаҡ инде уның тормош юлы тура ында йәш быуынға өйләп ҡалдырған икән, бынан берәй төрлө йөй эҙләп ултырыу, үҙ юҡта үҙ бул ын тип, юҡты бушҡа ауҙарыу ғына була түгелме уң? Ә бына Р. Ф. Исламов әфәнденең Аҡмулланың тормош юлы әм ижады өйрәнелеү торошо хаҡында үҙенең әйтер үҙе булмайынса тороп, белдекле төҫ менән ба алар биреп мәҡәлә баҫтырыуы и ә ысынлап та ғәжәпкә ҡалдыра.*

күптән әм бик яҡшы билдәле булып сыға. Әммә артабан был ваҡиғаға тағы бер тапҡыр аңлатма биреп, асыҡлыҡ индереп үтә. Шағир, моғайын, төрмәнән сыҡҡас та әле, башҡорт бала ы булыуын йәшерергә тырышып, үҙен "Мөхәммәдйәр исемле ҡаҙаҡтың улымын" тип йөрөгәндер. Бәлки, ҡаҙаҡ ара ында ундай кеше ысынлап та булғандыр. Легенда буйынса, ул ырдаръя буйындағы Аҡмәсет (хәҙерге Ҡыҙыл Урҙа) яғынан килеп, Стәрлебашта уҡыған булыуы ла ихтимал. Аҡмулла, әлбиттә, үҙенең версия ын тыуҙырыр өсөн үҙе аҙмы-күпме белгән ҡаҙаҡ кешеенең исемен айлағандыр, тип фараз итергә була. Кем белә, бәлки, илгиҙәр шағир, Мөхәммәдйәрҙең улымын, тип әлеге ырдаръя буйҙарына барып, үҙен уның (әгәр ул ысынлап та реаль шәхес бул а) ағай-эне енә, нәҫел-нәсәбенә танытып, имештер, туғанлыҡ ептәрен барлаған булып та йөрөгәндер. Ләкин, әгәр ҙә ул шәхси документы буйынса Мифтахетдин Камалетдин улы Камалетдинов тип йөрөгән икән, был ептең дә осон йәшереү өсөн, йәнә е, "үҙ ата ы– Мөхәммәдйәр хәлфә, ә тәрбиәгә алып, үҙ исеменә яҙҙырған ата ы – Камалетдин мулла" тигән хәбәрҙе таратырға тура килгәндер. Әсә е Бибигөлсөм (Бибиөммөгөлсөм) Сәлимйән хәҙрәт ҡыҙы тура ында ла, йәнә е, "Стәрлебаштағы Ниғмәтулла Биктимеров хәҙрәттең аҫырау ҡыҙы" тигән версия уйлап табыла. (Хәҙрәт ынлы хәҙрәттең ҡыҙы Бибиөммөгөлсөм икенсе бер хәҙрәттә аҫыраулыҡта тороор инеме икән? Быны ы инде бөтөнләй ышанырлыҡ түгел.) Ғөмүмән, Аҡмулланың атаәсә е тура ындағы был версияның уйлап сығырылған булыуы күренеп тора. Әммә, шул уҡ ваҡытта, Аҡмулла биография ындағы был мажаралар, йәғни уның "бшҡортлоҡтан ҡаҙаҡлыҡҡа күсеүе" менән бәйле ваҡиғалар, әгәр ҙә ваҡытында ентекләп өйрәнелгән бул а, шағирҙың тормошон өйрәнеү өсөн ғәйәт ҡыҙыҡлы материал биргән булыр ине. Үкенескә ҡаршы, Аҡмулла тура ында яҙыусы бик күп авторҙар, ошо версияға йәбешеп ят алар ҙа, уны ентекләп тикшереү тура ында уйлап та бирмәгәндәр, бары тик шағирҙың ата-әсә е тура ында бер-бер артлы бер үк исемдәрҙе ҡабатлауҙан, бер-бере енән күсереп яҙыуҙан уҙа алмағандар. Етмә ә, Сәкен Сәйфуллин Туҡ анбай башҡорто Камалетдинде лә татарға әйләндереп ҡуйған[4]. Профессор Бейсенбай Кенжебаевтың да 1941 йылда баҫылған бер мәҡәлә ендә шул уҡ раҫлау урын алған[5]. уңынан ул, ата ы – ҡаҙаҡ, әсә е – башҡорт ҡатыны, тип билдәләй[6]. Әммә бына шуны ы ғәжәп: инде беҙҙең дәүерҙә, Аҡмулла ижадын өйрәнеп, махсус хеҙмәт яҙған ҡаҙаҡ ғалимы Үәлихан Ҡалижанов бер үк хеҙмәттә башта, ата ы – ҡаҙаҡ, әсә е – татар, тип раҫлай ҙа бер нисә юл аша, Мөхәммәдйәр башҡорт ҡыҙы Бибигөлсөм Сәлимән ҡыҙына өйләнгән, тип яҙа. Шағирҙың фамилия ын да Мөхәмәдйәров тип билдәләй[7]. Татар ғалимы профессор Мирҡасим Ғосманов, шул уҡ уйҙырманы үҙенсә ҡабатлап, тәмләп-тәмләп, "Аҡмулланың тыуҙырған ата ы Мөхәммәдйәр.., ҡаҙаҡ кеше е булып... башҡорт ерендә татар ҡыҙы Бибигөлсөм Сәлим ҡыҙына" өйләнгән, тип мәсьәләне тағы ла бутап ебәрә[8]. Бында инде Аҡмулланы, тыуған ата ы яғынан да, әсә е яғынан да бер ниндәй ҙә башҡорт түгел, тип нисек тә башҡорттан тартып алыу тенденция ы ярылып ята. Аңлашыла, әлбиттә, тамырҙан айырып алғас, уның башҡортлоғон танымағас, Аҡмулла – башҡорт шағиры, тип танымаҫҡа бер генә аҙым ҡала бит. Ә бит Аҡмулланы өс халыҡҡа, өс әҙәбиәткә бүлгелеп йөрөтөргә тырышыуҙың дә сәбәбе шул уҡ: шағирҙың тәрәндәге рухи тамырҙарын, милли ерлеген танымаҫҡа тырышыу ынтылышы ята. Улайға кит ә, Аҡмулла өс кенә түгел, төрки донъя ы-

*[4] Сәйфуллин С. Аҡмулла аҡын. Кереспе сөз // Акмолла. Өлең жыйнағы. Алматы, 1935. 5-се бит.*

*[5]Кенжебаев Б. Әдебият және искусство. 1941, № 5. 133-сө бит.*

*[6]Кенжебаев Б. Ҡаҙаҡ халҡының ХХ ғасыр басындағы демократ жасушылары. Алматы, 1958. 42-се бит.*

*[7]Ҡалижанов Үәлихан. Ағартушы демократ-аҡын // Аҡмолла. Күндер мен түндер. Алматы: Жазушы, 1986. 6-сы бит.*

*[8]Госманов Миркасыйм. Мифтахетдин Аҡмулланың ижаты әм мирасы // Аҡмулла. Шигырьләр. Ҡазан: Татарстан китап нәшриәте, 1981. 11-се, 263-сө биттәр.*

ның утыҙ өс халҡы өсөн дә яҡын әм ҡәҙерле. Шул уҡ ваҡытта ул донъя әҙәбиәтендә, донъя рухиәтендә башҡорт шағиры, башҡорт да ийы булараҡ урын алырға хаҡлы. Аҡмулланың, Пушкин йәки Абай әм Туҡай ымаҡ уҡ, бөйөк поэтик мәктәбенең ишектәре бөтөн ҡәүемдәр әм милләттәр өсөн дә асыҡ, ләкин был уны башҡорттан тартып алыр өсөн нигеҙ була алмай. Бәғзе әҙиптәрҙең шағирҙың тулы исемен Мифтахетдин бине Камалетдин әл-Башҡорди[9] тип атауы ла, уның атаҡлы илгиҙәр башҡорт шағиры булараҡ танылыуы ла бер ҙә осраҡлы түгел. әр бөйөк шағир, бөйөк әҙип донъяла үҙ халҡының гендарынан ут алып, үҙ милләтенең рухи илсе е, йәне, йөрәге булып йәшәй. Илдәр әм халыҡтар ара ында беҙҙең, башҡорттоң, рухи илсебеҙ – ул иң элек Аҡмулла. Быны танымаҫҡа, уны бүлгеләргә тырышыуҙың ысын ғилем менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы юҡ.

Шуны ла әйтеп үтергә кәрәк. Ҡаҙаҡтар Аҡмулланы үҙе иҫән сағында ла башҡорт тип белгәндәр, уңғы дәүерҙәрҙә лә башҡорт булғанлығына бер ҙә икеләнмәгәндәр. Уны фәҡәт “истәк мулла” тип йөрөткәндәр. 1867 йылда шағирҙың, алдат хеҙмәтенән ҡасып йөрөүсе башҡорт, тип ғәйепләнеүе лә шуны раҫлай. Совет осоронда ла әле ҡаҙаҡтар уны башҡорт тип хәтерләгәндәр. 1934 йылдың апрелендә “Ҡаҙаҡ әдебияты” гәзите “Башҡорт әҙәбиәте” тигән мәҡәләлә уны башҡорт аҡыны тип яҙып сыға. Әммә ҡаҙаҡ әҙәбиәтселәре ара ында был мәсьәләгә 1935 йылда Аҡмулланың “Өлендер жыйнағы” тигән китабына яҙған баш үҙендә Сәкен Сәйфуллин, Дусмайыл Ҡасҡынбаев яҙмаларына эйәреп, шағирҙың башҡорт булыуын танымаҫҡа тырышыу тенденция ын индереп ебәрә. Бер ниндәй ҙә документаль сығанаҡ менән раҫланмаған был версияны Үәлихан Ҡалижанов та ҡабатлай.

Аҡмулла әҫәрҙәре йыйынтығы ҡульяҙма ының Сәкен Сәйфуллин ҡулына барып юлығыу тарихының да үҙенсәлекле әм ғибрәтле сәбәптәре бар. Был хаҡта 1982 йылдың 24 июнендә билдәле ҡаҙаҡ әҙәбиәт белгесе Бөркөт Исхаҡов менән әңгәмә ваҡытында ул миңә ошоларҙы хәбәр итте: “Аҡмулланың тәржемәи хәлен өйрәнеүсе татар әҙәбиәтсе е Хәсән Ғәли, шағирҙың китабын сығарыуҙы орап, башта Татарстан китап нәшриәтенә мөрәжәғәт иткән. Әммә унда, беҙҙә Аҡмулланан юғарыраҡ үҙебеҙҙең шағирҙар етерлек, тип кире ҡағалар. Шунан уң, 1929 йылда, Хәсән Ғәли Башҡортостан етәкселегенә, Афзал Та ировҡа, Аҡмулла – башҡорт шағиры, тип шиғырҙарын баҫып сығарыу үтенесе менән мөрәжәғәт итә. Афзал Та иров ҡульяҙма менән танышып сыға әм, үкенескә, шиғырҙарҙы аңламай. Ҡульяҙманы Алматыға, Сәкен Сәйфуллинға, ебәрә. Ә Сәкен Сәйфуллин Башҡортостандағы Вәли Хангилдин, Исмәғил Урманов әм Ғәбделәхәт Вилданов менән бәйләнешкә керә. Улар аша йәнә Аҡмулла шиғырҙарын алдыра, уларҙың ярҙамы менән “Өлендер жыйнағы”н баҫтырып сығара. Был хаҡта ул үҙе лә китапҡа яҙған баш үҙендә әйтеп үтә. Йәғни Аҡмулла шиғырҙарының төп өлөшө уға Башҡортостандан барып керә”.

Эйе, Аҡмулланың мең бәләләр аша үткән үҙенең яҙмышы ла, унан ҡалған алтынға тиң әҙәби мираҫтың яҙмышы ла ни тиклем ҡатмарлы әм фажиғәле. Шуның өсөн дә беҙ Аҡмулла исеменә әм Аҡмулла мираҫын өйрәнеүгә иғтибарлы әм яуаплы ҡарарға тейешбеҙ.

2006 юбилей йылы Аҡмулла биография ын өйрәнеү эшендә тағы ла бер аҙым булырҙай архив документтары табылыу менән ә әмиәтле булды. Был – Аҡмулланың үҙ ҡулы менән 1894 йылдың сентябрендә Өфөләге Ырымбур мосолмандарының Диниә назаратына (Оренбургское магометанское Духовное собрание) яҙған ике шикәйәте, бер хаты әм шул шикәйәттәр буйынса 1895 йылдың 3 октябренә тиклем алып барылған тикшереү эштәре. Был документтарҙы Башҡортостан Республика ы Үҙәк дәүләт тарих архивы фондтарынан тарих белгесе Рәйес Рәхимйән улы Ҡотошев табып, шул хаҡта матбуғатта мәҡәлә менән сығыш я аны[10]. Делоның йөкмәтке е тура ында өйләп тормайынса, түбәндәге мәғлүмәттәргә

[9]*Сөләймәнов Ә. Ҡазанда Аҡмулла көнө // Ағиҙел, № 7, 2007. 121-се бит.*

иғтибарҙы йүнәлтмәксемен. Беренсе е: Аҡмулла үҙен был документтарҙа "Троицк ҡала ынан монасип Мифтахетдин мулла Камалетдин улы", "Троицк мещаны Камалетдин мулла улы Мифтахетдин", "Мифтахетдин Камалетдин мулла улы", "Аҡмулла", "Дәрдмәнд Аҡмулла бәдүх" тип таныта. Тикшереү документтарында ла ул "Троицк ҡала ы мещаны Мифтахетдин Камалетдинов" тип теркелгән.

Аҡмулла биография ына өр-яңы мәғлүмәттәр өҫтәүе менән иғтибарҙы йәлеп итә был табыш. Иң элек ул шағирҙың үҙен Камалетдин улы (шулай уҡ исемдең ҡыҫҡа варианты менән – Камал улы) тип танытыуы, делола и ә унын Мифтахетдин Камалетдинов тип теркәлеүе мө им ә әмиәт ҡаҙана. әр хәлдә, был факт шағирҙың рәсми документтарҙа, әйтәйек, 1893–1894 йылдарҙа Мөхәмәдйәр улы, Мөхәмәдйәров түгел, бәлки, Камалетдин улы, Камалетдинов булып йөрөгәнлеген дәлилләп тора. Шунан сығып ҡара аҡ, шағирҙың ҡәбер ташындағы текстың унын шәхси документына бөтөнләй тап килмәгәнлеге, бәлки, унын Аҡмулла хаҡында халыҡ ара ында таралған легендаға ғына нигеҙләнеүе күренеп тора. Ә бит әр кеше, әр шәхес үҙ ҡулы менән яҙылған рәсми исем-фамилия ы менән тарихта үҙ урынын алырға тейеш. Шуға күрә, беҙҙең әҙәбиәт фәнендә шағирҙың тулы исемшәрифен Мифтахетдин Камалетдин улы Камалетдинов (псевдонимы – Аҡмулла) тип билдәләү тарихи дөрөҫлөккә тура килә, тип раҫларға мөмкин. Ә бына Аҡмулланың ҡай ылыр ваҡытта мещандар сословие ына кереп китеүе, йәғни Троицк ҡала ының мещанына әйләнеүе – унын биография ын өйрәнеүселәр өсөн ғәжәп бер яңылыҡ. Тимәк, шағирға "башҡортлоҡтан ҡаҙаҡлыҡҡа" ла, тора-бара хатта ки мещанлыҡҡа ла күсергә тура килгән. Бының сәбәптәре хаҡында ҡыҫҡаса ғына әйтеп үтергә бул аҡ, иң элек Аҡмулланың 1867–1871 йылдарҙа, Иҫәнгилде байҙың доносы буйынса, алдат хеҙмәтенән ҡасып йөрөүсе башҡорт тигән ғәйеп менән төрмәлә ултырып сығыуын әм шул ваҡиғанан уң үҙен ҡаҙаҡ бала ы тип таныта башлауын иҫкә төшөрөргә тейеш булабыҙ. Әгәр ҙә ул ошо ваҡиғаға тиклем әлеге мещандар сословие ына күсеп өлгөргән бул а, моғайын, төрмәгә ултыртмаған да булырҙар ине. Ә инде башҡортҡа әм мишәргә ҡарата кантонлыҡ идара ы дәүерендә ҡаҙаҡ дала ына сығып дин эштәрен атҡарыу, балалар уҡытыуҙы тыйыу тура ындағы ҡәтғи тәртиптәр 1865 йылдан уң да ғәмәлдә булған. Аҡмулла, төрмәнән сығып, ни айәт, был бәләнән имен-аман ҡотолғас, арт яғын тағы ла ышаныслыраҡ итеп нығытып ҡуйыр өсөн, мещанлыҡҡа күсеү хәйлә ен уйлап тапҡандыр. Шуның менән ул батша властарының тыйыуын урап үтеп, Рәсәй буйлап ирекле йөрөү хоҡуғын, ҡаҙаҡ дала ына сығып, балалар уҡытыу, үҙе теләгән эш менән шөғөлләнеү мөмкинлеген алыуға өлгәшә[11].

Аҡмулла хаҡында яҙғанда, беҙҙең атаҡлы Аҡмулланан тыш, ҡаҙаҡтарҙа тағы ла бер Аҡмулла исемле аҡын булғанлығы тура ында ла оноторға ярамай. Сөнки Мифтахетдин Аҡмулланың бәғзе бер шиғыр юлдары ла, тормошондағы ҡай ы бер ваҡиғалар ҙа әлеге унан аҙмы-күпме алдараҡ Аҡмулла тип танылған әм үҙ исемен Хөббихужа ибне Нияз тип бәйән иткән бүтән бер Аҡмулланан килгән булыуы ихтимал. Был хаҡта, Риза Фәхретдинов иҫтәлектәренә таянып, 1970 йылда уҡ әле татар тарихсы ы Мирҡасим Ғосманов айырым мәҡәлә баҫтырып сығарғайны[12]. Артабан ул ошо уҡ мәсьәләгә М. Аҡмулланың 1981 йылда Ҡазанда нәшер ителгән "Шиғырҙар" йыйынтығына яҙған баш үҙендә туҡталып үтте. үҙ бында Мифтахетдин Аҡмулланыҡы тип иҫәпләнгән "Солтан Ғөбәйҙуллаға шикәйәт" әҫәрендәге "Асыл затым ора аңыҙ, мин бисара Дәрдемәнд Хөббихужа ибне Нияз, арғы атам Әбүталиб Ширияздан" тигән шиғыр юлдары әм, сама менән, 1870 йылдар урта ында Ҡазан шә әренә барып та, Ши абетдин Мәрҗәни хәҙрәтте осрата алмайынса кире киткән шул уҡ Хөббихужа ибне Нияз исемле бүтән Аҡмулла тура ында бара. Мирҡасим Ғосманов Риза Фәхретдиновтың "Аҫар" тигән хеҙмәте-

---

*[10] Ҡотошев Р. Р. "Ҡулым ҡуйҙым..." // Агиҙел, № 10, 2006. 166–171-се биттәр.*

*[11] Шунда уҡ. 171-се бит.*

*[12] Госманов М. Шагыйрь Мифтахетдин фажигәсе әм ике Акмулла турында // Идел. Яшьләрнең әдәби альманахы. Казан, 1970.*

нең дүртенсе томында урынлаштырылған Мәржәни яҙмалары ара ынан ошондай үҙҙәрҙе килтерә: “Ҡаҙаҡ диярынан “Аҡмулла” тип мәғрүф булған Хөббихужа ибне Нияз 1292-лә рәжәп урталарында (1876 йыл, август – **М. Ғ.**) Ҡазан шә әренә килеп киткән, мин уны күрә алманым. Ата ы Болғар татарҙарынан булып, ана ы ҡаҙаҡ икән. Сәхибе фазыл, тинеләр, Харәзем үә Бохара үә башҡа урындарҙа йөрөгән[13].

Шуға өҫтәп Риза Фәхретдиновтың “Мифтахетдин Ҡазан шә әренә бара алмағанлығыны үҙемә үҙе өйләгән ине” тигән үҙҙәрен, “Ши абетдин Мәржәни мәрҫиә е”нең инеш өлөшөндә Аҡмулланың “А , дәриға! Баралманым ҡашына уның” тип үкенеүен дә, мәрҫиәнең Мәржәни үлгәндән уң яҙылған бүлегендә “Ҡазан шә ренә бер барып күрә алманым, дәриға, а !” тигән үҙҙәренән дә Мифтахетдин Аҡмуллаға Ҡазанға барып, Мәржәни менән күрешергә тура килмәгәнлеге аңлашыла бул а кәрәк. Әммә беҙҙә әле хәҙер ҙә бәғзе авторҙарҙың, асыҡланып бөтмәгән бер үк раҫлауҙы бер-бере енә ҡабатлап, Мифтахетдин Аҡмулланы, Ҡазанға алып барып, Ши абетдин Мәржәниҙәр, Ҡәйүм Насыриҙар менән осраштырып йөрөтөүҙәре ис кенә лә ышандырмай.

Ни айәт, Мифтахетдин Камалетдиновтың тәү башлап 1981 йылда төҙөлгән генеалогия ында уңғы осорҙа урын алған өҫтәмәләр тура ында бер нисә үҙ. Халыҡ иҫәбен алыу .б. мәғлүмәттәр буйынса, Мифтахетдиндең ҡартата ы – указлы мулла, мөхтәсип Ишҡужа Ишбулдин 1843 йылда 75 йәшендә донъя ҡуйған. Ата ы – указлы имам Камалетдин Ишҡузин да шул уҡ йәшкә етеп, баҡыйлыҡҡа күскән, йәғни уның тыуған йылы – 1805, үлгән көнө – 1880 йылдың 26 ноябре. Әсә е Бибиөммөгөлсөм Сәлимйән ҡыҙы 1850 йылдың июнендә 41 йәштә тип күр әтелгән. 1859 йылда халыҡ иҫәбен алған ваҡытта и ә ул тере булмаған. Тимәк, 1850 әм 1859 йылдар ара ында вафат булған. Был факт шағирҙың бала сағында етем ҡалыуы тура ындағы версияны кире ҡаға. Әммә, улай булғас, уның Ши абетдин Мәржәнигә арналған мәрҫиә ендәге:

*Үгәй әсә ҡулында йәтим ҡалдым,*
*Унан да бик эрәтем китеп ҡалдым.*
*Өҫтөмдә керле күлдәк, йыртыҡ дамбал,*
*Ҡайҙа мулла бар ти әң, етеп ҡалдым, –*

тигән шиғыр юлдарын нисек аңларға, тиер егеҙ. Ә бит 1859 йылғы халыҡ иҫәбен алған ваҡытта ла әле Мифтахетдин атай йортонда иҫәпләнгән. Был ваҡытта Камалетдин имам 45 әм 33 йәшлек ике ҡатыны менән йәшәп ятҡан. Уның кесе улы Әхмәҙигә дүрт йәш тә дүрт ай, Туй ылыу тигән йәш ҡатынынан тыуған Ғәйшә исемле ҡыҙына ике йәш тә дүрт ай ғына була. Бынан тыш, Камалетдин Ишҡузин бер туған энеләре Хөснөтдин, Шәмсетдин, Шәрәфетдин, Ғилман әм уларҙың ҡатындары, уларҙың ярты йәштән алып ике йәшкә тиклем, өс йәш тә ете айлыҡ, биш йәш тә игеҙ айлыҡ, ун дүрт йәшлек ыбыр-сыбыр балалары менән – йәмғе е ун игеҙ кеше оло бер ғаилә булып йәшәп ятҡандар ҙа ба а. Ярай, Мифтахетдендең әсә е уға 19–20 йәш тулғандан уң вафат булғандыр, тип күҙ алдына килтерәйек. Ләкин өй тулы сыр-сыу килгән бала-саға, ата ының ике ҡатыны, уның менән бер туған бер генә түгел, ә дүрт аға ының ҡатындары ара ында Мифахетдин тип хәстәрлек күреү мөмкин дә булмағандыр. Шул тиклем оло ғаиләнең тамағын да туйҙырырға, өҫ-башын да ҡарап өлгөрөргә, йорт эштәренә лә өлгөрөргә кәрәк тә ба а. Шундай тормошта, аман да мәҙрәсәнән мәҙрәсәгә күсеп, шиғриәт, аң-белем тура ында уйҙарға бирелеп йәшәгән былай ҙа сәйерерәк хыялый бер егеттең хәләхүәлен аңлауы ҡыйын түгел. Нәҡ шундай шарттарҙа, ата ы менән килешә алмайынса, тыуған йортон ташлап сығып китә лә инде йәш шағир. Дөрөҫ, 1859 йылда әле ул атай йортонда иҫәплән ә лә, асылда бынан бер нисә йыл алдараҡ, әйтәйек, 1856-1857 йылдарҙа, өйҙән сығып киткән булырға тейеш. Был хаҡта Риза Фәхрет-

[13] *Шунда уҡ. 22-23-сө биттәр.*

диновтың "егерме биш йәшендә ваҡытында үҙенең ватанын ҡалдырып сығып киткән үә ҡаҙаҡ ара ына барып кергән[14] тигән үҙҙәре ысынбарлыҡҡа яҡындыр. Әммә "ҡаҙаҡ ара ына барып керә" тигәндә, Мифтахетдиндең башта нисәлер йыл Троицкиҙа мәҙрәсәлә уҡып, йәйге айҙарҙа яҡындағы ҡаҙаҡ аймаҡтарында балалар уҡытып ғүмер иткәнлеген иҫтә тоторға кәрәк.

2006 йылда беҙгә, Аҡмулланың шәжәрә енә ғәйет ҡыҙыҡлы тағы ла бер мәғлүмәт өҫтәп, матбуғатта баҫтырып сығарырға насип булды[15]. Шәжәрәлә беренсе мәртәбә Мифтахетдин Камалетдин улының үҙенән тыуған әм, Хоҙайҙың хикмәте менән, ваҡыт даръяларын Ҡаҙағстан, Төркмәнстан ерҙәре аша Башҡортостандың Салауат районына, изге Салауат тупрағына килеп ереккән нәҫел тармағы үҫтереп ебәрелде. Был тармаҡтың нисегерәк төҙөлөүе тура ында алда күр әтелгән "Шиғриәт йондоҙо. Башҡорт мәғрифәтсе-шағиры Мифтахетдин Аҡмулла" тигән китапта уҡырға мөмкин[16]. Бында Аҡмулланан таралған нәҫел ебен билдәләп үтеү менән сикләнмәксебеҙ: Аҡмулла – уның ҡаҙаҡ ҡатыны Сулмаҡбиҙән тыуған улы Бабажан мулла Аҡмуллаев – уның улы Бирбаса Бабажанов – уның улы Абдулла (Теркәш) Бирбабаев (1937–1995). Абдулла Бирбабаев Салауат районында тыуып үҫкән Зәйтүнә исемле ҡатыны менән ун бер бала тәрбиәләп үҫтерәләр: Нурмөхәммәт, Матжан, Зәйтүнгөл, Ширмөхәммәт, Розагөл, Мөхәммәтнур, Рәмил, Гөлнара, Хәжәрбиби, Солтанморат, Муса. Хәҙер күбе енең үҙҙәренең балалары, ейәндәре үҫеп килә. Улар инде –Аҡмулланың бишенсе, алтынсы быуын тыуартыуасарҙары.

Шуны ла әйтергә кәрәк: Аҡмулланың шәжәрә ен төҙөү эшен беҙ профессор Әнүәр Әсфәндиәров менән параллель рәүештә алып барҙыҡ. Иң мө име – хәҙер уға ышыныслы нигеҙ алынған. Әммә шағирҙың нәҫел-нәсәп тармаҡтарының беҙҙең дәүергә ҡараған өлөшөн бик ентекле итеп тулыландыра ы бар. Шуның менән бергә, Рәсәй дәүләт боронғо акттар архивында аҡланған XVIII быуат халыҡ иҫәбен алыу документтарын өйрәнеп, шәжәрәнең тәрәндәге тамырҙарын (Ишҡужаның ата ы Ишбулдының ата-бабаларының исемдәрен) асыҡлау ҙа бурыс булып ҡала әле. Туҡанбай ауылындағы нәҫел-нәсәбенә килгәндә, ул эшкә урындағы тикшеренеүсе, Туҡанбай башланғыс әм күршеләге Сафар дөйөм белем биреү мәктәбе уҡытыусылары тотоноп, шәжәрә байрамдары, мәктәптәрҙә шуның менән бәйле күргәҙмә материалдар ойоштор алар, бик мәслихәт булыр.

Аҡмулла исеме, Аҡмулланан ҡалған алтын мираҫ – әр башҡорттоң йөрәк түрендә. Уның тормош юлын, аҫыл ижадын артабан да өйрәнеү – беҙҙең мәҡәддәс бурысыбыҙ.

**Рәшит ШӘКҮР,**
**филология фәндәре докторы,**
**профессор.**

*[14]Харисов Ә. И. Яңы асылған хазина // Рухи тамырҙар. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1984. 104-се бит.*

*[15]Рашит Шакур. Звезда поэзии. Башкирский поэт-просветитель Мифтахетдин Акмулла. Изд. 3-е, дополненное. Уфа: "Китап", 2006. С. 54.*

*[16]Шунда уҡ. 161–163-сө биттәр.*

# АЛПАУЫТТАР ҠАЛДЫРҒАН МИРАҪ

*Үҙған быуат баштарында, тарихтан мәғлүм булыуынса, Рәсәй империя ында капитализм ҡыҙыу үҫеш юлына баҫа. Иҡтисади үҫештә ил быға са күрелмәгән уңыштарға өлгәшә, әм бында, ис шик еҙ, пропаганда алымы булараҡ, даими уҙғарылып торған күргәҙмәләр ҙур роль уйнай. Батша Рәсәйе Беренсе донъя уғышына тиклем өлгәшкән кимәлгә Советтар Союзы сирек быуаттан ашыу ваҡыт үткәс, 30-сы йылдарҙа ғына, күтәрелә алды. Түбәндәге мәҡәләлә үҙ ил иҡтисадын үҫтереүҙә прогрессив ҡарашлы айырым алпауыттарҙың роле әм Омск ҡала ында уҙғарылған ауыл хужалығы күргәҙмә е тура ында бара.*

Өфө губерна ы земство ы нәшер иткән “Сельскохозяйственный листокъ Уфимскаго губернскаго земства” гәзите 1908 йылдан 1917 йылға тиклем йылына 12–15 тапҡыр сығып килгән. Бер йылға яҙылыу хаҡы 1910 йылда – 1 ум, ә бер сығарылышы 15 тин торған. Әйткәндәй, был гәзит төрлө йылда төрлөсә күләмдә нәшер ителгән. Хәҙерге гәзиттәр менән сағыштырғанда, уны журналға тиңләргә мөмкин. Баҫмаға губерна земство ы идаралығында йәки китап келәтендә – Үҙәк (хәҙерге Ленин – **Й. Ә.**) урамындағы Нестеров өйөндә яҙылырға мөмкин булған. Исеменә күрә есеме тигәндәй,баҫма биттәрендә Өфө губерна ындағы ваҡиғалар ғына түгел, ә бөтә Рәсәй империя ында әм бар донъяла булып ятҡан хәл-әхүәлдәр тура ында ла хәбәр ителгән.

Билдәле сәбәптәр арҡа ында 1917 йылғы Октябрь инҡилабы әм Граждандар уғышынан уң “Листокъ” бер нисә йыл нәшер ителмәй тора. 1923 йылда и ә баҫма яңынан сыға башлай, Башҡортостан Үҙәк статистика идаралығы тарафынан нәшер ителеп, тәүге битенә “Сельскохозяйственный листок. Для добровольных корреспондентов и волстатистики Башреспублики. Издания Башкирского Центрального статистического управления. Выходит отдельными выпусками от 4 до 6 раз в год” тип яҙылған. 1923 йылда баҫманың бер аны алтын менән 30 тин тор а, 1924 йылда 50 тингәсә күтәрелгән. Редакция Өфөлә К. Маркс урамындағы 25-се йортта (Үҙәк статистика идаралығында) урынлашҡан.

Былтыр ошо тарихи баҫма нәшер ителә башлауға 100 йыл тулды. Хәҙерге күҙлектән ҡарағанда, гәзит биттәрендә донъя күргән Өфө өйәҙе алпауыты Н. Ляховтың мәҡәләләре крайҙа ауыл хужалығы торошон сағылдырған ҡиммәтле тарихи ҡомартҡы аналырға хаҡлы.

Архив мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Ляховтар ғаилә е Өфө губерна ына Сембер губерна ынан 1820 йылдарҙа үҙ крәҫтиәндәре менән күсеп килә. Алпауыттың хәләл ефете Екатерина хөрмәтенә Бәләбәй өйәҙендә (хәҙерге Йәрмәкәй районында – **Й. Ә.**) Екатериновка, уңғараҡ Ляхово ауылына нигеҙ алына. Шул уҡ райондың хәҙерге Спартак ҡасаба ында (элгәре Братцевск тип аталған) алпауыттар үҙ имение ына нигеҙ алдыра. Ул хеҙмәтселәр өсөн махсус төҙөлгән ыҡсым биналар, йылҡы заводы, мал аҙбарҙары, иген келәттәре әм алпауыт ғаилә е йәшәгән ике ҡатлы йорттан ғибәрәт булған. Алпауыттар йорт алдында бик шәп быуа-күл дә төҙөткән. Уның ыуы бик саф булып, урта ында ҡара аҡҡоштар йөҙөп йөрөгән.

Петр Ляховтың Вера, Мария, Владимир исемле балалары була. Владимир батша армия ында поручик дәрәжә енә еткәнсе хеҙмәт итеп, отставкаға сыға әм Мария апа ынан ер атып ала. Николай исемле улын отставкалағы поручик Мәскәүҙә Ауыл хужалығы институтында (хәҙер Тимирязев исемендәге Ауыл хужалығы академия ы) зоотехния факультетында уҡыта. Ә Мария үҙе үлгәндән уң байлығын баҡса-йәшелсәселек, умартасылыҡ мәктәбе асыуға тотонорға васыят әйтеп ҡалдыра. Әйткәндәй, ул мәктәп 1892 йылда Өфө өйәҙенең Петровка ауылында асылып, Ляховтар уның бағыусы ы (попечителе) булған.

1924 йылда нәшер ителгән гәзиттең 6-сы анының алтынсы битендә Н. Киреев, зоотехник Н. В. Ляховтың Бөтә Союз ауыл хужалығы күргәҙмә ендәге сығышына таянып, "Бестужев тоҡомло ыйыр малдары" тигән мәҡәлә баҫтыра. Быға тиклем, 1912 йылда, алпауыт улы бестужев малын үҙенең "Новинка" исемле хужалығында үрсетеүгә өҫтөнлөк биреүе хаҡында яҙып сыҡҡан булған. Ошо уҡ гәзиттең 5-се анында Өфө йылҡы заводы мөдире Н. Ляховтың "Башкирское коневодство и меры, способствующие его восстановлению" тигән мәҡәлә е лә донъя күргән.

"Листок"тың 1911 йылда баҫылған 7-се сығарылышының 31—36-сы биттәрендәге "Омскиҙағы күргәҙмәнән" тип аталған мәҡәләлә алпауыт Н. В. Ляхов та телгә алына. "Дөйөм алғанда, Омскиҙағы күргәҙмә — 28 дисәтинә биләгән зауыҡлы ҡаласыҡ ул",— тип хәбәр итә баҫма. Бында, мәҙәни көнкүрештең алға китешен үрәтләгән өлгөләр менән бер рәттән, самоедтар, остяктарҙың (Себер халыҡтарын батша Рәсәйендә шулай атағандар — **Й. Ә.**) көнкүрешен үрәтләгән чумдары, боландар, эттәр ҙә бар.

Ҡырғыҙҙар тирмә е янында, өйөр-өйөр йылҡылар менән бергә, күскенсе крәҫтиәндәрҙең тәпәшәк кенә өйҙәре лә теҙелеп киткән. Күскенселәр биҙәгән павильон иғтибарҙы үҙенә йәлеп итеп тора. Бик ҙур зауыҡлы әм үҙенсәлекле бинаны әҙерләү өсөн байтаҡ сығымдар сарыф ителеүе күҙгә ташлана. Бер нисә бүлмәнән торған был павильон менән танышып сығыу өсөн генә лә байтаҡ ваҡыт кәрәк. әр бүлмәне Көнбайыш Себер яҡтарынан күсеп килгәндәр үҙҙәренсә йы азландырған. Стеналарҙа күскенселәрҙең тормошон төрлө яҡтан сағылдырған натуранан төшөрөлгән үрәттәр, фотолар бихисап. ыу ыҙ яҡтар өсөн ыу аҡлағыс әм я алма ҡоролмалар өлгөләре лә бар.

Был күргәҙмәлә ауыл хужалығы машиналары әм ер эшкәртеү ҡоралдары яҡшы әм етерлек күләмдә күр әтелгән. Күргәҙмә өлгөләре Себергә күсеп килеүсе бар халыҡтың бөйөк әм тынғы ыҙ эшмәкәрлеген яҡтырта. Был күргәҙмәгә өҫтәмә рәүештә йыуан ҡайын ағасы ҡыуышында күскенселәрҙең урман экспонаттары ла урынлашҡан. Был бик ҙур олонло ҡайындың үрентеләре, ботаҡтары тәү ҡарашҡа тәбиғи булараҡ тамашасыларҙың иғтибарын йәлеп итә.

Урман павильонынан ул яҡта бик күркәм өт павильоны күҙҙең яуын ала. Башҡа күршеләренә ҡарағанда ул иң бәләкәйе, әммә иң зауыҡлы павильондарҙың бере е. Ошонда Омск ынау станция ы әм лаборатория ында май бешеү әм химик анализ я ау ( өт аҙыҡтарының сифатын тикшереү — **Й. Ә.**) ойошторолған.

Күргәҙмәлә Дания, Германия, Австрия, Швеция әм башҡа илдәрҙең экспонаттары ла урынлаштырылған. Был күргәҙмә Урал буйы губерналарында йәшәгән тауар етештереүселәрҙең бихисап экспонатын үҙенә ыйҙырған. Пермь губерна ы земство ынан, мәҫәлән, күргәҙмәгә машиналар эшләү өлгөләре килтерелгән. Бында тимерсе кәсебе, нәфис ҡойоу кәсебе, суйындан ҡойолған йорт йы аздары, ауыт- аба, өнәрселәр оҫтаханалары өсөн машиналар әм станоктар, төрлө сорт тимер-томор . б. ҡуйылған.

Дедюхин тоҙ ҡайнатыу артеле етештергән тоҙ өлгөләрен әм был эштең теҙмә ен килтергән. Бынан тыш, төрлө өнәрселек экспонаттары ара ында андыҡ, мебель, экипаж, күн әйберҙәр бик күп күр әтелгән.

Үҙебеҙҙең Өфө губерна ы, өйәҙ земстволары булышлығы менән күргәҙмәгә төрлө ваҡ өнәрселек өлгөләре ҡуйылған. Унда Благовещендан кредит, " өнәр" ширҡәттәре, иген елгәреү ҡорамалдары эшләүселәр артелдәре, Күҫә ҡала ынан "Ҡойоусы" өнәрселек, "Урал" хеҙмәт артелдәре, Ләүҙә ауылынан таш эшкәр-

теүселәр, Иглиндан тәгәрмәс я аусылар, Бәләбәйҙән кәрзин үреүселәр, Минзәлә өйәҙенең Иҫке Мелькен земство ынан туҡыу оҫтахана ы әм башҡа байтаҡ айырым кустарҙар, өнәрселәр үҙ экспонаттарын килтергән.

өнәрселек буйынса Өфө губерна земство ы тарафынан картограмма төҙөлгән. Күргәҙмәлә өйәҙ земстволары ла ҡатнашҡан. Күргәҙмә комитеты Өфө губерна экспонаттарына сираттағы бүләктәр тапшыра. өнәрселекте үҫтергән өсөн Өфө губерна земство ы Ҙур алтын миҙал менән бүләкләнә. Яҡшы паркет етештергән өсөн Калугин әм Миндуков ширҡәттәре Бәләкәй алтын миҙалға лайыҡ була. Сана, ултырғыс, тәгәрмәс, паркет өсөн Благовещен кредит ширҡәте, тал сыбыҡтарынан үрелгән тарантас өсөн Бөрө өйәҙенән ПД Колышев, машина ҡойған өсөн Күҫә заводы “Ҡойоусы” артеле, төрлө үлсәүҙәр өсөн Ҡатау ҡала ынан А. Волончев, башҡа байтаҡ оҫталарға Ҙур көмөш миҙал бирелгән.

Бынан тыш, күргәҙмәлә ҡатнашыусыларға Бәләкәй көмөш миҙал, Бронза миҙалдар әм Маҡтау грамоталары ла бирелгән. Награда алыусылар төрлө өйәҙҙәрҙән булып, улар ара ында иген уғыу машина ы, тәгәрмәс туғыны, тырма, бысҡы, оҫҡо, елгәргес, туҡыу машина ы, балта, көрәк . б. эшләүселәр бик күп.

Өфө өйәҙе алпауыты Н. Ляхов был күргәҙмәгә үҙ заводынан саф Орлов тоҡомло юртаҡ аттар алып килгән. Йылҡыларҙан “Вандал” ҡушаматлы айғыр – Алтын, “Мах” ҡушаматлы ы Бронза миҙалдарға лайыҡ тип табыла. Йылҡы малынан тыш, Ляхов бестужев тоҡомло быҙауҙар ҙа алып килеп, Ҙур көмөш миҙал яулай. Гәзит хәбәр итеүенсә, күргәҙмә эшләгән мәлдә был быҙауҙар бар малсылар әм белгестәрҙең иғтибарын йәлеп итеп торған.

Алпауыт Ляховтарҙың бестужев тоҡомло ыйыр малын үрсетеүе хаҡында И. В. Ляхов “Листокъ”тың 1910 йылғы 7-се анында бына былай тип яҙған: “Минең көтөүемдә бестужев тоҡомло 50 ауын ыйыр бар. Олатайым Ипполит Петрович Ляхов уларҙы Сембер тарафтарынан үҙе менән бергә алып килгән. Был тоҡом малдары миңә атайым Владимир Ипполитовичтан 1900 йылда мираҫ булып ҡалды. Малдарҙың бында алып киленеүенең сәбәбе шунда: улар Волга буйында үҙен яҡшы тоҡом итеп таныткан, әм олатайым да иң яҡшыларын ғына айлап алған”.

Йомғаҡлап шуны әйтергә мөмкин: Омксиҙа үткән ауыл хужалығы күргәҙмә ендә Өфө губерна ы тауар етештереүселәре бер Ҙур, бер Бәләкәй алтын, ун ике Ҙур, игеҙ Бәләкәй көмөш, алты Бронза миҙалдарға, дүрт Маҡтау грамота ына лайыҡ булған. Әйткәндәй, был Алтын миҙал Ҡазанда йәшәгән И. Ляхованың ғаилә реликвия ы анала.



Ә журнал битендә еҙ күргән үрәттең тарихы былайыраҡ. 2003 йылда Мәскәүҙә баҫылған “Пчеловодство” журналында минең “Кто они Ляховы?” тигән мәҡәләм баҫылып сыҡҡас, Интернет селтәренә ҡуйылған булған. Мәскәүҙәге бер фирма менеджеры Ю. Ляхов шул хаҡта уҡыған да, 2004 йылдың июнендә миңә унан хат килеп төштө. Беҙ Ляхов менән хат алыша башланыҡ әм бына ошо миҙалдарға килеп сыҡтыҡ.

Йомғаҡлап шуны әйтергә кәрәк: башҡорт милли мәҙәниәте үҫешенә Рәсәй менән 450 йыл ғүмер итеү үҙенең юйылмаҫ эҙҙәрен ҡалдырған. Унда Башҡортостанға күсеп килеп үҙ хужалығын ҡороп ебәргән әм үҫтергән, тоҡомсолоҡ менән уңышлы шөғөлләнгән алпауыт Ляховтарҙың да өлөшө бар, әм ул тәрән ихтирамға лайыҡ.

**Йәүҙәт ӘХТӘМОВ.**

## ИҪКЕ АУЫЛ — ИЛЕКӘЙ

Башҡорттар Урыҫ дәүләтенә ҡушылғас, уларҙың тарихын өйрәнеү менән Ырымбур губернаторы И. Кириловтың ярҙамсы ы П. Рычков ҡыҙыҡ ына башлай. Тарихи материалдарҙы йыйыу өсөн ул урындағы халыҡҡа, бигерәк тә старшиналарға, мөрәжәғәт итә. уңғылары ара ында тарихты яҡшы ғына белгән кешеләр әм уларҙа яҙма материалдар булыуы асыҡлана. Кирилов үҙенең ышанысл кешеләре ара ынан телдән өйләгән мәғлүмәттәрҙе йыйырға тырышҡан. Был текстар башҡорт ырыуҙары шәжәрәләре булып, башҡорт старшиналары шул шәжәрәләрҙе йыйыусы иҫәпләнгән.

XVIII быуатта ла үткәндәрҙе белеүселәр табыла, шуларҙың бере е Сәфәр Осипов була. 1735—1740 йылдарҙа башҡорт ихтилалында ҡатнашҡаны өсөн был кеше хәрби флотҡа хеҙмәткә ебәрелә. Осиповтың тарихи мәғлүмәттәрҙе яҡшы белеүе Өфө провинция канцелярия ында ла билдәле була. 1745 йылдың 18 мартында уны Өфөгә саҡырып алалар. Осипов башҡорттарҙың Көньяҡ Уралға нисек килеп сығыуын өйләп, Рәсәйгә үҙ теләктәре менән ҡушылыуҙарын аңлата. Шулай уҡ 1705—1711 әм 1735—1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалдарының тоҡаныу сәбәптәрен дә еткерә.

IX быуат баштарынан башлап хәҙерге Бөрө йылға ынан Барҙы (Пермь крайы) яҡтарына ҡәҙәр, көнсығыш сиге Ҡариҙел йылға ынаса, көнбайышы Кама йылға ы бассейнында ятҡан биләмәләрҙә 1468 йылға тиклем Танып ырыуы башҡорттары йәшәүе билдәле. Оло быуын кешеләре хәтерләүенсә, Танып ырыуы башҡорттарының тәүге исемен берәүҙәре “Талип”, икенселәре “Тайып” тип атай, әм Танып йылға ына шуның исеме бирелгән. Талип бабайҙың нисә улы булғандыр, шулай ҙа телдән-телгә күсеп, беҙҙең быуынға килеп етә алғандары – Таҙ, Ирәкте, Гәрәй, Әрхәм бабайҙар. Шулар күпмелер туғандары менән айырылып сығып, үҙ аллы тормош көтә башлаған. Уландарҙың иң кесе е Әрхәм Иҫке Ауылда тороп ҡала. Унын улдары Ҡайпан, Ҡаҙансы, Ҡыйғаҙы, Ҡунаҡбай.

Ҡунаҡбайҙан башлап нәҫел шәжәрә ен үҙебеҙҙең көндәргә хәтлем яҙып ҡалдырыу әм шунда булған ваҡиғаларҙы яҡтыртып китеү минең тормош маҡсатым булып тора.

Үрҙә сиктәре күр әтелгән Танып ырыуы биләмәләрендә бер ауыл – Иҫке Ауыл ғына булған. Ул иң боронғо беренсе башҡорт ауылы икәнен аңлата. 919—1700 йылдарҙа уның исеме шулай булған. Ер ҡарҙан асыла башлау менән халыҡ мал көтөүҙәре менән йәйләүгә сыҡҡан. Майҙан октябргә тиклем малдар йәйләүҙә йөрөгән. Ауылда ҡалған кешеләр ҡышҡылыҡҡа бесән, утын, еләк-емеш әҙерләү, балыҡ тотоу, ҡырағай бал ҡорттарының балын, сәй үләндәре йыйыу, торлаҡ йүнәтеү менән мәшғүл булған. Ике ҡатлы ситән урта ын ҡамыш менән ҡаплап, ҡыҙыл балсыҡ тултырып, үҙенсәлекле саман өйҙәр алып йәшәгәндәр. Тәҙрә урынына яҡтылыҡ үткәрерлек дәрәжәлә эшкәртелгән арыҡ тире е ҡуйылған. Түшәм

ҡыҙыл балсыҡ менән ыланып, өҫтөнә ҡамыш, унан уң тупраҡ алып, тағы ла йүкә ҡабығы менән ябып йылытылған. Иҙәнгә мал тиреләре йәйелгән, үҙҙәренең өҫтәрендә лә йәнлек йәки арыҡ тире енән эшкәртелгән кейем булған. Ҡышҡы ыуыҡтарҙа йылытыу өсөн өйҙөң бер мөйөшөнә соҡор ҡаҙып, шуның аҫҡы яғын киң итеп, өҫкө яғын тарайтып, өҫтөнә ҡыҙыл балсыҡ менән ҡом ҡушып уғылған кирбес кеүек нәмә теҙгәндәр. Төтөндө тышҡа сығырлыҡ итеп яйлағандар. Ата-бабаларыбыҙ башлыраҡ булған, урыҫтар кеүек өй эсендә әсе төтөн еҫкәп, сәсәп йәшәмәгән.

Туҡланыу өсөн күберәге ит ризыҡтарын ҡулланғандар. Күп итеп йылҡы итенән тултырма, ҡаҡлаған ит, киптерелгән балыҡ әҙерләгәндәр. Ҡышҡылыҡҡа сәй үләндәре йыйып киптергәндәр. Урмандарҙа иҫәп-хисап ыҙ бал ҡорттары ағас ҡыуыштарында туплаған балдың бер өлөшөн йыйып ала торған булғандар.

Әрхәм — оло бабабыҙ. Ул үҙ биләмәләрен дүрт малайына ла таратып бирә. Ҡайпан өлөшөнә хәҙерге Ҡайпан ауылының тирә-яғы сыға, Ҡаҙансы әм Ҡыйғазыға ла ерҙәр шундай уҡ тәртиптә бирелә, ә төпсөк малай Ҡунаҡбай Иҫке ауылда ҡала. Ҡыйғазыға бар аң, беҙҙең еребеҙ Балтасҡа тиклем булған, тиҙәр. Ҡаҙансыға бар - аң да шундайыраҡ фекер ишетә ең.

Ауылдар барлыҡҡа килә башлағандан алып кеше исеме менән атала торған булған. Иҫке Ауылда ҡалған Ҡунаҡбайҙың ике улының исеме яҙма рәүештә беҙгә килеп еткән. Оло улы Күскилдененң исеме Иҫке Ауылға ҡушылып, бер ни тиклем ваҡыт ул Күскилде тип йөрөтөлә. Күскилдененң тәүге улы Юныс күпмелер туғандары әм малы менән йәнәшәгә ауыл ҡороп ултыра. Ауылға Юныс исеме бирелә. әр ваҡыттағыса, урыҫ писарҙәренең башҡорт исемдәрен боҙоп яҙыуы арҡа ында Юныс Йосопҡа әйләнә. Юныс тарихҡа Йосоп Күскилдин булып кергән. Яҡшый ауылы татарҙарына ҡортомға ер биреүҙә унын роле ҙур була. Усман ауылы кешеләренә ер биреү тура ында ҡағыҙға ла ул ҡултамға ала. Бына ошо Йосоп Күскилдин нигеҙләгән ауыл артабан Балтас булып китә. Балтастан Сәлимйән ағай Әхтәриев, Иҫке Яҡшыйҙан Мифтахетдин Бәләғетдинов бабайҙарҙың ауылдар тарихы тура ында бай мәғлүмәттәр өйләп ҡалдырғаны өсөн ҙур рәхмәтлемен.

Оло быуын кешеләре өйләүенсә, Илекәйҙең (Ишметовмы, Исметовмы, Исембетовмы — өс ерҙә өс төрлө яҙылған) сығышы сирмеш (мари) ара ынан булған. икеяҙ ауылында йәшәүсе уғыш ветераны Мәжит ағай Әғләмов та шуны раҫлай. Башҡорт әм татар ара ында Илекәй исеме осрамай. Илекәй Сыпсыҡ ауылынан булып, Күскилдегә күсеп ултырған. Бөрө өйәҙе исправнигы тәҡдиме менән ул старшина вазифа ына үрләтелгән. Шулай ҙа Илекәй – тарихҡа ингән шәхестәрҙең бере е. Ул нигеҙ алма а ла, 1750 йылдан бөгөнгө көнгә тиклем ауыл Илекәй тип атап йөрөтөлә. Яҡын-тирә ауыл халыҡтары ара ында ул әле лә Иҫке Ауыл исеме менән телгә алына.

Ауылдың исеме Илекәйгә әйләнеп китеүенә бәхәсле көрәштә Илекәй Ишметовтың Ҡолой Балтасовты әм Дауытты еңеүе сәбәпсе булған, тигән легенда ижад ителеп, сал тарихта үҙ урынын алған. Көрәш ауыл булып ултырыу өсөн түгел, ә Ар әм Ҡарыш йылғалары, күлдәр менән әйләндереп алынған әм мал аҫырау өсөн бик уңайлы, ҙур төбәк өсөн барған. Ошо йылға-күлдәрҙә балыҡтың күплеге ошо көрәшкә этәргән. Илекәй, Ҡолой менән көрәшкәндән уң, күп тә үтмәй үлеп китә.

**Әнғәм МОСТАФИН.**
**Балтас районы,**
**Иҫке Балтас ауылы.**

# БЕҘ КЕМДӘР?

*Туған теленә битараф кеше ҡырағай. Ул үҙенең тәбиғәте менән үк зыянлы. Сөнки уның телгә ҡарата битарафлығы үҙ халҡының үткәненә, бөгөнгө өнә әм киләсәгенә битараф булыуы менән аңлатыла.*

**К. ПАУСТОВСКИЙ**.

Халыҡ, туған тел, милләт тура ында уңғы йылдарҙа күп өйләнде әм яҙылды. Матбуғатта Балтас районы халыҡтары тура ында бәхәсле яҙмалар донъя күргеләне. Улар менән танышҡандан уң ирек е-ҙҙән шундай орау тыуа: кемдәр уң беҙҙең ата-бабаларыбыҙ? Был яҙмамда мин тарихи сығанаҡтарҙа “мишәр”, “типтәр” тип йөрөтөлгән халыҡтарҙың ҡыҫҡаса тарихына туҡталып китергә уйлайым.

1988 йылдың ноябрендә “Ағиҙел” журналында билдәле тарихсы Әнүәр Әсфәндиәровтың 1795, 1834 йылдарҙағы V әм VIII рәүиз (халыҡ иҫәбен алыу) материалдарына таянып яҙылған “Көнбайыш башҡорттары” тигән мәҡәлә е донъя күргәйне. Унда районыбыҙҙың ҡай ы бер ауылдарында йәшәгән халыҡтың милли составы килтерелә. Мәҫәлән, Имән ауылындағы 17 йортта башҡорттарҙан 69 ир-егет әм 69 ҡатын-ҡыҙ, ә биш йортта мишәрҙәрҙән 12 ир-егет әм ҡатын-ҡыҙ йәшәгән. Туйсыбайҙа 65 башҡорт, 62 типтәр, Иҫке Балтаста 129 башҡорт, 47 мишәр, Көнтуғышта 101 башҡорт, 12 мишәр, 11 типтәр көн күргән.

Дөрөҫ, автор бында саф мишәр ауылдары булған Үрге әм Түбәнге Ҡарыш, Богдан, Тимкә, Уразай кеүек ауылдарҙағы халыҡ иҫәбен күр әтмәгән. Шулай бул а ла, беҙҙең районда элек-электән күп милләтле халыҡтар йәшәүе билдәле.

Был яҡтарға татар халҡы ( уңынан уларҙы мишәр, типтәр әм бобыль тип атаясаҡтар) нисек килеп урынлашҡан уң?

XVII быуатта Волга буйынан әм Рәсәйҙең үҙәк районларынан крәҫтиәндәр Башҡортостанға күпләп күсеп ултыра башлай. Күскенселәр ер хужалары – башҡорттарҙың рөхсәте, йыш ҡына үҙ белдектәре менән дә башҡорт ерҙәренә килеп урынлаша. Уларҙы “ебәрелмеш” (припущенник) тип атайҙар. Урыҫ ебәрелмештәре дәүләт әм удел крәҫтиәндәре төркөмөнә индерелгән. Урыҫ булмағандарҙы типтәр, бобыль тип йөрөткәндәр. Типтәрҙәр яңы урынға яҙма килешеү (дәфтәр) нигеҙендә,

ә бобылдәр телдән рөхсәт алыу  өҙөмтә ендә  урынлаша.

Башҡортостан Рус дәүләтенә ҡушылғандан  уң (1552—1557 йылдар), татар ҡәбиләләре лә был яҡтарға килеп  урынлашыу  яйын ҡарай. Был ҡәбиләләрҙе “мишәрҙәр” тип атайҙар. Улар ҙа “ебәрелмеш” иҫәбенә ингән. Типтәрҙәр үҙ эсенә татарҙарҙы йә и ә үҙ биләмәләренә хоҡуҡтарын юғалтҡан башҡорттарҙы ғына түгел, сирмеш (мари), сыуаш  әм арҙарҙы (удмурт) ла алған. Ерҙән файҙаланған өсөн ебәрелмештәр ер хужа ы башҡорттарға оброк түләгән йәки я аҡ түләү  әм ылауға йөрөү йөкләмә ен үтәүҙә ҡатнашҡан.

1800 йылдың 16 июлендә Ырымбур губерна идаралығы Башҡортостанда йәшәгән төрлө халыҡтар менән идара итеү записка ында мишәр халҡы тура ында былай яҙа: “Ырымбур губерна ында (Башҡортостан ул ваҡытта Ырымбур губерна ына ҡараған) был халыҡ ерле халыҡ түгел, улар Сембер губерна ының Алатор  әм Сембер өйәҙҙәренән күсеп килгән. Улар я аҡтан азат, ләкин 7106 (1597—1598) йылда бирелгән грамота буйынса  мишәрҙәр Өфөлә дворяндар  әм сит халыҡтар менән хеҙмәт итергә тейеш булған. Был 1735 йылға тиклем шулай дауам итте, әммә 1699  әм 1718 йылдарҙа 448 мишәрҙән  ҡаҙна файҙа ына  әр кешенән берәр  ум  йыйылды”.

1735 йылда мишәрҙәр баш күтәргән башҡорттарҙы баҫтырыуға көсөн йәлләмәне. ( үҙ 1735—1736 йылдарҙағы  Килмәк абыҙ етәкселегендәге ихтилал тура ында бара.) Был хеҙмәттәре өсөн  Сенат указы менән мишәрҙәр элек башҡорттарға оброк түләп файҙаланған ерҙәре менән бүләкләнде. Ошо уҡ указ нигеҙендә был халыҡ 1747—1754 йылдарҙа  әр йорттан 25-әр  тин  алым түләгән бул а, был я аҡ бөтөрөлә. Ләкин халыҡты тағы ла бөлгөнлөккә төшөрә торған я аҡ — ул да бул а тоҙҙоң ботон 35 тин менән  атып алыу тәртибе индерелә. Тоҙҙоң даими  әм күп кәрәк булыуы хужалыҡтарҙы тамам бөлгөнлөккә төшөрә.

Был халыҡтың үткән юлы,  шул замандарҙағы хәле тура ында 1794 йылдың ғинуарында мишәр депутаты Әбделҡадир Әбделкәримовтың иптәштәре менән бергәләп мишәр отрядтарының йәйге хеҙмәтен башҡорттарҙан  айырым үткәреүҙе  орап генерал-прокурор А.  Самойловҡа яҙған үтенесе асыҡ  өйләй. Был үтенескә старшина-поручик Ниғмәтулла Солтанморатов, поход старшина ы Әбделҡадир Әбделкәримов, йөҙ башы Ши абетдин Шендеевтар ҡул ҡуйған. Улар былай тип яҙа: “Беҙҙең мишәр халҡы  ҡалған башҡа диндәге халыҡтарға ҡарағанда беренсе булып үҙ теләге менән Алтын Урҙанан 7001 йылда уҡ (1482- 1483 йылдар) айырылып сыҡты  әм Рәсәйгә күсеп  урынлашты. Шул йылдарҙа уҡ, Ҡазанды алыуҙа  әм шундай эштәрҙә тоғролоҡ күр әткәндәре өсөн, ата-бабаларыбыҙ Волга  ярының таулы яғында уңайлы ерҙәр менән бүләкләнгән. Ә инде нуғай халҡы, урыҫ  ҡулы аҫтында булырға теләмәйенсә төрлө  хаслыҡтар ҡыла башлағас,  ата-бабаларыбыҙ бөйөк урыҫ ғәскәре менән берлектә уларҙы баҫтырыуҙа  ҡатнашҡан. 1676, 1707, 1735 йылдарҙа күтәрелгән башҡорт ихтилалдары халҡыбыҙға күп ҡайғы килтерҙе. Улар мишәрҙәргә яу менән килеп, ауылдарыбыҙҙы яндырҙы, ә йәштәрҙе  әм  ҡатын-ҡыҙҙарҙы әсирлеккә алып китеп, ҡырғы-

ҙҙарға, Бохара кешеләренә атты. Шуның өсөн дә батша хәҙрәттәренә тоғро булып ҡалып, беҙҙең ата-бабаларыбыҙ был фетнәне баҫтырыуҙа ҡатнашҡан.

1786 йылға тиклем барлыҡ 3800 йорттоң әр игеҙ йортонан бер кешене ғәскәри хеҙмәткә ебәргән бул алар, генерал-губернатор барон Игельстром тәкдиме менән әр өс йорттан бер кеше алына башланы. Ултырған ерҙән башҡа килемебеҙ булмағас, тамам бөлгөнлөккә төштөк.

Генерал-губернатор әфәнде! Аҙсылыҡ халыҡ булғанлыҡтан, беҙҙән 500 кешелек кенә отряд туплап, Ачаир форпостынан Шульбин форпосына тиклем башҡорттарҙан башҡа ҡарауыл хеҙмәтен үтәргә рөхсәт бирмәҫ егеҙме? Әгәр ҙә бик кәрәге сыҡ а, 500 кешелек отрядтан башҡа күберәк команда төҙөп хеҙмәт итергә әҙербеҙ”.

Был документтан күренеүенсә, башҡорт менән мишәр халыҡтары ара ында 1754—1755 йылдарҙа, унан уң да үҙ-ара ҡаршылыҡтар булыуы асыҡлана.

Ләкин 1755 йылғы Батырша ихтилалында әм 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр уғышында мишәрҙәр башҡа халыҡтар менән бергәләп иҙеүселәргә ҡаршы сыға. 1775 йылдың 16 февралендә Ырымбур губерна канцелярия ына урыҫ булмаған халыҡтарҙың ихтилалда ҡатнашыуы буйынса тупланған мәғлүмәттә 2352 мишәрҙең баш күтәреүселәр сафында булыуы хаҡында ла әйтелә.

Батша хөкүмәте халыҡтарҙы бер-бере енә ҡаршы ҡуйыу өсөн барыын да эшләгән. Тимәк, мишәрҙәр менән башҡорттарҙың бәрелештәре я алма рәүештә барлыҡҡа килгән икәнлегенә ышаныуы ауыр түгел. 1798 йылдың 10 апрель указы буйынса башҡорттар әм мишәрҙәр рәсми рәүештә хәрби ҡатлам тип иғлан ителә. Элекке улыстар урынына кантондар ойоштороla. Башҡортостан буйынса биш мишәр кантоны барлыҡҡа килә. Бөрө өйәҙендә 4-се мишәр кантонының квартира ы Богдан ауылында урынлаша.

1835 йылда Ырымбур губерна ын баш күтәреүселәр солғап алғас, ул Балтас яҡтарына ла килеп етә. Шул уҡ йылдың июнь аҙағында Ырымбурҙан кенәз Мәкҫүтов баш күтәреүселәрҙе тынысландырыу өсөн Тимкә ауылына килә, сөнки был ауыл мишәрҙәре беренсе булып баш күтәргән була. Әммә ихтилал етәкселәренән зауряд-сотниктар Мөхәмәтрәхим Әмиров, Ғәбделвәли Әмирханов әм тағы ла игеҙ мишәрҙе ҡулға алыу Богдандан махсус хәрби команда килгәс кенә мөмкин була.

Былдай миҫалдарҙы күпләп килтерергә мөмкин. Ҡыҫҡа ы, мишәр халҡының да ҡалған халыҡтар кеүек үк быуаттар буйынса иҙелеп, ауыр тормошта йәшәгәнен күрәбеҙ.

**Наил ХАЖИЕВ.**
**Балтас районы,**
**Үрге Ҡарыш ауылы.**

# ТЕАТР СӘНҒӘТЕНЕҢ АРЫҪЛАНЫ

*(Арыҫлан Мөбәрәковтың тыуыуына 100 йыл)*

*Бөйөк башҡорт артисы Арыҫлан Мөбәрәковтың ижады илебеҙҙең театр сәнғәтенең алтын фондына ингән. Ул башҡорт театрының шишмә башында торҙо, бөтә ғүмерен, талантын шул сәнғәтте үҫтереүгә сарыф итеүсе, ысын мәғәнә ендәге театр арыҫланы булды.*

*Актерҙың тышҡы әм эске матурлығы, тәбиғи әләте, киң амплуалы таланты уның замандаштарын оҡландырҙы, Арыҫлан Мөбәрәков башҡорт тамашасы ын ғына түгел, тотош СССР киңлектәрен яулауға өлгәште. Уға 1935 йылда — БАССР-ҙың атҡаҙанған, 1944 йылда — РСФСР-ҙың атҡаҙанған, 1949 йылда — РСФСР-ҙың халыҡ, 1955 йылда СССР-ҙың халыҡ артисы тигән исемдәр бирелде. Ленин, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ, "Почет Билдә е" ордендары менән бүләкләнде. 1934 йылдан алып яҙмышын Башҡорт академия драма театры менән бәйләне. Унда актер, художество етәксе е, театрҙың баш режиссеры, директоры кеүек юғары вазифаларҙа эшләне.*

*Актер Арыҫлан Мөбәрәковтың амплуа ы геройҙар галерея ынан ғибәрәт ине. "Ҡарлуғас"тағы (Б. Бикбай) — Шатморат, "Таңсулпан"дағы (Ҡ. Даян) — Айсыуаҡ, "Ҡарағол"дағы (Д. Юлтый) — Ҡарағол, "Салауат Юлаев"тағы (Б. Бикбай) — Салауат, "Ҡа ым түрә"ләге (Б. Бикбай) — Ҡа ым, "Борис Годунов"тағы (А. С. Пушкин) — Борис Годунов, "Ваня ағай"ҙағы (А. Чехов) — Войницкий, "Йәш гвардия"лағы (А. Фадеев) — Олег Кошевой, "Шайморатов генерал"дағы (И. Абдуллин, Ш. Насиров) — комдив Шайморатов, "Отелло"лағы*



*СССР-ҙың халыҡ артисы Арыҫлан Мөбәрәков ҡатыны, актриса әм шағирә Рәғиҙә Янбулатова менән.*

*(У. Шекспир) – Отелло, “Ай тотолған төндә”ләге (М. Кәрим) – Ырыҫҡол бей, “Ташлама утты, Прометей!”ҙағы тиран Әҙәмша әм башҡа башҡорт, СССР халыҡтары, донъя классика ы әҫәрҙәрендәге тиҫтәләгән-тиҫтәләгән оҡланғыс образдарҙы сәхнәгә сығарыусы актер кино сәнғәтендә лә танылыу тапты. Уның Я. Протазанов режиссерлығында Степан Злобин сценарийы буйынса төшөрөлгән “Салауат Юлаев” нәфис фильмындағы оҡландырғыс героик образ тыуҙыра алыуы арҡа ында күп милләтле СССР халҡы башҡорттоң ҡа арман улына ғашиҡ булды әм милләтебеҙҙең мәртәбә е күтәрелеүгә булышлыҡ итте.*

*Арыҫлан Ҡотлоәхмәт улы Мөбәрәков 1908 йылдың 15 декабрендә Өфө губерна ы (Белорет районы) Златоуст өйәҙенең Асы ауылында тыуа.*

*Ҙур шәхес, талантлы актерҙың тыуыуына 100 йыл. Журнал уҡыусыларына уның замандаштарының иҫтәлектәрен тәҡдим итәбеҙ.*

## “ аплы калас тотоп...”

Арыҫлан Мөбәрәков тәү тапҡыр минең аңыма Фәтхи Бурнаштың “Йәш йөрәктәр” пьеса ы аша өйгән йәре Сәрбигә күстәнәскә килтергән аплы ҡаласты тотоп килеп инде. Инде лә әсир итте.

1936 йылдың аҙағы бул а кәрәк. Башҡорт педагогия институты рабфагында уҡыған сағым ине. Беҙҙең профсоюз комитеты әр кис, бушлай билет биреп, ике студентты Башҡорт академия драма театрына ебәрә торғайны. Хәсән исемле иптәшем менән миңә лә бер көндө сират килеп етте. Ниндәй спектакль булыуын орашып, төпсөнөп тороу ҡайҙа инде ул! Дворецҡа (ул саҡ театрҙы шулай тип йөрөтәләр ине) эләгеү үҙе бәхет ине.

Хәсән менән беҙ сама ыҙ ундыҡ – халыҡ ара ында даны таралған “Йәш йөрәктәр”гә тап булдыҡ. Ба адир кәүҙәле, көр тауышлы, эсенән дәрт урғылып торған Арыҫлан Мөбәрәков менән иҫ киткес сибәр, зифа буйлы, сихри моң булып яңғыраған тауышлы Зәйтүнә Бикбулатованы – Хәйретдин менән Сәрбиҙе – сәхнәлә күреп мин хайран ҡалдым, йәнем күктәргә ашты, күңел тыныслығым юғалды. Мин уларға ғашиҡ булдым. Бер генә секундҡа күҙ алдына килтерегеҙ: Мөбәрәков әм Бикбулатова. Ике е бергә. Ике е лә йәп-йәш. Ике е лә сик еҙ талантлы. Ике е лә данлыҡлы.

Ул тылсымлы сәғәттәрҙә мин, әлбиттә, киләсәк тура ында, сәхнәләге ошо икәү менән тормошом, ижади яҙмышым бәйләнеү ихтималлығы тура ында уйламаным. Уйлау мөмкин дә түгел ине. Ә ни бары ун бер йылдан уң улар беренсе пьесам “Туй дауам итә”лә минең зәғиф кенә персонаждарыма йән өрҙө әм шунан башлап беҙҙең ижади тормоштар, көн күрмештәр ғүмерлеккә бәйләнде. Уларҙың ике е лә минең ете- игеҙ пьесамда күҙгә күренерлек төп ролдәрҙе башҡарҙы. Улай ғына ла түгел. Үҙҙәренең таланттары, ил ам ҡеүәттәре менән шул образдарҙың тәүге минең аңымда, хыялымда яралыуына ярҙам иттеләр. Яҡын кешең, яратҡан

кешеһ тура ында иҫтәлек яҙыу – ауыр, яуаплы, хәсрәтле бурыс. Хәйер... ят кеше тура ында, яратмаған кеше тура ында иҫтәлек яҙмайҙарҙыр ҙа ул. “Яҙғылайҙар шул”, – тип кемдер ҡаршы төш ә, ул да хаҡлы. Эйе. Бәғзе берәүҙәр ғүмер буйы аҫтыртын күрә алмай йөрөгән кешеләре – билдәле шәхестәр – үлеп киткәс, ирендәрен ялай-ялай, татлы иҫтәлектәр яҙа. Был инде – ғәрип күренеш. Шулай ҙа – күренеш.

Ана шул “ аплы ҡалас” тотоп ингәндән алып ҡырҡ йылдан ашыу мин Арыҫлан Мөбәрәковтың бөйөк ижадына, унын бер ҡара аһ үтә ябай, бер ҡара аһ асып әм аңлап бөтөрә алмаҫлыҡ серле шәхесенең ололоғона оҡланып, хайран ҡалып йәшәнем. Ҡай ы саҡ унын рухында исеменә лайыҡ яр ыу арыҫлан тулай, ҡай ы саҡ йонсоу көндә урманда аҙашҡан болан бала ы, ышыҡ әм ризыҡ эҙләп, арлыбирле уғыла кеүек ине... Ә үҙе иҫән саҡта ошоно беҙ аңлап бөтөрҙөкмө уң? Аңлағандай иттек, буғай. Әммә аңлап бөтөрөргә тырышманыҡ. Унын ҡеүәтле таланты беҙҙе әр ваҡыт таң ҡалдыр а, яҡлау- аҡлауға мохтаж булған йән сабыйлығы, ҡырылыусан күңеле бары сәйер ендерҙе генә. Бөйөк ижадсыға хас унын шикләнеүҙәрен, икеләнеүҙәрен, риза ыҙлыҡтарын ҡай ы саҡ көй өҙләнеү тип ҡарап хата ла эшләгәнбеҙҙер, бәлки. Былары өсөн үкенергә генә тура килә. Киткәндәргә үкенеүҙең ҡиммәте юҡ, әлбиттә, ә ҡалғандар өсөн унын ба а ы ҙур. Белеклеләр өсөн – бик ҙур.

**Мостай КӘРИМ.**

## *Ул кеше ине*

Йәйҙең гүзәл сағы...
Беҙҙең Белорет яҡтарында булған кешеләр беләләрҙер, моғайын, ул тарафтың сәхрәлеген.

Килеп-килептереп ҡуйы урман. (Ул йылдарҙа бигерәк тә.) Унда – ылыҫлы ағастар ғына түгел, ҡайын, йүкә, уҫаҡ, тирәк... Ә емешлеләре уң?! Муйыл, балан, ҡарағат...

Түңәрәк аҡландарына барып сыҡ аң, кейеҙ ымаҡ еләк... Ҡыуаҡтарҙа – бөрлөгән, тау итәктәрендә – сейә.

Ана шул урман хозурлығына бирелеп, мин лесник булып йөрөйөм.

Йәйҙең гүзәл сағы... 1935 йыл...

Шулай бер көн урмандан ҡайтып ин әм, беҙҙә – ҡунаҡтар. Өфөнән артистар килгән.

Минең уларҙы тәүләп күреүем.

Араларында берәү е – мө абәт кәүҙәле, тулҡынланып торған ҡара сәсле, яғымлы күҙле, кеселекле. Танышыу менән ул мине арбап алғандай булды.

Ул – Арыҫлан Мөбәрәков ине.

Ҡояш ауып бара. Ауыл геү килә. Кискә спектакль ҡуясаҡтар.

Ауылдаштарымдың бик күбе енең быға тиклем ундай тамаша күргәндәре юҡ. Берәүҙәр шикләнә, икенселәр, йәштәр, ашҡынып йөрөй.

Инде эңер төшөргә лә күп ҡалмағайны.

Бер ваҡыт Арыҫлан ағай Мөбәрәков беҙҙең өйгә ҡайтып инә. Мин нимәлер эшләп йөрөй инем. Уны ын оноҡтанмын инде хәҙер. Урман яғы халҡы билдәле: унын төп өнәре – ағас эше. Мин дә ниҙер сабып маташа инем шикелле.

Мөбәрәков мине саҡырып алды.

– Ҡурайсыбыҙ ҡапыл ауырып китте бит әле, ҡустым, – тәүге үҙе шул булды.

Мин нимә әйтәйем инде. Ҡарап торған булам.

– ин уйнай алмаҫ ыңмы икән?

Баҡ аң, ул атайымдан минең ҡурай уйнағанымды ишеткән икән.

– Әлләсе, – тигән булдым был юлы.

Ул ҡурайсы ыҙ спектаклдең барып сыҡмауы, ҡурайсының бик кәрәклеге хаҡында әйткәс, ризалаштым. Ризалаш ам да, ҡурҡа-ҡурҡа ғына инде. Спектаклдә ҡатнашып уйнау түгел, уның ни икәнен дә белмәгән саҡ бит әле.

Ҡыуанып китте, мин ризалашҡас, Арыҫлан ағай.

Әлбиттә, тәүҙә нимә уйнау хаҡында өйләнеләр, репетиция я анылар.

Уйнаным. Оҡшаттылар.

Шунда уҡ мине режиссер Булат Имашев менән дә таныштырҙылар.

Иртәгә енә театрға эйәреп киттем дә барҙым.

Шуны ы бит әле: ҡайҙан да күрә белгән. Бит театр өсөн ҡурай уйнай белеү генә етмәй. Ҡурайсы ни яғы менәндер сәнғәткә яҡын да торорға тейеш. Юҡ а, беҙҙең ауылда минән башҡа ла күп ине ҡурайсылар. Ә ул мине күргән.

Сәнғәт донъя ына тәүләп аяҡ баҫыуым шунда булды. Арыҫлан Мөбәрәков етәкләп тигәндәй алып китте мине ул юлдан.

**За ир ИСМӘҒИЛЕВ.**

## Йылдар үткән айын мө абәтерәк

Башҡорт дәүләт академия драма театрында тәү ҡараған спектаклем минең "Отелло" ине. Был спектаклдә минҙә бөтә нәмә ят: ил, халыҡ, осор, ғөрөф-ғәҙәт, мөхәббәт әм мәкер, алданған ҡара генерал әм уның тарафынан үлтерелгән бер гона ыҙ ылыу ҡатын. Яҡыны әм аңлайышлы ы – ҡара генералдың күңел ғазабы. Мин инде беләм: уны Арыҫлан ағай Мөбәрәков шулай килештереп күр әтә. (Уйнай тип әйтке килмәй әле. Уйнау – ысын түгел, йәнә е, бында и ә йөрәктәрҙе тетрәтерлек тормошсан фажиғә күр әтелә.)

1942 йылда, уғыштың икенсе йылында, беҙҙең ише үҫмерҙәрҙе абанға сығарҙылар. Иртә яҙҙан ҡара көҙгәсә баҫыуҙан ҡайтманыҡ. Тәүге көндәрҙә минең менән сәйер хәл булды: кисен, йоҡларға яҡҡас, күҙемде йомоуым булды, алдыма бер туҡтау ыҙ бураҙна ағыла... "Отелло"ны ҡарап ҡайтҡас та шундай хәл ҡабатланды: алдыма Отелло – Мөбәрәков килә, алыҫтан килә, бәләкәй ҡара нөктә ҙурайған-дан-ҙурая, бына уның йөҙ ыҙаттары билдәләнә әм әсе ҡайғынан аҡылдан шашҡан хәлгә еткән әҙәмдең оло кәүҙә е бүлмә иҙәненә гөр өлдәп ауа.

Бураҙна онотолған кеүек, Отелло ла күҙ алдына килмәҫ булды, әммә театрҙы мөғжизә тип ата аҡ, минең өсөн ул мөғжизәнең конкрет кәүҙәләнеше Арыҫлан Мөбәрәков башҡарған Отелло булыр. Алға китеп әйтәм: бер нисә йыл үткәс, мин "Отелло"ны башҡа, исеме илгә киң билдәле артистар башҡарыуында күрҙем: Мордвинов, Папазян, Тхапсаев... Арыҫлан Мөбәрәковтың уйынын мин ошо оло оҫталарҙан кәм ҡуймайым. Кире енсә, Мөбәрәковтың Отелло ын мин бик үҙенсәлекле әм үҙ аллы эш тип, артистың ғына түгел, бөтә башҡорт театр культура ының оло ҡаҙанышы тип ҡарайым. Ошо данлыҡлы артистар менән бер ҡатар, Арыҫлан Мөбәрәков та Шекспериана галерея ында үҙенә лайыҡ ҙур урын биләй.

"Бисәкәй" спектаклен беҙ ҡат-ҡат ҡараныҡ. Был инде, бер ҡатлыраҡ бул а ла, үҙ донъябыҙ, үҙ моңобоҙ. Хәҙер инде мин уның йөкмәтке ен хәтерләмәйем дә, ә бына аҡ алдат туны кейгән Арыҫлан Мөбәрәков күҙ алдында. Күҙ алдында шулай уҡ тамаша залы – артистың әр бер сығыуын алҡыш менән ҡаршылаңы ул. Бында хикмәт сәнғәттә генә түгел, әлбиттә, хикмәт сәхнә менән тамаша залының бер уй-кисереш, бер шатлыҡ-ҡайғы менән йәшәүендә, бергә тын алышында. уғыш әм тыл, еңеү хаҡына кисергән ауырлыҡтар, юғалтыуҙар ҡайғы ы, осрашыуҙар шатлы-ғы – быларға битараф кеше булырмы ул саҡта! Шулай ҙа хикмәттең башы

сәнғәттә шул, әм ул сәнғәтте Арыҫлан Мөбәрәков тәҡдим иткән, автор булып та, режиссер булып та, төп ролде башҡарыусы булып та.

**Әсғәт МИРЗА ИТОВ.**

## Ижади дуҫлыҡ

Беҙ Арыҫлан Мөбәрәков менән тәү тапҡыр 1935 йылдың көҙөндә осраштыҡ. Юҡ, юҡ, исемдәрҙе әйтешеп, ҡулдарҙы ҡыҫышып түгел, ул сәхнәлә ғәжәйеп театр тормошо менән янып йәшәй, ә мин галеркала шул тормош менән әсирләнеп ултыра инем.

Арыҫлан Мөбәрәков менән ҡул ҡыҫышып осрашыу 1940 йылдың февралендә булды. Мин ҡырҡынсы йылдың башына саҡлы Себерҙә Ачинск тигән ҡалала хеҙмәт иттем. Беҙҙең часты “Фин кампания ы”на әҙерләнеләр. Ҡорал бирҙеләр. Фронтҡа китеп барғанда Финляндия менән килешеү булды. Беҙҙе уйламағанда-иҫләмәгәндә Стәрлетамаҡҡа килтереп, педтехникум бина ына урынлаштырҙылар. Ул саҡта инде мин икенсе пьесамды (беренсе ен 1938 йылда яҙҙым. “Алъяулыҡ” тип атала) яҙып маташа инем. Башҡорт дәүләт академия театры бер нисә көнгә Ишембайға гастролгә килә. Труппа менән бергә драматург Сәғит Мифтахов та килгән икән (Ишембайға уның “Дуҫлыҡ әм мөхәббәт” тигән пьеса ы буйынса ҡуйылған спектаклде алып килгәндәр).Кешелекле әм кеселекле, йәштәргә атайҙарса иғтибарлы С. Мифтахов Стәрлетамаҡҡа килеп, полк командирына инеп, мине бер тәүлеккә Ишембайға алып китте. Ана шунда мин ике сәхнә арыҫланы, ике сәхнә генийы: Арыҫлан Мөбәрәков әм Ғабдулла Шамуҡовты ( уғыштан уң Ҡазанға күсеп китә, тора-бара “СССР халыҡ артисы” исеменә лайыҡ була) осраттым.

Арыҫлан Мөбәрәков менән ҡул ҡыҫышып таныш аҡ та, минең яңы пьесамдың (уның исеме “Йыраҡ ил сигендә” тип атала ине. уғыш башланып китеү арҡа ында, ул сәхнә күрә алманы) уңышы өсөн тостар әйтел ә лә, был әле ижади дуҫлыҡ түгел ине. Ул дуҫлыҡ 1948 йылда минең “Вәғәҙә онотолмай” пьеса ын сәхнәләштергәндә башланды. Арыҫлан Мөбәрәков баҫҡан ерҙә ут сәсрәтеүсе, өйгәне өсөн утҡа- ыуға инергә әҙер тороусы, егәрле, тәүәккәл, шаян бригадир Солтанды башҡарҙы. Бына ошо спектаклдән уң беҙҙең яҡынлыҡ “иҫәнме- аумы” дуҫлығынан ижади дуҫлыҡҡа әйләнде, тип әйтергә баҙнат итә алам. “Тәрән улыш” (“Девон фонтандары”) пьеса ының яңы редакция ында А. Мөбәрәков революцион рухлы, тынғылыҡ белмәүсе новатор-геолог Стойкинды башҡарҙы. Быға саҡлы был ролде башҡарған Ғ. Яҡупов та ифрат талантлы артист ине, әммә А. Мөбәрәков Стойкинды үҙенә генә хас темперамент менән уйнаны. Ә “Генерал Шайморатов” спектакленең баш геройы – дивизия командиры Шайморатов! ис ҡупайтмай әйтә алам: был артистың иң талантлы образдарының бере е ине. Инде күп йылдар үт ә лә, әле аман мин уны күрәм, аман тауышын ишетәм.

**Ибра им АБДУЛЛИН.**

## Ул бөйөк артист ине

әр артистың роль өҫтөндә эшләгәндә үҙенә генә хас шәхси методтары була. Мәҫәлән: берәү ролде иң тәүҙә ятлап ала, икенсе берәү, тыуҙырасаҡ образының ғәҙәттәрен, хәрәкәттәрен күрергә теләп, көҙгө алдында үҙен ынап ҡарай, өсөнсө берәү магнитофон лента ын файҙалана – тексын таҫмаға яҙып тыңлай...

Арыҫлан быларҙың бере ен дә ҡулланмай ине. Иң ҙур, яуаплы ролдәрҙе ҡулы-

на алыу менән тәрән уйға ҡала. Тимәк, ул образдың эске донъя ына инә, аҡ ҡына уның ишегеп шаҡый.

Күп осраҡта өйҙә, кушеткала килеш, күҙен йомоп ята, йә йылмая, йә ҡаштарын йыйырып ҡуя йәки йөҙөнә асыу сығарып, нәфрәт менән ирендәрен тешләп, төҫтәрен үҙгәртә ине... Мин уны ынап бөткәйнем. Уның роль тура ында уйланыуын, уйнаясаҡ ролен күҙ алдынан үткәреүен иҙә инем әм балаларға (Гөлли менән Салауатыма), уның эргә енә инмәҫкә ҡушып, бүлмә ишеген ябып ҡуя инем. “Атайым йоҡламай, ул көлөп ята бит”, – ти торғайнылар.

Шулай итеп, ул уйнаясаҡ образының эске донъя ына инә, уны үҙенсә күрә, тамам үҙләштерә, ә артабан инде унан айырылмай, образды байытыу, үҫтереү өҫтөндә ҡыйыу эшләй башлай ине. Репетициянан репетицияға, спектаклдән спектаклгә ул аман да образына яңы деталдәр табып, аман да образын тулыландыра, камиллаштыра ине. Ул образ өҫтөндә ғазаптар аша түгел, ә ҙур рәхәтлек кисереп эшләй ине, минеңсә. Был, әлбиттә, бер ҙә көс сығармай эшләү тигән үҙ түгел. Тәбиғәт тарафынан уға бирелгән талант өҫтөнә, оло мастер булараҡ, үҙ эшенә фанатиктарса бирелеүен, эшен сик еҙ яратып, йәне-тәне менән бирелеп эшләүен аңлата.

Мәҫәлән, “Отелло” ролен уйнап сыҡҡандан уң уның маңлайында грим аша бөрсөк-бөрсөк тирҙәр ялтырай ине. Буялған бит-ҡулдарын йыуыр өсөн, ул сәхнә артындағы ҡайнар душҡа инеп сыҡҡанда, мин уны планын икеләтә тултырып шахтанан менгән батыр, ғорур шахтерға оҡшата торғайным.

Күп осраҡта әҙер спектаклдәргә теге йәки был ролгә яңы артист индерелә. Арыҫлан ул артист менән бөтә энергия ын биреп, ролгә инеп, бирелеп репетиция я ар, хас спектакль барғандағы ымаҡ уйнар, яңы артисҡа ролен үҙләштерергә ихлас ярҙам итер ине.

Шулай уҡ спектаклдәрҙә уның янып, ҙур темперамент менән уйнауы бөтә ансамблгә айырыуса рух, күтәренкелек, көс, дәрт бирә ине, шул арҡала уның ҡатнашлығындағы спектаклдәр ҙур уңыш ҡаҙанып, тамашасы тарафынан яратып ҡарала торғайны. Ғөмүмән, Арыҫлан менән партнер булып уйнау үҙе бер бәхет була, уның менән уйналған спектаклдәр оло шатлыҡ килтерә ине.

**Рәғиҙә ЯНБУЛАТОВА.**

## Кәңәше әле лә иҫемдә

СССР-ҙың халыҡ артисы Арыҫлан ағай Мөбәрәковты мин ауылда, мәктәптә уҡыған саҡтарҙа ишетеп кенә белә инем. Хатта ул уйнаған “Салауат Юлаев” фильмын да ҡарарға насип булманы. Күрә ең, кино экранда барғанда бәләкәй булып ҡалғанмындыр...

Ә үҙенең беренсе тапҡыр сәхнәлә уйнауын Өфө сәнғәт училище ының тәүге курсында ваҡытымда күрҙем. Әнғәм Атнабаевтың “Шоңҡар” спектаклендә Арыҫланбайҙы уйнағайны ул. Мине артистағы ҡеүәт, тауыш, тәбиғилек хайран ҡалдырҙы. Әйтер ең дә, сәхнәлә Арыҫланбай үҙе йөрөй ине. Шул көндән башлап миңә, буласаҡ артист-студентҡа, Арыҫлан ағай Мөбәрәковтың сәхнә тормошо әр ваҡыт өлгө булып торҙо.

Икенсе курсты тамамлап, каникулға сыҡҡас, мине шул уҡ спектакль менән гастролгә алып киттеләр. Шатланып риза булдым.

Гастролдә инде мин оло артист әм ҙур йөрәкле Кеше менән күҙмә-күҙ осраштым. Иң элек уның иҫ киткес ябай булыуы шаҡ ҡатырҙы.

Ошо уңайҙан гастролдә булған бер ваҡиға аман иҫтән сыҡмай. Бишбүләк районында йөрөй инек. Бер көн Ғата ағай Сөләймәнов ауырып китте. Ә спек-

таклде туҡтатырға ярамай. Миңә шунда: “Нурлығаян ролен иңә уйнарға кәрәк булыр”, – тинеләр. Сәхнәлә күберәк Арыҫлан ағай менән булырға тура киләсәк ине. Юлда барғанда, автобуста уҡ икәүләп яңы роль өҫтөндә эшләй башланыҡ. Ул миңә кәңәштәр бирҙе. Ни айәт, урынға барып етеүгә сәхнәгә сығырлыҡ булдым. Шулай итеп, мин уның ярҙамында, ике-өс сәғәт эсендә роль эшләп, тәүге тапҡыр бергәләп уйнау бәхетенә ирештем.

Театрҙа эшләй башлағас, миңә Мостай Кәримдең “Салауат” пьеса ынан Салауат ролен бирҙеләр. Арыҫлан ағай Мөбәрәков Юлайҙы уйнарға тейеш ине. Әлбиттә, башта аптырап ҡалдым: Мөбәрәковтан уң Салауатты уйнауҙы күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын ине. Сөнки күп кенә тамашасылар күңелендә ул тыуҙырған Салауат ыны йәшәй. Шулай уҡ Арыҫлан ағай Мөбәрәковҡа тәбиғәт биргән әләттәрҙең миндә тотош булмауы ла асыҡ. Салауат образын унынса ҡабатлау ҙа ситен. Шуға күрә, Арыҫлан ағай Салауатының да ҡай ы бер яҡтарын иҫтә тотоп, үҙемә хасыраҡ Салауатты тыуҙырырға тырыштым.

Эшләү мәлендә ул миңә ысын күңелдән ярҙам итте. Бер ваҡыт: “ ин, ҡустым, хәҙер сәхнәлә әйбәт кенә йәшәй ең, тик шуны онотма: ваҡиға сәхнәлә генә бармай, шуға сәхнәгә тиклем ни булғанын да кәүҙәләндерергә кәрәк”, – тине. Был – бер генә миҫал, әммә минең өсөн ул мө им әм ҙур абаҡ булды. әм кәңәше әле лә иҫемдә.

Минең менән тиҫтер башҡа артистар ҙа театрҙа Арыҫлан ағай Мөбәрәков кеүек талант эйәләре менән эшләү бәхетенә иреште, әм беҙ ошо яҡтан үҙебеҙҙе сик еҙ бәхетле анайбыҙ.

**Әхтәм ӘБУШАХМАНОВ.**

## Онотолмаҫ талант эйә е

Минең быуын кеше енә Арыҫлан Мөбәрәков тура ында хәтирә яҙыу нимәне аңлата? инең яңы ғына “ай-тай” тороп,тәпәй генә баҫа башлаған сағында уҡ легендаға әүерелгән кеше тура ында хәтирә яҙыуҙы әйтәм... Ул бит – мин донъяға килмәҫ борон уҡ сәхнә арыҫланы, экран нуры булған актер! Эйе, эйе, минең әле тыуыу-тыумауым иҫкә лә төшмәгәндә, ул инде тамашасы йөрәген, кеше аңын арбаған, әсир иткән, рекламалар әм гәзит биттәренән, буклеттар әм афишаларҙан Салауат йәки Отеллоның ғәйрәтле, яр ыу ҡараштары менән баҡҡан...

Шуға ҡарамаҫтан, минең быуын кеше енең дә был ғәжәйеп әм легендар артист тура ында әйтер үҙе, өйләр хәтирә е бар. Сөнки минең тиҫтерҙәрҙең бәхетлеләре уның театр сәхнә ендә уйнағанын ҡарау ғына түгел, көндәлек тормошта үҙен күреү, хатта үҙе менән аралашыу мөмкинлектәрен дә татыны. Мин дә шул бәхетле йәндәрҙең бере емен.

Ҡайҙа күрҙек уң беҙ уны иң тәүҙә? “Салауат Юлаев” фильмында! Ҡырғыҙстандың Талас үҙәне тарлауығында йәшәп ятҡан бала сағымда уҡ, матбуғаттан уҡып, фильмды ҡараған кешеләрҙән ишетеп, “Салауат Юлаев”ты күрергә ашҡына инем мин. арғылт йөҙлө, сөм-ҡара бөҙрә сәсле Раззаҡ ағай Исхаҡов әле лә иҫемдә. Атайымдың дуҫы ине ул. Башынан аҙағына тиклем уғышта булған, яралар менән түгел – ҡаты үпкә ауырыуы менән әйләнеп ҡайтҡан. Көндәре анаулы ине инде Раззаҡ ағайҙың. Тағы ла шул ағай ауыҙынан ишеттем мин фильм хаҡында. Ул уны фронтта күргән, нисек етте шулай әмәлен табып, хатта бер нисә мәртәбә ҡараған. Раззаҡ ағай өйләгәндәрҙе үҙмә- үҙ килтереүе ҡыйын хәҙер, ҡабатларға тырыш ам да, дөрөҫ булмаҫ ине. Сөнки мин бик бәләкәй инем ул саҡта. Ләкин оло

кешенең шатлығын, оҡланыуын, өйөнөүен, үҙ халҡы менән ғорурланыуын, тыуған Башҡортостанына ҡайтырға ынтылыуын аңларлыҡ инем инде.

— Миңә яҙмағандыр инде ҡайтыу, — ти торғайны, моң оуланып. — Яҡты донъянан китергә күп ҡалманы, шикелле. Ә бына ин... — минең баштан ыйпап ҡуя. — Ҡайтыр ың да, күрер ең дә уны. Кинола ғына түгел, хатта үҙен күрер ең. Хәҙер ул — иң мәш үр артист.

Унның кем тура ында өйләгәнен белә инем мин — Мөбәрәков тура ында...

Ҡыҙыҡ хәлдәр була тормошта: кемдеңдер образы үҙенән-үҙе икенсе бер кеше образы менән, ҡай ы берҙә хатта пародоксаль рәүештә, көтмәгән-уйламаған ерҙән бәйләнә. Шуның кеүек, Арыҫлан ағай образы минең күңелемдә көтмәгәндә баяғы ауырыу математика уҡытыусы ы, уғыштың башынан аҙағына тиклем булған кеше, атайымдың дуҫы образы менән бер үктәй аҡлана...

1948 йыл. Мин атайым менән Өфөлә!

Ҡабатлап күр әтә торған кинотеатрҙа “Салауат Юлаев” фильмы бара. Унда эләгеүе бик ауыр. Ғөмүмән, ул ваҡыттарҙа киноға инеү ҡыйын ғына ине. Ә был — “Салауат Юлаев”! Әйтеп тора ы ла юҡ. Әммә мин эләктем. Унан уң Карл Маркс урамындағы шул уҡ бәләкәй генә кинотеатрға фильм экрандан алынғанға тиклем көн дә йөрөнөм.

Фильмдан ҡалған бала саҡ тәьҫораттарымды хәҙер нисек бирергә? игеҙ йәшлек малай күкрәгенә тулған тойғолар диңгеҙен байҡап ҡарарғамы? Ул бит сабый сағында уҡ изге итеп таныған геройҙың үҙен күрә!

...Күп йылдар уҙғас, миңә журналислыҡ эше менән Мәскәүгә барырға тура килде. “Минск” ҡунаҡхана ы номерындағы күршем, өлкән әм бик үк өйләшеп бармаған кеше, тегеләй-былай аралашыуға өмөт бағламағас, мин тиҙерәк йоҡоға талыу ниәте менән ҡулыма китап алдым. Шул саҡ ул үҙгә килде, минең ҡайҙан икәнлегемде ораны. Минең яуап биреүем булды, ул, “ә, Салауат Юлаев!” тип ҡысҡырып уҡ ебәрҙе. әм теле асылып китте күршемдең. Быға, минеңсә, Салауат, дөрөҫөрәге, халыҡтың бөйөк милли геройын экранда кәүҙәләндергән, унның игеҙәк туғанына әүерелгән Арыҫлан Мөбәрәков сәбәпсе ине. Салауат Юлаев әм Арыҫлан Мөбәрәков — әйтер ең дә, улар бер үк кешеләр. Кино сәнғәтендә быңдай хәлдәр булғылап килә... Мәҫәлән, Чапаев — Бабочкин, Максим — Чирков. Аҙмы ни ундай миҫалдар! Мөбәрәков та ана шундай бәхетле яҙмышлылар тиңендә.

— Бала саҡта беҙ Салауат Юлаев булып уйнай торғайныҡ, — тип өйләп алып китте ҡунаҡханалағы күршем. Ул Саратовтан икән, инженер. — Ҡулда ҡылыс. Башыбыҙҙа әйләндереп кейелгән кәпәс. Күрә ең, төлкө бүрегенә оҡшатырға тырышҡанбыҙҙыр инде...

унғараҡ та миңә күптәрҙән ошондай эскер еҙ әңгәмәләр ишетергә тура килде. Салауат арҡа ында, тимәк, Арыҫлан Мөбәрәков арҡа ында, минең йыш ҡына төрлө кешеләрҙең ҡыҙыҡ ыныу объектына әйләнгән ваҡыттарым булды. Улар минән Башҡортостан тура ында, унның тарихы, сәнғәте әм, ис үҙ еҙ, Мөбәрәковы тура ында орашырҙар ине.

Ана ҡайҙа икән ул ысын, юғары сәнғәттең көсө! Быға минең, минең генә түгел, күптәрҙең иманы камил.

**Ғәзим ШАФИҠОВ.**

# УНЫ ШУНДАЙ ИТЕП ХӘТЕРЕҢДӘ ҠАЛДЫР

“Ҡайҙалыр ҡала бар,  әм унда рәхәт” тиҙәр икән, был беҙҙең Сибай тура ында. Урындағы халыҡ та, күп  анлы ҡунаҡтар  әм студенттар ҙа бында үҙен яҡшы тоя. Бары ына ла рәхәт: йәштәргә, ололарға, таныштар  әм таныш булмағандарға. Мин тыуған ҡаламда йыш булам  әм уның урамдары буйлап йөрөгәндә тынлыҡҡа, кешеләрҙең игелеклегенә  оҡланам. Уларҙың  әр ҡай ы ы ихаталар, скверҙар, йорт подъездарының, бергә йәшәгән оло йорттоң таҙалығы тура ында хәстәрлек күрә, ғорурлана кеүек. Хәтеремдә, Сибайға 50 йыл тулған иртәлә ҡала халҡы почта йәшниктәрендә хакимиәт башлығы Айҙар Халиҡовтан байрам открытка ы алғайны. “Бөтәбеҙҙе лә, төрлө кешеләр булыуға ҡарамаҫтан, ҡаланы  өйөү, уның менән ғорурланыу тойғо о берләштерә,– тиелгәйне ҡотлауҙа. – Сибай –  кесе ватаныбыҙ, күңелебеҙҙең бер өлөшө. Беҙ уның  яҙмышы ғүмерле, бәхетле булыуын теләйбеҙ. Өйҙәребеҙҙә балаларҙың шат көлөүе тынма ын, беҙҙе алда тыныс  әм бәхетле көндәр генә көтөп тор он”. Кешеләр өсөн был оло ҡыуаныс булды: “Беҙҙе башлыҡ үҙе ҡотланы! Ә  еҙгә ҡотлау килдеме?” Йылдың иң матур көнө ана шулай башланды.

Ҡала халҡы быйыл да үҙ баҡсаларында мул уңыш үҫтереп алды. Улар менән баҙарҙар тулған. Шулай булмай, бында  әр ғаиләнең ике-өс баҡса ы бар,  әр ҡай ы- ы, йәйын табып, уларҙы тәрбиәләп кенә тора. Сибайҙағы кеүек  утлы сейәне бер ҡайҙа ла тәмләй алмай ың!

50-се йылдарҙа был тарафҡа илдең төрлө яҡтарынан баҡыр руда ы сығарырға, сиҙәм ерҙәр үҙләштерергә йәштәр килә. Берәүҙәр, партия саҡырыуы буйынса, удар комсомол төҙөлөшөнә тип кил ә, төрмәнән  уң йәшәр урын эҙләп сыҡҡан әҙәмдәр ҙә аҙ төпләнмәй Сибайҙа,  әм шуға күрә енәйәтселек ярай ы киң тарала.Ҡала Өфөнән 500 саҡрым ситтә, юлдар насар, йәшәү өсөн уңайлыҡтар бөтөнләй юҡ тиерлек. Йөрөгән транспорт – поезд, самолет осмай, автобус менән бере енән  икенсе енә күсә-күсә генә килеп етергә мөмкин. Бер  үҙ менән әйткәндә, ер аяғы – ер башы урын... Хатта 70-се, мин Башҡорт дәүләт университетында уҡыған йылдарҙа ла, курсташтар: “Сибай ҡайҙа ул?” – тип  орай торғайны. Хәҙер и ә Сибайҙы беләләр: “Унда руда күпме ҡалды әле?”, “Фабрикала бурыстарын түләп бөтөрҙөләрме?”, “Юғары уҡыыу йорттарының киләсәге бармы?“ .б. тип ҡыҙыҡ ынып торалар. Ҡала халҡының  тырышлығы, республика етәкселәренең әүҙем ярҙамы  өҙөмтә ендә Сибай әлеге бейеклегенә күтәрелде – Башҡортостан Урал аръяғының иҡтисади  әм мәҙәни үҙәге булып китте.

Сибайҙы төрлө йылдарҙа ваҡыт бурандары тетрәтеп алды, әммә кешеләр бирешмәне, тотанаҡлы, тыныс, түҙемле булып ҡалды. Үҙенсәлекле беҙҙәге халыҡ: хеҙмәт  өйөүсән, булғаны менән шөкөр итә белә. Күптәр, айырыуса минең йәштәгеләр, ҡаланан бер ҡайҙа ла ситкә китеп йөрөмәне. Үҙ исемен республикала

танытып, лайыҡлы наградалар алған кешеләр ҙә байтаҡ. Улар ара ында – депутаттар әм министрҙар, дәүләт учреждениелары хеҙмәткәрҙәре, эре предприятиелар етәкселәре... Сибайҙар әр урында таныла. өйләшеүенә ҡарап ҡына түгел, ә кейем- алымына, аралашыу ҡеүә енә лә. Уларҙы дала, руда, ыуға ҡытлыҡ, әсе елдәр әм башҡаларға таныш булмаған күп нәмә сыныҡтырған. Сибайҙарҙы бөгөп тә, ындырып та булмай. Улар бары ына ла түҙем.

Ер шарында иң тәрән карьер – Сибайҙа. (Ҡайҙалыр шундай уҡ карьер бар, тиҙәр.) Беҙҙә балалар өсөн экологик яҡтан саф өт аҙығы етештерә торған комбинат бар, сөнки ҡала өт йылға ы аҡҡан икмәкле ярҙа урынлашҡан. Сибайҙа күптән буталышып, туғанлашып бөткән милләттәр гөлләмә е. Беҙ күршеләребеҙҙең кемлеген – татармы, башҡортмо, сыуашмы .б. – икәнлеген айырмайбыҙ. Ҡатнаш никахтар сибайҙарҙы сабыр холҡло, күп телле әм... төҫкә күркәм итте. Миҫалға ун бер кешенән торған беҙҙең ғаиләне генә алайыҡ. Бер кейәүебеҙ Украинанан, икенсе кейәү әм бер киленебеҙ Ҡазандан. Кинйәбеҙ Әхәт, шаяртып, атайыбыҙ Мөхтәр Хәсәновичты “Михаил Христофорович”, әсәйебеҙ Кинйәбикә Йосопованы “Катерина Юрьевна” тип өндәш ә лә, тегеләр аңлай, яуап бирә. Ул ғына ла түгел, урыҫ телендә аҙ-маҙ упалап, ғәмәлдә уҡый-яҙа белмәгән башҡорт ғаиләләре берәү-икәү генә булған ерҙә, кешеләр менән ихлас аралашырға тырышыуы шатландыра ине. Әйткәндәй, Урал аръяғында йәшәгән урыҫ, муҡшы, удмурт әм мари ғына башҡорт ҡоротон, бишбармағын, тултырма, ҡаҙы әм ҡымыҙын тейешенсә ба алай ала... Тап ошо ризыҡтар ғына башҡортто борон-борондан ау-сәләмәт, көслө әм ауырыуҙарға бирешмәҫлек иткән.

Тыуған ҡаламда булған айын ундағы үҙгәрештәргә оҡланып туймайым. Сибайҙа әр ваҡыт үҙгәрештәр, объекттар күп төҙөлә. Төрлө башланғыс әм эҙләнеүҙәрҙә ҡала халҡы арыу-талыу белмәй, уларҙың тәжрибә е Башҡортостанға ла, Рәсәйгә лә таныш. Раил Сарбаев (элекке ҡала башлығы), Сибай дәүләт университеты директоры Зиннур Йәрмөхәмәтов – ҡала өсөн бик күп эшләгән, республика етәкселәре ярҙамында уны бөгөнгө лайыҡлы кимәлгә күтәргән шәхестәр. Раил Сәлиховичтың ҡаланы, тотош башҡорт Урал аръяғын үҫтереүгә алған көсөн сибайҙар яҡшы ба алай. Уның тәҡдиме буйынса ойошторолған Урал аръяғы райондары хакимиәт башлыҡтары ассоциация ы төбәкте үҫтереү буйынса оло проблемалар өҫтөндә бергәләп баш ватты. Ҡай ы бер предприятиелар эшселәргә хеҙмәт хаҡы ла түләй алмаған бик ауыр ваҡыттарҙа Раил Сәлихович ҡалаға инвестициялар йәлеп итеүгә өлгәште. Үҙе ҡалала тыуып үҫмә ә лә, тиҙ арала сибайҙарҙың тормош нескәлектәрен аңлап алып, ул социаль өлкәне ҡала халҡы быға са хыялланырға ла баҙнат итмәгән дәрәжәгә күтәрә алды. Шуға күрә яҡташтарым Раил Сәлиховичтың Хөкүмәт Премьер-министры итеп тәғәйенләнеүен ишеткәс бер ҙә ғәжәпләнмәне, ихлас шатланды. Уның еңел “ҡул арты”н башҡалар дауам итә. Башҡа йылдарҙағы кеүек үк, барлыҡ эштәрҙең “дирижеры” булып ҡала хакимиәте сығыш я ай, ә унда төбәктең, ҡаланың патриоттары булған шәхестәргә үҫеш юлына сыҡҡан, сәскә атҡан ҡаланың абруйын аҡлау еңел түгел. уңғы ун йылда ғына Сибайҙың йөҙө танымаҫлыҡ үҙгәрҙе: элеваторҙа тирмән, балалар баҡсалары, ике мәктәп, БДУ филиалында уҡыу-лаборатория корпусы әм ятаҡ, ҡала балалар дауахана ы менән бергә дауахана комплексы, спорт мәктәбе, никах теркәү арайы, йәштәр өсөн мәҙәни күңел асыу үҙәге, аҡлыҡ банкы, алым инспекция ы, “Алтын тирмә” ҡунаҡхана ы, сауҙа комплексы, мәсет әм сиркәү файҙаланыуға тапшырылды. Халыҡтың тормошо ла яҡшыра, ғәмәлдә социаль өлкә ҡаланың визит карточка ына әүерелә. Бында бары ы ла кеше мәнфәғәттәрендә эшләнә.

Йәшәү өсөн уңайлы, матур әм бөхтә ҡала әр ваҡыт үҙенә ылыҡтырып тора.

2002 йыл йомғаҡтары буйынса ҡалала 60 меңләп кеше йәшә ә, хәҙер ул 65,5 мең тәшкил итә. Сибай үҙ иҡтисадының тотороҡло эшләүе менән ылыҡтыра кешеләрҙе. Башҡортостан Президенты Мортаза Рәхимов әм Республика Хөкүмәте ярҙамында унғы йылдарҙа ҡала сәнәғәтен үҫтереү, уға инвестициялар йәлеп итеү өсөн шарттар тыуҙырылды. Был эшмәкәрлектең төп өҙөмтә е – тотороҡлолоҡ әм продукция етештереүҙе арттырыу.

Президент М. Ғ. Рәхимов, Хөкүмәт Премьер-министры Р. Сарбаев, "Урал тау-металлургия компания ы-холдингы" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт вәкилдәре – президент Искәндәр Мәхмүтов әм генераль директор Андрей Козицын, Башҡортостан менән йәмғиәт ара ындағы хеҙмәттәшлек тура ында килешеүгә ярашлы, байыҡтырыу фабрика ында булып, ҡала майҙанында төҙөлөш- ауыҡтырыу комплексының нигеҙенә беренсе ташты алды. Төҙөлөштө алып барыу элекке "Башмедьстрой" тресының лайыҡлы вариҫы, юғары әҙерлекле эшселәрен, етештереү база ын аҡлап ҡалған "Строймеханизация" акционерҙар йәмғиәтенә (етәксе е Нур Тажетдинов) тапшырылған. Объекттың заказсы ы – "Урал тау-металлургия компания ы" йәмғиәте. Был төҙөлөш йәмғиәте Урал аръяғы райондарында абруйлы, Хәйбулла, Әбйәлил, Баймаҡ .б. райондарҙа мө им объекттар төҙөү кәрәк бул а, "Строймеханизация"ға мөрәжәғәт итәләр. Комплексты сама менән өс йылда файҙаланыуға тапшырыу ҡаралған. 1600 урынлыҡ күп функциялы спорт залы, 25 метр бассейнлы ыу зона ы, бәләкәй аквапарк, дайвинг менән шөғөлләнеү өсөн урын, дүрт ҡатлы ҡунаҡхана, СПА-салон, боулинг клубы .б. – бына шундай булып күҙ алдына баҫа был комплекс. Сибайҙың абруйлы кеше е, тирә-йүнгә билдәле таусы әм ҡалаға нигеҙ алынғандан алып ошонда йәшәгән Хөснулла Хәлитов шатлығын йәшермәй:

– Ҡасан ғына әле барлыҡ Урал аръяғы төбәге йәштәрен уҡытырлыҡ институт асыу тура ында хыяллана инек. Был изге ниәтебеҙ ғәмәлгә аш ын өсөн ниндәй генә ауырлыҡтар кисерергә, ниндәй генә туп аларҙы аша атларға тура килмәне. Бына хәҙер йәштәребеҙ Рәсәй, Башҡортостан конкурстарында еңеүгә өлгәшә. Әйт әле ин: буласаҡ экономистар Сингапурға донъя кубогына ярышҡа бара! Сибай институты менән ғоррурлыҡ тойғо о эскә ыймай.

Иҡтисад фәндәре докторы Зиннур Йәрмөхәмәтов (элегерәк ул ҡала хакимиәте башлығы булып та эшләне) етәкселек иткән БДУ-ның Сибай филиалы билдәле тарихи шәхестәрҙең иҫтәлеген мәңгеләштереү ғәҙәтенә тоғро ҡала. Советтар Союзы Геройы Федор Белов урамында урынлашҡан төп уҡыу корпусында, билдәле булыуынса, алты шәхестең үрәте ташҡа уйылған. Күптән түгел иҡтисад әм тарих-филология факультеттары студенттары белем алған Таусылар проспектындағы бинала ла ошондай ике үрәт барлыҡҡа килде. Улар – күренекле ғалим-мәғрифәтселәр Зәйнулла Рәсүлев менән Әхмәтзәки Вәлиди. Уларҙың уҡыу бина ына илткән ерҙә үк ҡуйылыуы ниндәйҙер тәрән мәғәнәгә эйә. З. Рәсүлевтың элекке Ырымбур губерна ы Троицк өйәҙендә (хәҙерге Учалы районы) тыуыуы, "Рәсүлиә" мәҙрәсә енә нигеҙ алыуы әм уҡыу йортоноң мосолман донъя ында абруй ҡаҙаныуы яҡшы билдәле. Дин абаҡтарынан тыш, мәҙрәсәлә философия, география, астрономия, физика, медицина, мантик (логика) та өйрәнелгән. Ғәмәлдә шуның менән мәғарифтың университет система ына нигеҙ алынған, шуға күрә лә Зәйнулла ишан филиалда белем алған әм уҡытҡандарға бик яҡын.

Әхмәтзәки Вәлидиҙең юғары белемлелеге, бәләкәйҙән ғилемгә әүәҫлеге хәҙерге студенттарҙа тәрән тойғолар уята. Ауыл мәҙрәсә ендә уҡығанда уҡ Зәки ғәрәп, фарсы, иҫке төрки, урыҫ телдәрен өйрәнә, ислам, философия, әҙәбиәт әм тарих нигеҙҙәре менән таныша. Башҡортостанда беренсе булып Вәлиди исемендәге

урам тап Сибай ҡала ында барлыҡҡа килде, әм шунда уҡ ғалим-мәғрифәтсенең таш ыны ҡуйылды. Ошондай уҡ хәл З. Рәсүлев менән дә ҡабатланды. Эйе, Сибайҙа яҡташтарын ба алай беләләр, әм бының менән ғорурланмау мөмкин түгел. Быйыл июндә ҡала урамын халыҡ шағиры Рәми Ғарипов менән Шәйехзада Бабичтың шундай уҡ ындары биҙәне. Хәҙер иртәнге дәрескә ашығыусы студенттарҙы Иҫтәлек аллея ында Бабич менән Ғариповтың ғорур ындары оҙатып ҡала.

Сибай кешеләренең ил әм республика күләмендә үткәрелгән оло мәҙәни сараларҙа ҡатнашыуы традицияға әм нормаға әүерелде. Был – Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта уҙғарылған абантуйҙар, Өфөләге төрлө кимәлдәге шоу-программалар. Йыл да үткәрелгән фольклор байрамы “Салауат йыйыны”нда Сибай ҡала ын әр ваҡыттағыса йыйылма коллектив тәшкил итте. Унда халыҡ ансамблдәре “Йәнгүзәл”, “Яугүл” бейеү төркөмдәрен, кейеҙ, балсыҡ, тире әм ағастан эшләнгән әйберҙәре менән балалар Нәфис мәктәбе хеҙмәткәрҙәрен күрергә мөмкин ине. Салауат көндәренә сибайҙар ҡаланың уҡыу йорттары ярҙамында әҙерләнгән әм боронғо башҡорттарҙың кәсептәрен күр әтеп, программаның үҙәк өлөшөн тәшкил иткән башҡорт тирмә ен алып барғайны. Байрамда Сибайҙан БДУ филиалының музыкаль бүлегенән икенсе курс студенты За ит Нурғәлиев ҡатнашып, игенсе, уғышсы ролендә, өңгө ырғытыуҙа, көрәштә үҙенең йыр-бейеү оҫталығын күр әтте.

Башҡорт йыры башҡарыусыларҙың “Ирәндек моңдары” төбәк-ара конкурсын башҡа ҡалала үткәреү мөмкин түгел, сөнки был шул тиклем ғәҙәткә инеп киткән, әм ҡала был сараны юғары кимәлдә үткәреү йә әтенән бер ҡасан да ойоштороусыларҙы ҡыйын хәлгә ҡалдырғаны юҡ. БР Мәҙәниәт әм милли сәйәсәт министрлығы, Республиканың халыҡ ижады үҙәге әм Сибай ҡала ы ҡала округы хакимиәте был конкурсты ойоштороуҙа халыҡ традицияларын аҡлауҙы, башҡорт фольклорының боронғо ҡатламдарын тергеҙеүҙе, йәш таланттарҙы асыҡлау әм Башҡортостандан ситтә йәшәүселәр менән бәйләнеш урынлаштырыуҙы маҡсат итеп ҡуя. Быйыл конкурстың ба а ы тағы ла күтәрелә төштө, сөнки унда БР Президенты Мортаза Рәхимов ҡатнашты.

– Башҡорт ере, атап әйткәндә ошо Ирәндек буйҙары, таланттарға ҡытлыҡ кисермәй. Конкурс айын беҙ яңы исемдәр табабыҙ, сәхнәнән быға са яңғырамаған йырҙар ағыла. Улар, ер аҫтынан бәреп сыҡҡан шишмә кеүек, үҙенә юл яра. Күсәгилешлек бар, әм уға шатланырға кәрәк, – тине ҡала гәзитенә интервью ында РФ-ның атҡаҙанған артистка ы, БР-ҙың халыҡ артистка ы, Өфө дәүләт сәнғәт академия ының вокал сәнғәте доценты Флүрә Килдейәрова. Әйткәндәй, Гран-при яулаған Сәйет Билалов, белемен артабан дауам итеү өсөн, Сәнғәт академия -ына саҡырыу алды. БДУ-ның Сибай филиалы студенттары Илфат Дәүләкәнов, Әлия Исҡужина, мәктәп уҡыусылары Тимур Рамазанов, Ләйсән Моталлапова, Аида Мәжитова әм Наил Сырлыбаевтар, үҙэшмәкәр йырсы ғына бул алар ҙа, жюриҙың тәрән ихтирамын яуланы. “Беҙгә хәҙер профессиональ сәхнәне ҡалдырыу бер ни тормай, сөнки бына тигән талантлы йырсыларыбыҙ бар, – тине Флүрә Килдейәрова. – Алла ы ҡөҙрәте менән улар йырҙан баш тартма ын, ысын сәнғәткә ынтыл ын ине”.

Сибайҙа мәҙәни тормош бер көнгә лә үнеп тормай. “Ирәндек моңдары”на тиклем “Башҡортостан – Урал ынйы ы” халыҡ ижадында ҡатнашыусы үҙешмәкәр таланттарҙың IX фестивале булып уҙҙы. Унда 40-лап предприятие, ойошма әм учреждениелар көс ынашып, Гран-приҙы Сибай район-ара электр селтәре яуланы. “Социнвестбанк” аҡлыҡ банкы, Сибай почтамты коллективтары призлы

урындарға сыҡты. Уҡыу йорттары ара ында БДУ-ның Сибай филиалы, педагогия, медицина әм политехник колледждар, 24-се профессиональ лицей уңыш ҡаҙанды. “Йыл дебюты” номинация ында “Башҡорт баҡыры” яуаплылығы сикләнгән ширҡәттең “Юбилей” карьеры эшселәре алға сыҡты. Фестивалдә предприятиелар етәкселәре үҙҙәре лә ҡатнашып, ярышҡа сәм өҫтәне.

Яҡташтарым түҙем еҙлек менән көткән тарихи-крайҙы өйрәнеү (БР Милли музейының филиалы) музейының тантаналы асылыуын яҡшы хәтерләйем. Ул ҡаланың төп урамы – Таусылар проспектында тимер юл әм автобус вокзалдарына яҡын урынлашҡан. Әлбиттә, ҡала музейын Өфөнөкө менән сағыштырыу урын ыҙ, әммә музей хеҙмәткәрҙәренең юғары патриотлыҡ рухында булып, үҙ эшен яҡшы белеүен ул яҡшы күр әтә. Ҡурайға арналған мөйөш үҙе генә ни тора! Ҡурай сеймалы булған ирәк осрай торған көпшәне күптәр тәү тапҡыр күрә. Ул ҡайҙа үҫә, унан мөғжизәле көй ҡоралын нисек я айҙар – музейҙа бары ын да төплө итеп өйләп бирәсәктәр.Башҡорт, татар, сыуаш, мари милли кейемдәре, өй ҡаралты ы .б. – бөтә е элекке тормошто күҙ алдына баҫтыра. Киҫелештә күр әтелгән шахта ла әҫәрләндерә. Миңә лә ҡасандыр гәзиттең үҙ хәбәрсе е булып эшләгән ваҡыттарҙа ер аҫтына төшөп тетрәнгәнде иҫкә төшөрә ул. Нисек инде көн айын ер аҫтынан имен- ау сығырынды белмәгән көйгә төшмәк кәрәк, тигән уй шул саҡта мейене телеп үткәйне.

Музейҙа бик ирәк экспонаттар ҙа күп әм уларҙы хужалары – ҡала, яҡын райондарҙа йәшәгән кешеләр бушлай биргән. Ҡай ы берәүҙәре хатта, шатланып, ул еҙҙә яҡшыраҡ аҡланасаҡ, тигән тойғо ла белдергән. Залдарҙағы барлыҡ күргәҙмә – ҡаланың барлыҡҡа килеүе, үҫеше тура ында, унда шулай уҡ төҙөүсе, таусы, уҡытыусы, табиптар хаҡында мәғлүмәттәр ҙә байтаҡ. Музей киләсәктә тулылана төшөр, сөнки ҡалаға ла 50 генә йәш бит. Барлыҡ дәүерҙәрҙә лә изге эштәрҙә үҙен аямаған, ижади ҡарашлы, арымаҫ-талмаҫ шәхестәр башҡарған. Сибайҙың юбилейын билдәләгән көндәрҙә талантлы уҡытыусы Сәлимә Өмөтбаева, абруйлы төҙөүсе Юрий Курушев, байтаҡ йылдар автопредприятие етәксе е булып эшләгән Сафиулла Хәсәнов, Урал аръяғы төбәгендә билдәле күҙ ауырыуҙары белгесе Римма Афзалова, ветеран таусы әм йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнашыусы Хөснулла Хәмитов, республиканың атҡаҙанған төҙөүсе е Әбүбәкер Рәсүлев әм атҡаҙанған таусы ы Миҙхәт Ғәбитовтарға “Сибайҙың почетлы гражданы” тигән юғары исем бирелде. Бөгөн таусылар ҡала ында ошо абруйлы исемде 25 кеше йөрөтә.

Сибайҙа бер төркөм күренекле сәйәсәт, дәүләт, хужалыҡ етәкселәре, белгестәр, ғалимдар, мәҙәниәт әм сәнғәттең танылған вәкилдәре үҫеп сыҡты. Рәсәй әм Башҡортостан сәхнәләрендә халыҡ-ара конкурстар лауреаттары, республиканың халыҡ артистары опера йырсы ы Светлана Арғынбаеваны, бейеүсе Зөлфиә Ҡоҙашеваны яҡшы беләләр. Драматург Наил Ғәйетбай пьесалары республиканың әм илдең күп кенә театрҙарында ҡуйыла.

Миҙхәт Ғәбитов – Икенсе донъя уғышы ветераны, Башҡортостан баҡыр-көкөрт комбинатында әм Сибайҙа тәүге Социалистик Хеҙмәт Геройы. Ул таусылар ғаилә ендә тыуып үҫә. Миҙхәт ағайҙың олата ы Ғәҙелша Рәмиевтарҙың рудниктарында алтын йыуыусы була. Ата ы Исмәғил дә, 1915 йылда Австро-Венгрия фронтына ебәрелгәнгә тиклем, старатель булып эшләй. Тәүҙә колхозда тракторсы ярҙамсы ы, артабан үҙе рычагтар артына ултырған Миҙхәтте лә 1943 йылда уғышҡа оҙаталар. Ул тәүҙә Ырымбур өлкә енең Краснохолмск ҡала ында пехота училище ында уғыш өнәренә өйрәнә, артабан Мәскәү янындағы Яхромаға ауа-

десант часына ебәрелә. Әммә күнекмәләр ваҡытында бик ныҡ ауырығандан уң байтаҡ госпиталдә ятып сыға әм танк йөрөтөүсе өнәрен үҙләштерә. Был саҡта инде уғыш дошман ерендә барған була. 3-сө Минск-Гданьск бригада ы составында өлкән сержант Ғәбитов Көнсығыш Пруссияға ебәрелә әм 1945 йылдың 5 майында инглиз ғәскәрҙәре менән осрашҡанға тиклем хәрби операцияларҙа ҡатнаша. Тәүҙә Польшала, унан Белоруссияла хеҙмәт итеп, Миҙхәт ағай 1950 йылдың апрелендә генә Сибайға ҡайтып төшә әм ун көндән уң баҡыр-көкөрт комбинатында экскаваторсы булып эш башлай. уғыштан ҡайтҡандар байтаҡ була унда: Петр Сорокин, Егор Павлов, Анатолий Акилов, Александр Долгинцев, Александр Лазарев... Тиҙҙән элекке фронтовик артта ҡалған бригадаға етәксе итеп тәғәйенләнә әм уны алдынғылар рәтенә сығара. 1961 йылдың июнендә Миҙхәт Исмәғилевичка Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелә. Таусылар мәҙәниәт арайында КПСС-тың ҡала комитеты секретары Ғөзәйер Йәнтилин үҙе тапшыра юғары наградаңы. Артабан ошондай юғары бүләк флотатор Нурия Муллаҡаева менән быраулаусы Әшрәф Фәтҡуллинға ла бирелә.

М. Ғәбитов комбинатта 1989 йылға тиклем эшләй, хаҡлы ялға сыҡҡас комбинаттың музейын ойоштора әм уның директоры булып китә. Артабан ул милицияның комбинатҡа беркетелгән терәк пунктын етәкләй. Ветеран бөгөн 60-сы йылдарҙа уҡ алынған бәләкәй йортта ҡарсығы менән йәшәп ята, баҡса ында матур сәскәләр үҫтерә.

Евгений Зазулин – комбинатҡа 30 йыл ғүмерен бағышлаған ветеран. БелАЗ машина ында эшләгән комсомол-йәштәр бригада ының иң популяр бригадиры була ул. Тәжрибә уртаҡлашыу буйынса элекке ГДР-ҙың Галле округындағы Мансфельд комбинатына барған делегация составына инә, СССР Халыҡ ҡаҙаныштары күргәҙмә ендә ҡатнаша. Йәштәр кәңәшсе е булараҡ Евгений Васильевич СССР Төҫлө металлургия министры П. Ломако ҡулынан персональ “Волга” автомобиле алыуға өлгәшә. Газ үткәреү өлкә ендә уңышлы эшләгәне өсөн Зазулин Австрияға сәйәхәт итеү бәхетенә ирешә.

Башҡортостан матбуғаты БР Премьер-министры Раил Сарбаевтың вазифа ында 100 көн эшләүенә арнап интервью сығарҙы. Тағы ла бер яҡшы яңылыҡ – яҡташыбыҙ Ринат Нагаев Ҡыуатов исемендәге республика клиник дауахана ының баш табибы итеп тәғәйенләнде. Ошо дауаханала сирек быуат сама ы баш табип урынбаҫары булып БР-ҙың атҡаҙанған табибы Фәриҙә Залкаева эшләй. Ә ул хеҙмәт биография ын таусылар ҡала ында эндокринолог булып башлаған.

– Мине әле лә сибайҙар табып, ярҙам итеүемде орай, – ти Фәриҙә Әхмәтовна. Тимәк, уны хөрмәт итәләр.

Ә бына Лысенколарҙың ҡалала яҡшы билдәле табиптар ғаилә е дауалаусылар династия ы конкурсында еңеп сыҡты.

Беҙ, Сибайҙа тыуып үҫкәндәр, уға тартылабыҙ, шатлыҡтарыбыҙ менән уртаҡлашырға, дуҫтарҙы күрергә ошонда ҡайтабыҙ. Тыуған ҡаланан ситтә лә йәшәргә мөмкин, әммә уны онотоу мөмкин түгел, сөнки ул берәү бит.

**Мәүлиҙә ЯҠУПОВА,**
**Рәсәй әм Башҡортостан Журналистар берлеге ағза ы.**

## “БӘЛКИ, ТАНЫУСЫЛАР БАРҘЫР?”

*(“Ағиҙел”, 10-сы ан)*

Сәғит Үтәев — минең ағайым.

Журналдың 10-сы анында баҫылған фото үрәттәге кешеләрҙең бере е — атайымдың ҡусты ының улы Әсхәт Бәхтийәр улы Үтәев. Ә мин, Сәлимә Әғзәм ҡыҙы Үтәева, Әсхәт ағайымдан туғыҙ йәшкә кесемен. Шуға мин уны ап-арыу иҫләйем. Йырға, бейеүгә, ҡурай, скрипка, мандолина, ҡумыҙҙа уйнауға ма ир ине ул. Тауышы шундай моңло, көслө була торғайны. Ҡурайҙы, ҡумыҙҙы үҙе я ап уйнаны. Ауыҙында әр саҡ моң, йыр, көй булды. Матрай ауылында бер генә тамаша ла унан башҡа үтмәй торғайны.

Матрай, Юлдыбай ауылдарында Әсхәт ағайҙың уғышҡа китеүен иҫләүселәр бар әле. уғышҡа китер алдынан ул ҡайҙалыр ситтә йөрөгән еренән ҡайтып, ата-әсә е (берҙән-бер улдары булды), туғандары, ауылдаштары менән хушлашып китте. Ҡурай уйнап, йырлап, моңлашып хушлаштылар. Беҙ, үҫеп килгән балалар, был күңел еҙ тамашаға бик әрнеп ҡарап ҡалдыҡ.

Ул 1939 йылда Өфөлә ойошторолған Башҡорт дәүләт филармония ында эшләп йөрөгән еренән ҡайтҡандыр, тип уйлайым. Фоторәсем дә ошо фекергә ишара я ай: Байғужа, Матрай, Иҫке Яҡуп (Матрай районы), Баймаҡ районы ҡурайсылары бергә йыйылып фотоға төшкән. Кейемдәре лә ул ваҡыттағы ауыл егеттәренеке кеүек түгел. Яҡшы итеп сәс алдырғандар, аҡ күлдәк, галстук, ярай ы ғына костюм кейгәндәр. Концерт менән сығыш я ар алдынан йәки унан уң төшөрөлгәнгә оҡшай. Бының Өфөлә филармонияла булыуы бик мөмкин.

Тағы ла: Х. Собханғоловаға был фото ҡайҙан килеп эләкте икән? Был тарихи фото үрәт — Башҡорт дәүләт филармония ының бер бителер. Минеңсә, был фотоны күп яҡлап асыҡлау кәрәк.

Х.Собханғолова менән бәйләнеш урынлаштырып бул а, мин уның менән хатлашыр инем. Үҙем хәҙерге көндә пенсияла, Сибай ҡала ында йәшәйем. Беҙҙең Үтәевтар бик талантлы булды. Йәш сағымда мин дә йырларға әм бейергә ярата инем.

**Сәләм менән:**
**Сәлимә ҮТӘЕВА.**
*(Адресы редакцияла.)*

# «АҒИҘЕЛ» ЖУРНАЛЫНЫҢ 2008 ЙЫЛҒЫ ЙӨКМӘТКЕ Е


## • СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Ғатауллин Ғәли.** Ете ят йәр. Хикәйә. ..........10
**Ғафуров Марсель.** Унда, Ядран диңгеҙе буйында... Сәйәхәтнамәләр. ..........5
**Ғиләжев Мансаф.** ырт өҫтөндәге уба. Хикәйәт. ..........6
**Ғиниәтуллин Талха.** Хоҙайбирҙиндың ҡайтыуы. Хикәйә. ..........5

**Ҡара Кәрим**. Матильда. Повесть. ..........6
**Ринат Камал**. Талаҡ! Роман. ..........9-10
**Солтанов Йы ат**. Коммунист. Роман-хроника. ..........11-12
**Тапаҡов Хәйҙәр**. Төштәремә кермә. Хикәйә. ..........10
**Ураҙғолов Рәлис**. Аслыҡ. Роман ..........7-8
**Хажиәхмәтов Шамил**. Йәнтөйәккә юл. Хикәйә. ..........3
**Хөсәйенов Ғайса**. Минең фәлсәфәләрем. Философик парсалар. ..........9
**Шәрипов Сабир**. Зәңгәр катер. Роман. ..........3–7
**Әхмәтшин Марс**. Дүртенсе өҫтәл. Повесть. ..........2

## • ШИҒРИӘТ

**Абдуллина Лариса**. “Ташҡын менән таша тойғолар...” Шиғырҙар. ..........4
**Бикбаев Рауил.** “Боҙҙарҙа туң да утта беш, имеш...” ..........11
**Бәхтейәр. Тулҡын.** Шиғырҙар. ..........3
**Ғәлимова Римма**. Аманат. Шиғырҙар ..........5
**Ғәниева Тамара**. Йондоҙом. Шиғырҙар. ..........11
**Гөлгизәр Фәйзи.** “Ҡыҙыҡ өсөн кәрәк минең кеүек берәү”. Шиғырҙар. ..........12
**Дәүләтбирҙина Тәнзилә**. Башҡортостан. Шиғырҙар. ..........4
**Йосопов Тимер**. “Тик изгелек ҡылғандарым”. Шиғырҙар. ..........5
**Күзбәков Фәнил**. “Хушлашыуҙар ҡыйырсыҡ ай икән...” Шиғырҙар. ..........10
**Кәшфуллин Әскәр**. Ҡыҫҡа шиғырҙар. ..........7
**Ҡарамыш Таң ылыу**. “Килде тауҙар ораны...” Шиғырҙар. ..........3
**Ҡотоева Гөлназ**. “Был ваҡыттар беҙҙең аша үтә...” ..........1
**Мифтахов Риф**. “ ин баҙлатып киткән ҡуҙҙар аман, үнде тигәс, ҡабат яналар...” Шиғырҙар. ..........1
**Мөхәмәтйәнов Файыҡ**. Йәшәрҙәр, тим... Шиғырҙар. ..........7
**Мөҙәрисова Хәлисә**. Алтын балдаҡ. Шиғырҙар ..........5
**Нәзиров Марис**. “Мин йәшәйем ерҙә...” Шиғырҙар. ..........9
**Радик Хәкимйән**. Нурҙар сәсер... Шиғырҙар. ..........7
**Рауил Шаммас**. Аҡ толпарым, елдер, арыма! Шиғырҙар. ..........7
**Риф Дауыт**. Уйлай ыңмы, башҡортом? Ҡобайырҙар. ..........6
**Рәмил Йәнбәк**. Хыялдар. Шиғырҙар. ..........8
**Салауат Рәхмәтулла**. Ҡыҫҡа шиғырҙар. ..........10
**Санъяров Фәнзил**. Тимерлек. Шиғырҙар. ..........8
**Сәғитов Харис**. Тормош үрҙәре. Шиғырҙар. ..........2
**Сәсәниә**. Торатау. Шиғырҙар. ..........2
**Тамара Искәндәриә**. Ҡурай. Шиғырҙар. ..........6
**Рәдиф Тимершин**. Фәемнамәләр. Шиғырҙар. ..........12
**Фәтҡуллина Рита**. Тынлыҡ мәле. Шиғырҙар. ..........8
**Хисамова Миңлегөл**. “Мөлдөрәгән өмөттәрем йәнәш...” Шиғырҙар. ..........10
**Әминева Нәжибә**. “Бәхет — ҡанатланыуҙа...” Шиғырҙар. ..........3
**Әсхәл Әхмәт-Хужа**. Ҡарағай. Шиғырҙар. ..........2
**Әсхәл Әхмәт-Хужа**. Ҡырҡтытау йәшмәләре. Шиғырҙар. ..........9
**Әхмәҙиев Риф**. “Йондоҙ ғүмере ерҙән башлана...” Шиғырҙар. ..........2
**Әхмәҙин Әфтәх**. “Күҙҙәреңә ҡарап алдашмам...”Шиғырҙар. ..........9
**Юлдашбаев Азамат**. Үҙхөкөм: ғәйепле, үтә бер ҡатлы... Шиғырҙар. ..........1
**Юлдашев Хисмәтулла**. “Ҡарағай еҫе килә ҡәләмдән...” Шиғырҙар. ..........4
**Юнысова Гөлфиә**. Бәхеттәр үкенесле. Шиғырҙар. ..........8
**Яҡупова Гөлнур**. Әҙәм вә ауа. Поэма. ..........6

## ● СӘХНӘ ӘҪӘРҘӘРЕ

**Бүләков Флорид**. Изге ғәмәл. Трагикомедия. ................................................2
**Наил Ғәйетбай**. Енеү. Драма. .............6

## ● ӘҘӘБИӘТ ҒИЛЕМЕ

**Нурғәлин Зиннур**. Әҙәби мираҫ  әм әҙәбиәт тарихы. .......................................10
**Хажиев Ризван**. Аҡҡа төшкән юйылмай. ...............................................................6
**Шәрипова Зәйтүнә**. Художестволы әҫәрҙәрҙә әҙәби алынмаларҙың функция ы. ...............................................................6

## ● ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Абдуллина Әминә**. Бөгөнгө прозала эҙләнеүҙәр  әм табыштар. .....................7
**Аҡбулатова Фәрзәнә**. Тормоштағы тыныш билдәләре. ......................................5
**Гәрәева Гөлфирә**. Ҡәләм осонда – кеше  әм уның йәшәйеше *(2007 йылда “Ағиҙел”дә баҫылған сәсмә әҫәрҙәргә күҙәтеү)* ...............................................................1
**Күзбәков Фәнил**. Ҡылдарҙа заман заңымы? (*2007 йылда “Ағиҙел”дә баҫылған шиғри шәлкемдәргә күҙәтеү)* ...................1
**Күзбәков Фәнил**. Шағирәнең рухи ҡәлғә-е. ..........................................................5
**Ҡунафин Ғиниәт**. Еребеҙ, халҡыбыҙ, рухиәтебеҙ йылъяҙмасы ы. .......................7
**Ҡунафин Ғиниәт**. Йондоҙ ҡабыҙған ижад. *(Т.Йосопов ижадына бер ҡараш)* .............3
**Нурғәлин Зиннур**. 1812 йыл ҡа армандары. ............................................................3
**Салауат Әбүзәр**. Утлы шағир. ...............11
**Сәғәҙиев Вадим**. Хәҙерге башҡорт поэзия ында гражданлыҡ лирика ы. ........9
**Та ирова Земфира**. Башҡорт мемуаристика ында шәжәрәләр. .............................9
**Хөсәйенов Ғайса**. Рәшит Назаров шиғриәте. ..................................................1-2
**Хәбиров Әнғәм**. “Ебәктән дә нескә күңелем ҡылы...” ..........................................8

## ● ШИШМӘЛӘР

**Гөл Мир ази**. Күңелемдең иңә тартылыуы. **Бүләков Фәнил**. Ҡарсыға. **Сөләймәнов Ринат**. Торна. **Иҡсанов Мөнир**. Салауаттың еттек йәштәренә! Шиғырҙар. ...............................................................7

## ● ТЕЛ ХИКМӘТТӘРЕ

**Бәҙретдинов Вәлиәхмәт, Бәҙретдинов Сәғит**. Тыуған илем – арҙар иле. .......1-2
**Нурғәлиев Ишғәле**. Кәрәсин бөткәс. ......8

## ● ПУБЛИЦИСТИКА

**Аҡбашева Дилара**. Исламдың әхлаҡи-хоҡуҡи нормалары  әм ҡатын-ҡыҙ .......8
**Аллаяров Зиннәт**. Республикала башҡорт телен туған  әм дәүләт теле булараҡ уҡытыу. ........................................................3
**Байымов Роберт**. Тарихи рухиәт форумы. ...............................................................11
**Бикбаев Рауил**. Рухиәтебеҙҙе уғарыу. ...............................................................9
**Вахитов Радик**. Өфөгә нигеҙ алыныу: мифтар  әм ысынбарлыҡ. ....................10
**Ғафаров Марат**. Кем ин, Тажетдин Ялсығол әл-Башҡорди? ...........................11
**Ғәниева Тамара.** Интеллигенция  әм интеллигентлылыҡ: *өйләшеүҙе дауам итәбеҙ.* Уйсандарҙың дүрт юлы. ................12
**Гәрәев Мәғсүм**. Өс йөҙ йыллыҡ тарихы бар. .........................................................8
**Дәүләтшин Рафаэль**. Тыуған ауылым Түбәнге Үтәш. ...........................................3
**Еникеев Зөфәр**. Дәүләт телдәренең конституцион-хоҡуҡи статусы. ...................1
**Зөфәр Вәлит**. Баҙарлы заман ҡушҡанса. ...............................................................5
Интеллигенция  әм интеллигентлылыҡ *(Вадим Сафин менән әңгәмә)* ...................7
**Йы аншин Сабир**. Алтын йондоҙ бирелмәгән ҡа арман. ...............................5
**Йы аншин Сабир**. Мансур Ибра имов – Екатерина II комиссия ы депутаты. .....3
**Күскилдин Дамир**. “Буранбайҙың яҙған хатын уҡып...” .......................................6
**Ҡолшәрипов Марат**. Башҡорттарҙың Рәсәйгә ҡушылыуы  әм ергә аҫабалыҡ хоҡуғы. ...................................................3
**Насибуллин Рауил**. Демографик хәл: ҡатмарлы, ләкин өмөт өҙ түгел. .................6
**Насиров Рәүеф**. Дошманды өңөндә дөмөктөрҙөләр. ......................................9
**Рәмил Йәнбәк**. Ил азаматы. **Әҙ әм Искужин**. Яҙмышнамә. ..........................10
**Рәшит Шәкүр.** Ғилем теүәллекте ярата йәки Төҙәтергә ваҡыт түгелме? ............12
**Сәйетғәлиев Иҙрис**. Иртәгәне бөгөндән хәстәрлә. .................................................4

**Сөләймәнов Фуат**. Лев Толстой Кәрәлек башҡорттары тура ында. ....................11
**Сөләймәнов Әхмәт, Ибра имов Ғәйнислам.** Хужа Насретдин тыуған ерҙә *("Ер урта-ы"нан репортаж)* ..........................7
**Хажипов Рафиҡ.** Хоҡуҡи әм социаль дәүләт: үҙ-ара бәйләнеш диалектика ы ..............................................................6
**Хисаметдинова Фирҙәүес**. Башҡортостан халыҡтары телдәренең норматив-хоҡуҡи хәле. .....................................................2
**Хөсәйенов Ғайса**. Интеллигенция әм интеллигентлылыҡ: *өйләшеүҙе дауам итәбеҙ.* Милләт йөҙөн шәхестәр билдәләй. ..............................................................8
**Хужин Мәхмүт**. Ауырғазы: ауырлыҡтар артта ҡала. ..........................................7
**Хужин Мәхмүт**. Выждан ғазабы. ............4
**Хужин Мәхмүт**. Интеллигенция әм интеллигентлылыҡ: *өйләшеүҙе дауам итәбеҙ.* Үгәй ителгән ҡатлам. ....................10
**Шәрипов Хәмит**. "Яҡты йондоҙ кеүек..." ..............................................................5
**Әхмәр Үтәбай**. Интеллигенция әм интеллигентлылыҡ: *өйләшеүҙе дауам итәбеҙ.* "Бел әң ине: көтөү боролғанда алға сыға малдың аҡ ағы..." .........................9
**Әхмәтйәнов Динир**. Башҡортостанда ер мөнәсәбәттәрен көйләү. ........................2
**Әхтәмов Йәүҙәт**. Алпауыттар ҡалдырған мираҫ. ..................................................12

## • БЕҘҘЕҢ ЮБИЛЯРҘАР

### Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевҡа 70 йәш

**Мостай Кәрим.** Үҙе – баҫыу, үҙе – абансы. **Ғайса Хөсәйенов.** Рауил Бикбаевтың тормош юлы. **Земфира Та ирова.** Шағир ижадында эпистоляр форма; Әҙип хаҡында ҡәләмдәштәре: **Виталий Смирнов, Венера Вәлиева, Рәми Ғарипов, Мостай Кәрим, Тимер Йосопов**, **Ирек Кинйәбулатов**. ........................................................12

### Академик Ғайса Хөсәйеновҡа 80 йәш

**Хәсән Назар.** Ғайса Хөсәйеновҡа. Шиғыр. **Рауил Бикбаев**. Остазым хаҡында үҙ. **Ғиниәт Ҡунафин**. Заманыбыҙ энциклопедисы. **Әхмәт Сөләймәнов**. Өстөң хикмәтле яҡтары. **Миңлеғәли Нәҙерғолов**. Фекер офоҡтары киң. **Рафаэль Аҙнағолов.** Оло Етегән балҡышы. **Нияз Мәжитов, Тимерғәле Килмөхәмәтов, Рәшит Аҡкөбәков.** Юбилярға тәбрикләү кәлимә е. ......4
**Гәрәев Әмир.** Тиңдәшем, ҡәләмдәшем, дуҫым *(Фәрит Иҫәнғоловтың тыуыуына 80 йыл).* .................................................2
**Игебаев Абдулхаҡ**. Кавалерист Яҡуп, йырсы Яҡуп *(Яҡуп Ҡолмойҙоң тыуыуына 90 йыл).* .................................................9
**Йәғәфәрова Ай ылыу**. Талпыныу. Хикәйә. Кәкүк. Әкиәт. ..............................8
**Сәлимов Нияз**. Вәлиди васыяты. Шиғырҙар. ..............................................9
**Сөләймәнов Әхмәт**. Өстөң хикмәтле яҡтары. ..................................................4-5
**Хәсән Назар**. Ишетәбеҙ – иш итәбеҙ. ....9
**Шәрипов Сабир**. Тельняшкалы әҙип. *(Әмир Гәрәевҡа 80 йәш).* .........................2
**Шәрәфетдинов Дамир.** Тәбиғәт йырсы ы. *(Рим Ахмедовҡа 75 йәш).* .......................10
**Әминов Марат.** "Тарих битарафлыҡты ғәфү итмәй". *(Нияз Мәжитовҡа 75 йәш)* ..............................................................8

## • БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

### Башҡорт халыҡ яҙыусы ы З. Биишеваның тыуыуына 100 йыл

**Зәйнәб Биишева**. Туған тел. Шиғырҙар. **Рәмил Мәжитов**. Ил инә е. **Октябрь Вәлитов**. Башҡортостандың бөйөк ҡыҙы. **Ләлә Биишева**. Халыҡ әҙибә енең шәжәрә е. **Әнисә Та ирова**. Сал бөркөт саңҡыуы. **Сәрүәр Сурина**. Ила и ихласлыҡ. Яҙыусы хаҡында ҡәләмдәштәре. ............1
**Байымов Роберт**. Оло ба аға лайыҡ ижад. *(Әсғәт Мирза итовтың тыуыуына 80 йыл).* .................................................10
Аҫыл ғына заты башҡорттоң... *(Мөхәмәтша Буранғоловтың тыуыуына 120 йыл).* ..............................................................12
**Ғиззәтуллин Дим.** Рух көсө *(Ибра им Ғиззәтуллиндың тыуыуына 90 йыл).* .......9
**Ҡунафин Ғиниәт.** Уйсан да, моңсан да, даусан да ижад *(Ғиззетдин Иҫәнбирҙиндың тыуыуына 120 йыл).* ..............................12
**Низаметдинов Замир**. Олпат әм яҡты шәхес ине. ..........................................10
**Сафиуллин Азат**. Башҡорт сатира ы оҫта-ы *(Агиш Ғирфановтың тыуыуына 80 йыл).* ......................................................4
**Сәғитов Мөхтәр**. Батырша әм Юлай

менән Салауат атлы ҡа армандарға ҡоба йыры бағышланғаны. ............................8
**Сөләймәнов Әхмәт, Байымов Берйән.** Ул юлдарға тоғро юламан ине *(Мәш үр фольклорсы Мөхтәр Сәғитовтың тыуыуына 75 йыл).* .......................................................8
**Сөләймәнов Әхмәт**. Фольклорҙы фәненә юлдаш иткән... *(Мәш үр төркиәтсе Н.К. Дмитриевтың тыуыуына 110 йыл).* ........9
**Хәбиров Әнғәм**. Назар Нәжми ижадын өйрәнеү мәсьәлә енә ҡарата *(тыуыуына 90 йыл тулыу айҡанлы).* .........................2
**Әхмәр Үтәбай**. "Офоҡтарға китеп юғалам..." *(Рәмил Ҡол-Дәүләттең тыуыуына 50 йыл).* ..................................................5
**Әхмәр Үтәбай**. Зәйнулла ишан – башҡорт халҡының рухи батша ы *(Зәйнулла Рәсүлевтың тыуыуына 175 йыл).* ....................6
Яңы тормош йырсы ы *(Әкрәм Вәлиҙең тыуыуына 100 йыл.)* ...............................7

**"Ағиҙел" ҡунағы**

**Ҡотоева Гөлназ**. "Ҡанымда – тыуған ер тойғо о". .............................................11

*Сибай яҙыусылар ойошма ына – 15 йыл*

**Хәйҙәр Тапаҡов.** Ҡотло әм яҡты йортобоҙ. **Ай ылыу Ғарифуллина, Сәрүәр Ғәләүетдинов, Инсур Артур, Рәмилә Ибра имова, Фирүзә Алсынбаева, Рәшиҙә Мансурова, Фәрүәз Әбдрафиҡ, Зө рә Фәйзуллина.** Шиғырҙар. .......................................12
**Фәрит Әбүбәкеров.** Васыят. Парсалар; **Әминә Яхина.** Ҡала кейәүе. Уймаҡ хикәйә; **Таң ылыу Ғәйнуллина.** "Ете ырыу" беҙҙе көтә; **Әлим Зарипов.** Демократик Башҡортостан ҡороу юлында союздаштар мәсьәлә е. .......................................12

**Силәбе өлкә енең әҙәби түңәрәге – "Ағиҙел"дә ҡунаҡта**

**Ҡамса Мортазин, Лилиә Әхмәҙиева, Зилә Ғәлләмова, Земфира Шируанова, Урал Сафиуллин, Алевтина Вәлиева, Булат Батталов.** Шиғырҙар. .........................3

**"Ағиҙел"дә – "Казан утлары"**

**Рауил Фәйзуллин.** Рухи йылъяҙма. **Гәрәй Рәхим.** Илкәйем. Шиғырҙар. **Рәзил Вәлиев**. "Илай-илай, уғыша- уғыша ерҙә..." Шиғырҙар. **Ғазинур Морат**. Ғаләм өнө. Шиғырҙар. **Фәйрүзә Мөслимова**. Яҙ. Шиғырҙар. **Луиза Янсуар.** "Устарыма яуа август йондоҙҙары..." Шиғырҙар. **Камил Кәримов.** Ҡом сәғәте. Роман. **Зәки Зәйнуллин.** Шахматтағы ике ат әм әйкәл-Салауат. Хикәйә-хәтирә. **Рифә Рахман**. Сөннәтсе әбей. Хикәйә. **Рәмзиә Ғәбделхаҡова**. Китмә! Новелла. ..................11

**● ӘҘӘБИ МИРАҪ**

**Ғәлимов Зиннәт**. Болоттар ара ында уғыш. Ҡыҫҡа хикәйәләр. ...............11
**Ураҡсин Зиннур**. Каруан арай. Роман-хроника. ...........................................1

**● САТИРА ӘМ ЮМОР**

**Вафин Мөнир**. Пародиялар. .............4
**Ғәйфуллина Миләүшә**. Бөкө. Юмористик хикәйә. ......................................7
**Дәминов Риф**. Бер троллейбус кешеләре; Зайдим. .................................................9
**Исхаҡов Венер**. Юморескалар. ........4
**Садиҡов Ғәбит**. Беҙҙең ауыл мәҙәктәре: Бәйге; Саҡырылмаған ҡунаҡ. ................9
**Әминов Марат**. Юмористик хикәйәләр. .....................................................4
**Әхмәтов Радик**. алам балы. Юмористик хикәйә. .....................................9
**Яруллин Ғималетдин.** Ата унарсы. Юмореска. ......................................9

**● СӘНҒӘТ**

**Ғәниева Тамара**. Күңел палитра ы. ........9
Театр сәнғәтенең арыҫланы *(Арыҫлан Мөбәрәковтың тыуыуына 100 йыл).* ......12
**Нәғимов Шәрип**. Абушахмановтың алтмышынсы яҙы. .....................................4

**● ҠӘЛӘМДӘШТӘР ТӨҪӨ**

**Вәлиев Ильяс**. Мостай Кәрим ижадының халыҡсанлығы. .....................................9
**Ғәлиева Гүзәл**. ыҙланыуҙар ыҡҡан ынйылар. ...............................................9
**Мостай Кәрим**. Көндәлектәр. .........10
**Солтанов Йыл ат**. үрелмәҫ моң. ...........3

**● ӨМӨТЛӨ ҠӘЛӘМ**

**Хәйретдинова Аида**. Яҙмыш абағы. Хикәйә. .............................................8

**Сәлимова Ләйсән**. Шәйҙүк. Фәнтәзи. ................................................................8

## ● ЗАМАН ӘМ ЗАМАНДАШТАР

**Ғаянов Әлфис**. Гражданин. Шәхес. Психолог *(Вадим Сафинға 75 йәш)*. ..............5
**Ғәйнуллина Таң ылыу**. Етәксе. Фән эшмәкәре. Уҙаман. .....................................2
**Кинйәбулатов Ирек**. Унын дүрт тарафы. Очерк. .................................................2
**Ноғман Мусин**. Кем ин, Риф Ицәнов? Очерк. .................................................2
**Әхмәҙин Әфтәх**. Васыятҡа тоғролоҡ. .....5

## ● ДУҪЛЫҠ КҮПЕРҘӘРЕ

**Миңнуллин Роберт**. "Ул ҡурай мин булырмын..." Шиғырҙар. ......................8
**Хәсән Назар**. Шиғриәт бейеклегендә. ........................................................8

## ● "АҒИҘЕЛ"ГӘ –85

**Ғиләжев Хәким.** Күркәм йылдарым ин, "Ағиҙел"*(Иҫтәлектәр)*; **Әминев Әмир.** Милләтебеҙҙең төп журналы; Журнал хаҡында уны сығарыусылар. ......................3

### Башҡортостан яҙыусылары йыйылышы материалдары

**Юдашбаев Азамат.** Киләсәккә ҡарап. **Күзбәков Фәнил**. Милли булмышыбыҙ хаҡына. **Хәсән Назар.** Яңы быуаттың етенсе артылышында. **Шәрипов Сабир**. Алғы ишкәккә баҫайыҡ! **Наил Ғәйетбай**. Драматургияның бөгөнгө проблемалары. **Нәҙерғолов Миңлеғәли**. Әҙәби тәнҡит... тәнҡитлеме? **Тимершин Рәдиф**. Рухи сафлыҡ өсөн. **Әсәҙуллина Әлфиә**. Балаларыбыҙ китаптан айырылма ын! **Рәшит Сабит**. Ижади активлыҡ кәмемәй. **Керчина Лариса.** Әҙәбиәт – тормош көҙгө ө. ................................................................4

## ● БЕҘ ЙӘШӘГӘН ҠАЛА

**Гәрәев Рим**. Нефть унын данын бар донъяға яңғыратты *(Туймазы)*. .......................4
**Әхмәтйәнов Хажи**. Ижти атлы, ғәҙел Бәләбәй. ................................................6
**Ҡотлоғәлләмова Рима.** Батыр рухы әр бер ташында *(Салауат)*. .......................10
**Моратов Марат.** Яңауылдарҙың йөҙө яҡты. ......................................................3
**Нурғәлиев Ишғәле.** Йыл үҫә ен ай үҫеп... *(Стәрлетамаҡ)*. ...................................2
**Яҡупова Мәүлиҙә.** Уны шундай итеп хәтерендә ҡалдыр *(Сибай)*. ......................12

## ● АУЫЛДАРЫБЫҘ ТАРИХЫ

**Мостафин Әнғәм**. Иҫке ауыл – Илекәй.
**Хажиев Наил.** Беҙ кемдәр? ..................12

### Мәхмүт Ҡашғари йылына арналған конкурс йомғаҡтары

10

### 2008 – Ғаиләгә социаль ярҙам йылы

**Кәлимуллин Рәшит.** Бала таптырырғамы, әллә байлыҡ арттырырғамы? ...............10
**Хужин Мәхмүт**. Өфө: бер ғаилә – бер бала. ......................................................9
**Ямалетдинов Фидус.** Ныҡлы ғаилә – йәмғиәттең тотороҡло үҫеше нигеҙе. ...12

## ● МУЗЕЙҘАР – МӘҘӘНИӘТЕБЕҘ КӨҘГӨ Ө

**Янышев Фәнис**. Нур сәсеп тора. .............1
**Янышев Фәнис**. Күрҙем музейын күрҙем. ................................................................2
**Янышев Фәнис.** Беҙгә әйкәл ҡалдырҙы. ................................................................4
**Янышев Фәнис.** Рухи бүләк. .................10
**Янышев Фәнис**. Белем нуры сәскән йорт. ................................................................11

### Яңы китап сыҡты

**Нәҙерғолов Миңлеғәли**. Зат-арала ғәм тарала. ......................................................11
**Хужин Мәхмүт**. Милли азатлыҡ – мәңгелек хыял. ..............................................11

## ● "АҒИҘЕЛ"ГӘ ХАТТАР КИЛӘ

4, 10, 12

## ● ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

1, 2, 3, 4, 5,6, 7,8, 9, 10, 11, 12

## ● "АҒИҘЕЛ" ЖУРНАЛЫНЫҢ 2008 ЙЫЛҒЫ ЙӨКМӘТКЕ Е

12

***

Башҡорт дәүләт филармония ында танылған шағирә, журналист, йәмәғәт эшмәкәре, әҙиә Дәүләтшина, Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге премиялар лауреаты Гөлфиә Юнысованың юбилей кисә е гөрләп уҙҙы. Гөлфиә Аҙнағол ҡыҙы 24 йыл "Башҡортостан ҡыҙы" журналының баш мөхәррире вазифа ын башҡарҙы, уның үҙҙәренә 300-ҙән ашыу йыр яҙылған, шиғырҙары Рәсәй халыҡтарының егерменән ашыу теленә тәржемә ителгән.

Йыйында Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай Рәйесе К. Толкачевтың ҡотлау хатын уҡып ишеттерҙе әм бөтә республика яҙыусылары исеменән ихлас ҡотлау үҙҙәрен еткерҙе.

БР Хөкүмәте ҡарамағындағы Матбуғат, нәшриәт әм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ начальнигы вазифа ын башҡарыусы Фәнил Ҡоҙаҡаев, Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов та әҙибәне йылы ҡотланы.

Йырсылар Флүрә Килдейәрова, Тәнзилә Үҙәнбаева, Фәрит Бикбулатов, Йәмил Әбделмәнов, Светлана Хәкимова, Нурия Абдуллина, Альбина Имаева, Айгөл менән Урал Рәшитовтар әм "Лейди" төркөмө ил амлы сығыш я аны.

***

Бөйөк башҡорт йырсы ы – Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия ы лауреаты, Салауат Юлаев ордены кавалеры Абдулла Солтановтың 80 йәше киң билдәләнде. Юбилярҙы фольклорсы Әхмәт Сөләймәнов, З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академия ы ректоры Ишмөхәмәт Ғәләүетдинов, БР Әҙәбиәт музейы директоры Гөлдәр Моратова, РФ Дәүләт Дума ы депутаты Сәлиә Мырҙабаева, БР Халыҡ ижады үҙәге директоры Байрас Ишбирҙин, "Китап" нәшриәте директоры Зөфәр Тимербулатов, "Башинформсвязь" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең генераль директоры Салауат Ғайсин .б. ҡотлап, бүләген тапшырҙы.

Абдулла йырау Рәсәйҙең әм Башҡортостандың халыҡ артистка ы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия ы лауреаты Флүрә Килдейәрова менән дуэт башҡарҙы. Абдулла Солтановты олуғ байрамы менән Азамат Тимеров, Әлим Ҡәйүмов, Иҙел Аралбаев йыр-моң аша тәбрикләне.

***

Сыуаш халҡының милли ҡаҙанышы булған "Нарспи" поэма ы яҙылыуына 100 йыл тулыу айҡанлы Башҡортостанда Сыуаш әҙәбиәте көндәре уҙғарылды. Поэма авторы – күренекле шағир, мәғрифәтсе, сыуаш әлифба ын төҙөүсе Константин Иванов Бәләбәй районы Ыҫлаҡбаш ауылында тыуып үҫкән. Әйткәндәй, атаҡлы әҙип Яков Ухсай ҙа сығышы менән ошо тупраҡтан.

Дөйөм кешелек әм гуманизм идеяларын күтәргән "Нарспи" поэма ының ә әмиәте хәҙерге көндә лә ба алап бөткө өҙ. Әҫәр донъя әҙәбиәтендә киң танылыу яулаған әм уның алтын фондына ингән.

Әҙәбиәт көндәре сиктәрендә республикала "Шапчак сасси" сыуаш йырын башҡарыусылар, "Тевет" фольклор ансамбле концерты, "Сыуаш халҡының сағыу йондоҙо" әҙәби-музыкаль композиция ы, "Нарспи" поэма ына 100 йыл тулыу айҡанлы уҙғарылған ғилми-ғәмәли конференция, БР Яҙыусылар союзында осрашыу булып үтте. Унда Башҡортостандың халыҡ шағиры, Яҙыусылар союзы идара ы рәйесе, БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты Рауил Бикбаев ике ҡәрҙәш халыҡтың берҙәмлеге, милли әҙәбиәттәр бәйләнеше тура ында өйләне.

Шулай уҡ байрамда ҡатнашыусылар, ҡунаҡтар Башҡортостан Яҙыусылар со-

юзының "Шуратал" әҙәби берекмә е ағзалары менән осрашты, Өфө ҡала ының сыуаш йәкшәмбе мәктәбе эшмәкәрлеге менән танышты. Сара авторҙың тыуған ауылында Сыуаш әҙәбиәте әм мәҙәниәте байрамы менән осланып ҡуйҙы.

***

Өфөлә РСФСР-ҙың атҡаҙанған, БАССР-ҙың халыҡ артисы, Башҡортостан Республика ының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия ы лауреаты, мәш үр ҡурайсы, йырсы, импровизатор, актер, драматург Ишмулла Дилмөхәмәтовтың тыуыуына 80 йыл тулыуға арналған ҡурайсылар бәйге енең гала-концерты әм юбилей кисә е үтте.

Башҡорт дәүләт филармония ында мәш үр ҡурайсы исемендәге ҡурайсылар бәйге е шулай уҡ күркәм булды. Бындай сара Йылайыр районының Иҫке Яҡуп ауылында күптән үткәрелә. Яҡташтары оло шәхес исемен мәңгеләштереү өсөн изге эштәр башҡара: урамдарға исеме бирелә, йорт-музей төҙөлә, район хакимиәтенең ҡурайсы исемендәге премия ы булдырылған.

Бәйгене жюри рәйесе – Башҡортостандың халыҡ, РФ-ның атҡаҙанған артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия ы лауреаты Азат Айытҡолов, жюри ағзалары – Башҡортостандың халыҡ артисы, РФ-ның атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия ы лауреаты Юлай Ғәйнетдинов, Башҡортостандың халыҡ артисы, Ш. Бабич исемендәге дәүләт йәшәр премия ы лауреаты Рәсүл Ҡарабулатов, Башҡортостандың халыҡ артисы, Өфө сәнғәт училище ы уҡытыусы ы Ришат Рәхимов, Башҡортостандың халыҡ, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Рәмил Ғәйзуллин, Башҡортостандың әм Рәсәйҙең Композиторҙар союзы ағза ы Айрат Ғайсин ба аланы.

өҙөмтәлә үҫмерҙәр ара ында – Өфөнән Ғаяз Ялмырҙин, 16 йәштән өлкәндәр ара ында – Сибайҙан Йәмил Үтәбаев, ҡурайсылар ансамбле ара ында Дүртөйлө балалар ансамблдәре, З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академия-ы ансамбле беренсе урынды яуланы.

" ирәк башҡарылған көй өсөн" призына Рәйес Низаметдинов (Учалы), "Иң йәш ҡурайсы" бүләгенә ете йәшлек Айҙар Рәхимғолов (Сибай) лайыҡ булды. Ә бәйгенең гран-прийын Өфө ҡурайсы ы Илшат Солтангәрәев яуланы.

***

Бишбүләк районында РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы, БАССР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, мәш үр педагог әм йәмәғәт эшмәкәре Булат (Тимербулат) Имашевтың тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған саралар уҙҙы. Байрамға БР мәҙәниәт әм милли сәйәсәт министры урынбаҫары И. Мәхмүтова, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры директоры Р. Исмәғилев, Башҡорт дәүләт опера әм балет театры директоры В. Рихтер, БР Театр эшмәкәрҙәре союзы рәйесе Ә. Әбушахманов, республиканың билдәле артистары әм Имашевтар нәҫеле вәкилдәре йыйылды. Аҙнай ауылында Булат Имашевтың музейын әм бюсын асыу тантана ы уҙҙы. Музей материалдары Булат Имашевтың Башҡорт драма театры, Опера әм балет театры барлыҡҡа килеүендә, милли сәнғәтебеҙҙе яңы үрҙәргә күтәреүҙә, унының мөмкинлектәрен асыуҙа ҙур роль уйнауын асыҡ өйләй.

***

Проза секция ының сираттағы ултырышында "Башҡортостан" радио ының "Юлдаш" каналы етәксе е Нияз Алсынбаевтың хикәйәләре әм повестары тикшерелде. Өлкән әм йәш яҙыусылар авторға ижади кәңәштәр бирҙе әм ҡулъяҙма ын "Китап"нәшриәтенә тәҡдим итте.

***

"Ағиҙел" журналы хеҙмәткәрҙәре – шағир Рәмил Йәнбәк менән яҙыусы Сабир Шәрипов Миәкә, Бишбүләк, Йәрмәкәй, Бәләбәй райондары үҙәктәрендә башҡорт теле әм әҙәбиәте уҡытыусылары, китапхана хеҙмәткәрҙәре менән йәнле әңгәмәләр уҙғарҙы. Ҡанаҡай мәктәбендәге (Бишбүләк) осрашыу и ә йәмле әҙәби сара төҫөн алды.